Ағиҙел

Өфө,
сентябрь
2013

9(1085)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

Баш мөхәррир

Әмир ӘМИНЕВ

Мөхәрририәт:,

Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

Редакция хеҙмәткәрҙәре:

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева,Тәнзилә Сәлихова (корректорҙар),
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 авгусында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.09. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 176 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0131.13.

Беҙҙең адрес: 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
Наш адрес: 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2013 (9,1085)

БЫЛ ҺАНДА:

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР ҺӘМ ШИҒРИӘТ

Талха Ғиниәтуллин. Колчак алтыны. П о в е с т ь. 5
Әлфис Ғаязов. Сәсрәтке хәсрәте. П о э м а. 24
Миңлегөл Хисамова. «Ҡайһылай ҙа баҙыҡ был күҙҙәрем...» Ш и ғ ы р ҙ а р. 38
Мөхәммәт Закиров. Балыҡ. Ш и ғ ы р ҙ а р. 45
Ғәлим Хисамов. Өн һәм һан. Р о м а н - ф а р а з. Аҙағы. 52

ЖУРНАЛ УҠЫУСЫЛАР ИЖАДЫ

Венер Фәттәх. Тәҙрә төбөндә ярангөл. Ш и ғ ы р ҙ а р. 112
Асия Чанышева. Именлектәр һиңә, Илем! Ш и ғ ы р ҙ а р. 114

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

Гөлфирә Гәрәева. Һөйгән йәр, Тыуған ер һәм Йыһан…
(Гөлнур Якупованың «Ҡатындар» трилогияһына ҡарата) 116
Миңлеғәле Нәҙерғолов. Тәуарихтарҙың стиль һыҙаттары. 127

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

Миләүшә Ҡолмөхәмәтова. Йылдарҙа ҡалған йырҙар
(Яҡуп Ҡолмөйҙоң тыуыуына – 95 йыл). 139

ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

Мукағәле Маҡатаев. Ай-һай, ғүмер! Ш и ғ ы р ҙ а р. 147

ПУБЛИЦИСТИКА

Дамир Шәрәфетдинов. Һаҡсыллыҡ тыйыуҙан башлана. 153

ИМАН НУРЫ

Рәмзиә Бикәнәсова. Иман иле – Мәккә бишегенә асып индем донъя ишеген… 158

РУХЫБЫҘ ТАМЫРҘАРЫ

Хөрмәтулла Абдрафиҡов. Ҡырмыҫҡалы районының ҡайһы бер ауылдары тарихынан. 170

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

Рәйлә Нәҙерғолова. Ю м о р е с к а л а р. 178

“АҒИҘЕЛ”ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА И ПОЭЗИЯ

А. Генатуллин. Золото Колчака. *Повесть.*
А. Гаязов. Поэма.
М. Хисамова, М. Закиров. *Стихи.*
Г. Хисамов. Звук и число. *Роман-гипотеза.*

ТВОРЧЕСТВО НАШИХ ЧИТАТЕЛЕЙ

Венер Фаттах, А. Чанышева. *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

Г. Гареева. Возлюбленная, Родина и Вселенная...
М. Надергулов. Стилевые особенности тауарихов.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

М. Кульмухаметова. Песни хранят память *(95 лет со дня рождения Якупа Кулмуя).*

МОСТЫ ДРУЖБЫ

Мукагале Макатаев. О, жизнь! Стихи.

ПУБЛИЦИСТИКА

Д. Шарафетдинов. Бережливость начинается с запрета.

СВЕТ ВЕРЫ

Р. Биканачева. Паломничество в Мекку открыло врата мира.

КОРНИ ДУХОВНОСТИ

Х. Абдрафиков. Из истории деревень Кармаскалинского района.

САТИРА И ЮМОР

Р. Надергулова. *Юморески.*

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

Телефондар:
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

Талха
ҒИНИӘТУЛЛИН

КОЛЧАК АЛТЫНЫ

ПОВЕСТЬ

Ҡырҡҡа етеп килһә лә, Азамат өйләнмәгәйне әле. Ул йылдарҙа ҡыҙ кеше тормошҡа сыға алмай ултырып ҡалһа – һуғыш егеттәрҙе ҡырып бөткәйне, ә «һуғыш балалары» өсөн ундайҙар «әбей» фиғелендә ине – уға аңлап һәм йәлләп ҡаранылар. Әгәр егет утыҙҙан уҙһа, аҡһаҡ-туҡһаҡ йәки зәғиф булмаһа, арҡаһында бөкөрөһө лә юҡ икән (һуғыштан һуңғы йылдарҙа ҡыҙҙар ундайҙарға сығырға ла риза ине), етмәһә, ауылда кейәүгә барырлыҡ ҡыҙҙар көтөүе менән – был инде сәйерлек һанала. Эйе, яңғыҙ ҡатындар тарафынан иркәләнгән, ғаилә ҡамытын кейергә ашыҡмаған йөрөмтәлдәр ҙә бар, тик был юл Азамат өсөн түгел.

Һаман кәләшһеҙ йөрөүенең сәбәбен белмәгән, күңеленә инергә теләмәгән кешеләр Азамат тураһында төрлөһөн һөйләне. Армияға алынғансы, йәнәһе лә, ул ҡыҙҙарҙан уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡты, яҡын барыуҙан ояλды, тип ләстит һатты. Кистәрен клубта саң-туҙан туҙҙырып бейешкән йәштәр ыңғайына, ул да клубҡа йөрөнө. Барҙы, ләкин бейемәне лә, тансыға ла төшмәне, башҡа төр уйындарҙа ла ҡатнашманы. Стенаға терәлә лә уйнағандарын күҙәтеп баҫып тик тора. «Ниңә бейемәйһең?» – тип һораһалар, оялсан ғына йылмая ла ҡуя. Күршеһе Әбүзәр: «Оялма шуларҙан, йәбеш түштәренә. Нахал, тиһә лә, иғтибар итмә, улар шулай ҡылана ғына. Ҡыҙҙарҙы белмәйһең әле», – тип «кәңәштәр»ен бирә. Был хәбәргә лә Азамат оялсан ғына йылмая. Нишләһен, ысынлап та ҡыйыуһыҙ шул. Хатта әсәһе лә уны «быҙау» тип йөрөтә. «Башҡаларҙың улдары ул кеүек, үҙҙәрен яҡлай ала, ә минеке – быҙау ише ҡыйыуһыҙ».

Быҙауҙарса ҡыйыуһыҙлығы, бәлки, уның етемлектән рәнйетелгән күңеленән киләлер. Азамат – һуғыш йылдары балаһы. Атаһы менән йәшәргә, уның көсөн күреп, тир еҫен еҫкәп үҫер бала сағында етем ҡалды. Ауыр физик эш, бөтмәҫ-төкәнмәҫ мәшәҡәттәр менән арыған һалдаткалар тәрбиәләгән шыйыҡ малайҙар

Талха Ғиниәтуллин (1925) Учалы районының Ураҙ ауылында тыуған. Өфөлә, Мәскәүҙә сыҡкан байтаҡ китаптар авторы. Хикәйә, повестары сит телдәргә лә тәржемә ителгән. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, С. Аксаков исемендәге Бөтә Рәсәй әҙәби премияһы лауреаты.

һынған характерлы булып үҫте: берәүҙәр – тыңлаусан һәм аҫтыртын, икенселәр – бөтә донъяға асыулы һәм үсле.

Армия хеҙмәте лә Азаматты әллә ни үҙгәртә алманы, әммә колхоз тормошона бик тә кәрәкле ир эштәренә өйрәтте. Хеҙмәткә тиклем тракторҙа йөрөһә, армияла машина артына ултырҙы. Ағас эшен, электрҙы белде, өй һалды, көнкүреш приборҙарын ремонтланы.

Хеҙмәттән ир ҡорона инеп, ярты башҡа тартылып ҡайтты. Ауылдың шәп егетенә өйләнһә лә, клубҡа башҡа аяҡ баҫманы, ҡыҙҙарҙан ситтәрәк йөрөнө, шулай ҙа үҫмер сағынан уҡ күңеленә яткан сельпо һатыусыһы Шәриптең ҡыҙына йәшерен мөхәббәтен һаҡланы. Сибәр булһа ла (Әбүзәр күршеһе уны сибәр тип хисапламаны, «иҫ китерлек нимәһе бар инде, башҡалар һымаҡ бер ялбырбаш инде шунда» тине), ул һаман кейәүгә сыҡмағайны әле. Күрәһең, отошлораҡ берәй вариант көткәндер.

Донъяла барыбер ҙә бәхет бар ул, тип ныҡлы ышана ине Азамат, һәм әлеге бәхет уға Шәрип ҡыҙы Ғәлиә сүрәтендә балалар йоҡоһо һымаҡ нурлы бер әкиәти ысынбарлыҡ рәүешендә күҙе алдына килә. Уның менән, уның тирәһендә булған бөтә нәмә – бәхет. Бына улар ир менән ҡатын, бер-береһе менән сөкөрҙәшеп самауыр артында сәй эсә, уларға рәхәт, күңелле; бына улар бесәнлеккә китеп бара, юлдың ике яғында – төрлө төҫтәге үлән-сәскәләрҙән туҡылған балаҫ, туғайҙарҙа бал еҫе аңҡый, улар өндәшмәй генә тирә-йүндәге матурлыҡҡа һоҡлана, уларға рәхәт, күңелле; бына улар мунсала йыуына...

Армиянан ҡайтыуына ла байтаҡ ваҡыт үтте: Азамат – һаман яңғыҙ, кәләш әйттереү хаҡында уйламай ҙа. Ә ауылда ғаилә тормошо өсөн өлгөргән күпме ҡыҙ яҙғы тау битләүендәге шиңгән умырзаяише шиңеп йөрөй. Иң борсолғаны әсәһе – Зифа апай булғандыр. Егет күркәм, әммә оялсан, баҙнатһыҙ, берәй башкиҫәре ҡамыт кейҙереп алһа, унан да аламаһы – йөрөмтәл берәйһе менән бәйләнһә, тәмен белер ҙә бөтөнләй өйләнмәҫ тә ҡуйыр, тип ҡурҡа. Үҙе йыш ауырыны, бигерәк тә ҡыш көндәре йонсой, йылғанан көйәнтәләп һыу ташыуы бигерәк тә ауыр. Ә улына килен алып ҡайтырға ваҡыт икәнен әйтергә ниңәлер тартына. Шулай ҙа бер көн, нимәлер эшләп арыуының сигенә сыҡҡас, түҙмәне: «Өйләнер инең, бик йонсойом бит, – тине, йәне көйөп. Азамат өндәшмәне. Әсәһе хәбәрен дауам итте:– Анау уҡытыусы Әминә һиңә сығыр ине». – «Ҡайҙан беләһең?» – тип ҡыҙыҡһынды Азамат. «Һеңлеһенә үҙе әйткән. Йәнәһе лә, бына тигән егет, эсмәй, тартмай». Азамат йәнә өндәшмәй торҙо ла: «Тырнаҡтарын буяп йөрөй бит», – тип мөгөрҙәне. (Һуңғы йылдарҙа ауыл ҡыҙҙары район бөҙрәханаһына барып сәстәрен бөҙрәләтеүҙе, тырнаҡтарын буятыуҙы мода итеп алғайны.) Күңелендә кемде йөрөткәнен белмәгән әсә улының яуабын үҙенсә юраны: тырнаҡтарын буяған белемле ҡыҙ нисек итеп һыйыр һауыр икән һуң?

Нисектер бер мәл күршеһе Әбүзәр, эсеп алғас, Азаматҡа бәйләнә башланы: «Күрше, әйҙә, мин һине өйләндерәйем, ә? Һайланып йөрөүең етте. Күҙең төшкән берәйһе бармы? Хәтереңдәме, армияға тиклем уҡ әле һин миңә, Шәриптең ҡыҙы оҡшай, тип әйткәйнең? Теләһәң, иртәгә уҡ ҡоҙалайым».

Азамат өндәшмәне. Уның өндәшмәүен Әбүзәр ризалыҡ билдәһе тип ҡабул итте, ахыры, – хәбәрҙе йүкә телефон аша Ғәлиәнең ҡолағына алып барып та еткергән. Ә Ғәлиә ҡырт киҫкән: «Юҡ, ул миңә оҡшамай!» Әсәһе лә: «Берҙән-бер ҡыҙымды ул хәйерсегә нишләп бирәйем мин», – тип өҫтәгән, имеш.

Эйе, ул һаман һалдат салбарында, кирза итектә йөрөй. Йөрөһә һуң? Туҙғансы кейер ҙә ташлар. Машинаға ярамаймы ни? Ғаилә бәхетен тик Ғәлиә менән

генә күҙ алдына килтергәнлектән, ул үҙенең бәхетле булмаясағын аңланы. Ярлы булғаны өсөн бәхетһеҙ. Ә ниңә ярлы һуң?

Колхоз ауылында тыуып үҫкәнлектән, байҙар, ярлылар хаҡындағы хәбәрҙәр бик иҫендә юҡ. Бәлки, уның бала саҡ осоронда ул хәбәрҙәр булмағандыр ҙа. Байҙарҙың колхоздар ойошторолғанға тиклем йәшәгәнен беләү, уларҙың көтөү-көтөү мал-йылҡылары иркен яландарҙы ҡаплап гиҙгән, шунан уларҙы кулак тип атағандар ҙа Себергә һөргәндәр; торараҡ биш стеналы өйҙәре, урыҫ ҡапҡалары булғандарҙы бай тип атай башлағандар. Ни өсөн берәүҙең өйө, ҡапҡаһы шулай, икенсенеке тегеләй һәм улар ниндәй аҡсаға һалынған, әйтәйек, минең йорт серәп ҡыйшайып бара, кәртә-ҡоймаһы юҡ, ә уныҡы өр-яңы, тигән хәбәрҙәр тыйылған, имеш, ул замандарҙа. Дөрөҫ, һатыусы Шәрип араҡыны өйөнә алып ҡайта ла кискеһен, төнөн өс тапҡырға ҡыйбат итеп һата, тигән хәбәр ишетелеп-ишетелеп ҡала ине ҡай саҡ. Шулай икән, ҙур тәҙрәле, биш стеналы, урыҫ ҡапҡалы йортта үҫкән Ғәлиә ҡыйшайған, иҫке йортта көн күреүсе Азаматҡа бара буламы? Юҡ, әлбиттә.

Һуғыштан һуңғы ул йылдарҙа ҡарағайҙан ҙур йорт һалыу һәр кемдең көсөнән килмәй ине. Ағасты йыраҡтан бүлделәр. Егерме саҡрымдан ике ағастан да артығын ташып булмай. Пилорама юҡ, таҡтаны ҡул бысҡыһы менән бысаһың.

Азаматтың атаһы, ябай колхозсы Миңлебай Ҡарағужин, үҙенең атаһының иҫке йорто урынына түрә-ғараныҡынан бер ҙә кәм булмаған ҙур тәҙрәле, соланлы, биш стеналы өй күтәреү хаҡында күптән хыяллана ине. Көҙөн үгеҙҙәрен һуйҙылар ҙа итен баҙарға сығарып һаттылар, яҙына оҫталар менән һөйләшергә-килешергә йыйынып йөрөй ине лә – килеп сыҡманы: һуғыш башланды. Ҡыйшайған атай йортонан һуғышҡа китергә мәжбүр булды егет, нишләһен...

Ғәлиәнең уны кире ҡағыу хәбәрен ишетеп күңеле әрнеп йөрөгән көндәрҙә Азаматтың ҡолағына ниндәйҙер алтын хаҡында һүҙ килеп салынды. Уны ремонт мастерскойының төтөн менән тулы бытовкаһында оҙон тәнәфес ваҡыттарында тәмәке көйрәтеп ләстит һатыусы ирҙәр араһынан кемеһелер әйтте. Йәнәһе лә, Колчак тауҙар араһына алтын йәшереп киткән: был байлыҡты тапҡан кеше уның 25 процент хаҡын ала, ти. Бала, үҫмер сағында уҡ Азамат ҡайҙалыр күмеп ҡалдырылған ул байлыҡтар һәм уны нисек эҙләп табыу хаҡында ишеткәне бар ине инде, алтынлы мөхит хаҡында хатта батшаға ла мәғлүм икән. Ауылда күптәрҙә, һабан, һуҡа һәм сыбыртҡынан тыш, хужалыҡтарында шулай уҡ кәйлә, көрәк, тырнағыстар һаҡлана ине әле. Һәм был металл кеше аңында «байлыҡ» тигән һүҙгә бәрәбәр йөрөй ине.

Ә был байлыҡты йәшереп киткән Колчактың кем икәнен ауылда йүнләп бер кем дә белмәй ине. Кемдер, аҡ генерал, тип һөйләне, ләкин ул генералдың алтынды таштар аҫтына ни өсөн йәшергәне һис аңлашылмай, берәй бай сауҙагәрҙең большевиктарҙан йәшереүе аңлашыла әле; икенселәр, Колчак – старатель ине, тип ныҡышты. Һуғышҡа тиклем күрше рудникта «Колча» ҡушаматлы рус старателе булғанын хәтерләнеләр. Кем белә, бәлки, ул тапҡандыр әлеге ҙур самородокты һәм, дәүләткә бушҡа биргеһе килмәй, таш аҫтына йәшергәндер.

Ауылдан егерме саҡрым самаһында ятҡан Ирәмәл тауы Урал һыртының зәңгәрһыу-һоро үркәсе булып һерәйә. Кеше унан ҡайһы яҡта ғына тормаһын – туғайлыҡта, тау битендә, ҡалҡыулыҡтар түбәһендә – бөтә ерҙән дә әлеге зәңгәрһыу-һоро үркәс күренеп ята. Азаматтың атаһы Ирәмәлгә ҡарап һауа торошон алдан самалай торғайны. Тауға болоттар төшһә: «Ирәмәл башына бүрек кейҙе – ямғырға», – ти. Йәйҙең иң эҫе көндәрендә лә Ирәмәл яғынан һалҡын ел иҫә. Ә

бына ул яҡтан йәшенле, ялағайлы ямғырҙар килеүе бик һирәк. Тирә-яҡта һәр саҡ ниндәйҙер хөрәфәт һиҙгән аңлы кешеләр Ирәмәлде серле, мөғжизәле, хатта ҡурҡыныс тау тип иҫәпләнә. Һорғолт тау кешене үҙенә тарта икән – ҡайһы берәүҙәр ошоға буйһоноп бара ла кире ҡайта алмай ғәйеп була.

Ирәмәлгә Азамат мәктәп йылдарында уҡ барҙы һәм уның үркәсенә күтәрелә торғайны. 5-се кластарҙы уҡытыусы Иҙрисов ағай алып барҙы. Кеше һирәк йөрөгән урман һуҡмағынан атлай торғас, балалар ҡырағай шыршылыҡтан килеп сыҡтылар ҙа, ҡапыл, һис уйламаған-көтмәгәндә, ерҙән үк вертикаль рәүештә зәңгәрһыу төҫтәге күккә олғашҡан бейек һоро ҡаяға килеп төртөлдөләр. Ауыл осондағы бейек булмаған ҡалҡыулыҡтарҙы ғына күреп үҫкән малай, ҡыҙҙар өсөн ғәйәт ҙур һәм бейек был таш өйөмө шаҡ ҡатырғыс күренеш ине.

Тауҙың көнсығыш яғы итәгенән алып түбәһенә тиклем һоро түңәрәк эре таштарҙан «һалынған», әйтерһең дә, уны әкиәттәге Алпамыша тәҫләп теҙгән. Тауҙың түбәһенә менеп ҡараһаң, Көньяҡ Урал тау теҙмәләренең яртыһын тип әйтерлек күрергә була, ҡайһы бер осло күҙлеләр асыҡ көндә хатта алыҫ ауылдарҙы һәм улар араһындағы юлдарҙы ла шәйләй.

Август иртәләренең береһендә, әсәһен дә иҫкәртеп тормай, Азамат өҫтөнә иҫке фуфайка, аяғына еңел сарыҡ кейҙе лә, киндер тоҡсайына бер шешә һөт, икмәк киҫәге һалып, Ирәмәл тарафына юлға сыҡты һәм төш етеүгә барып та етте. Хәҙер тау уға, ҡырҡты ваҡлаған кешегә, ул ҡәҙәре серле һәм шаҡ ҡатырғыс бейек булып күренмәне. Һоро текә стенаһы ла сүккән һымаҡ, уға илтеүсе һуҡмаҡ та байтаҡ тапалған, тимәк, кеше йөрөп ята, хатта мотоцикл эҙҙәре, быяла ярсыҡтары ла бар. Янып бөтмәгән торонбаштар, буш араҡы шешәләре, консерва банкылары ашаған-эскән кеше сифатында цивилизацияның был алыҫ төбәккә лә килеп етеүе хаҡында һөйләй ине.

Тауҙың көнсығыш битләүе буйлап төньяҡтағы текәлеккә үтеп, Алпамыша таратып ташлаған эре-эре таштарҙан-таштарға һикерә-һикерә, түбәндә таштар араһынан борғоланып аҡҡан боҙ кеүек һалҡын һыуҙы шаптор-шоптор кисә-кисә, Азамат кирегә боролдо. Унан, көньяҡ морондан күтәрелеп, таш стенаның кире яғын ҡараны. Был яҡ байтаҡҡа һөҙәгерәк, үләнле, хатта һирәк ҡыуаҡлы булып, урманлы үҙәккә әйләнә. Азаматтың башына ҡапыл уй килде: тимәк, алтын хужаһы үҙенең байлығын юҡҡа ғына ҡырағай урынға йәшермәгән – ниндәй таш аҫтында ята, үрҙәме, түбәндәме – табып ҡара. Ә тау үҙенең рәхимһеҙ ҡырағайлығы менән, эҙләмә лә, ул алтынды барыбер минең һиңә бирәһем юҡ, тип әйтеп тора һымаҡ.

Тамам арып-талып, өшөп ул, киске эңер төшкәс, бер нисә емерек йорттан торған кешеһеҙ ауылға – әгәр уны ауыл тип атап булһа: үҫмер саҡтарында Ирәмәлгә күтәрелгән саҡтарында бында байтаҡ кеше йәшәгәнлеге иҫендә – әйләнеп килде. Хәҙер ул яңғыҙ юлсыға ҡайғынан ҡарайған күҙҙәре менән ҡарай; ҡайһы бер тәҙрәләр ҡойолған, әйтерһең дә, ҡасандыр беҙҙең йылыла һәм уңайлыҡта һинең һымаҡ кешеләр йәшәне, тора-бара уларҙың ҡайһы берҙәре үлде, ҡайһылары беҙҙе ташлап китте, бәлки, һин, юлсы, инерһең дә үҙеңдең тының менән беҙҙең стеналарҙы йылытырһың, өй эсенә йән өрөрһөң, тиергә теләйҙәр ине...

Азамат иң ситке өйгә инде. Өй ишеге бикһеҙ, ә тәҙрә быялалары имен. Стена яҡлап – сөгөн плитәле ҙур мейес, балаҫ ҡаплаулы тәпәш һике, тәҙрә тупһаһында – күптән һулыған гөлдөң кипкән тупраҡлы көршәге.

Берәй тимер ҡашығаяҡ алмағанмын икән, тип үртәнә-үртәнә, шешә ауыҙынан һөтөн эсеп, икмәген ашаны ла фуфайкаһын ябынып һикегә ятты һәм, маршбросоктан һуң арыған һалдат кеүек, ҡаты йоҡоға сумды.

Тәрән тынлыҡта, иртәнге ҡояш нурҙары уйнай башлағанда уянды. Сығып, өй мөйөшөндә хәжәтен атҡарҙы ла йылғаға төштө, дөрөҫөрәге, билдәһеҙ йылға үренә табан атланы. Яр буйлап бер аҙ барғас, көҙгөләй ялтырап ятҡан йылғаға эйелде. Һыу шул тиклем таҙа, саф ине, әйтерһең дә, туғайҙа үҫкән төрлө үләндәге ысыҡ тамсыларын берәмләп йыйғандар, үтә күренмәле, алтын төҫөндәге ҡомдоң һәр бөртөгө ап-асыҡ күренеп ята. Ҡом өҫтөндә көтөүе менән эреле-ваҡлы балыҡтар йөҙә. Азамат тыуған йылғаһын – Йайыҡты иҫенә төшөрҙө лә, әгәр уның балалары булһа, улар ошо терегөмөш ише таҙа һыуҙы бер ҡасан да эсә, үтә күренмәле һыу аша ошо тере балыҡтарҙы күрә алмаясаҡ, тип әсенеп уйланы. Үҙҙәренең бала саҡтарындағы ябай ғына шатлыҡтарҙы иҫләгән ауыл ҡарттары, беҙҙең бөйөк йылға башында төҙөлгән ҡаланан Йайыҡҡа ағыу аға, тип һөйләй торғайны.

Азамат, йыраҡ бала сағындағы ише, услап тәмле һалҡын һыу эсте, ҡырынмаған битен йыуҙы һәм... атлаған аҙымдар, металл сыңы тауыштары ишетте. Башын ҡалҡытты ла артына боролдо: түбәндәрәк һалынған таҡта баҫмаға, көйәнтәһенә буш биҙрәләрен элеп, бер ҡыҙ килеп менде. Иртәнге ҡояш нурҙары яҡтыһында ҡыҙҙың сыбар сәскәле күлдәге, зәңгәр төҫтәге көйәнтәһе һәм зәңгәр муйынсағы, ҡулындағы көмөш беләҙеге – Азаматҡа күҙ ҡамаштырырлыҡ сағыу мөғжизә булып күренде.

Йыуынып, кәпәсен башынан һалды ла, кешеләр менән осрашҡанда оялсан йылмайғандағыса, әле лә ҡыҙға йылмайып баҡты. Ҡыҙ уға күҙ ҡырыйы менән генә ҡараны, әйтерһең дә, нимәгә шаҡ ҡаттың, тип өндәшергә теләне һәм, биҙрәләрен көйәнтәһенән ысҡындырып, һыу алырға эйелде. Алғас, көйәнтәһенең элгестәренә тулы һыулы биҙрәләрен эләктерҙе лә йәнә Азаматҡа һирпелде. Ҡуйы, оҙон керпекле күҙҙәре ҙур һәм зәңгәр ине. Бер юлы зәңгәр йәки һоро күҙәр менән дегет кеүек сөм-ҡара сәстәр башҡорттоң тау яҡтарында һәм көньяҡ далаларҙа йыш осрамай.

Сибәр ҡатындар алдында Азамат һәр саҡ юғалып ҡала, ә бына йәшерәктәргә өндәшергә ҡыйыулығы етә:

– Һин бында йәшәйһеңме әллә?

Ҡыҙ егеткә күҙ һирпте.

– Эйе, – битараф ҡына яуапланы ла иҫкергән таҡта ҡапҡалы йортҡа атланы. Осаларын туйтаңлатып, ул тулы биҙрәләрҙе тар һуҡмаҡ буйлап еңел һәм килешле алып бара, оҙон, ҡалын толомдары остарында зәңгәр таҫма менән бәйләнгән ҙур көмөш тәңкәләр сыңлай. Тәңкәләр – боронғо, иҫке аҡсалар. Николай батша заманындағы, ахыры. Ҡасандыр Азаматтың өләсәһе лә тағып йөрөнө уларҙы, торараҡ тәңкәләр моданан сыҡты....

«Уның өсөн ҡартыраҡмын», – тип күңелһеҙ генә уйлап ҡуйҙы Азамат һәм йоҡлап сыҡҡан йорто яғына яй ғына атланы.

Әммә ҡояш кеүек яҡты тау ҡыҙы иҫенән сыҡманы. Уны берсә үҙенең меҫкен генә өйөндә, берсә ауылдың саңлы урамында йөрөй икән тип күрҙе, берсә оҙаҡламай үтә торған буш хыял рәүешендә күҙалланы. Өйләнерһең – әсәһен әҙәмгә һанамаҫ. Йәки берәйһенә эйәреп ҡасып китер. Ундай хәлдәр ауылда булғылап тора. Ана, Ғәйнетдин Силәбе яҡтарынан бер һылыу ҡыҙ алып ҡайтҡайны, ярты йыл йәшәнеләрме-юҡмы, сос, телдәр күршеһенә күсеп сыҡты китте. Ат менән бисәгә һис ышанма, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Эх, Шәрип ҡыҙына өйләнер ине лә...

Азамат өйө ултырған ҡалҡыулыҡҡа күтәрелде лә оҙаҡ итеп Ирәмәлгә текәлеп торҙо һәм, әйтерһең дә, бар уйын биләгән ҡыҙҙың зәңгәр көйәнтәне яурындарына һалған килеш йәнә ҡапҡанан сығып йылғаға төшөүен, баҫмала тороуын, оҙон

ҡара толомдарындағы көмөш тәңкәләрҙе сыңлата-сыңлата тар һуҡмаҡтан етеҙ атлағанын күрҙе. Был минутта уның күкрәгенә быға ҡәҙәр үҙенә бөтөнләй таныш булмаған нимәлер тулды. Әйтерһең дә, ул шәрбәт, иҫкерткес шыйыҡса йотто, һәм әлеге шыйыҡса йылынып, бар кәүҙәһенә таралды. Эсеп алғанда атаһы гел генә бер йырҙы йырлай торғайны, әле шул иҫенә төшөп, күңелен ҡуҙғытты.

Талир тәңкәләрен шылтыратып,
Һалҡын шишмәләрҙән һыу ала.
Һалҡын шишмәләрҙән һыу алъанда
Ҡояш нурҙарынан нур ала.

Бер көн урамда Шәриптең ҡыҙын осратты, әммә, икенсе ауылдағы бөтөнләй ят ҡыҙҙы күргән кеүек, Азамат туҡтаманы, эргәһенән шәп атлап үтте лә китте. Шунда Әбүзәрҙең дөрөҫ һөйләгәнен аңланы. Хәйер, унан ғына түгел, башҡаларҙан да ҡыҙҙың эскеләүе тураһында ишеткәне бар ине...

Һыйырына бесән сабып, ике кәбән ултыртҡас, ул үҙенең артабан Ирәмәл ҡыҙынан башҡа йәшәй алмаясағын аңланы. Һәм, түҙмәй, йәнә Колчак алтынын эҙләргә сығып китте. Икеләнеп-уйланып барҙы: бәлки, ул унда юҡтыр ҙа, күрше берәй ауылға туғандарына күскәндер йәки кейәү егете пәйҙә булғандыр ҙа уны алыҫ яҡтарға алып киткәндер. Ике аҙна самаһы ваҡыт үтте бит, ни тиһәң дә...

Теге ауылға барып еткәс тап итмәне ҡыҙҙы, шулай ҙа, моғайын, өйөндәлер, килгәнен шәйләгәндер, тип уйланы ла артабан тау яғына йүнәлгәнен күрһәтергә ниәтләне, әммә тауға барып етә алманы, дөрөҫөрәге, бер сәғәт самаһы йөрөнө лә кире боролдо. Ҡыҙ ҡапҡаһы төбөндә баҫып тора ине. Тимәк, килгәнен шәйләгән. Өҫтөндә – алтын-зәңгәр төҫтәге яңы күлдәк, әйтерһең дә, байрамға әҙерләнгән йәки ҡунаҡтар көтә. Азамат иҫәнләште лә һораны:

– Ломың бармы?

– Бар. Һарайҙа, – тип яуапланы ҡыҙ һәм өҫтәне: – Нимә, һин дә Колчак алтынын эҙләйһеңме?

– Нишләп улай тип һорайһың?

– Һинән башҡа ла эҙләнеләр инде. Тапманылар.

– Ә мин табам.

«Ну-ну, табырһың микән, ҡарарбыҙ» тигәндәй, ҡыҙ мыҫҡыллы ғына йылмайҙы ла – һәр хәлдә Азаматҡа шулай тойолдо – ҡапҡаһынан инеп китте.

Ломды алып, Азамат тау яғына атланы. Әммә тау битендәге ҙур таштарға барып етмәне, һуҡмаҡ буйындағы асыҡлыҡта көртмәле йыйып ашаны, ә уйы менән һаман ҡыҙ эргәһендә ине – уның зәңгәр ҡарашынан, йомшаҡ күкрәк тауышынан алтын тураһындағы уй ваҡ һәм кәрәкмәгән нәмә булып тойолдо.

Сәғәт дүрттәр тирәһендә Азамат ауылға әйләнеп килде. Ҡыҙ йәнә ҡапҡа тышына сығып баҫҡан, гүйә, кемделер көтә.

– Лом өсөн рәхмәт, – тине Азамат, инструментты кәртәгә һөйәп. – Исемең нисек?

– Мәрйәм.

– Матур исем. Ә мин – Азамат.

– Апайымдың ире лә Азамат. Тик ул алтын эҙләмәй, туҡтауһыҙ эсә.

– Ярай, мин ҡайтайым.

– Ауылың йыраҡмы?

– Туранан – егерме саҡрым.

– Ой, ҡалай йыраҡ. Ҡасан ҡайтып етәһең? Кис тә булып бара.

– Етәм. Беренсе тапҡыр түгел.

– Балалы айыуға осраһаң нишләрһең? Ауылдан бер әбей шифалы үләндәр эҙләп йөрөгәндә ике балалы айыуға юлыҡҡан. Йәш балалы айыу ҡурҡыныс, уларҙы һаҡлайым тип, кешегә ташланырға ғына тора.

– Мин бит ир кеше, әбей түгел.

– Батыр икәнһең, әйҙә, юлыңда бул.

Эңер төшөп килгәндә егерме саҡрымлыҡ юлға сығырға, әлбиттә, Азамат атлығып тормай ине. Айыуҙан ҡурҡмай, уның балалары үҫте, шуға ла инә айыу хәҙер ул тиклем ҡурҡыныс түгел, өйөндә Мәрйәмһеҙ эс бошорғос буласаҡ, уның бында мәңгелеккә ҡалғыһы, ошо алама ғына өйҙә йәшәгеһе һәм ҡыҙҙы һәр иртә һайын йылға ярында күргеһе килә.

– Ярай, Мәрйәм, һин хаҡлыһыңдыр. Төнгә ҡаршы ҡуҙғалмайым. Теге ваҡыт йоҡлаған йортта ҡунырмын.

– Ҡалай сәйер һин. Ниңә буш өйҙә йоҡлай, ти? Әйҙә, миндә йоҡла, урын етә.

– Ә һин ят кешене төнгөлөккә ҡалдырырға ҡурҡмайһыңмы һуң?

– Һинән ҡурҡмайым. Ниндәй кеше икәнеңде күреп торам бит. Миндә туристар, геологтар ҡунып киткәне бар. Нишләп торабыҙ, әйҙә, өйгә инәйек.

Ҙур тәҙрәләре көньяҡҡа ҡараған ике бүлмәле ҡарағай йорттан йәш ағас еҫе аңҡый. Ике яҡ иҙәненә лә сыбар балаҫтар йәйелгән, стенала – ҡарттарҙың фотограф тарафынан «йәшәртелгән» һәм ҙурайтылған фотоһүрәте, боронғо сәғәт. Бүлмәгә инеү менән ҡабартылған ап-аҡ мендәрҙәр, сигеүле япмалар күренә, унда тик таҙа, нәзәкәтле, наҙлы йәш ҡатын ғына йоҡлай алалыр. Ә ауыҙы стена яғына ҡаратып һалынған мейескә Азамат әллә ни иғтибар ҙа итмәне.

– Ултыр, бына ултырғыс.

Азамат тәҡдим ителгән ултырғысҡа ултырҙы, ғәҙәтенсә оялсан ғына йылмайҙы – ҡапҡа төбөндә ҡыйыу ғына һөйләшһә лә, өйгә кергәс телен йотто ла ҡуйҙы.

– Электр уты юҡ. Кирәбәнкәлә үткәрҙеләр. Ә беҙгә ярамай, тинеләр. Атайым район начальнигына барҙы, һеҙҙең ауыл перспективаһыҙ, шуға хәжәте юҡ, тип сығарған. Йәй мейескә яҡмайым. Самауырым бар. Электр уты кәрәкмәй, күмер йә ҡарағай тубырсыҡтары менән ҡайнатам. Көнө буйы сәй эсәм. Бер геолог әйтмешләй, башҡорттарҙың иртән чай, төшкөһөн чаище, кискеһен чаек...

– Бында яңғыҙың нисек ҡыш сығаһың?

– Ҡышлағаным юҡ әле. Әсәйем үлгәндән һуң ауылдағы апайымда йәшәнем. Ете йыллыҡ мәктәпте лә шунда бөттөм. Апайым һәйбәт, еҙнәм эсә. Иҫерек сағында унан ҡурҡам. Апайым йоҡларға үҙе менән һала. Еҙнәм бында килеп ҡуймағайы, тип ҡурҡам.

Үҙенең тормошо хаҡында һөйләй-һөйләй, ул шым ғына балаҫ өҫтөнән йөрөнө. Ҡалын, оҙон толомдары осонда көмөш тәңкәләре сылтырап китте. Соландан өҫтәлгә сынаяҡтар, вазалар, тәрилкәлә ҡурай еләге, көртмәле сығарып ултыртты.

– Сәйҙе һөтһөҙ эсәм. Һыйырыбыҙ бар ине лә, әсәйем үлгәс, апайым үҙенә алды. Сәй юҡ, уның урынына мәтрүшкә, көртмәле япрағы һалам.

Азамат көлсә менән сәй эсте һәм ошолай ҡара-ҡаршы тигәндәй ултырғанда ғына ҡыҙҙың, кәүҙәгә һомғол тәнле булып өлгөрһә лә, уның кисәге уҡыусы бала, үҫмер генә икәнен күрҙе. Ә ул, ҡарт ишәк, уның сибәрлегенә һоҡланып, үҙенең ҡатыны рәүешендә күҙаллап хыяллана. «Ҡарт мин, – тип йәнә уфтанып уйланды ул, – уның өсөн ҡартмын».

Бер ҡасан да тормошҡа ашмаясаҡ хыялдарынан бер айнып, бер йәнә бирелеп, был үҫмер ҡыҙҙы нисегерәк ышаныслы ергә урынлаштырыу, хатта йәшереү тураһында фекер йөрөтә башланы. Иртәме-һуңмы эскесе еҙнәһе барыбер килеп табасаҡ бит. Килеп тапһа, әрәм итеүен көт тә тор. Йәки уйламай-нитмәй берәй дүрәккә кейәүгә сығыуы ихтимал.

– Мәрйәм, йәшәргә, бәлки, беҙҙең ауылға төшөрһөң?

– Ниндәй ауылға? – тип һораны ҡыҙ битараф ҡына.

– Ураҙға.

– Һеҙҙең сит-ят ауылда нимә эшләрмен һуң? Үҙемдең ауылға ҡайтһам, яҡшыраҡ. Берәйһенә инермен дә эшкә урынлашырмын.

– Мәрйәм, унда кире барма. Әйҙә беҙгә. Сыҡ миңә кейәүгә. – Азамат үҙе лә көтмәгәнсә шулай тип әйтеп һалды, шаяртып ҡына тигәндәй, сөнки ҡыҙҙың ни тип яуапларын белә. Бәлки, хәтерен һаҡлап өндәшмәҫ тә, әммә: «Бик кәрәгең бар ине, ҡартлас», – тип уйлаясаҡ.

Шул саҡ ҡыҙ үҙенең зәп-зәңгәр ҙур күҙҙәре менән уға шул тиклем тултырып ҡараны, әйтерһең дә, уны ҡарашы менән тиште, унан бер нисә секунд өндәшмәй ултырҙы ла тамаҡ төбөнән сыҡҡан тауыш менән:

– Ярар, мин уйлармын, – тине.

Азамат телһеҙ ҡалды: шаяртырға теләгәйне, бәй, ҡыҙ унық тәҡдимен ысынға алды түгелме?! Ә ул, Азамат, ни тип яуапласын? Ғәҙәттәгесә оялсан йылмайыуы ла ҡалманы йөҙөндә. Ҡыҙ шулай уҡ башҡаса өндәшмәне, күрәһең, ысынлап та, Азаматтың тәҡдиме хаҡында уйлана ине.

Кисенә ул ҡунағына ҙур бүлмәлә өҫтәл эргәһендәге киң һикегә урын йәйҙе, өҫтәлгә ағастан эшләнгән шәмдәл ҡуйҙы, «төнөн сыҡһаң, солан ишеген ябып инергә онотма» тине лә үҙ бүлмәһенә инеп сумды. Азамат оҙаҡ йоҡлай алмай ятты, уйланды ла уйланды. Таң алдынан ғына серемгә китте, тәүге ҡояш нурҙары менән бергә уянып, шым ғына кейенде лә, фуфайкаһын тотоп, ҡайтыр юлына сыҡты.

...Уңайлы мәл тура килтереп, ул һаҡ ҡына әсәһенә өндәште:

– Инәй, өйләнәйемме әллә?

– Ай Алла, өйлән! – тине әсәһе, нисектер туҙынған һымаҡ. – Әтеү ауылда һинең турала алама хәбәрҙәр йөрөй.

– Ауылдың берәй ҡасан ләститһеҙ йәшәгәне бармы? Тик ул бик йәш бит әле...

– Бәй, булһа ни! Һинең өләсәйеңде ун өс йәштә генә биргәндәр, ә ун дүрттә Рәхмәтулла ағайыңды тапҡан. Ҡайта алманы шул, йөрәкәсем...

– Көлмәҫме икән һинән?

– Һин ир булһаң – көлмәҫ. Түлке быҙау булма.

Өйләнеүенә әсәһенең ҡаршы түгеллеген аңланы Азамат. Әсәһенең ризалығын алды алыуын, тик Мәрйәм ни тиер бит әле. Юҡ, тиһә, ниәте, Колчак алтыны һымаҡ, хыял ғына булып ҡала инде.

Әҙерәк тынысланғандай ҙа иткәйне, әммә ике көндән аяғы йәнә Ирәмәлгә тарта башланы. Мәрйәм уны аптырабыраҡ, хатта мыҫҡыллы йылмайып – һәр хәлдә Азаматҡа шулай тойолдо – ҡаршы алды.

– Уянһам, минең кейәү өйҙә юҡ, сыҡһам, тышта ла юҡ. Алтын эҙләргә киткәндер, тип уйлайым, әммә лом ҡуйған урынында, тимәк, теге Беликов һымаҡ, ҡурҡҡан да ҡасҡан, мин әйтәм.

– Ниндәй Беликов? – тип һораны Азамат, һағайып.

– Мәктәптә үткәйнек тә... Араҡы эсмәйһеңме?

– Юҡ, эсмәйем, атайым да эсмәгән, балаларым да эсмәйәсәк.

– Ауылыңа нисек барабыҙ һуң? Йәйәүме? Мин егерме саҡрымды атлай алмам ул. Әйберҙәрем дә күп.

– Минең трактор бар. «Беларусь». Арбаһы менән. Тейәйбеҙ ҙә алып китәбеҙ. Шунан, һүтеп, өйөңдө лә ауылға төшөрәм.

– Өйҙө ярамай. Өйгә апай күҙ һалды. Бәләкәй ҡыҙына күсереп алырға самалай.

– Ярай, алһын, беҙ яңы өй һалырбыҙ.

– Азамат, тик бөтәһе лә законлы рәүештә...

– Бөтәһе лә законлы буласаҡ, бөтәһе лә ысын буласаҡ.

– Ҡайҙа ҡабаланаһың? Сәй эс, исмаһам.

– Сәй һуңынан.

– Ҡалай сәйер һин. – Ҡыҙ рәхәтләнеп көлдө.

Уның Азамат тип әйтеүе шундай оҡшаны – йөрәгенә шәрбәт ҡойғандағы ише ифрат рәхәт булып китте.

Һәм ул ҡуҙғалды. Урыны-урыны менән йүгерҙе, хәле бөтөп, шәп атлауға күсте, йәнә йүгерҙе, бышлыҡты, атлағанда атаһының ятраҡан йырын йырланы:

Талир тәңкәләрен шылтыратып,
Һалҡын шишмәләрҙән һыу ала...

Арбалы тракторы менән ул Ирәмәлгә кискә генә килеп етте. Мәрйәм күсенергә етди әҙерләнеп торған: тоҡтар, төйөнсөктәр бәйләнгән, ҡашығаяҡ, башҡа көнкүреш әйберҙәре тултырылған, болдорға сығарып ҡуйылған. Һарайҙан Азамат сепаратор тапты, көрәк, ломды ла алдылар, ә өҫтәл, ултырғыстар, карауатты һуңынан килеп алырға булдылар.

Китте тәгәрәп тәгәрмәстәр Ирәмәлдән аҫҡа, үҙәнгә, ҙур йылға ярҙарына табан, үҙе менән зәңгәр күҙле тау ҡыҙын алып. Азаматтың йөҙөнән бәхетле йылмайыу китмәне, хәҙер инде был йылмайыу оялсан түгел ине, көтмәгәндә-уйламағанда үҙенең бәхетен тапҡан һәм быға һаман ышанып етмәгән кешенең ҡаушаған, ғорур йылмайыуы ине. Ә Мәрйәм уйсан, борсоулы, хатта хафалы: барыр төшөр ерендә уны ниндәй тормош көтә?

Мәрйәмде алып ҡайтҡандың өсөнсө көнөнә эштән ҡайтҡанда үҙенең ҡойма буйында йөрөгән бала-сағаны шәйләне – ике малай һәм күршеләренең ҡыҙы – танауҙарын штакетниктың араһына тыҡҡандар ҙа уның ихатаһын күҙәтәләр.

– Унда нимә ҡарайһығыҙ? – тине Азамат.

– Сибәр апайҙы, – тип яуапланы малай.

Өсөһө лә Азаматты танынылар ҙа, шарҡылдап көлөшә-көлөшә, ҡасып киттеләр.

Азаматтың тыуған ауылы борон-борондан икмәкле Ырымбур яҡтарына яҡын һәм ҡан-ҡәрҙәштәрҙең ҡан ҡушыуынан һаҡланһа ла, сибәр ҡатын-ҡыҙҙары менән дан тотһа ла, Мәрйәм, ысынлап та, уларҙың мөхите өсөн һирәк сибәр ҡыҙ ине. Оҙон толомдарынан талир тәңкәләрҙе алды ла сәстәрен уратып, башына өйөп ҡуйҙы – былай ҙа оҙон муйыны тағы ла оҙонайып китте һәм ул, мәктәп балаһы тиерлек йәш кенә ҡатын-ҡыҙ нәзәкәтен үҙенә йыйған ҡыҙ, ауыр физик эштән, бөткөһөҙ мәшәҡәттәрҙән, күп бала табыуҙан, ирҙәренең ҡыйырһытыуҙарынан арыған ауыл ҡатын-ҡыҙы эргәһендә әкиәттәге батша ҡыҙы кеүек күренә ине. Ҡойо янына килһә, ҡапҡаларынан биҙрәләрен көйәнтәләренә элеп күрше ҡатын-ҡыҙы сыға ла уға текәлеп ҡарап ҡата, иҫәнләшкән була, ә баштарында, Азамат етлекмәгән ҡыҙға өйләнгән, аптырарлыҡ бер нәмәһе лә юҡ – ҙур күҙҙәре

лә сәстәре инде, тигән уй. Ә Мәрйәм улар менән йылмайып һөйләшә, әйтерһең дә, ауылдың был ҡатындарын күптән белә, күптән аралаша.

Әбүзәр: «Һин, күрше, шымаҡай, ниндәй сибәр ҡыҙ алып ҡайттың. Мин, Ирәмәлгә алтын эҙләргә йөрөй, тип уйлаған булам, ә һин алтын урынына алтындай кәләш тапҡанһың», – ти. Ул русса шиғыр уйлап сығарҙы:

Есть женщина в нашем ауле,
Посмотрит – солнцем озарит.

Мәрйәмгә уларҙың 30-сы йылдарҙа уҡ нәҙек һәм кәкре-бөкрө ҡайын ағасынан һалынған иҫке йорттары оҡшанымы-юҡмы, – хәйер, юҡтыр, иҫке кемгә оҡшаһын инде, Азамат белә алманы, һәр хәлдә, ҡатыны был хаҡта һүҙ ҡуҙғатманы, ә бына, тормошта йыш ҡына булғанса, әсәнең киленен яратмауы, килендең ҡәйнәне ҡабул итмәүенән ҡурҡыуы бушҡа сыҡты. Йәш киленде беренсе күреүенән үк әсәһе үҙенең тешһеҙ ауыҙы менән киң йылмайҙы ла ауыҙын башҡа япманы ла шикелле, һәр хәлдә йөҙөнән ҡәнәғәт йылмайыуы китмәне. Ә Мәрйәм тәүге көндән үк уны инәй тип йөрөтә башланы.

– Инәй, бүтән һыуға йөрөмә, үҙем барам. Ял ит.

Иҙәндәрҙе яҡшылап йыуып сығарҙы ла аяҡ аҫтына сыбар сәскәле балаҫтар йәйҙе, бөтә тәҙрәләрҙе таҙартты, йыйыштырҙы һәм ярлы, иҫке өйгә уның менән бергә йәшлек дәрте, таҙалыҡ, бөхтәлек керҙе. Мунса яҡты, инәһен йыуындырып, тырнаҡтарын ҡырҡты, үҙе менән алып килгән эске кейемдәрҙе кейҙерҙе.

Күршеләр Азаматтың ниндәй кәләш алып ҡайтҡанын белделәр, күрҙеләр (бына һиңә быҙау!) һәм ҡарсыҡтан көнләштеләр. Бөтәһе лә һәйбәт, килешле барҙы. Тик Әбүзәр генә үҙенең урынһыҙ иҫәр шаяртыуҙары менән әленән-әле Азаматты аптырата ине.

– Күрше, июлдә бер тамсы ямғыр яуманы, августа ҡоролоҡ. Быға кем ғәйепле икәнен самаламайһыңмы?

– Кем?

– Һин ғәйепле, күрше, һин.

– Нишләп мин?

– Сөнки һин йәш ҡыҙ менән никахһыҙ йәшәп ятаһың.

– Мин уның менән йәшәмәйем әле. Яҙылышмағанбыҙ. Ун һигеҙе тулмаған.

– Гонаһҡа керәһең, күрше, гонаһҡа.

– Гонаһ ҡылғаным юҡ! – Азамат үпкәләй башланы. – Һин әйткән гонаһ тынғылыҡ бирмәһә, иртәгә үк Ниғәмәт бабайҙы саҡырам да никах уҡытам.

Был һөйләшеү хаҡында әсәһенә әйткәйне, ул килеште: дөрөҫ йәшәү өсөн никах та, Аллаһы Тәғәләнең ризалығы ла кәрәк, тине. Бәрән салдылар, Ҡөрьән, доға һәм намаҙҙы хәтерләгән Ниғәмәт ҡартты саҡырҙылар, күршеләргә, туған тейеш кешеләргә, Әбүзәргә лә өндәштеләр. Аллаһы Тәғәлә доғаны ишетте лә, ҡоролоҡтан тамам йонсоған Азаматтың ауылдаштарын ҡыҙғанып, миһырбанлыҡ күрһәтте: өс көн буйы туҡтауһыҙ ямғыр ҡойҙо. Йылға ярҙарынан сыҡты, картуф баҡсаларын баҫып китте. Әбүзәр тантана итте.

– Күрҙеңме, күрше. Мин һиңә нимә тинем! Яуҙымы? Яуҙы!

Бына шулай башланды ямаулы салбар менән һуғышҡа китеп, Мәскәү янында ятып ҡалған ябай колхозсы Ҡарағужин Миңлебайҙың «Быҙау» ҡушаматлы Азамат тигән улының ысын ирҙәр тормошо. Улар Мәрйәм менән хәҙергә бала-сағаға батмай торорға хәл иттеләр, дөрөҫөрәге, тәүҙә уларҙы аҫырарлыҡ иркен, йылы оя ҡорорға килештеләр. Мәрйәм, дүрт бүлмәле йәки өс бүлмәле, әммә төкөтмәле – алты стеналы итәйек, тип ныҡышты. Дүртенсе бүлмә, йәнәһе лә, инәләренә булыр.

Был йылдарҙа ауылдағы тормош-көнкүреш бер аҙ еңеләйә төшкәйне. Электр уты бар ине, пилорама эшләй башланы, ҡарағай ағасының хаҡы ла сағыштырмаса осһоҙ. Техника, грамоталы тел менән әйткәндә, техник прогресс күтәрҙе ул саҡтағы ауылды. Йөрөткән колхоз «Беларусь»ын Азамат шәхсән үҙенеке һымаҡ тотондо. Шуға ла транспортҡа мохтажлыҡ булманы. Ҡарағайҙы үҙе таҙартты. Киләһе көҙөнә, ағас ныҡлап кипкәс, буратырға туғандарын, күршеләрҙе саҡырҙылар. Бер аҙҙан мүккә ултыртып күтәрҙеләр, өрлөктө, түбә таҡталарын һалырға мул аш-һыу, эске «ярҙамға» килде... Ҡыҫҡаһы, атаһының серегән, сүккән өйө урынына, ауылдың оҙон урамын йәмләп, бына тигән йорт ҡалҡып сыҡты. Азамат, Мәрйәмһеҙ был өйҙө үҙем генә бер ҡасан да һала алмаҫ инем, тип уйланы. Был уй өйө өсөн дә, ҡатыны өсөн дә ғорурланыу тойғоһона әйләнде. Сөнки балта, бысҡы тауышына ҡарағанда уның тауышы нығыраҡ яңғыраны: йә ҡәнәғәтһеҙ, йә мыжыҡ, йә талапсан, йә ихлас көлөүе. Әсәһе өсөн Мәрйәмдең ауылынан карауат килтерҙеләр, иҙәненә сағыу балаҫтар йәйҙеләр, һәм ҡарт әсә ҡарағай еҫе аңҡып торған бейек, иркен, яҡты өйҙә йәшәй башланы. Күршеләре, Зифа ҡалай бәхетле, килендән ифрат уңды, тип һөйләнде. Көнләштеләр ҙә.

Торараҡ яңы мунса ултырттылар, унан таҡтанан урыҫ ҡапҡаһы ҡуйҙылар, ихатаны бейек ҡойма менән ураттылар, баҡсаны яңынан кәртәләнеләр. Былар барыһы ла ике йыл эсендә, бәлки, саҡ ҡына күберәктер, эшләнде, һәм Азамат йәнә тәрән уйға ҡалды. Ә бит материал алыр өсөн генә лә күпме аҡса сыҡты, эшләтеүенә лә байтаҡ түктеләр. Ә ул, Азамат, бөтә финанс мәсьәләләрен башлыса ҡатынына тапшырҙы ла ҡуйҙы һәм, тамам эшкә күмелеп, теге йәки был сығымға күпме аҡса сарыф ителгәнен уйламаны ла. Уйлана торғас, башына хыянатсыл уй ҙа килеп керҙе: Колчак алтынын Мәрйәм үҙе тапманымы икән? Торараҡ ҡына төшөндө: түгелгән аҡсаларҙы тракторы «тапты». Мең тапҡыр йүнәткән, ремонтлаған ошо трактор, колхоз эшенән тыш, ауылдаштарына ла ныҡ ярҙам итте бит. Кемгә баҡса һөрөргә, кемгә бесән килтерергә, кемгә утын. Хаҡ алыуҙан тартынды: үҙеңдекеләрҙән нисек алмаҡ кәрәк? Ә шешә менән дуҫлығы юҡ ине. Баҡһаң, ул ярҙам иткән кешеләр эш хаҡын Мәрйәмгә бирә барған икән! Йәнәһе лә, һинең Азамат аҡса алмай, эсмәй... Кем белә, бәлки, Мәрйәм үҙе һорағандыр... Ҡатын-ҡыҙҙы аңлап бөтөп буламы?

Тәүге балалары тыуҙы. Ҡартайған әсәһе шатланып бөтә алманы, тешһеҙ ауыҙы менән гел генә йылмайып йөрөнө. Азамат баланы ҡулына ала ла рәхәтләнеп еҫкәй: бәләкәй генә тере йән эйәһенән ниндәй тәмле еҫ аңҡый!

Бәпес бер аҙ үҫкәс, уның зәп-зәңгәр күҙле, һалам ише һары сәсле икәнлеге беленде.

– Мәрйәм, бала нишләп татар йәки урыҫ кеүек зәңгәр күҙле, һары сәсле ул? – тип һораны.

Мәрйәм:

– Ирәмәл янында күп балалар шулай булып тыуа, тау аҫтында ниндәйҙер таш ята, шул таштан ток килә, тиҙәр. Шуның касафатылыр. Борсолма, мин һиңә ҡапҡараларын да, сығынҡы яңаҡлыларын да табырмын, – тип яуапланы.

Артабанғы йылдарҙа ҡатыны Азаматҡа оло ҡорһаҡлы, шулай уҡ йән тыныслығы һәм оло бәхет көтөү тойғолары йәшеренгән ҙур күҙле рәүешендә иҫендә ҡалған. Йәнә өс бала тапты. Өсөһө лә ҡарағусҡыл һәм таҙа малайҙар ине. Бәхетле бала ҡараусы вазифаһынан бер аҙ арыған өләсәләре хәҙер инде һирәгерәк йылмайҙы. Ә Әбүзәр бер һөйләшкәндәрендә былай тине:

– Ныҡ эшләйһең, күрше. Хатта ҡартайып киттең. Ул балаларҙың берәүһе лә етә ине. Хәҙер ҡырҡ йәштәренә тиклем ҡара инде ул дармоедтарҙы!

Азамат күршеһенең һүҙҙәренә оялсан йылмайып ҡына ҡуйҙы.

Ике йыл ял иткәндән һуң, Мәрйәм йәнә ҡыҙ тапты. Азаматты аптыраашта ҡалдырып, бала йәнә зәп-зәңгәр күҙле, һары сәсле ине.

– Ҡыҙыбыҙ ифрат сибәр буласаҡ, – тип ҡыуанды Мәрйәм.

Малайҙарына Мәрйәм ниңәлер рифмаланған исемдәр ҡушты. Был Азаматҡа оҡшаманы, ләкин ҡәтғи ҡаршы төшөргә батырсылығы етмәне, сөнки бергә йәшәй башлағандың тәүге көнөнән үк донъя дилбәгәһен ҡатынына биреп ҡуйғайны. Данил, Камил, Йәмил. Ҡыҙҙарын Венера тип нарыҡланылар. Был турала белгәс, Әбүзәр былай тине:

– Ниңә улай тип ҡуштығыҙ? Берәй матур башҡорт исемен таба алманығыҙмы ни?

– Венера тип күптәр ҡуша бит.

– Наҙандар ҡуша инде. Венераның кем икәнен беләһеңме? Ниндәйҙер боронғо халыҡта Венера – гулять ҡыла торған бисәләр Аллаһы. Өйрәнмәҫ элек, балаға икенсе исем бирегеҙ.

Азамат Мәрйәмгә күршеһе менән булған һөйләшеүҙе еткергәйне, ҡатыны үпкәләгәндәй итте.

– Ләстит һөйләмәһен, болтун. Венера – йондоҙ исеме, күктә иң яҡты янған йондоҙ. Иртән тор ҙа көнсығышҡа ҡара, күрерһең. Алла бирһә, минең ҡыҙым да шул яҡты йондоҙ кеүек сағыу буласаҡ.

Балаларын тулыһы менән ҡарт ҡәйнәгә тапшырып, Мәрйәм башкөллэй хужалыҡ эштәренә сумды. Ҡайҙалыр, кемгәлер барҙы, һөйләште, иҫбат итте, күптән түгел генә мәрхүм булып ҡалған яңғыҙ күршеһе Ришаттың баҡсаһын юллаңы, тағы бер һыйыр, бер кәбән бесән алды. Дөрөҫ, өйҙәге ирҙәр эшен, әлбиттә, Азамат башҡарҙы, ә ҡатыны уны туҡтауһыҙ ҡыуҙы, мыжыны, талап итте, өйрәтте. Ире ауылдаштарына утын, бесән, башҡаһын килтергән арала... аҡса йыйҙы.

Һуңғы йылдарҙа әсәһе биреште, сиргә һалышты, үҙенең яңғыҙлығынан яфаланды. Нисектер бер мәл район үҙәгендә йәшәгән һеңлекәше үҙенә алып ҡайтҡайны, йәнәһе лә, кешегә ваҡыт-ваҡыт йәшәү урынын алыштырып торорға кәрәк, яңы тәьҫораттар алыр... Әммә бер нисә көндән теге мыжый икән: «Һеҙҙең өсөнсө ҡаттағы фатирығыҙҙа бөтөнләй яңғыҙмын. Әтәс тауышы ла ишетелмәй, һыйыр ҙа мышнамай». Йәштәр байрам һымаҡ ҡабул иткән яңы тормош уға бөтөнләй ят һәм аңлайышһыҙ икән. Нишләһен, килтереп ташланы инде. Мәрйәм төҫлө телевизор алды ла уны инәй бүлмәһенә ултыртты: бәлки, күңелһеҙ уйҙарынан арыныр. Әммә ҡәйнәһе ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе: «Кәрәкмәй, ал бынан шайтан ҡумтаһын». Ә өйҙәре янынан шатыр-шотор үткән мотоциклды «шайтан арбаһы» тип атай...

Сирләп ятты, әммә ҡараулы булды, мунсаһыҙ түҙә алманы. Азамат күтәреп алып бара, Мәрйәм йыуындырғас, йәнә күтәреп алып ҡайта. Бөтөнләй насарайғас, Мәрйәм балаларын уның янына керетте. «Балалар, өләсәйегеҙ китә, хушлашып ҡалығыҙ», – тине. Кеше үлгәнен аңлаған өлкәнерәктәре өләсәләренең үлемен осраҡлы, күңелһеҙ хәл тип ҡараны, янында баҫып торҙолар ҙа сыҡтылар, Венера ғына ҡатып тора бирҙе.

– Өләсәй, һин йыраҡҡа китмә, тышта һыуыҡ, – тине шунан.

Әсәһен ерләгәс, Азамат уның бүлмәһенә инде, бөхтә йыйыштырылған караватын күргәс, аңына барып етте: әсәһе юҡ, бынан ары бер ҡасан да булмаясаҡ. Күҙҙәренә тығылған йәштәрен көскә тыйып, бәлки, тормошонда беренсе тапҡыр,

унының тураһында ныҡлап уйланды. Ә бит ул да ҡасандыр йәш ҡыҙ булған. Ихатала, саңлы урам буйлап яланаяҡ йүгереп йөрөгән, үләндә аунаған, унан еткән ҡыҙға әйләнгән, Ҡыҙҙар тауына күтәрелеп, әхирәттәре менән төрлө уйындар уйнаған, егеттәр тураһында хыялланған, ғәҙәти булмаған егеткә тормошҡа сығырға ниәтләнгән. Миңлебай Ҡарағужинға сыҡҡас, тимәк, хыял иткән кешеһе тап шул булған... Ауыр булһа ла, үҙ аллы тормоштары башланғас та, алдағыһы, моғайын да, тағы ла яҡшырыр, тип торғанда, һуғыш ҡупҡан. Берҙән-бер улын, «Быҙау»ын, ул нисек һаҡлаған, яҡлаған, үҙе ас йөрөһә лә, унының тамағын ҡайғыртҡан. Ә ул, Азамат, бер ҡасан да унының менән йәнәш ултырып иркенләп һөйләшмәне, йылы һүҙҙәр әйтмәне, иркәләмәне. Ваҡыты булманы, эш, өй, мал, балалар тине лә йүгерҙе. Алдағы тормошоноң иң яҡты, иң бәхетле мәлдәре ейән-ейәнсәрҙәре, бигерәк тә иң бәләкәйе – Венера булды.

Карауат янындағы бәләкәй өҫтәлдә өскә бөкләнгән һарғайған ҡағыҙ шәйләне – атаһының фронттан яҙған берҙән-бер хаты. Әсәһе унының үлеменә ғүмер буйы ышанманы, көттө, ошо хатын ҡат-ҡат уҡыны. Тимәк, китер алдынан да уҡыған һәм унының менән хушлашҡан.

Ерҙә эшләгән, тупраҡтан туҡланған күп балалы ғаиләлә был тормоштоң ауырлығы бала карауатта арҡыры ятҡанда түгел, буйға тартылып, әлеге карауатҡа буй ятҡас башлана. Ята ла өндәшмәй. Беренсе булып Данил тартылды һәм өндәшмәне. Өндәшмәүендә йәшерен ниәте булған икән – башҡа малайҙар һымаҡ, мотоциклға атланғыһы килә ине. Атаһы алып бирер ине, әсәһе – бер ҡасан да. Мәрйәм, унының был теләген белгәс тә, өҙә һуҡты:

– Юҡ, бер ҡасан да.` Һин унының менән ҡайҙа бараһың? Эшкәме, мәктәпкәме? Ҡара, юлдарҙа һеҙҙең һымаҡ күпме алйоттар йығылып имгәнә!

Данил ауылда дүрт класты тамамлағас, Мәрйәм уны Уралскиҙағы рус мәктәбенә бирҙе. Унда күпселектә башҡорттар йәшәһә лә, бер-береһе менән тик русса ғына һөйләшәләр ине. Рус мәктәбендә уҡыһа, тиңдәштәре менән русса аралашыр ҙа телде тиҙ өйрәнер һәм уға институтҡа кереү еңел булыр, тип иҫәпләне. «Минең балалар, башҡаларҙыҡы кеүек, ауылда тиреҫ кисеп йөрөмәҫ, эскегә лә бирелмәҫ», – тине. «Минең балалар, минең балалар». Унының балалары башҡаларҙыҡынан шәберәк уҡыны, унының балалары иң тәртиплеләре, иң талантлылары. Киләһе йылына Уральск мәктәбенә Камилды ла урынлаштырҙы. Унынһын – бер класс түбәнгә. Һәм Мәрйәмгә ҡыштарын егерме саҡрымдағы мәктәптәге иң яҡшы һәм иң талантлы балаларына аҙыҡ-түлек ташырға тура килде. «Минең балалар, минең балалар!» Оҙаҡламай уларға ауылдан кейеп килгән костюмдары һыймай башланы, ҡала балаһыныҡынан ҡайтышыраҡ та булып сыҡты. Яңы костюм, яңы аяҡ кейемдәре. Уларҙы, башҡаһын алыу өсөн байтаҡ аҡса талап ителде. Аҡсаны һыйырҙар «эшләне». Мәрйәм өйөнән алып килгән сепаратор бик тә ярап ҡалды (һуңынан электр менән эшләгәнен алдылар). Һөттө айыртып, Мәрйәм ҡаймағын, эремсеген ҡала баҙарына һатырға йөрөттө. Картуф уңмаған райондарҙан килеүселәргә картуф һаттылар. Күпселектә осраҡлы тап булған машиналарға эләгеп (ҡарсыҡтар янынан елдереп үткән водителдәр йәш һәм сибәр Мәрйәм янында туҡтай) йөрөнө.

Әлбиттә, ғаилә бюджетының күп өлөшөн трактор «тапты». Һуғыш балаһы Азамат, унының атаһы үҙенең ғүмерен илде фашистарҙан ҡотҡарып ҡалыу өсөн биргән һәм ейән-ейәнсәрҙәре ысын кешеләр булып үҫеүен, тормоштары матур булыуын теләгән, тип уйланы. Ул үҙе, дүрт класс ҡына бөткән кеше, ҡайҙа тыуған – шунда кәрәккән: әлбиттә, ерҙә эшләү өсөн улдарын ауылда ҡалдырыр ине. Әммә Мәрйәмгә ҡаршы төшөп буламы?.. «Минең балалар, минең балалар!»

Уральск мәктәбенә Йәмилде лә алып барғайнылар, тик малай ике ай ғына уҡыны ла ҡасып ҡайтты – урындағы бер малай менән һуғышҡан. Директорға саҡыртҡандар, күрәһең, теге әрләгәндер, ә был үсеккән, үпкәләгән, унан килеп, бәләкәйҙән ялҡаулығы ла бар ине, уҡыуы ла насар булғандыр. Ғәжәп, Мәрйәм уны әрләмәне, бөтә кешегә лә ғалим булырға тимәгән, фәндән башҡа ла эш табылыр әле, тине лә ҡуйҙы.

Венераның музыкаль һәләте барлығы беленде – телевизорҙан ишеткән йырҙарҙы килештереп ҡабатланы. Ике рәтле гармун һатып алдылар. Ата-әсәһен аптыратып, тиҙ генә уйнарға өйрәнеп, йәйҙәрен, көн һәйбәт торһа, гармунын күтәреп йорттары битләүендә ултырған тау башына күтәрелә лә, тирә-яҡты моңға тултырып, кинәнеп уйнарға тотона. Үҫә төшкәс, музыка мәктәбенә бирҙеләр һәм, уҡытыусының тәҡдиме буйынса, аккордеон алдылар. Йәшәүе туғандарында, Мәрйәмдең апаһында, булды. Һаман шул «минең балалар, минең балалар».

«Минең балалар» өлгөргәнлек аттестаты алып, тормоштоң текә һәм тайғаҡ юлдарына аяҡ баҫырға йыйынғас, Мәрйәмдең мәшәҡәт-хәстәре, борсолоуҙары тағы ла артты.

Мәктәпте миҙалға тамамлаған Данилға юғары уҡыу йортона кереүе ауыр булманы: зәңгәр күҙле, һары сәсле, һомғол егетте күргәс, аҙмыштарҙы хәл итә торған һәр уҡытыусы, быны алырға кәрәк, бынан кеше сығасаҡ, карьера эшләйәсәк, уны ҡатын-ҡыҙ ғына түгел, бергә эшләгән коллегалары ла яратасаҡ, дәүләткә файҙалы буласаҡ, кем белә, бәлки, ваҡыты еткәс, үҙе лә дәүләттең үҙе булып китер әле, тип уйлағандыр. Шулай Данил дәүләт университетының физика-математика факультеты студенты булып китте. Киләһе йылына Камил да шунда ынтылып ҡараны, әммә – кәүҙәгә бәләкәй, ҡарағусҡыл һәм сығынҡы яңаҡлы булғаны өсөн түгел – кәрәкле балл йыя алманы. Ауылға ҡайтҡыһы килмәне – үҙенең 11 класы һәм рус теле менән тиреҫ иҙһенме? Атай йортона әйләнеп ҡайтыу – уның өсөн хәсрәт, һөргөн! Ауыл мәктәптәре өсөн уҡытыусылар әҙерләүсе педагогия институтына еңел генә инеп ҡуйҙы.

Венера һомғол кәүҙәле, әсәһенә оҡшап сөм-ҡара ҡалын сәсле, ҙур зәңгәр күҙле сибәр ҡыҙға әйләнде. Аккордеонда өҙҙөрөп уйнай. Үҙенең иҫ киткес музыкаһы менән концерттарҙа ауыл халҡын шаҡ ҡатыра, егеттәрҙең башын әйләндерә. Урындағы бер рәссам уға: «Венера, һин бөйөк рәссам ҡылҡәләме өсөн тыуғанһың, йәл, ун туғыҙынсы быуатта тыумағанһың. Крамской һиңә ҡарап «Неизвестная»ны яҙыр ине», – тип һоҡланды. Һәм үҙе уның портретын яҙҙы. Уны мәрхүм өләсәһенең бүлмәһенә элеп ҡуйҙылар. Ул бүлмә хәҙер Венераныҡы ине.

Ялҡау мейеле Йәмилгә лә оянан осор ваҡыт етте. Армияға алдылар. Урта Азияла хеҙмәт итте. Хәрби формала төшкән фотоһүрәтен ебәрҙе, йәнәһе лә, беҙҙең кем икәнде белегеҙ.

Мәрйәм йәнә «минең балалар»ға ҡаймаҡ, май, һөт, ит, хатта картуфын да ташыны. Дөрөҫ, балалары йәйге каникулдарҙа ҡайтып, бесән, утын әҙерләшеүҙә ярҙамлашты. Венеранан башҡалары. Ул үҙенең аккардеоны менән Өфөгә талантлылар ғына ҡатнашҡан ниндәйҙер музыкаль фестивалгә юлланды ла... «юғалды». «Мәҙәниәт донъяһындағы бер эшмәкәр иғтибар иткән» тигән хәбәр килеп етте өйҙәренә. Хәбәр Азаматты көйөндөрҙө: ата-әсәнең ризалығынан тыш, ул ниңә улай ҡыланды һуң әле? Ә Мәрйәм: «Ул үҙемә оҡшаған, бер ҡасан да юғалмаясаҡ!» – тип кенә ҡуйҙы.

Курс артынан курсҡа күсеп, ҡала тормошона өйрәнә-күнегә, студенттар атаәсәһе янына ҡайтыуҙы йылдан-йыл һирәкләтә барҙы. Әммә, элеккесә, әсәләренең ризығына мохтажлыҡтары ҙур, шуға ла йәйге каникулдарында әҙгә булһа ла

ҡайтып, әлеге лә баяғы бесән әҙерләшеп китәләр ине. Уҡымышлы малайҙарының тамағын ҡарауҙан арыған Азамат бер мәл, әйҙә, бер йә ике һыйырҙы тапшырайыҡ йә һуйып һатайыҡ, беҙгә берәү ҙә етә бит, тип ауыҙ асып ҡарағайны ла, Мәрйәм ҡәтғи ҡаршы төштө: «Юҡ, һыйырҙарға теймәйбеҙ, малайҙар өйләнһәләр, ейән-ейәнсәрҙәр китә, уларға ауыл һөтө, ҡаймағы кәрәк, баҡсаны ғына әҙерәк ҡыҫҡартайыҡ». Азамат ҡатынына ҡаршы төшә алманы...

Азаматтың яй аңы янынан ваҡыт ифрат ҙур тиҙлектә уҙа, ул үтеп барған тормошондағы ваҡиғаларҙың мәғәнәһен һәм асылын аңлап-төшөнөп тә өлгөрә алмай. Әле генә мәктәпте тамамлап, кисә ярым ас йөрөгән студенттарҙың бөгөн дипломдарын яҡлап, эшкә төшөүҙәренә аптыраны. Шундай уҡ тиҙлектә Данил аспирантураһын осланы, үҙенең университетында бер йыл уҡытты, ни аралалыр профессор булып алды, һуңынан ректор вазифаһына ла үрләне. Иң мөһиме, студенттарҙың дөйөм ятағынан сығып, фатир алды һәм өйләнде. Ҡатыны менән ауылына ла ҡайтҡыланы. Мәрйәмгә килен оҡшаманы: йөҙө тутыҡ ҡара, кәүҙәгә бәләкәй. Ә бына өҫтөнә кейгәне затлы, үҙенән хушбуй еҫе аңҡып тора. Һуңынан белделәр: бик абруйлы бер кешенең ҡыҙы икән.

Камил үҙ аллы тормошон бигүк уңышлы башламаны. Пединститутты тамамлағас, интернатҡа урынлашты ла үҙе һымаҡ туңбаштарға рус теле һәм әҙәбиәтен уҡытты. Һәйбәт уҡытты, сөнки әҙәбиәтте ярата ине, шиғырҙар ҙа яҙҙы. Уҡыусылары уны ихтирам итте, ә бына Данил ағаһы уның шиғырҙарын тривиаль сафсата тип иҫәпләне. «Һинең фәнең – тере ҡалыу өсөн кәрәк һәм дрель һымаҡ инструмент ҡына. Библияны уҡы: тәүҙә һүҙ булған, һүҙ – Аллаһы Тәғәлә», – тип яуапланы уға Камил. Фатир мәсьәләһе лә ауыр ине, үҙенең уҡыусылары менән йәнәш интернатта йәшәне. Бындай хәлдә өйләнеү, етмәһә, мөхәббәтһеҙ өйләнеү хаҡында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел ине...

Зәңгәр күҙле Венера бөтәһен дә уҙҙырҙы. Бер нисә йыл аккордеонда уйнап йөрөнө, ниндәйҙер музыкаль белем алды һәм – бына нисек! – мәҙәниәт министры урынбаҫары креслоһына барып ултырҙы. «Минең балалар!»

Нисектер бер ваҡыт Камил һеңлеһенең мәҙәниәт министрлығына барҙы: бәлки, ағаһына фатир алыуҙа ярҙам итә алыр, ни тиһәң дә, ҙур түрә бит. Венера уны телефондар, папкалар, ҡағыҙҙар өйөлгән өҫтәл артынан ҡалҡынмай ғына ҡаршыланы ла, ағаһы йомошон әйткәс: «Беҙ фатир мәсьәләләре менән шөғөлләнмәйбеҙ», – тине. Камил һеңлеһе кабинетынан битенә төкөрөлгән кеше һымаҡ сығып тайҙы.

Ә өсөнсө улдары, Йәмил, шыйыҡ мейеле бәләкәйе, армияла хеҙмәт итте лә, үзбәк ҡыҙына өйләнеп, Ташкентта тороп ҡалды һәм былай ҙа күп халыҡлы милләттең һанын арттырыу буйынса ең һыҙғанып эшкә тотондо.

...Бер көн өйөндә бәләкәй балаларҙың һөйләшеүен, көлөүен ишетеп, Азамат аптырап ҡалды. Уйланып ултыра торғас, аңғарҙы: ейәндәре ләһә. Ләкин ҡайһы улдарының балалары икәнен һис айыра алманы. Һәр иртәлә, ул малын көтөүгә ҡыуғанда, сепаратор геүләп әлеге бала-сағаға ҡаймаҡ айырта. Ҡаймаҡ, ҡоймаҡ, башҡа тәм-том менән иртәнге сәйҙе эскәндән һуң, ҡыҙ бала – әллә Данилдыҡы, әллә Венераныҡы – уға былай тине:

– Олатай, мине арҡаңа атландырып йөрөт!

«Олатай» һүҙенән тамам иреп, Азамат оло ауырлыҡ менән иҙәнгә тубыҡланды, бәләкәй тере йомғаҡ, үҙенең малай сағында колхоздың ҡарт алашаһына атланып уны ҡыуған һымаҡ, «но-о-о» тип ҡыуырға, аяҡтары менән ҡабырғаларына тибергә тотондо.

Тәүҙә трактор ватылды – иҫкергән тимер тояҡтарын тарбайтып, ҡарт тимер ат йығылды. Унан Азаматҡа 80 йәш тулды. Ул үҙенең тыуған көндәренә битараф ине һәм үҙенең был донъяға тыуыуы менән ата-әсәһен ҡасан шатландырғанын да онотҡайны. Әммә был турала Мәрйәм бик яҡшы белә һәм йылдың-йылы Азаматтың хәтеренә төшөрөп тора.

Нисә йәш тулғанын белгәс, Азаматтың иҫе-аҡылы китте – быға нисек етә алды икән һуң? Оҙаҡламай был йәштәге кеше ауылда бер ул ғына ҡалғанлығы асыҡланды. Ә ҡайҙа булып бөткән һуң үҙе һымаҡ һуғыш балалары, тиңдәштәре? Әбделхәй, Ришат, Вәсим? Нисек аслыҡтан ҡырҡылғайнылар улар теге ҡышты? Яҙ етеп, баҫыуҙарҙа ҡар иреп бөткәс, улар дүртәүләп көҙҙән ятып ҡалған башаҡтарҙы йыйғайны. Ошо юҡ ҡына бөртөктәрҙе әсәһе ҡул тирмәнендә тартты ла уларға өйрә бешерҙе. Тиңдәштәре етмешкә лә етә алмай үлде. Азамат уларҙың йәшен эсмәгәнгә, тартмағанға уҙманы – үлергә ваҡыты булманы.

Уның 80 йәшенә балалары ҡайтты: Данил ҡатыны һәм балаһы менән, Венера ире һәм ҡыҙы менән затлы сит ил машинаһында килеп төштөләр. Камил – рейс автобусында һәм яңғыҙы. Йәмил ҡотлап телеграмма ғына һуҡҡан. Өй, ихата шау-шыуға, байрам кәйефенә күмелде. Мәрйәм балалары, ейән-ейәнсәрҙәренә шат – йөҙөнән ҡәнәғәт ғорурлыҡ, бәхетле йылмайыу китмәне. Венера – зауыҡлы һәм мәҙәниле, сәсенә һоҡланғыс прическа эшләткән. Иренең, ят исемле Заҡуандың, өндәшмәҫ әфәнденең, йөҙөндә шундай сағылыш – әйтерһең дә, ул һыйырҙар, тиреҫ аңҡыған крәҫтиән ихатаһына яңылыш килеп эләккән. Венераның ҡыҙының исеме Эльза, Данилдың улына шулай уҡ башҡортса булмаған ят исем ҡушҡандар – Марсель.

Аш-һыу мул ине, Данил әйтеүенсә, «әсәйҙең өҫтәле һәр саҡ ресторандыҡы һымаҡ». Әллә күпме бешерелгән, ҡыҙҙырылған тәғәмдәрҙән башҡа – ҡаҙылыҡ, эсемлектәрҙән – ҡымыҙ. Париждың үҙенән Данил алып ҡайтҡан коньякты эстеләр. 80 йәшлек атайға оҙон ғүмер, һаулыҡ теләп тостар әйттеләр. Баҡһаң, балаларының барыһы ла атайҙарын ярата һәм ысын кешеләр итеп тәрбиәләгәне өсөн уға сикһеҙ рәхмәтле икән. Заҡуан бик етди итеп нимәлер мөгөрҙәне. Венера үҙенең ата-әсәһе менән ғорурланыуын белдерҙе, бер ҙә арттырып әйтмәйем, улар икеһе лә изге йәндәр, тине хатта. Камил үҙен йәштән эшкә өйрәтеүе һәм китапҡа ылыҡтырыуы өсөн рәхмәт әйтте.

Сит ил коньягын эсеп телдәре асылғас ни, ауылда үҫкән бала, үҫмер саҡтарын хәтерләнеләр, көлөштөләр. Данилдың ҡатыны менән Заҡуан ғына дөйөм хәбәргә ҡушылманы. Уныһы йыш ҡына тартырға сыҡты. Малайҙары һәм ҡыҙы, ғәҙәттә, ата-әсәһе алдында үҙҙәренең бала саҡ телендә һөйләште, ә бына күрше бүлмәлә уйнаусы балалары өҫтәл янына йүгерешеп сыҡһа, рус теленә күстеләр.

Әлеге һымаҡ эскән саҡта Данил, ғәҙәттә, шаярып, ҡустыһына бәйләнә. Әле лә шулайтты.

– Камил, һин миңә суртанды ҡасан кире ҡайтараһың?

Нисектер бер ваҡыт Данил спинингҡа ҙур ғына суртан эләктергәйне. Ярға ырғытҡан балыҡ ҡомда һикергеләп ята. Ҡармаҡтан ысҡындырҙы ла Данил ҡустыһына: «Һыуға төшөрөп йыу», – тине. Камил балыҡты тотоп йылғаға төштө, йәнәһе, ағай ҡушҡас йыуа, әммә балыҡ тыпырсынды ла, лайлалы нәмә ни, ҡулынан ысҡынып һыуға төштө лә йөҙҙө лә китте. «Эй, үҙең тота белмәйһең, тотолғанды ебәреп тораһың, аңра», – тип әрләне Данил ҡустыһын.

– Бына беҙҙең һаҫыған йылғала балыҡ йәнә үрсеһә, тотормон да кире ҡайтарырмын, – тип яуапланы Камил. – Башты тамам ҡатырҙың шул балығың менән!

Торараҡ Камил үҙе Венераға өндәште:

– Өләсәй үлергә ятҡанда һин уның менән нисек хушлашҡаныңды хәтерләйһеңме? Өләсәй, йыраҡҡа китмә, тышта һыуыҡ, тинең.

– Әйттеләр, мин үҙем иҫләмәйем.

Балаларының һөйләшеүенә Мәрйәм ҡушылды:

– Ҡайҙан иҫләһен? Бәләкәй ине бит. Кеше үлгәнен ул аңламаған.

Эскәс кенә тотоу ғәҙәте булған Камил Венераны ирештереүҙән туҡтаманы.

– Министерстволағы кабинетыңа килгәнде лә онотҡанһыңдыр әле?

– Шунан?

– «Беҙ фатир мәсьәләләре менән шөғөлләнмәйбеҙ», имеш, – тип үсекләне уны Камил, ҡыланып.

– Шунан.

– Бер туған һеңлекәш! Исмаһам, креслоңдан ҡалҡыныр йә ултырырға тәҡдим итер инең, күрешергә ҡулыңды һонһаң да уҡаң ҡойолмаҫ ине. Беҙ ундай ваҡ эштәр менән булашмайбыҙ, имеш. Һеҙҙең унда ни менән шөғөлләнгәнгеҙҙе, әйтерһең, мин белмәйем.

– Әсәй, был ни тип миңә бәйләнә ул, ә?

Венера һикереп торҙо ла үҙенең бүлмәһенә ыңғайланы. Заҡуан, ҡара көйөп, уның артынан инде.

Азамат балаларының хәбәрен тыңлап ултыра һәм ғәҙәтенсә оялсан ғына йылмая, үҙе былай тип уйлай: балалары белемле, уҡып сыҡтылар, бөгөн әрләшһәләр ҙә, иртәгә килешер-ярашырҙар әле...

Мәрйәм улына ябырылды:

– Һин, иҫерек баш, нишләп һеңлеңде ҡыйырһытаһың, ә? Бар, ғәфү үтен. Һеҙ бит бер туғандар.

– Юҡ! Ниндәйҙер министерша алдында мин нишләп ғәфү үтенергә тейеш? – тип яуапланы улы.

– Ай Алла, ай Алла, – тине Мәрйәм. – Һеҙ барығыҙ ҙа минең ҡан, мин барығыҙҙы ла берҙәй яратам. Атайығыҙ менән 40 йыл бергә йәшәнек, бер-беребеҙгә бер бөртөк насар һүҙ әйтмәнек. Татыу булығыҙ, бер-берегеҙҙе яратығыҙ. Ниңә улай һүҙләшеп киттегеҙ әле?

Бер аҙ бер-береһенән тартынышып ултырғас, балалар ата-әсәһенә бигүк аңлашылмаған үҙ хәбәрҙәрен һөйләргә тотоноп киттеләр. Данил Францияла булыуын һөйләне, унда ниндәйҙер бейек башня бар икән, шунда менһәң, бөтә Париж ус төбөндәгеләй күренеп ята, ти. Унан ниндәйҙер бер ҡуллы Венера хаҡында ла һүҙ ҡуҙғатты. Азамат үҙенең Венера ҡыҙы хаҡында уйланы. Эйе, ауылда ла Венера исемле ике ҡыҙ бар, баҡһаң, Франция һынлы Францияла ла шул исемде йөрөткән ҡыҙ бар, имеш. Етмәһә, зәғиф, имеш. Шунан ҡапыл ғына һорап ҡуйҙы:

– Картуфтарын ҡаҙып алғандармы һуң?

Данил бер аҙ өндәшмәй ултырҙы ла ҡәнәғәтһеҙ генә әйтеп ҡуйҙы:

– Атай, унда хәҙер виноград йыйыу осоро.

Азамат ул виноград-йөҙөм тигәндәрен ҡартайып килгәндә генә тәмләне. Тәмле, тик барыбер ҙә ер еләге һымаҡ түгел. Ҡатын-ҡыҙ ер еләге ҡайнатҡанда бөтә ауылға тәмле еҫ тарала.

Иртәгәһенә китергә йыйынғас, Камил, ул хәҙер айныҡ, һеңлеһен ҡосаҡланы:

– Венера һеңлекәш, үпкәләмә. Ағайыңдан йыраҡ китмә, унда һыуыҡ.

Венера ҡапыл иларға тотондо...

Мәрйәм балалары менән тыныс хушлашты, ейән-ейәнсәрҙәре менән ихлас,

күңелле һөйләште, барыһына ла хәйерле юл теләне, тик, оҙатҡас, кинәт шиңде, өндәшмәҫ-һөйләшмәҫ булды. Йөрөй торғас, бүләктәре иҫенә төштө. Данил атаһына ҡыйбатлы костюм, ҡул сәғәте, әсәһенә сейә төҫөндәге яулыҡ бүләк иткән икән. Ә Камил – тышы алтын менән ялатылған Ҡөрьән. Аллаһыҙ осорҙа тыуып үҫкән Азамат дингә бигүк ышанманы, әммә Алланың барлығын барыбер ҙә һиҙә, тоя ине. Тормошто бер аҡыллы баш уйлап тапҡан, барлыҡҡа килтергән бит, тимәк, ул бар. Шуға ла улы алып ҡайтҡан китап уның күңеленә хуш килде. Ә костюм уға хәҙер нимәгә? Теге саҡтарҙа булһа, Шәриптең ҡыҙы уны йолҡош тип иҫәпләй алмаҫ ине лә. Ә сәғәт? Ваҡытты белер өсөнмө? Уға ваҡыт шулай уҡ кәрәкмәй. Әтәс ваҡытты белә һәм ҡысҡырғанында бер ҡасан да яңылышмай.

Мәрйәм ирен кейендерә, һылай, һыйпай башланы. Венера алып ҡайтҡан күлдәкте, француз костюмын кейҙерҙе, матур галстук бәйләне. Азамат шифоньерҙың ҙур көҙгөһө алдына килеп баҫты: костюм һәм күлдәк яҡаһынан сырыш тиреле, аҡ оҙон сәсле, ҡырылмаған оҙон муйыны һерәйеп тора. Ҡарт йөҙөнә ҡарауы ла ҡурҡыныс.

– Ниңә кәрәк миңә был костюм, ҡайҙа кейеп барам? – тип һораны ҡарт.

– Ҡайҙа, тисе, ҡунаҡҡа кейеп бараһың.

– Ҡарт кешегә бындай костюм менән йөрөүе оят. Алыҫҡараҡ алып ҡуй. Ейән кейер, ваҡыты еткәс.

– Ғүмер буйы майға батҡан тракторист булып йөрөнөң дә инде былай ҙа, һаман да шуны ҡыумаҡсыһыңмы?

Балалары киткәс, өйҙә нисектер буш, күңелһеҙ булып ҡалды. Ейән-ейәнсәрҙәренең көлөү, шаярыу тауыштары тынғас, әйтерһең дә, тормош уларға эйәреп китеп барҙы. Венераның бүлмәһендәге портреты, комод өҫтөндә ултырған иҫке гармуны ғына элекке тормошто хәтерләтә ине...

Азамат ғүмеренең һуңғы ун йылы башланды. Ул ошо ун йыл эсендәге ҡайһылыр йылда Аллаһы Тәғәлә тарафынан уның тормошоноң законлы аҙағы еткереләсәк. Ул мәл, бәлки, янында кесе ейәне йәки уның улы торасаҡ һәм әйтәсәк: «Олатай йыраҡ китмә, урамда һыуыҡ». Ҡайһылай ҙа тиҙ үтте тормошо! Һиҙмәй-тоймай ҙа ҡалды бит. Ул йылдар, айҙар, көндәр ҡайҙа булды һуң? Нимәне генә хәтеренә төшөрөргә тырышмаһын, тишек хәтерендә теге йәки был ваҡиға ялт итеп ҡала ла юғала. Яҡшыһы ла, насары ла, эреһе лә, ваҡы ла. Ниндәйҙер йылда боҙ яуҙы, картуф һабаҡтарын, емеш-еләкте һуғып бөтөрҙө. Йәмил ауыл бала-сағаһы артынан йылғаға тиклем имгәкләп барған да уларға эйәреп йылғаға төшкән һәм саҡ батманы. Ниндәйҙер йылда ҡот осҡос ҡоролоҡ килде, малды ашатыр өсөн ҡайын миндектәре бәйләнеләр. Литванан һалам ташынылар һәм һалам менән ҡуңыҙ алып ҡайттылар. Хәҙер бына нисәмә йыл шул хәшәрәттән һис ҡотола алмайҙар. Яңғыҙ көн иткән күршеһе үлде. Йөрәгенә йәбешкәс, өйөнән ихатаға сығырға ынтылған, әммә, сығып етә алмай, тупһаһында йән биргән. Ә тормош уның эргәһенән үтеп бара, үтеп бара. Әйтерһең, ул бөтөнләй булмаған да. Нишләйһең, яҙмышың – өлөшөңә төшкән көмөшөң. Төрмәгә йәки һөргөнгә эләкмәгәнеңә рәхмәт әйт тә ҡәнәғәт булып көн итеп тик ят...

Шулай ҙа оҙон был ғүмерҙә ниндәйҙер төп нәмә, ниндәйҙер шатлыҡ, ҡәнәғәтлек, эшләнгән эш булырға тейештер бит. Тик ул ҙур нәмәнең конкрет ҡына нимә икәненә уның иҫкергән аңы һис яуап таба алманы. Ул йыш ҡына өйө янындағы тауға күтәрелә лә, йәлпәк таш-креслоға ултырып (бында ҡасандыр Венераһы ултырып гармун тарта торғайны), тауҙарға ҡарап тәрән уйҙарға сума. Ул ғүмер буйы тауҙарға ҡарарға яратты. Ә ҡартайғас, Урал һыртына көндәр буйы ҡарай ала ине. Асыҡ көндәрҙә Ирәмәлдең дә түбәһе күренә. Ошо таш тауҙарға

уны үҙенә саҡырған, тартҡан, ылыҡтырған нимәлер бар һымаҡ. Ҡыҙыҡһынып, барғыһы ла килеп ҡуя. Йәш сағы булып, аяҡтары еңел йөрөһә, китер ҙә ине...

Бер көн уның башына ҡапыл ғәжәп уй килде: ә бит тормошондағы иң мөһиме, иң шатлыҡлыһы һәм әһәмиәтлеһе тегендә, тау битендә, булған. Ҡасандыр, йәш сағында, Ирәмәлгә күтәрелеп, ниндәйҙер Колчактың алтынын эҙләп йөрөгәйне. Йөрөй торғас, таҙа тау йылғаһынан һыу алып тороусы, йыуан һәм оҙон толомдары осона ҙур көмөш тәңкәләр таҡҡан, зәңгәр күҙле сибәр ҡыҙҙы осратты. Күреү менән Азамат уға ғашиҡ булды, уға иҫен-аҡылын юйған Мәжнүн һымаҡ ҡараны, ә бына янына барырға оялды. Ғөмүмән, ул сибәр ҡатын-ҡыҙҙарҙан ҡурҡа торғайны, сөнки ярлы булды. Әгәр эҙләгән ул алтынды тапһа, донъялағы иң һылыу ҡыҙҙарҙан да тартынмай бара алыр ине. Сибәр тау ҡыҙына өйләнер ҙә, йәшлегендә хыял иткәнсә, иң бәхетле ир булып йәшәр ине. Ә, былай, бәхете эргәһенән тракторында үтеп китте. Янына барманы, һүҙ ҡушманы һәм, йөрәгендә үкенес тойғолары йөрөтөп, Азамат ауылына ҡайтып китте лә Ирәмәлгә бүтән күтәрелмәне. Ә хәҙер, тауға үҙенең ҡарт күҙҙәре менән бағып ултырғанда, әлеге ҡыҙ ҡапҡанан килеп сыҡҡанын, ике биҙрә элгән көйәнтәләрен яурындарына һалып йылғаға төшкәнен күргәндәй була. Ошо күренеште күҙе алдында мөмкин тиклем оҙаҡҡараҡ һаҡларға тырышып, тауҙан күҙен алмай таш креслола ултыра ла ултыра. Ямғыр һибәләп, Ирәмәл болоттарға төрөнһә лә ултыра. Ҡатыны сығып, әрләй-әрләй уны өйөнә эйәртеп алып ҡайтҡансы ултыра.

– Кеше көлдөрөп, унда нимә тип ултыраһың? Быны Мәрйәме ҡыуып сығарған йә ашатмай, тип уйларҙар әле. Өйҙә ултыр.

Бер ваҡыт уның янына бәләкәс кеше килде – әллә Вененараның ауыл һөтө менән ҡаймағына килтереп ташланған төпсөк ейәне, әллә ейәненең улы. Ул олатаһы ҡараған тау яғына баҡты ла нәҙек кенә тауыш менән һораны:

– Олатай, унда нимә ҡарайһың?

Тауышҡа ҡарттың күңеле нескәреп китте, әммә яуап таба алманы, балаға йәлләп ҡараны.

Бер ваҡыт ҡатынынан былай тип һораны:

– Һин берәй ҡасан Ирәмәлдә булғаның бармы?

Ҡатыны уға аптырап ҡараны, шунан ирҙәрсә ҡалын тауыш менән ҡәтғи итеп:

– Мин шунда тыуғанмын, – тип яуапланы.

Уны аңламай, ҡарт хәбәрен дауам итте:

– Унда тап-таҙа йылға аға, төбөндә балыҡтар уйнай. Йылғаға бер ҡыҙ һыуға килә, күҙҙәре зәп-зәңгәр. Толомдарында көмөш тәңкәләр. Һин шул ҡыҙҙы миңә алып кил әле.

– Нимәгә ул һиңә?

– Алып кил, тим, миңә шул ҡыҙ кәрәк, – тип ныҡышты ҡарт.

– Ай Алла, – аптырап көрһөндө ҡатыны. – Бөтөнләй аҡылдан яҙа. Шул ҡыҙ бит мин, Мәрйәм. Алдыңда торам.

Азамат Мәрйәмгә күтәрелеп ҡараны ла уның ҡалын кәүҙәһен, ике ҡатлы эйәген, ҡыҙарған тулы йөҙөн күрҙе. Күҙҙәре йәшкелт-һоро, сәстәре ҡыҫҡа һәм һирәк.

Азаматҡа дымлы ҡарашы менән ят кеше күҙҙәре ҡарай ине...

Әмир ӘМИНЕВ тәржемәһе.

Әлфис
ҒАЯЗОВ

Сәсрәтке хәсрәте

Поэма

«Ни хәл, туған! Нисә йылдар
Осрашҡан юҡ, һине күргән юҡ.
«Эш!» тип сәбәбыҙ ҙа, бер-береңде
Һорашҡан юҡ, хатта белгән юҡ...»

Миңнулла дуҫ?!.
Нисек эҙләп тапҡан?
Йәшлектән бит килде был тауыш.
Күңел аша үтте яҙғы ташҡын,
Үҙәнендә ҡалды моң-һағыш.

Килештек беҙ ҡайтып әйләнергә
Күсектермәй
йәшлек иленә.
Ана, офоҡтарҙы тоташтырып,
Алға әйҙәп, йәйғор эленгән.

Ялан буйлап дала еле
Эҫе бөркөп ерҙән йүгерә,
Күрер күҙгә туҡталырлыҡ
Бер ни ҙә юҡ.
Бары өйөрмә.

Әлфис Ғаязов (1956) – Асҡын районы Иҫке Ҡаҙансы ауылынан. Бөрө пединститутын тамамлай. Педагогия фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры. Башҡортостан һәм Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы.

Тау-тау ағас тамырынан
Өҙөп-йолҡоп ерғә өйөлгән,
Бер ғәйепһеҙ,
Ғәҙелһеҙгә
Ҡыуылғандар төҫлө иленән...

Ҡоштар тынған.
Һандуғастар
Осоп киткән кеҫек был яҡтан.
Бар тередең ҡотон алып
Ҡара болот йөрөй йыраҡта.
Тынып ҡалған Танып ярын
Ҡамыш баҫҡан, һыуы һайыҡҡан.
Беҙ килгәнгә асыуланып
Шырҡылданы
Бары һайыҫҡан...

Ватыҡ торба...
Тутыҡ тимер-томор...
Аралашҡан ҡыҙыл мәте менән
Дегәнәктә, кесерткән аҫтына
Кемдең гонаһтары йәшерелгән?

***

Һүҙ башларға ҡыймай торам,
Ниндәй уйҙар баштан үткәндер.
Тынлыҡ боҙоп өндәшергә
Кем беренсе баҙнат иткәндер, —

Хәтерҙә юҡ.
Тик шуныһы:
Ел һыҙғырҙы, Танып туланы.
Гөл-сәскәле туғайҙы күҙаллап,
Үкһеп-ярһып хәтер иланы...

***

Йәй уртаһы.
Малай-шалай
Атҡа менеп бесән тарттыра.
Болондарҙа шау-шыу, шатлыҡ
Изге эшкә, алға саҡыра.

Малайҙарға нимә?
Уларға бит
Ололарса булыу — ҙур уңыш.
Юҡтан ғына танау күкте тишә,
Әйтһә берәү: «Вәт, был — бик тырыш!»

Ололарҙың һүҙен тыңлау,
Улар маҡтауына ирешеү —
Беҙҙең өсөн иң ҙур шатлыҡ, —
Ололарса булыу емеше.

Борғоланып, тәрән Танып
Йыраҡ ҡыуа етеҙ һыуҙарын.
Ҡаршы яҡҡа йөҙөп сығыу —
Малай халҡы өсөн ҡыуаныс.

Бындағылай хозурлыҡты
Башҡа ерҙә кемдәр табырҙар;
Ҡоштар моңо, сәскәләре,
Алъяпҡыслы ап-аҡ ҡайындар...

Сылтыр шишмә алһыҙ-ялһыҙ
Дым тарата эҫе һауаға,
Изге һыуын был шишмәнең
Алып китә халыҡ дауаға.

Урманында еләк еҫе
Иҫертерлек нескә күңелде.
Йәндәр бында ял итәлер, —
Бында аҡлыҡ, бында еңеллек!

Ә болондар!..
Улар өсәү,
Сәсрәтке тип исем бирелгән.
Йәшәү йыры, хеҙмәт йыры
Болондарҙа бергә үрелгән.

Яуға киткән ир-егеттәр
Болондарҙы үйлап һағынған,
Иҫән-имен ҡайтырмын тип,
Ағастарҙа тамға ҡалдырған...

Ул болондар халыҡ өсөн
Бесәнлектәр генә булмаған,
Үҫеп килгән малайҙар ҙа
Егетлекте шунда аңлаған.

Әсәйҙәрҙән өлгө алып,
Сәсрәткелә ҡыҙҙар буй еткән,
Яңғыратып болондарҙы,
Ҡыңғырауҙар менән туй үткән.

Был болондар менән беҙҙә
Матур иҫтәлектәр бәйләнгән.
Халҡыбыҙҙың шатлыҡтары,
Әсе яҙмыштары төйнәлгән.

***

Ауылдаштар...
Ҡуҙ алдында
Билен ҡыҫып быуған ағайҙар.
Алтын кәңәш бирә кеҫек
Аҡ һаҡаллы изге бабайҙар.

Донъя тотоп килә торған
Ир уртаһы ғорур атайҙар!
Улар биргән аҡыл дәрестәре
Бөгөн дә бит әле ҡартаймай.

Ихтирамға, хөрмәт-данға
Лайыҡ булған күркәм әсәйҙәр!
Әле булһа изгелеккә,
Игелеккә беҙҙе өндәйҙәр.

Ә апайҙар!
Һоҡланырлыҡ,
Ут уйната уңған ҡулдары!
Улар менән бергә эшләү
Дәртләндерә ауыл улдарын.

Ә ҡыҙҙары!
Эх, ҡыҙҙары...
Әйтерһең дә, улар — күбәләк!
Осҡон оса күҙҙәренән,
Ҡулдарында оса күбәләр.

***

Хәтер, хәтер...
Ҡыҙҙар тигәс,
Кемдәрҙелер иҫкә төшөрә.
Осрашырға өндәшкәндәй
Хыялында йөҙгән кешегә.

Бына мин дә,
Хыялый ҡош,
Йәшлегемдән һине һағынам.
Араларҙы юҡҡа тиңләп,
Ҡанаттарын йөрәк ҡағына.

Юҡтыр инде.
Ул сибәр ҡыҙ
Башҡа менән бәхет бүлеште,
Минһеҙ бәхет юллауына
Аҡ көнсөллөк менән көнләштем.

Ғәйеп, бәлки, үҙемдәлер,
Булманы шул миндә әрһеҙлек!
Әрлеләрҙе туҡтатманым —
Шул түгелме минең ғәмһеҙлек?

Ә шулай ҙа...
Бер мәртәбә
Ҡыҙҙар өсөн мин дә һуғыштым.
Күм-күк булыу менәнме ни —
Бер файҙаһыҙ булды алышым.

Шул йылдарҙа булды "һуғыш",
Шул уҡ шишмә, шул уҡ урында,
Шул уҡ бесән өҫтө, өмә,
Эшләгәндә шул уҡ болонда.

***

Миңнулла дуҫ менән икәүләшеп
Бер сибәрҙе күҙләп йөрөйбөҙ.
Форсат сыҡҡан һайын шунда
Үҙебеҙгә тынғы бирмәйбеҙ.

Ә ул ҡыҙый...
Ҡыҙ ғынамы!
Гәүһәрҙәрҙең ниндәй гәүһәре!
Аңламаҫһың бер нәмәне:
Беҙгә ҡарамай ҙа, ҡәһәрең!

Ул ни беҙгә бер ҡараһа,
Әҙер әллә ҡайҙа китергә,
Туфан һыуы — һыу ҙа түгел,
Беҙ ризабыҙ уны кисергә.

Әллә ошо хәлдәр, әллә
Башҡа нәмә мине ҡоторттo:
Тыя алмай үҙ-үҙемде,
Миңнуллаға берҙе ултырттым.

Ҡитте һуғыш...
Йәш әтәстәй,

Икебеҙ ҙә килеп ҡунабыҙ,
Аңлашыу юҡ, юҡ килешеү,
Ырылдашып
Ҡанға туҙабыҙ...

Кем айырҙы, ниҙәр менән,
Бөттө алыш — үстә юҡ инде.
Кемгә ниндәй өлөш төштө,
Кем ғәйепле — аҙаҡ төшөндөк.

Ҡолаҡҡа ныҡ киртеп ҡуйҙыҡ
Берҙәм үҫеп киткән малайҙар:
Оло эште ташлап, ваҡты —
Дөрөҫ түгел йөрөү дауайлап.

***

Етмешенсе йылдар.
Һәммә ерҙә
Гөрләп бара ғөмүм төҙөлөш.
Беҙҙекеләр Йыһан яулай,
Сүллектәрҙә үҫер гөл, емеш.

Хозурлана илем, алға бара,
Ҙур аҙымдар яһап ашыға.
Күрмәгәнбеҙ, белмәгәнбеҙ —
Кәртәләре булған ҡаршыла.

***

Һәүетемсә генә йәшәгәндә
Үҙгәрештәр килде дауылдай:
Күҙ күрмәгән машиналар,
Ят техника тулды ауылға.

Ниңә икән?
Башта бер кем
Белмәй ине быны сәбәбен.
Бер аҙҙан һуң аңлаттылар
Килгән төҙөүселәр үсәбен:

Маҡсат булып алда тора
Һаҙлыҡтарҙың һыуын ҡыуҙырыу,
Культуралы көтөүлектәр
Системаһын беҙҙә булдырыу.

Быңдай эштәр — ҙур табыш ул,
Алға китер ауыл тормошо,

Һәм ошолай беҙ еңербеҙ
Үҙгәреүсән һауа торошон...

Бындай эштәр — алға китеш,
Партиянан килгән хәстәрлек.
Тағы ниндәй дәлил кәрәк?
Быныһы ла арыу, етерлек.

Болондармы?
Ҡайһылары
Дусар икән ундай яҙмышҡа?
Сәсрәткеме? Айырма юҡ,
Әҙер торғас халыҡ алышҡа.

Аңлай алмай ҡалдыҡ башта
Көтөүлектең ниндәй булаһын.
Ни әйтерһең,
Еңел икән
Алдауҙары әҙәм балаһын.

Күсеп килгән колоннаның
Етәксеһе булған Миңнул дуҫ.
Беҙҙең малайҙар ҙа кеше булған, —
Әйҙә, ҡаты итеп ҡулын ҡыҫ.

Нисә аҙна эш гөрләне,
Нисә аҙна халыҡ таң ҡала:
Мәңгелек һаҙ аша йырып,
Тракторҙар һыуға юл һала!

Ул ваҡытта ҡанатланып
Ҡаршы алдыҡ прогресс яҙҙарын.
Кем уйлаған — беҙҙе көткән
Күңел өшөтөрлөк боҙҙары...

***

Кем беренсе күргән-белгән —
Хәтерҙә юҡ инде, юғалған.
Эш бөтөрөп һаҙҙа, Миңнул
Сәсрәткегә табан юл алған.

Миңнул ғына түгел инде —
Саң күтәреп барған юлынан,
Йәшел сиҙәм өҫтөн йыртып,
Колоннаһы бара яландан.

Бына шунда ғына аҡыл
Эш асылын беҙгә еткерҙе,
Тиҙ арала йыйылышып,
Сәсрәткегә табан йүгерҙек.

Беҙ әллә ни күп тә түгел,
Булһа булды һигеҙ-ун кеше.
Йәнһеҙлеккә ҡаршы сығыу —
Беҙгә төшкән яҙмыш өлөшө.

Ул саҡтарҙа кемдәр белгән
Был эштәрҙең нисек бөтөрөн.
Тик —
Барыбер сығыр инек,
Белһәк тә беҙ Себер китәһен.

Фазыл болононда булды
Был хәлдәрҙең ахыр киҫәге.
Ҡаршы баҫтыҡ техникаға,
Бер уйлаһаң —
Ниндәй иҫәрлек!

Партияның изге сәйәсәтен
Һанға һуҡмағанбыҙ, беҙ — наҙан.
Сәцит власына илле йыл бит! —
Был контралар килгән ҡайҙарҙан?

Хөсни партком,
Барын уҙып,
«Принципиаль» ҡараш ташланы,
Күкрәк һуғып, ут уйнатып,
Халыҡ дошмандарын фашланы...

Кемдер шунда тәҡдим кертте
Ултыртырға, хөкөм итергә,
Донъя бутаусылар тейеш
Халыҡ араһынан китергә...

Йылдар аша күрәм төҫлө
Сәсрәткенең һуңғы минутын.
Көсһөҙлөктән ҡара янып
Ҡарап торҙоҡ шуны, ут йотоп...

***

Әйтер һүҙҙәр бөттө, буғай,
Эшселәргә Миңнул ымланы.

Төндәй ҡара төтөн бөркөп,
Әкрен генә трактор ҡуҙғалды.

Бына шул саҡ —
Иҫ киткес хәл,
Тарихтарға инер батырлыҡ:
Шәмси бабай,
Алға сығып,
Трактор ҡаршыһына ултырҙы.

Шәмси ҡарттың был аҙымы
Һуғыш йылдарынан килгәндер,
Миңлеғәли,
Матросовтар
Батырлығына был тиңләрлек.

Беренселәр,
Икенселәр,
Бөтөн халыҡ тынды, таң ҡалып.
Тәбиғәт тә тын ҡалғандай
Былдай батырлыҡҡа һоҡланып.

Йәш тракторсы,
Ҡалтыранып,
Ҡабинанан тышҡа һикерҙе.
Көстәр тигеҙләште кеүек —
Ошо уйҙар баштан йүгерҙе...

Бына шул саҡ Миңнулла дуҫ
Руль артына үҙе ултырҙы,
Ағарынып, күгәренеп,
Асыуланып беҙгә ҡысҡырҙы:

«Күмәк эште туҡтатырға
Бармы икән һеҙҙең хаҡығыҙ?
Миңә ҡалһа, барығыҙ ҙа
Юлдарыма сығып ятығыҙ!

Туҡтатырлыҡ был эштәрҙе
Табалмаҫһыҙ ерҙә көстәрҙе!»
...Миңнулланың был аҙымы
Геройлыҡмы, әллә йүләрлек?

Асыу менән янған күҙҙәр
Ҡарсығалай алға ынтылды,

Дошман танкы кеүек, трактор
Шәмси ҡартҡа табан ырғылды.
Иҫләмәйем,
Нисек итеп
Бабайҙы беҙ тартып алғанды.
Күҙ алдынан китмәй һаман
Иң беренсе ағас ауғаны...

Тораташтай ҡатып ҡалдыҡ
Иң беренсе ҡайын ауғанда,
Киләсәкһеҙ ҡалғанлыҡты
Аңланыҡ беҙ ошо яланда...

Тетрәне ер илап-һыҡрап
Иң беренсе имән ауғанда,
Йәштәр булып яуҙы япраҡ,
Ҡарғыш булып тиле заманға...

***

Был хәлдән һуң бик оҙаҡҡа
«Бунтовщиктар» булып йөрөнөк,
Бары йылдар үткәс кенә,
Туңған йөрәк бер аҙ ирене.

Әллә инде ярһыу күңел
Өшөгәнен шулай онотто,
Ә бер аҙҙан инде яҙмыш
Йыраҡтарға мине оҙатты.

Ул йылдарҙа тыуған яҡҡа
Әллә ниңә бик йыш ҡайтманым.
Сәсрәткене урап үттем —
Ул яҡтарға күңел тартманы.

Бер аҙ ғүмер уҙғас,
Хаттар
Хәбәр бирҙе тыуған яҡтарҙан —
Сәсрәткегә атап халыҡ
Моңло-зарлы бәйет сығарған...

Сәсрәтке бәйете

Сәсрәткенең болононда
Еләк бешә алланып,
Сәсрәткене юҡ иттеләр
Буш һүҙҙәргә алданып.

Сәсрәткенең ҡайындары
Ҡороп бөткәндәр инде,
Сәсрәткенең болондарын
Һөрөп киткәндәр инде.
Шишмә һыуын эскән саҡта
Ниндәй уйҙар уйланым,
Иҫкә алдым Сәсрәткене,
Йәмле Танып буйҙарын.
Бесән сапҡан, бесән йыйған
Саҡтарыбыҙ иҫемдә,
Сәсрәткенең болондары
Керәләрҙер төшөмә.
Сәсрәткенең болононда
Еләк бешмәҫтер инде.
Сәсрәткене юҡ иткәндәр
Рәхәт йәшәмәҫ инде.

***

Ҡыҙ алдында — сұл киҫәге,
Ҡара көйгән тыуған еребеҙ.
Тынғы бирмәй йән ғазабы,
Әллә шуға ситтә йөрөйбөҙ?

Ә кемдәрҙер тыныс ҡына
Ултыралыр йылы түрендә.
Ә кемдәрҙер беҙҙе һаман
Иҫкәртәлер һымаҡ гүренән:

«Һаҡ булығыҙ
Һеҙ, кешеләр,
Вайымһыҙҙар юлды киҫмәһен,
Улар өсөн бер ни түгел
Ҡоротоуҙар тарих шишмәһен.

Улар өсөн бер ни түгел
Тамырҙарға балта сабыуҙар.
Бары уяу булған саҡта
Ҡаршы торор көстәр табылыр...»

Ҡыҙ алдында тыуған ерҙең
Юҡҡа сыҡҡан, көйгән киҫәге.
Бөгөнгөнө күңел ҡабул итмәй —
Ҡыҙ алдында тора кисәге...

***

Бер аҙ ваҡыт үткәс кенә,
Миңнулланың һүҙе башланды:
«Егерме йыл урын табалманым,
Егерме йыл йөрәк ашалды...
Ул йылдарҙа юлдың дөрөҫ
Булыуына шикһеҙ ышандым,
Мин генәме,
Башҡалар ҙа
Шулай уйлап, шулай йыуанды.

Беҙ уйлаған инек, ысын
Булыр культуралы көтөүлек,
Уның аша ауылдарҙа
Еңеләйер донъя көтөүе...

...Эйе,
Һинең карьераны
Арыу ғына ватып ташланыҡ.
Әммә юғалманың, кеше булдың...
Бына тик беҙ генә фашландыҡ...
Тик беҙ генә бөгөн фашландыҡ... »

Ни әйтергә белмәй торам,
Иң дөрөҫө — нисек әйтергә.
Ул драманың актерҙарын,
Авторҙарын атап үтергә...

Хәйер,
Кәрәкме ни һүң был?
Тигеҙләне беҙҙе үткәндәр.
Бармаҡ янап ултырғандар
Инде күптән ергә төшкәндәр.

Миңнул дуҫым, орден алып,
Юғарыраҡ менеп ултырҙы,
Ут уйнатып, баш ҡаланан
Күрһәтмәләр генә яуҙырҙы.

Партком Хөсни — принципиаль,
Яңы заман өсөн тырыша:
Хәҙер мулла булып йөрөй —
Бына нисек донъя ағышы!

Беренселәр,
Икенселәр —
Күптән инде беҙҙең ишеләр.
Имеш, улар ҡорбан булған,
Заман ҡоло булған кешеләр...

Ә бригадир Шәмси ҡартты
Бүләгенән мәхрүм иттеләр:
Һуғыш йылдарынан килгән
Миҙалын да бирмәй йөрөттөләр.

Сафа ағай өсөн яҙмыш
Мәрхәмәтһеҙ булды, аяуһыҙ.
Ҡаршы бармай выжданына,
Шул хәлдәрҙән ҡалды аяҡһыҙ.

Ике йылдан донъя ҡуйҙы,
Типһә ине тимер өҙөрлөк!
«Хаҡлыҡ — беҙҙә, беҙ — дөрөҫлөк», —
Булған уның һуңғы һүҙҙәре.

«Шишмә бунты» баҫтырылды,
«Зачинщиктар» шулай таралды,
Ә башҡалар...
Улар инде,
Асыуҙарын йотоп, тын ҡалды...

***

Шулай итеп, өс-дүрт кеше
Был хәлдәрҙән күрҙе яҙмышын.
Күп тә түгел әллә ҡайҙа,
Уйлағанда ғөмүм тормошто.

Ғөмүм бәхет юллағанда
Нимә бирҙең донъя көтөүе!
Ташҡын булып аҡҡан тормош
Әйләндерә бер ҡом бөртөгөн...

«Ғөмүм тормош, ғөмүм юлдар...»
Эх, идеологик ҡараштар!
Ошо һүҙҙе әйтеүсегә
Бер һорау бар минең тарафтан:

— Ә һин үҙең ризамы һуң
Ҡом бөртөгө булып ағырға?

Сит ҡайғылар ҡайғы түгел —
Ҡешенекен еңел һанарға.

Үҙ башыңа төшһә генә
Аңлап була кеше хәлдәрен,
Трибунанан һөйләү еңел —
Ҡағылмаһа яҙмыш елдәре...

***

Ҡеше, яҙмыш...
Тағы ла бит
Тәбиғәттә ҡалды яралар.
Йылдар үтеү менән улар
Төҙәлеп тә, бәлки, баралар?

Юҡ, төҙәлмәй.
Күптән түгел
Бик ҡыҙғаныс хәбәр мин алдым.
Ошо хәбәр йөрәгемә
Утлы хәнйәр булып ҡаҙалды.

Сәсрәткенең хатта исеме лә
Йәш быуында бөгөн һаҡланмай:
«Торба буй» тип атағандар уны,
Хәтер тигәнде лә һанламай.

***

Бер мәл булып күҙ алдынан үтте
Сәсрәткенең әсе яҙмышы.
Мәлдәрҙән бит тора тарих бите,
Мәлдәрҙә бит — ғүмер ағышы.

Сәсрәткелә үҫкән малайҙарҙың
Урындары ныҡлы донъяла.
Ҡемдәр генә булып етешерҙәр, —
Йәштәр үҫә Торба буйҙарҙа.

Вәғәҙәләр әйтерме һуң парҙар,
Үтерме һуң шаулап туйҙары?
Шағирҙарға ниндәй илһам бирер
Дегәнәкле Торба буйҙары?

Сит ерҙәрҙә бәхет юллағандар,
Бәлки, тапҡандарҙыр эҙләгәнен.
Үҙем иһә, ғәфүҙәр үтенеп,
Ғәзиз еркәйемә теҙләнгәнмен...

Миңлегөл
ХИСАМОВА

«Ҡайһылай ҙа баҙыҡ был күҙҙәрем...»

Һиндә генә...

Ҡаршыларҙа, ҡайын араһында,
Тамылйып та еләк бешкәндә,
Рәхәт һулыш алам тупраҒымда,
Һағыштарҙан даръя кискәндә.

Үҙ яҒымдың һәр һуҡмаҒы аҫыл,
Аңлай бында мине ҡайындар,
Тирелеп усҡа төшә бөрлөгәндәр,
Онотола донъяң, ҡайғың да.

Ҡыҙырып ҡына йөрөп туя алмам, —
Ҡыҙырым Ғына аҡлан-туҒайҙар,
Моңсол ҡоштар мине көткәндәрме,
Туҡтай алмайынса һайрайҙар.

Ҡыҙырып ҡына йөрөп туя алмам
Үҙ яҒымдың ҡылҒан-яланын.
Көсһөҙ генә, ишһеҙ саҡтар булды...
Һиндә генә тынҒы табамын.

Миңлегөл Хисамова (1948) — Көйөргәҙе районы Ялсыҡай ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай. Республика мәктәптәрендә эшләне. Яҙыусылар союзы ағзаһы, бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы.

Үҙ яғымдың һәр һуҡмағы тере.
Аяҡ табандарын йылытып,
Күңелемде шулай йыуаталыр,
Ҡуймаһын, тип, мине онотоп...

Ҡак булһа ла...

Ҡаҡ булһа ла, үҙ тауҙарым,
Урмандарым, аҡланым.
Көләкәс ҡояш нурҙарын
Уңалтмайса һаҡланым.

Ялан-ҡырҙарымды иңләп,
Арып-талып атланым.
Еремә тәсбих әйткәндәй,
Ҡоштар моңон ятланым.

Гәрәйҙәрем, Ҡаршыларым,
Сейәлегем үҙәне,
Йәнем минең моңло ҡоштай,
Һеҙҙе күрмәй түҙәме?!

Ҡаҡ булһа ла, шат бит улар,
Түбәләстәр, тауҙарым.
Һеҙ тын алған өсөн ерҙә
Ауыр саҡта ауманым.

Барыһы ла, эйе, ваҡытлы...

Мин алданып торам был яҡтыға,
Тиҙҙән, тиҙҙән бит ул һүнәсәк.
Их, өлгөрөп ҡалаһы бар ине...
Ҡара төнө елеп киләсәк.

Тик бер аҙға туҡтатһаңсы, күгем,
Үҙ төнөңдө ҡыҫып ҡосаҡҡа.
Йылытаһым бар бит өшөгәнде,
Күҙ һалаһым бар бит усаҡҡа.

Яҡты янһын өсөн, усағымды
Һүндермәйсә тотам ҡыштарын.
Еңел түгел яҙҙарыңа етеү,
Моңдар осҡан, күңел буш тағы.

Өмөтләнәм, ҡояш нурсығындай,
Йылынырға итәм еремдә.
Ауыр булмаҫ әле тупрағымда,
Ул да сәсә, ура иренмәй...

Мин алданып бағам яҡтыларға,
Был минуттар, эйе, ваҡытлы.
Уйҙарымды моңһоулыҡтар баҫты,
Был мәл аҡ ҡар еҫен аңҡытты...
Барыһы ла, эйе, ваҡытлы.

Ни хәл генә торҙоң, әсәйем?!

Ҡай арала буран сығып китте...
Туҡталып та ҡалдым юлымдан,
Һағыныстар алды алҡымымдан.
Әгәр инде килһә ҡулымдан,

Осоп ҡына ҡайтып етер инем
Яндарыңа һинең, әсәйем.
Ни хәл генә торҙоң, ни хәл генә?!
Аһырып барып һыуҙар эсәйем.*

Ҡай арала буран сығып китте...
Күңелемдән мин бит яныңда.
Серләшәбеҙ кеүек, һүҙҙәр бөтмәй,
Саҡыраһың мине табынға...

Күҙҙәремде әсе йәш томалай...
Көтә мине һалҡын ҡәберең.
Тере сағығыҙҙа беҙ, балалар,
Белһәк икән әсә ҡәҙерен.

Аһ, үткәндәр... Ҡайта буламы һуң?!
Үкереп илаһаң да туҡтамай,
Мәңгелеккә күҙҙән юғалалар,
Хәтер ҡойононда ут янмай,
Нисек түҙһен йәнең һыҡтамай...

Ҡайһылай ҙа баҙыҡ был көҙҙәрем

Ҡайһылай ҙа баҙыҡ был көҙҙәрем,
Күңел сыуаҡ — шундай рәхәтлек!
Ут ялмаған япраҡтарға бағам,
Мин уларға бөгөн рәхмәтле!

Утлы япраҡтарға түҙем яҙған,
Һуңғы матур алтын көндәре.
Бәхет минуттарын бүләк итә,
Илһам бирә шиғри өндәре.

---

*Аһырып — әлһерәп мәғәнәһендә.

Отолманым һис тә, отолманым,
Йән рәхәтен тоя күңелем.
Донъя шулай бара — берсә еңеп,
Берсә ҡуям ҡай саҡ төңөлөп.

Төңөлөүҙәр ваҡытлыса ғына,
Эстән рәхмәтлемен еңеүгә,
Мин ҡыуанып баҡам салт ҡояшҡа,
Олпат йәштә күҙгә инеүгә...

Ҡояш тулы донъям

Яҡты көндө һин ҡарайтҡан саҡта
Арҡа терәр кемем табылды?!
Ҡара төндә йондоҙҙарҙы сүпләп,
Күк яулығын иңгә ябындым.

Үкенмәйем, миҙгел тимгел-тимгел,
Булды туты, һары алтыны.
Һәр бөртөгө ғүмер аҡланында
Ҡайып китте йөрәк ялҡынын.

Ҡайғы кимерһә лә йөрәгемде,
Кешеләргә астым күңелде.
Донъя бит ул — ҡай саҡ бөгөп һала,
Берсә еңдем, берсә еңелдем.

Үкенмәйем, ҡояш тулы донъям,
Саҡырып тора яҡты тәҙрәһе.
Бүтәндәргә йылы еле иҫер,
Яҡтылыҡтан йәнем биҙмәһен...

Сер эҙләп...

Китәм алыҫ сәфәремә,
Һине түгел, моң эҙләп,
Күк сәскәләрҙән табырмын,
Ерем өҫтәрен күҙләп.

Аҡ сәскәләрҙән табырмын
Сафлыҡ, паклыҡ биҙәген,
Ерҙә тыуған мөғжизәләр
Йыр моңдарын биҙәһен.

Китәм йыраҡ юлдарыма,
Ҡаф тауҙары артына,

Серҙәр эҙләп, даръя гиҙәм,
Ҡитъаларға тартылам.

Арып-талып сер эҙләйем
Тыуған еремә ҡайтып,
Һин дә, бөтмәҫ серем булып,
Тораһың бит күҙ атып...

Ҡышҡы кистә...

За окном, как тогда, огоньки,
Милый друг, мы с тобой старики.

А. Блок

Ҡартайырға өлгөрөрбөҙ әле,
Рәхмәт, тием һуңғы уттарға,
Һөйөүҙән дә, көйөүҙән дә тере
Йөрәк уйламаһын туҡтарға.

Ҡартлыҡ көтөп торһон тау артында,
Осланмаған йырым күңелдә,
Наҙы, моңо арбап алыр төҫлө,
Йыр яҙылыр, тик һин тыңлама.

Ҡартайырға ваҡыт етер әле,
Килеп инер йәйеп ҡосағын,
Шуға тиклем йылынайыҡ икәү,
Көн-төн яна күңел усағы.

Ишек алдын көрттәр өйөп һалған,
Яҡтылыҡҡа сумыр уйыбыҙ,
Атҡан таңға теклəп ҡарарбыҙ ҙа
Тағы еңел һулап ҡуйырбыҙ.

Йәшәләһе йылдар барҙыр, тиеп,
Аҡ ҡарҙарҙа күҙҙе уйнатып,
Ҡыуанырбыҙ шул саҡ, йыуанырбыҙ,
Керпек осон йәшкә сылатып...
Ҡартайырға өлгөрөрбөҙ әле...

Әсә күңелдәре яралы

Әсә күңелдәре яралы,
Хатта мең саҡрымлыҡ араны
Елеп ҡайтып етер балаһы,
Бер күрешеп кенә ҡалаһы

Ине лә бит ошо мәлдәрҙә...
Әсәй күргән ғазап таралмай,
Ғазаптарҙан шатлыҡ яралмай,
Һыҙлап ҡына торор йәндә лә.

Әсә күңелдәре яралы...
Нимә күрмәй әҙәм балаһы,
Йәшергәндә әсе күҙ йәшен,
Олоғайтыр уны үҙ йәше.

Әсә күңелдәре яралы...
Аяу кәрәк уның хәтерен,
Ҡарағанда күҙе мөлдөрәп,
Йөрөһәсе бала өлтөрәп.

Әсәләрҙең яҡты зиһене
Барыһын аңлай, барыһын киҫерә...
Бик бәхетле йә яманһыу саҡта
Әсәйеңде төшөр иҫеңә...

Барыһы ла йәмле тәбиғәттә

Күңел һиҙгер яҡшы һүҙҙәреңә,
Мин — һинеке, тигән күҙҙәреңә,
Башҡайымды һалам теҙҙәреңә,
Ниҙәр ҡалыр ғүмер эҙҙәрендә?!

Уйландыра йыһан ҡараштары,
Күктәр менән ерҙең ярашҡаны,
Араһында гөлдәр сәскә ата,
Бер ҡараһаң, сатнап ерҙәр ята.

Күңел һиҙгер тыуыр матурлыҡҡа,
Күҙҙе ҡамаштырып ятырлыҡҡа,
Юрап торам сәскә атырлыҡҡа,
Урын ҡалһын һәр саҡ батырлыҡҡа.

Барыһы ла һиҙгер тәбиғәттә,
Барыһы ла йәмле йәнтөйәктә,
Мин ышанам тоғро йөрәгеңә,
Һөйөү көмбәҙҙәре гел бейектә.

Был бейеклек икәү өҫөн генә,
Мөхәббәттең наҙы, көсө генә
Күңелеңдә алҡыштарға күмә,
Тик һөйөүһеҙ ғүмер көйрәп һүнә.

Салланған йылдар

Үкенесле был ғүмерҙәр
Кемдәрҙе һемәйтмәгән,
Үткән дә киткән йүгереп,
Юлдарын киңәйтмәгән.

Тарыраҡ ҡала, тарыраҡ
Үтер һуҡмаҡтарыбыҙ.
Алыҫая, алыҫая
Ҡарап ҡалыр ярыбыҙ.

Йәш саҡтарҙа ул ярҙар бит
Яп-яҡын ғына ине,
Бер-беребеҙгә ҡул һуҙып та
Һикереп сыға инек.

Йыраҡ ҡалды, илап ҡалды
Беҙ һыйынған ҡайындар,
Башымдағы сәсем кеүек,
Салланған шул, аһ, йылдар,
Салланған шул, аһ, йылдар...

* * *

Ҡулдарыма ҡәләм алһам,
Ҡулымдан төшөп бара,
Йән-тән һыҙланыуын баҫып,
Шул мәлдә эшләп ҡара.

Хоҙай яратҡан бәндәһен
Шулай яҙалай микән?
Ниңә, йөрәк ҡанһыратып,
Ғәйбәт ҡаҙала икән?

Ҡулға тағы ҡәләм алдым,
Ҡеүәт бирә уй көсө,
Бер кеше йыуаналһа ла,
Яҙам, тим, шуның өсөн.



Мөхәммәт
ЗАКИРОВ

Балыҡ

Тирмәндәге һыу шауынан аҫта, —
Артығыраҡ, ахыры, осондом, —
Ҡаршы ярға: «Әй, ҡарағыҙ, ниндәй
Балыҡ тоттом!» — тиеп ҡысҡырҙым.

Ҡулымдағы балыҡ шул ваҡытта —
Өлгөрмәнем ауыҙым ябырға —
Һыуға сумды, көмөш тәңкәләре
Менән уйнап кинәт һауала.

Теге яҡтар бармаҡ төртөп көлдө:
Ни өсөндөр улар шатланды.
Эләкмәне балыҡ миңә башҡа,
Ҡыуандырғас үҙем яттарҙы.

Яҙыусылар берлегенә алғанда

«Былай иптәш бик өмөтлө,
Яҙыр мотлаҡ, кергәс».
Ә теге кергәс тә яҙмай,
Яҙыр, бәлки, үлгәс.

Мөхәммәт Закиров (1950) — Ҡариҙел районының Дәүләт ауылынан. БДУ-ны тамамлаған, оҙаҡ йылдар ваҡытлы матбуғат баҫмаларында эшләне. Яҙыусылар союзы ағзаһы.

***

Элек бында ҙур тау булған, тиҙәр, —
Хәҙер таба кеүек тип-тигеҙ.
Ни өсөндөр ошо көндәрҙә лә
Беҙ шул «тау»ҙы урап йөрөйбөҙ.

* * *

Фәҡир тормош:
Алдаш-урлаш, ыҙғыш-талаш, —
Ҡотолоу юҡ: гүйә, үрмәксе ауы.
Юҡ ышаныр кеше,
Таяныр дуҫ —
Тотош донъя булмаһа ла дошман яуы.

* * *

Хас дошманың —
Ул алмаға төшкән ҡорттор, —
Тыштан маҡтап,
Эстән кимереүсе дуҫың.
Күрһә — күрмәҫ, белһә — белмәҫ
Сит тигәндәр:
Һуң уларының һиндә ниндәй
Эше булһын?

* * *

Алдан уйлап,
Этлек-фәлән ҡылмаһам да,
Һаман бик йыш ҡыйын хәлдә
Тороп ҡалам.
Был тормошта фәрештә үк
Булмаһам да,
Дөрөҫ йәшәгәнмен, тиеп әйтә алам.

* * *

Был донъяға яралыуҙар
Һағыш өсөн икән. Һағыш өсөн.
Үлемгә бара алыуҙар —
Намыҫ өсөн икән.
Намыҫ өсөн.

* * *

Мөмкин булһа,
Һыу — бер тамсы булып
Мин ҡушылыр инем диңгеҙгә:
Ирек тигән гүзәл тантанаға,
Дауылдары шашҡын,
Тиңһеҙгә.

* * *

Уйлаһаң, уйламаһаң да,
Йәшәүҙәр ҡыҙыҡ ҡына.
Был донъяны булмай аңлап
Ғүмерҙәр уҙып ҡына.

* * *

Әсе хәмер — әсе яҙмыш,
Закускаға — һағыш.

* * *

Башың менән таш ватһаң да,
Тырышлыҡтарың бушҡа.
Булмай шиғыр итеп яҙып
Яҙмағанды яҙмышҡа.

* * *

Йәшлек ҡылғәһе —
Ҡартлыҡ.

* * *

Былдай кистә
Шиғыр яҙмау — гонаһ.
Бәлки, гонаһ
Шиғыр яҙыу ҙа.

* * *

Хәҙер Пегас — колхоз алашаһы:
Таҡыр юлда ватыҡ арбалы.
Шағирҙарға власть кәрәк икән,
Талант ағы, тимәк, самалы.

* * *

Эй, кешеләр, изгелеккә һеҙҙең
Ғүмер етер микән тыуырға? —
Әжәлдәргә ҡаршы баҫһам ине,
Әжәлдәрҙе еңеп үлергә.

* * *

Эй, Ҡамали ҡыуаҡ. Шунда ине
Әсәм менән беҙҙең бесәнлек.
Сапҡан бесән, кәбән ҡойһаң, йәшел
Болот һымаҡ, ишелеп төшәрлек.

* * *

Белеп, күреп, һорап килмәһәм дә,
Донъя, яҡын һинең яҡтылыҡ.
Әгәр мин дә насар булам икән,
Кемдән көтөргә һуң яҡшылыҡ?

* * *

Ул ямғырҙар кире ҡайтмаҫ инде:
Йәшлектәге йәшел ямғырҙар.
Мәңгелеккә һинең менән улар
Йылдар аръяғында ҡалдылар.
Йәшлектәге йәшел ямғырҙар.

Ҡайынлыҡта ямғыр бөтмәҫ кеүек,
Йәшлек үтмәҫ кеүек күренде.
Үтмәне ул йәшлек, тик офоҡта
Таңдар атып, шәфәҡ һүрелде.

Ғәмһеҙ инек микән? Кем уйлаған
Барыһы ла һағындыраһын.
Киләсәктең барыр юлдарында
Ҡайҙан беләйекниҙәр булаһын?

Ул ямғырҙар, эңерҙәргә ҡушылып,
Яуа микән йылдар артында?
Яҡтыһында һалҡын нәжәғәйҙең
Арыш бешә микән баҫыуҙа?

Кем уйлаһын,
Кем һүң белһен уны —
Был мәлдәрҙең ҡабатланмаҫын.
Ни өсөндөр йылдар аръяғында
Йәшел ямғырҙарҙа ҡалғанһың.

Ҡыҫыр шатлыҡ

— Шәп яйы ла сығып тора,
Ғүмер ике киләме,
Бағамға, тим, осорбоҙмо,
Төркиәгә генәме?

— Әллә инде аҡылыңдан
Тамам яҙҙыңмы, йүләр?!
— Нишләп мин йүләр булайым,
Пенсия арта, тиҙәр...

Улар — хужа

Ни хикмәттер, илде түрә баҫты.
Улар — текә,
Улар — затлы.
Машиналар
Аллы-артлы,

Коттеджары
Ҡатлы-ҡатлы.
Улар — хужа,
Мин — бер ҡатлы.

* * *

Көләгәләй, арттан ҡалмай һаман,
Юҡһа күптән һаҡал үҫтерҙек:
Улмы — яҙмыш ҡоло булған әсә
Һөтө менән кергән меҫкенлек.

* * *

Ҡатын-ҡыҙҙағы матурлыҡ! —
Һала гонаһлы уйға.
Алтындарыңды юйырһың,
Аҡылдарыңды юйма.

Ул матурлыҡ! — Ҡәбергәсә
Ҡотолоуҙар юҡ унан:
Ул әллә аҡтыҡ хәҡикәт,
Әллә илаһи ялған?

Таған, таған – алтын хыял

Малай ваҡыт — ҡалай ваҡыт:
Булған бәхетле заман?
Эй шаулашып, эй туҙышып
Атына инек таған.

Малайҙар таған-атыңды,
Ҡысҡырып, өҫкә сөйә.
Ергә теймәй аяҡтарың,
Түбәң күктәргә тейә.

Ҡушылып уртаҡ шатлыҡҡа
Бар ғаләм шарҡылдаһын.
Сәсрәп төшөп ҡалыр һымаҡ
Ҡояшҡа атылаһың!..

Күҙҙәрҙән бәреп сыға йәш,
Татлы ҡыҫыла һулыш!
...Донъя тар мәллә?
Мин булдым
Күктәргә атылған ҡош!

Малайҙар юҡ бергә үҫкән,
Дуҫ-иштәр — бергә эскән.

Бик шаттар — ҡҙҙәре сөйгән
Тағандан сәсрәп төшһәң.

Онотолаһы, ынтылаһы
Ине күктәр ҡатына.
Уйҙарымда — малай сағым,
Таған-хыял атында,
Күк ҡатына
Саҡыра.

Туй

Яндарыңда
Шулай йәндәремә
Тынғы табылмаған көндәрҙә,
Сыға алмай уйҙарымдың осона,
Мин ултырам һинең эргәңдә.

Икәү генә аңлашалған телдә
Һөйләшәбеҙ, гүйә, үҙ-ара.
Сәскәләрең талғын һибелгәндә,
Ел арты ел — ғүмер уҙғанда,
Һөйләшәбеҙ шулай үҙ-ара.

Әйтерһең, һин йәндең бына-бына
Талпынырға торған аҡҡошо.
Үҙ-үҙеңдән тартындыра һымаҡ
Керһеҙ матурлығың балҡышы.

Алдарыма
Хыял ижад ҡылған
Йәш киленме булып төшкәнһең.
Күңел теләй йәйге йәмле көндәр
Алмаларың тулып бешәһен,
Ботағынан өҙөлөп төшәһен.

Ғүмер башланмаған, әйтерһең дә,
Барыһы алда кеүек әлегә.
Туй яһайыҡ, туй!
Кейек Ҡаҙҙар юлында
Айырылғансы йәндәр мәңгегә.

Күршеләр

Ике ара бағанаға, —
Кемлекте, типме, белһен, —
Сыйырсыҡ ояһы яһап
Элде бер ваҡыт күршем.

Ҡасан ҡайтҡан, нисек тапҡан
Ояны сыйырсыҡтар?
Оя тулылыр, моғайын,
Сыр-сыу итә ҡошсоҡтар.

Бер сыйырсыҡ осоп ҡайта,
Береһе – оянан сыға.
Селәүсенме, бер бөжәкме
Ҡайтҡаны суҡышында.

Бер генә елпеп ҡанатын,
Ояға китә кереп.
Эстә – тауыш. Сыр-сыу тағын –
Нәҡ ахрызаман кеүек.

Бер ҡараһам, әллә, тимен,
Күҙемәме күренә? –
Сыйырсыҡ! Минең түтәлдә
Хужа кеүек йөрөнә.

Селәүсенме эләктереп
Осто. Һәм, күп тә үтмәй,
Яңынан ҡайтты. Был емде
Минең баҡсанан сүпләй.

...Хәйер, минең ҡыйыҡ аҫтында
Бала сығарған турғай –
Ул да балаға ризыкты
Күршенән сиртә, буғай.

* * *

Баҡса еләктәре ситендәрәк
Яныр ал сәскәлә яңғыҙ мәк.
Иркә йомшаҡ елдә тирбәнгеләп
Арыған йөрәгемә ял бирмәк.

Еләк сәскәләре ишле, күмәк,
Ул бер үҙе, гүйә, – таң ҡыҙы.
Яңғыҙ булған өсөн ул гүзәлме,
Гүзәл булған өсөн яңғыҙмы?

Баҡса сәскәләре ситендәрәк
Яныр ал сәскәлә яңғыҙ мәк.

Ғәлим
ХИСАМОВ

ӨН ҺӘМ ҺАН

РОМАН-ФАРАЗ

Йән һәм тән

Сәсән арыны. Һуңғы ун көндән күберәк инде туҡтауһыҙ тиерлек яҙҙы. Әлдә ижад йорто бар. Рәхмәт Яҙыусылар берлегенә, уның рәйесе Тойғонға. Йүгереп йөрөп, бер түрәнең тупһаһын ашатлап, икенсеһенең ишеген шарт асып, барыбер ижад йорто һалдырыуға өлгәштеләр. Шунда китте лә Сәсән үҙен уратҡан мөхит менән бәйләнеште өҙҙө. Ашханаға барып тамағын туйҙыра ла бүлмәгә инеп бикләнә. Унда яҙышҡан кеше өсөн бар нәмә лә бар. Ҙур өҫтәл, яҡшы шәм, йыуынырға душ – бәҙрәф һәм тыныслыҡ. Берәү ҙә килеп һинең бикле ишегеңде ҡаҡмай. Тәҙрәңдән муйыл ғына күренә. Ҡалған тормош яҙыусының үҙ алдында. Сәсән уйланып ята ла ырғып тороп яҙырға тотона. Шунан йәнә ята. Серемгә лә китә, төш күреп, һаташып та тора. Шунан йәнә яҙа, йәнә яҙа. Көн менән төн, таң менән эңер тоташып бөттөләр инде. Тамаҡ туйҙырыр ваҡытты ла белмәҫ ине, ашхана хеҙмәткәрҙәренә әйтеп, телефонын биреп ҡуйған. Тегеләр, ваҡыты еткәс, шылтырата. Бер көн Сәсән иртәнгеме, төшкөмө ашҡа килеп сыҡҡайны. Сәсбашы туҙған, һаҡал-мыйыҡ үҫкән, ябығып киткән... Ҡаҡ маңлайында упайған күҙҙәр генә уның элекке Сәсәнлегенә ишаралай. Унан башҡа ла яҙыусылар бар бит инде бында. Кемдер шаяртып һүҙ өндәшкәйне, Сәсән аптырап, текләшеп тик тора. Ни әйтелгәнен дә, ҡайҙа торғанын да аңлап бөтмәне шикелле. Яҙышһа, ошолай иҫ-аҡылын юйғансы ултыра ла ҡуя. Уның ғәҙәтен белгәнгә күрә өндәшмәйҙәр. Кәре бөткәс, ҡайтыр әле башҡалар менән уртаҡ донъяға.

...Ҡайтты. Күрәһең, ҡапыл иҫенә төшкәндер инде – яҙып ултырған ҡәләмен һалды ла күптән тотонмаған телефонын эҙләп алды. Уныһы әллә ҡасан утһыҙлыҡтан һүнгәйне инде. Телефонын көс тупларға ҡуйҙы ла сығып китте бүлмәнән. Тегендә-бында һуғылды, әммә берәүҙе лә осратманы. Ашханаға инде. Ашнаҡсы ҡатынға өндәште:

– Һылыу, бир әле телефоныңды. Тиҙ генә Уралды табайым.

– Кем ул Урал? – Телефон ҡулына ятты.

Аҙағы. Башы 8-се һанда.

– Урал ул – Урал. Ғалим. – Һандар йыйҙы Сәсән. Телефон ҡатын-ҡыҙ тауышы менән яуапланы:

– Һеҙ халыҡ-ара роумингҡа индегеҙ.

Ашнаҡсы телефонды тартып алды.

– Уй, ағай, аҡсаһы аҙ ғына ине. Уныһы ла бөттө инде былай булғас.

Сәсән һис ни төшөнмәне, башын баҫып китеп барҙы. Үҙ телефоны эшләй башлағас ҡына аңланы. Урал йәһәннәмдә икән дә баһа – Ғәрәп Әмирәттәрендә. Сәсән шунда шылтыратҡан. Унда аҡсаны һыҙырып алалар инде.

– Мине эшкә ҡоҙалайҙар, – тине Урал. – Университетҡа эшкә алалар, лаборатория бирәләр, күпме кәрәк, – шул тиклем ярҙамсым һәм аспирантым буласаҡ. Юғары – беҙҙә төшөңә лә инмәҫлек – эш хаҡы ҡуялар. Әммә шикләнәм.

– Нимәгә?

– Әмирлектең фән менән шөғөлләнгән кешеһе асыҡтан-асыҡ әйтте: «Тәнең үҙеңдә, йәнең беҙгә була», – ти.

– Нисек инде уныһы?

– Контракттан аңлауымса, ошо илдә йәшәгән саҡта минең ғилми хеҙмәттәрем минеке һаналасаҡ. Илдән сыҡһам йә үлһәм – уларға хөкүмәт хужа буласаҡ.

– Шунан? Һиңә нимәһе оҡшамай? Әллә Рәсәйҙәр менән Америкала бүтән төрлөмө? Беҙҙә йән менән тән тураһында әйтеп тә тормайҙар. Ул-был хәл булһа, шатырлатып бүләләр.

– Ризалашайыммы ни?

– Ризалаш. Исмаһам, бер ғалимыбыҙ, көндәлек икмәкте ҡайғыртмай, фән менән шөғөлләнер.

– Һинең һүҙең – минең өсөн закон, Сәсән олатай. Ярар, етәр күп һөйләшмәйек. Юҡһа, һинең телефон хаҡың бигерәк ныҡ артыр. Киләсәктә үҙем шылтыратырмын. Бында арзан ғына ул.

Ысынлап та, Сәсән телефондың тотонолған аҡсаһын ҡарағайны, күҙҙәре шар булды: бер айлыҡ эш хаҡындай аҡса сыҡҡан да киткән. Ашнаҡсы ҡатын юҡҡа ғына сыпраңламаған икән шул. Ай, ғәжәелһеҙлек! Ғәрәп Әмирәттәренән беҙгә шылтыратһаң – арзан. Бынан унда – йөҙ тапҡырға ҡыйбат. Ни эшләп? Әҙәм балаһының һәммәһен дә Аллаһы Тәғәлә тиң итеп яратҡан, тиҙәр. Ә ниңә уларҙың тормошонда ошо тиклем айырма һуң? Ана, тән менән йән бүлешендә лә шул уҡ хәл... Тәнең үҙеңдеке, йәнең – беҙҙеке, тип әйтә ти бит. Улай тиергә берәүҙең дә хаҡы юҡ та баһа. Исламда йәнде бөтөн нәмәгә лә Аллаһ бирә. Христиандарҙа – Бог. Йәһүдтәрҙә, буддаларҙа, бүтән дин тәғлимәттәрендә – үҙ Хоҙайы йән өләшә. Шулай булғас, йәнде кем биргән, уны шуның ғына алырға хаҡы бар тигән һүҙ. Ә тегендә Әмирлек кешеһе бүтәндең йәненә дәғүә итә. Әлбиттә, быны ул шаяртып әйткән, тип аңларға кәрәк. Әммә уйындың да бит уймағы бар.

Бер уйлаһаң, кешегә һәм башҡа йән эйәләренә йәнде кем бирә һәм ала? Әҙәм балаһы үҙен белә белгәне бирле шул турала уйлана. «Урал батыр»ҙың бар ҡоролошо шунан тора: йәшәү һәм үлем, үлем һәм йәшәү. Мәңге йәшәр инең, әммә бер заман шул тиклем ҡартайып, ҡороп, кәрең ҡалмайынса кәкрәйеп бөтәһең һәм йәшәүҙең мәғәнәһе ҡалмай. Дөрөҫ йырлайҙар:

Ғүмер бирһәң, һаулыҡ та бир, Хоҙай,
Сирле кеше – һыуһыҙ үҫкән гөл.

Ә кешенең йәнен ҡыйырға кемдең хоҡуғы бар һуң? «Урал батыр» әйтә, Үлем тигән батша хужа, ти, бар тереклектең дә йәненә. Ваҡыты еткәс, ул килә һәм йәнеңде алып китә. Йәнһеҙ тән йәшәй алмай.

Нимә һуң ул йән? Берәүҙең дә өҙөп кенә әйтә алғаны юҡ әле был турала.

Бөйөк «Урал батыр» ҙа ул һорауҙы ҡуя – яуабын бирмәй. Минеңсә, тип уйланы Сәсән, йән тап-таҙа һәм бик көслө энергияның бер усламы. Тән үҙен-үҙе аҫырар ваҡыты еткәс, – кеше тәнеме ул, януар-кейектекеме, ҡош, балыҡ, ҡарышлауыҡ, йылан-саян, бөжәкме – барыбер – янында ғына үҙ мәлен көтөп ятҡан ана шул энергия усламын ала ла терелә. Кем бирә һуң уға был усламды? Атаһы. Ир (кешеме, кейекме, бөжәкме – барыбер) ҡатынына ҡот һала. Башҡорт телендәге ҡот алды, ҡот ҡунды, ҡот инде, ҡот бирҙе һ.б. төшөнсә тап ана шул хаҡта. Ҡот берҙән-бер күҙәнәктән тороп, ҡатындың эсендә ҡала. Хәҙер генетиканы тикшергән ғалимдар уны «ирлек хромосома» тип атай. Ҡот осоп китмәһен, ҡот яҡшы һаҡланһын тип, ҡатын уны үҙенең яралғылары менән уратып ала. Ҡатындың был күҙәнәктәре 28. Ҡатындың күҙәнәктәре буласаҡ тәнгә яралғы бирә, һәм ҡатын ауырға ҡала. Яралғы үҫә, һәм ҡот уның эсендә йәшәй. Яралғы үҙен үҙе ҡарарлыҡ хәлгә еткәс, ҡот яралғыға – яңы тәнгә йән бирә. Йәғни баяғы бер услам энергия көс менән һуға, һәм тән үҙе йәшәй башлай. Бындай мәлде ҡатындар, бала беренсе тапҡыр типте, тиҙәр. Ана ҡарынында үҫкән кейек-януар балалары менән дә шул уҡ хәл була. Йоморҡала үҫкән йылан-саян, балыҡ, ҡош, бөжәктәрҙең ҡото ата тарафынан йоморҡаға индерелә. Әгәр ул аталанмаған булһа, сереткегә әүерелә. Икенсе төрлө әйтһәң, тән һауыты йәнһеҙ ҡала һәм шул көйө юҡҡа сыға.

Йәндең тап ошолайтып тәнде терелткәнен, әлбиттә, боронғо кешеләр белгән һәм атай менән инәйҙе бар тереклектең башы тип атаған. Әлбиттә, миҫал өсөн Сәсән йәнә «Урал батыр»ға мөрәжәғәт итә. Ҡобайырҙың төп геройҙары Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең исемдәре үк әлеге әйткәнде дәлилләп тора. Йәнбирҙенең ҡото Йәнбикәнең ҡарынында Шүлгән менән Уралға йән биргән. Ә Йәнбирҙе менән Йәнбикәгә йән ҡайҙан килгән һуң?

Ошо урынға еткәс, Сәсән ултырған урынынан ырғып торҙо ла, ҡулын ныҡ итеп һелтәп, ҡағыҙҙарын ҡутарырға тотондо. Был юлы әлеге яҙыуы менән ҡәнәғәтләнеп, ҡабаттан ҡәләмгә тотонмам, тигәйне, булмаҫ, ахырыһы. Уралдың тән менән йән тураһында әйткәне әлләниндәй яңы фекерҙәргә этәрҙе бит. Уй ағымы бер йырылған саҡта үҙәнгә кәртә ташларға ярамай, әйҙә аҡһын. Бәлки, яҡшы аҡыл да тыуыр.

Йәнбирҙе менән Йәнбикәгә йәнде кем биргән һуң? Әлбиттә, уларға тиклем ерҙә йәшәгән кешеләр. Тибет, Ғималай тауҙарында йәшәгән боронғо ғилем эйәләренә һылтанып мәғлүмәт биреүсе аҡыл эйәләребеҙ Елена Блаватская менән Эрнст Мулдашевҡа таянып әйтһәк, Йәнбикә менән Йәнбирҙе – әлеге кешелек ҡараған арыйҙар нәҫеленең бер быуыны. Бер, әммә аҙаҡҡы түгел. Ни өсөн, аҙаҡҡыһы түгел, тибеҙ? Сөнки Йәнбирҙе менән Йәнбикә йәшәгән осор Ер йөҙөндә динозаврҙар көн иткән дәүергә тура килә. Ҡобайырҙағы Урал батыр һуғышҡан һәм тураҡлаған имәнес аждаһалар (ерҙә һөйрәлеп, дүрт аяҡланып, ике аяғына баҫып һәм осоп йөрөгән) ана шул динозаврҙар бит инде. Ә уларҙың Ер йөҙөнән юҡҡа сығыуҙарына (Урал батырҙың тураҡлап бөтөрөүенә) кәмендә 200 мең йыл. Бынныһын динозаврҙарҙы өйрәнеүсе ғалимдар раҫлай. Әгәр аждаһалар булған һәм уларҙы Урал батыр еңгән икән, уларҙың һөлдәләре Уралтау һырттарында ҡалырға тейештер бит? Тап шулай. Урал армыттарында динозаврҙар һөйәктәрен табыу осраҡтары байтаҡ.

Бүтән төрлө әйтһәк, «Урал батыр» ҡобайыры бер нисә йөҙ мең йыл элек барлыҡҡа килергә тейеш булып сыға. Йә булмаһа, шул дәүерҙе белеп, белгәнен быуындан быуынға һөйләп ҡалдырған кешеләр йәшәргә тейеш Урал армыттарында. Аждаһалар тураһында һөйләп, уларҙың золом эйәләре икәнлеген раҫлап, шуларҙы еңеүсене данлап һәм уны онотторға хаҡыбыҙ юҡлығын иҫкәртеп мәңгелек ҡобайыр ҡалдырған улар башҡорт халҡына. Үҙ күңелендә шуны һаҡлап,

бер-береһенә һөйләп (Ғәбит сәсән Мөхәмәтша Буранғолға ике аҙна дауамында һөйләй), элекке белемдең остоғон да юғалтмайынса, яңыларын өҫтәй барып, ул ғына ла түгел, меңәр йыл элек булған телде хәҙергеһенә күсерә килеп, тап бөгөнгө башҡорт телендә яңғырата алған кешеләр алдында нисек баш эймәйһең дә уларҙы нисек маҡтамайһың инде?!

Йәнбирҙе менән Йәнбикәгә йән биргән беҙҙең бик боронғо бабайҙарыбыҙ һәм инәләребеҙ, аждаһаларҙы еңә алырлыҡ көскә эйә Уралыбыҙ ниндәй кәүҙәле булырға тейеш һуң? Әлеге кәүҙәле кеше динозаврға ҡаршы бер ваҡытта ла һуғыша алмаҫ ине бит. Ул саҡтағы кешенең кәүҙәһе, бая беҙ һылтанған авторҙарса, 6–8 метр оҙонлоғонда булған. Бына был ышандыра. Ошондай алпамыша ғына динозавр һынлы януарға ҡаршы тора ала.

Тимәк, «Урал батыр» ҡобайыры беҙгә бынан 200 мең йылдар әүәл булыуы ихтимал ваҡиғаларҙы бәйән итә. Ә уларға – Йәнбирҙе менән Йәнбикәгә – арыҫлан менеп, бар кейеккә лә һунар итеп (ҡырағай – тарпан - ат, мамонт, ҡеүәтле үгеҙ) көн күргән дәү кәүҙәле кешеләргә йән биреүселәрҙе атлант тип атағандар.

Боронғо атланттар, әлеге кешеләр кеүек үк, нәҫел тараҡҡан. Йәғни йәнбирҙеләр ҡот һалған, йәнбикәләр тән үҫтергән. Әммә һәр саҡ шулай булмаған, тиҙәр. Атланттарға тиклем Ер йөҙөндә лимурҙар йәшәгән, тип фаразлайҙар. Улар тағы ла оҙонораҡ – 20 метр тирәһе булып, үҙ дәүерҙәренең иң аҙағында тәнгә йән биреп йәшәгәндәр, имеш. Ә йәшәйештәренең башында ике йөҙлө, дүрт ҡуллы, ике аяҡлы була улар (ҡайһы бер буддалар шуларҙы һынландырмаймы икән? Ғөмүмән, буддалар бик ҙур кәүҙәле итеп ҡойола. Кәмендә атланттар оҙонлоғонда). Ә уға тиклем йәшәгән кешеләрҙе «үлемһеҙҙәр» йә «һуңынан тыуғандар» тиҙәр. Быларҙа атай һәм әсәй төшөнсәһе юҡ. Уларҙа нәҫел таратыу үҫемлектәге һымаҡ бара. Йәғни «һуңынан тыуған»дың кәүҙәһенең ниндәйҙер бер еренән бөрө бүртеп сыға ла, уның эсенә, үҙен үҙе аҫырарлыҡ булғас, ҡот ҡуна һәм бөрө төп кәүҙәнән айырыла. Ағас, үҫемлектең күбеһе шулай үрсей. Әммә – үҫемлектән айырмалы – быларҙың йәне бар. Йәнде – ҡотто уларға үҙҙәренән элек көн иткән кешелектең иң башында тороусы «үҙен үҙе тыуҙырған» йән эйәһе биргән. Бик борон көн күргән, тиҙәр уны, бынан миллион йылдар элек. Кәүҙәһенең (әгәр шулай атап булһа) оҙонлоғо 50–60 метрға еткән. Был, – кеше булыуҙан бигерәк, болотҡа, томанға оҡшаш йән эйәһе. Үҙен үҙе нисек тыуҙырған һуң? Ир-ҡыҙ хаҡында беләбеҙ. Тик ул ике енесле була. Бер енесе икенсеһенә ҡот һала һәм икенсеһе тән үҫтерә. Ә үҙен үҙе тыуҙырғандың енес ағзалары юҡ. Әлеге дәүерҙә диңгеҙҙә һыңар күҙәнәкле амеба бар ҙаһа. Үҙен үҙе тыуҙырған да тап шуның ише булған, имеш. Әммә уның кәүҙәһенең ҡайһылыр бер йыйырсығына ҡояш нуры – энергия усламы йыйыла, һәм бер мәл энергия ҡапыл шартлап, күҙәнәкте хәрәкәтләндереп ебәрә. Йәғни йән бирә. Шунан һуң ул ике күҙәнәклегә әүерелә, үҫә, ел ыңғайына йөрөй, һәм, күп ваҡыт үткәс, кәүҙәһенең бер өлөшө бүленә, йәғни нәҫел ҡалдыра.

Ошо рәүешле кешелек биш быуын кисергән тип һанайҙар. Бер быуын дәүеренең аҙағында икенсеһенеке башланырға әҙер торған. Тәүге кешеләр ниндәйҙер сәбәп арҡаһында юҡ булыуға, икенселәр уларҙың даирәһен алып киткән. Йәғни кеше йәшәгән ер бер ваҡытта ла буш тормаған.

Ярар, миллионлап йыл элек үҙен үҙе ҡояш энергияһы ярҙамында тыуҙырған кеше хәҙер Ер йөҙөндә алты миллиардтан ашыу булып йәшәй. Үҙен үҙе тыуҙырған берәүҙән шул ҡәҙәр нәҫелләнгән. Кешенең һаны күпкә күберәк тә булыр ине, әгәр ул үлмәһә. Ә нимә һуң ул үлем? Ни эшләп кеше, кеше генә түгел, барлыҡ йән эйәһе лә бер мәл килеп үлә? Ниңә? Үлмәһә булмаймы ни? Быға яуапты шул уҡ «Урал батыр»ҙа һәм кеше йә иһә һәр тереклектең үҙендә табабыҙ.

Боронғо замандағы кешенең көндәлек тормошон түбәндәгесә һүрәтләй «Урал батыр» ҡобайыры.

Тик йәшәгән дүртәүһе.
Донъя-маҙар йыймаған,
Ҡашыҡ-аяҡ тотмаған,
Ҡаҙан аҫып, ут яғып
Улар донъя көтмәгән.
(Йәғни, таш быуат осоро – **F.X.).**
Ауырыу-һыҙлау күрмәгән,
Үлем барын белмәгән,
Барлыҡ нәмәгә үлем –
Үҙебеҙ, тип һанаған.
Һунарҙа ат менмәгән,
Ҡулға һаҙаҡ тотмаған;
Менәренә – арыҫланды,
Балығына – суртанды,
Ҡошҡа сөйгән шоңҡарҙы,
Ҡан һурырға һөлөктө
Үҙ иштәре яһаған.
Бик борондан булғанмы,
Йәнбирҙе үҙе ҡылғанмы,
Бара-тора шул ерҙә
Йола булып киткәнме, –
Йыртҡыс йәнлек тоттониһә,
Йәнлек иркәк булдыниһә,
Ирле-бисәле икәүһе
Башын сәйнәп ашаған,
Шүлгән менән Уралға,
Эте менән арыҫланға,
Шоңҡар менән суртанға
Бүтән һанын ташлаған;
Йыртҡыс йәнлекте тотһа,
Йәнлек орғасы булһа,
Ирле-бисә икәүһе
Йөрәген(е) һайлаған.
Үлән емшәр йән тотһа,
Ҡара һөлөк ҡаҙаған,
Һөлөгөнән һурҙырып,
Ҡанды һыуһын яһаған.
Бала үҫеп еткәнсе,
Үҙе йәнлек тотҡансы
Баш-йөрәкте ашауҙан,
Һыуһынға ҡан эсеүҙән
Уландарын тыйғандар,
Һис ярамай, тигәндәр.

Икенсе төрлө әйтһәң, бар тереклеккә Йәнбирҙе менән Йәнбикә хужа. Тереклекте улар тыуҙыра (Шүлгән менән Уралды), тереклекте улар үлтерә. Ни өсөн иркәк (ата) йәнлектең башын, орғасыһының йөрәген, үлән емшәр йәнлектең ҡанын улар тотонған, бүтән бирәүгә лә рөхсәт итмәгән һуң? Сөнки тереклектең йән урыны – баш, йөрәк һәм ҡан. Шуларҙың береһе генә булмаһа ла, йән тән эсендә йәшәй алмай, юҡҡа сыға, йәғни үлә.

Алдараҡ, йән – ул энергияның бер усламы, тинек. Энергия үҙенең көсөн тәнгә бирә лә, тән терелә, йәғни йәшәй башлай. Ә йән ҡайҙа була һуң? Юҡҡа сығамы? Энергия бөтөп, йән һүнәме? Юҡ, әлбиттә. Йән һүнһә, тән дә үлер ине. Тән эшләгәс (йөрәк һуға, ҡан йөрөй, мейе эшләй, аяҡ-ҡул, бүтән ағза хәрәкәт итә), энергия сарыф ителә бит. Уны кире ҡайтарырға кәрәк. Быны шул уҡ йөрәк, ҡан һәм кешенең (тереклектең) эске органдары эшләй. Уларға энергия сығанағы булып аҙыҡ тора. Йән эйәләре ризыҡты ашай һәм ул уның эсендә яңы энергияға әүерелә лә йәнгә тапшыра, тәнде хәрәкәтләндерә. Йәнде, бөгөнгө техник термин менән атағанда, аккумулятор тип әйтеп булыр ине. Аккумулятор үҙендә һаҡланған энергияны (ҡотто) тәнгә бирә һәм тән (автомашинаның моторы кеүек) эшләп китә. Тән үҙенә кәрәкле энергияны үҙе яһап ала башлай (бала имә, ҡош инәһенән ашарға таптыра) һәм тән ағзаларын хәрәкәтләндереү менән бер юлы яңы энергияның бер өлөшөн йәнгә бирә. Йәғни – генератор. Генератор аккумуляторға энергия бирмәй башлаһа, автомашинаны туҡтатырға һәм әлегенең сәбәбен асыҡлап, етешһеҙлекте бөтөрөргә кәрәк. Шунһыҙ оҙаҡламай автомашина бөтөнләй эшләмәйәсәк. Был турала һәр автомобилсе яҡшы белә.

Ә ни эшләп генератор энергия тапшырмаҫҡа мөмкин? Сәбәптәре күп уның. Уны белер өсөн автомобилселәр иң алдан контакттарҙы һәм тимерсыбыҡтарҙы (кеше тәнендә ҡан тамырҙары) тикшерә, шунан төп компьютерҙы (баш) ҡарай, ә, бәлки, генератор (йөрәк) үҙе эшләмәйҙер? Автомобилдәге кеүек, тәндә лә йәнгә энергия биреүҙә төп эште, тимәк, баш, ҡан һәм йөрәк башҡара. Шуларҙың береһе генә йүнләп эшләмәһә лә, аккумулятор кәрәкле энергияны ала алмаған кеүек, йән дә һүнә башлай. Шуға күрә Йәнбирҙе менән Йәнбикә малдың башын, йөрәген, ҡанын һайлаған, йәғни бар тереклеккә улар үлем булғандар. Тереклектең үлеме ошо ике кеше ҡулында, тимәк. Ә уларҙың ғүмерен кем ҡыя һуң? Йәнбирҙе менән Йәнбикә йәшәгән дәүерҙә әле ундай хәл булмаған, кеше үлеп ҡарамаған. Әммә үҙҙәре лә йән эйәһе булғас, ҡасандыр бер үлем тырнағына ҡаласаҡтарын кешеләр белә. Тик үлге генә килмәй. Бәлки, мәңге йәшәү, һис булмаһа, үлемде кисектереү сараһы барҙыр? Шуны эҙләр һәм табыр өсөн Йәнбирҙе менән Йәнбикә ике улын – Шүлгән менән Уралды – үлемһеҙлек сығанағын табырға, Йәншишмәнән һыу алырға юлландыра ла инде.

Тапмағандар улар Йәншишмәне. Бер уртлам ғына һыу Уралдың ауыҙына эләгә, уны йотаһы, кешеләрҙе үлемһеҙ итәһе урынға, ул һыуҙы тау-таштан ғына торған Уралтауға һибә, һәм шунда ожмах кеүек баҡса үҫә башлай.

Кешенең йәне иһә үлемесле булып ҡала. Тәндең башына, йөрәгенә, ҡанына бер-бер хәл булһа, йән үлә. Быны бөтәһе лә белә. Шуның өсөн һәр һуғышта ла кеше дошманының башына йә йөрәгенә яҫҡына. Икеһенең береһен юҡ итһә, ҡан үҙе ағып бөтә. Миллиардлаған кеше тап һуғышта башын һалған. Ә йән ҡайҙа булған? Башы, йөрәге, ҡаны туҡтаған тән яңы энергия яһап сығара алмай һәм йән (аккумулятор) һүнә. Энергия усламы яйлап кәмей барып, бөтөнләй тарҡалып юҡҡа сыға. Кеше үлә.

Был мәлдә «кешенең йәне сыҡҡан саҡ» тип әйтәләр. Имеш, йөрәк һуғыуҙан туҡтағас, кешенең йәне өс көн буйы уның өҫтөндә» осоп йөрөй. Тимәк, йәндең энергияһы өс көн буйы бөтөүгә бара.

Өс көндән һуң йән күккә олғаша, йәнәһе, ете күк аръяғына. Хоҙайҙың үҙе янында тәнһеҙ ҡалған йәндәрҙең йыйыла торған бер урыны бар, тәнде ташлаған йән шунда оса, тиҙәр. Быныһына ышаныу ҡыйын. Әммә йән энергияһы тарҡалғанда, күрәһең, һауаға сығалыр, шуға уны, күккә олғаша, тиҙәрҙер. Йәндәр йыйылмаһына килгәндә, быға ла ышаныу ауыр. Сөнки йыйылған урын булғас, йәндәрҙе йыйып, шунан тәндәргә таратып ултырыусы ниндәйҙер мөғжизә лә кәрәк

бит. Ер йөҙөндә һәр минут һайын бер нисә миллиард тән ярала. Уларға шул мөғжизә йән һалып өлгөрә микән? Әйтеүе ҡыйын. Кемдер быға ышана икән – ышанһын. Уның ихтыяры. Әммә бер нәмәне иғтибарҙа тотор кәрәк: йәнлектәр донъяһы миллион-миллион йылдар буйы шул тиклем камиллашҡан – унда бер генә артыҡ элемент та, хәрәкәт тә юҡ. Бөтәһе лә бик ябай ғына ҡоролған. Сөнки бөйөк нәмә ябай була. Тик һәр ябай нәмә бөйөк түгел. Шуға күрә тәнгә йәнде кемдер өләшеп ултырыуы – бик ҡатмарлы эш. Бындай ҡатмарлыҡты ябайлыҡҡа ынтылған донъя ҡабул итер инеме икән?

Ошо фекерен яҙҙы ла Сәсән, күңеленең күмһеп ҡуйғанын тойҙо. Миллионлаған йыл буйы кешелек үҙен үҫтереү, нәҫел итеү хәстәрен күргән. Ә мин һуң? Мин дә бит шул кешелектең бер бөртөгө. Ә нәҫелем юҡ. Инде йәшем дә аҙ түгел, әммә бала юҡ. Сәскә менән күп йылдар бәхетле йәшәнеләр. Бер-береһенең күңелен күрергә тырыштылар. Тик бала булманы. Сәсәндең ҡотона Сәскә тән үҫтерә алманы. Әллә инде Сәсәндең ҡото эшкинмәне, әллә инде... Докторҙарға йөрөү ҙә, им-томсоға барыу ҙа файҙа килтермәне. Шуның сәбәбенәндер, Сәсән күп яҙҙы, гелән ижад итте. Балалар урынына... китаптары тыуҙы. Ә Сәскә, бала ҡарайһы урынға, Сәсәнде тәрбиәләне. Яҙмышыбыҙ шулдыр тип йәшәй бирҙеләр.

Тап ошо уйҙың Сәсәнгә килгәнен генә көткән кеүек, телефон шылтыраны.

– Бәғрем, мин һиңә көнөнә әллә нисә ҡат шылтыраттым. Тик һин әле генә алдың трубканды.

– Матурым, һин бит минең яҙышҡан саҡта телефонды һүндереп ҡуйғанды беләһең. Бөгөн саҡ ҡабыҙҙым.

– Ирек, ҡайтһаң ине. Мин ауырып киттем шикелле.

– Хәҙер үк ҡайтырға сығам. Ә һин, бик ауыр булһа, «Ашығыс ярҙам» саҡырт.

Сәсән йәһәт-йәһәт йөрөп йыйынды. Ҡатынының тауышы бигерәк ҡалтырап сыҡты. Бер-бер хәл булып ҡуймаһын. Ярай әле, машинаһы янында. Кешегә инәлеп йә автобус көтөп тораһы түгел... Ярты сәғәттән ул алыҫ юлдың тәүге саҡрымдарын үткәйне инде.

Ирек (ул саҡта Сәсән исеме бирелмәгәйне әле) менән Сәскә поезда таныштылар. Студенттар беренсе ярты йыл уҡыуҙан һуң ял итеп, кире уҡыу йортона китергә сыҡҡайны. Тимер юл вокзалының билет кассаһына сират байтаҡ. Бөтәһе лә студент, бөтәһенең дә маҡсаты бер: тиҙерәк билет алыу ҙа йәһәтерәк вагонға инеп, йүнлерәк урынға хужа булыу. Ирек сираттың осона килеп баҫты ла аланйолан ҡаранды. Иҫәбе – берәр танышы күренһә, шунан билет алдырыу. Әмәлгә ҡалғандай, касса тәҙрәһенә яҡын уҡ ҡалған урында Сәскәне күреп алды. Бара һалды янына.

– Һеҙҙең урынға мин баҫайым. Икебеҙгә лә билет алырмын.

– Шулайтмай ни! Тәү күргән кешегә урын бирергә мине иҫәр һанайһыңмы?

– Ни эшләп тәү күргән булһын? Икебеҙ ҙә университетта, бер факультетта уҡыйбыҙ. Тик мин түбәнерәк курста.

– Ярар, «түбәнерәк курс», килтер аҡсаңды, алырмын билет.

Ҡыҙыҡай билет алғансы, Ирек перронға сығып өлгөргәйне. Сәскә күренеү менән һөрәнләне:

– Нисәнсе вагон?

– Һигеҙенсе.

– Әйҙә, тиҙ бул минең арттан.

Ирек, атылып барып, йәнәш ике урын алып өлгөрҙө. Бының артынан бүтәндәр атылды. Сәскә вагонға ингәндә, ул кеше менән шығырым тулы ине. Шулай ҙа тәҙрә янында уға урын ҡалған. Ҡыҙ урынлашыуы булды, Ирек быны «суп» үбеп тә алды. Аптырап китте Сәскә.

– Бигерәк йәһәт икәнһең, егет.

– Рәхмәтте ваҡытында әйтергә кәрәк. Был – билет алған өсөн.

Ошонан һуң һирәк-һаяҡ күрешеп, яйы туры килгәндә уйынлы-ысынлы үбешеп йөрөнөләр. Әммә аралары үтә эҫенеп тә, һыуынып та китмәне. Ҡыҙ ҙа, егет тә ныҡ яҡынларға атлығып барманы. Уңманы ла, туңманы ла тигән кеүегерәк йөрөнө лә яттылар. Ике йылға яҡын ваҡыт үтте лә китте. Сәскә бер нисә айҙан университетты тамамлаясаҡ ине. Диплом эше яҙылып бөткән, дәүләт имтихандары иртәгә, тиһәләр, унығына ла әҙер. Артабан ни булыр – Алла ғына белә. Тәғәйен генә эш урыны ла һайланмаған, кем менән ҡайҙа йәшәйәсәк – билдәһеҙ. Шундай икеле-микеле уйҙар менән йөрөгәндә ҡала кинотеатрҙарына шау-шылы фильм килтерҙеләр. Сәскәнең дә барғыһы килде. Тик кем менән? Бер үҙе барыуҙы килештермәне. Шул саҡ башына уй килде: тукта әле. Киноға ике билет алды ла, Ирек йәшәгән бүлмәгә инеп, тегене саҡырҙы. Егет албырғап ҡалды. Ыҡ-мыҡ килде. Быны күргән бүлмәләштәре ауыҙ йырҙы:

– Бар-бар, шундай шәп киноға саҡыралар. Өҫтәүенә, бушҡа.

– Апай үҙе лә нисауа ғына...

Һуңғы һүҙҙән ғәрләнеп сығып китергә боролғайны инде, Ирек өҫтәлдәге билетты әйләндергеләп торғас:

– Рәхәтләнеп бармайым, әммә «юҡ» тип әйтергә ҡыймайым, – тине.

Сәскә бер һүҙһеҙ сығып китте. Барһа – барыр. Бармаһа – тағы... Ҡыҙ байтаҡ ваҡыт элек барҙы кинотеатрға, туңдырма алып ашаны, тәүге ҡыңғырау шылтырау менән залға инеп ултырҙы. Фильм бына-бына башлана тигәндә, янындағы буш урынға «ух» та «бух» килеп Ирек ултырып өлгөрҙө.

– Онотҡанмын да ҡуйғанмын, саҡ өлгөрҙөм, – ти өҫтәүенә. Өндәшмәне Сәскә, ирен ситен ҡыйшайтып йылмайҙы ла бөттө.

Фильм үҙ тормошон үҙе ҡорған ҡыйыу, шул уҡ ваҡытта шаталағыраҡ ҡыҙ тураһында ине. Кинонан һуң ятаҡҡа тиклем йәйәү ҡайттылар. Һөйләшерлек уртаҡ һүҙ ҙә, бер-береңә яҡынларлыҡ уртаҡ хис тә юҡ ине. Ятаҡтың ишегенә 50-60 аҙым ҡалғас, Сәскә егеттең ҡаршыһына баҫты, битенә төшкән бер нисә сәс бөртөгөн яулығы аҫтына ҡыҫтырҙы, Ирекетең баш кейемен турайтып ҡуйҙы ла һораны:

– Һин мине беренсе тапҡыр үпкәнеңде хәтерләйһеңме?

Ирек «эйе» лә, «юҡ» та тимәй тора ине. Был тегене ҡыҫып ҡосаҡлап, һурып-һурып үпте.

– Бына ошолай үбәләр уны. Оҡшанымы?

– Оҡшаны.

– Оҡшаһа, ҡабатла.

Егетҡә лә үбергә тура килде. Шунан ҡыҙ:

– Мин һиңә кейәүгә сығам, алаһыңмы? – тип оло хәбәр һалмаһынмы! Ирек йәнә өҙөп кенә ни ҙә булһа әйтмәне. Ҡыҙ ныҡышты.

– Мин һиңә оҡшайым бит. Шулаймы?

– Эйе.

– Мин аҙып-туҙып йөрөгән ҡыҙ түгел. Шулаймы?

– Эйе.

– Мин яҡшы уҡыйым. Бер ваҡытта ла стипендиянан ҡалғаным юҡ. Минең атам-әсәм ауылдың күрмәлекле кешеләре – уҡытыусылар. Туған-тыумасам мин тип үлеп тора. Тағы ни кәрәк һиңә? Ал мине. Һинең бәхетең – мин, вәт!

– Әлләсе. Элек егеттәр тәҡдим яһай торғайны, ә бында...

– Яһа һуң тәҡдимеңде. Мин көтәм.

Ирек өндәшмәне. Сәскә, боролоп та ҡарамайынса:

– Мәмәй, – тине лә ятаҡҡа инеп китте.

Бүлмәгә ул шым ғына керҙе, бүлмәләштәренең һәр береһе үҙ эше менән мәшғүл. Кемдер уҡый, кемдер ҡулъяулыҡ сигә, кемдер ашай.

Сәскә ашыҡмай ғына йыуынып алды, шунан сәй эсте һәм урынын һалып йоҡларға йөрөй ине, ишек шаҡынылар. Кем дә булһа яуап бирергә өлгөрмәне, ишек шар асылып китте лә өс егет пәйҙә булды. Иң алда – Ирек. Ҡулында ҡып-ҡыҙыл сәскә гөлләмәһе. Ауыҙы йырыҡ. Арттараҡ икеһе тора, ап-аҡ күлдәк өҫтөнә галстук таҡҡан булғандар. Ирек мендәрен тотоп торған Сәскә ҡаршыһына килеп, һыңар аяғының тубығын сәнесте, сәскәне ҡыҙға һондо һәм, күҙҙәрен дә йоммай:

– Мин һиңә йөрәгемде тәҡдим итәм. Сыҡ миңә, Сәскә! – тине. – Кейәүгә...

Сәскә ни эшләргә лә белмәй тик тора. Бүлмәләш ҡыҙҙары аҡылдарына тиҙерәк килде.

– Ал-ал сәскәне.

– Әйт. Риза, тип әйт... – тип гөрләштеләр.

Өсөнсө ҡыҙ йәһәтләп килде лә Сәскәнән мендәрҙе алып һалды, ҡулдарын тотоп, Ирекҡә һондорҙо.

– Тот сәскәне, – тип бойорҙо. Быныһы шуны үтәгәс, – хәҙер, Ирек, үп һин уны.

Шуны ғына көткән Ирек баяғы һымаҡ һурып-һурып үпте.

– Етәрегеҙ! – тип шаулашты ҡыҙҙар. – Туйға ҡалдырығыҙ.

Ул арала баяғы ике егет бүлмә уртаһына өҫтәл ҡуя һалды, уның өҫтөнә ике шешә шарап ҡунаҡланы. Ҡыҙҙар бар булған аҙыҡ-әүҡәтен теҙҙе. Күп тә үтмәй, егеттәрҙең береһе шараплы стаканын юғары күтәрҙе:

– Беҙ Сәскәне киленлеккә алдыҡ! – тине.

Ҡыҙҙар бер ауыҙҙан:

– Беҙ Сәскәне килен итеп бирҙек! – тип яр һалды.

Уйламаҫтан башланған туй байтаҡ дауам итте. Тағы ла оҙағыраҡ та булыр ине, күрше-күлән шауларға, әлдән-әле ишек шаҡырға тотондо: йоҡо бирмәйһегеҙ...

Сәскә үҙе тапҡан бәхетен бик ҡәҙерләп һаҡланы. Иректе өрмәгән ергә ултыртманы тиһәң дә, дөрөҫ булыр. Ғүмер буйы китап нәшриәтендә мөхәррирлек итте. Яҡшы эшләне. Нәшриәттән ҡайтты ла өйөн йыйыштырҙы, ашарға бешерҙе. Ғилми-тикшеренеү институтында эшләгән ире ҡайһы берҙә бик һуңлап та ҡайтты, өндәшмәне Сәскә. Иренең эш хаҡы йыш ҡына үҙенекенән дә кәм булды. «Етә ул», – тине Сәскә, еткерҙе. Тартты, һуҙҙы, еткерҙе, ире кеше араһында яҡшы кейенеп йөрөһөн тип тырышты. Үҙенә әҙер кейем һатып алманы, тауар һайланы ла үҙе текте. Уныҡынан да килешле кейемле ҡатын булманы, иң ҡиммәтле салонда кейенәһеңдер, тип бөттөләр. Ул йылмайҙы ла ҡуйҙы. Ирегe лә төшөп ҡалғандарҙан булманы. Кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҡланы, әллә нисә фәнни асыш яһаны. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, донъяһын бигүк ҡотайта ла алманы. Ғалимдың аҡсаһы ташҡа үлсәйем генә ине. Иректе яҙыусылыҡ эше ҡотҡарҙы. Ғилми эш менән яҙыусылыҡты ҡушып алып барҙы. Күп яҙҙы, китаптары күп сыҡты. Шуның килемен бик ныҡ һығып, иҫәпле тотоноу арҡаһында өй һалдылар, машина алдылар. Ыңғай тормош, әүҙем ижад өсөн барыһы ла бар... Сәскә генә ауырып киткән икән... Ни булды икән? Ирек машинаның тиҙлеген арттырҙы.

Сәсәндең ҡыңғырауға баҫыуы бушҡа ғына булды. Ишекте асыусы табылманы. Үҙ асҡысы менән асып инде, өй буш ине. Сәсән телефон һандарын йыйҙы. Трубкала ниндәйҙер билдәһеҙ тауыш ишетелде.

– Һеҙҙең ҡатынығыҙ кардиоүҙәктә. Уны операцияға индерҙеләр. Килегеҙ бында.

Сәсән ҡойолдо ла төштө: ыҡ-мыҡ, ни әйтергә самалағанын үҙе лә белмәне. Операция. Нисек инде улай? Ике аҙна ғына элек һин дә мин тороп ҡалды ла һуң Сәскә. Ғүмер буйы, исмаһам, бер генә булһа ла йөрәк сырхауына зарланманы... Шаңҡып ултырҙы Сәсән. Ярар әле, хәҙер һәр саҡ янда йөрөгән телефон бар. Шул шылтырап аңына килтерҙе ирҙе. Урал икән.

– Мин Ғәрәп Әмирәттәрендәмен, олатай. Һинең кәңәште тотоп, контрактҡа ҡул ҡуйҙым. Ҡайтып, ундағы эштәрҙе теүәлләйем дә кире киләм. Осрашҡанға тиклем. Сәскә инәйгә сәләм әйт.

– Сәскә, Сәскә инәй, – тип һөйләнде Сәсән һәм иҫ-аңын йыйҙы. Бәй, ни эшләп бында торам һуң мин? Сәскәгә операция яһайҙар ҙа баһа.

Йүгереп түгел, атылып барып инде ул больницаға. Ҡатынының ҡайҙа икәнлеген һорашып белде. Операциялар бүлмәһенең ишеге төбөндә туҡтаттылар уны: «Артабан инергә ярамай». Көтөүҙән башҡа сара ҡалманы. Көттө Сәсән. Ҡыҙыҡ ҡына коридорҙы үрле-түбәнле, эй, йөрөнө, стенаға терәтеп ҡуйылған һыңар ултырғысҡа саҡ ҡына терәлеп торҙо ла тағы йөрөнө. Ниһайәт, ишек асылды, йәшел халатын сисә-сисә доктор сыҡты.

– Ирек ағай, ныҡ бул. Шунан башҡа һинең сараң юҡ.

– Нимә-нимә? Ни тинең?

– Ҡатынығыҙ операция өҫтәлендә йән бирҙе. Йөрәге бөрөшөп бөткәйне инде, күтәрә алманы.

– Нимә-нимә? Ни тинең?

– Хәҙер уға бер кем дә ярҙам итә алмай.

– Нимә-нимә? Ни тинең?

– Операцияға инер алдынан һеҙгә тапшырырға тип ниҙер әйткән ҡатынығыҙ. Хәҙер еткерерҙәр.

Шуны ғына көткән кеүек бер ҡатын сыҡты.

– Мин операция туташымын. Наркоз көсәймәҫ борон: «Донъя хәлен белеп булмай. Минең менән бер-бер хәл булһа, иремә әйтегеҙ. Рәхмәт уға. Мине бик бәхетле йәшәтте. Бер генә үпкә һүҙем дә юҡ», – тине.

– Нимә-нимә? Ни тинең? – Тағы ла бер ҡабатланы ла Сәсән, стенаға терәлгән килеш, яйлап ҡына иҙәнгә шыуып төштө. Иҫенән яҙҙы. Ярар әле, был хәл больницала, докторҙың күҙ алдында булды. Юҡһа... Кем белә. Шунда уҡ Сәсәнгә укол ҡаҙанылар, бүтән дауаһын таптылар. Оҙаҡламай ул, һәүетемсә тын алып, серемгә талды.

...Имеш, операция өҫтәлендә ҡанға туҙып ятҡан Сәскәнең кендек тапҡырынан ап-аҡ ҡына күбәләктән саҡ ҡына ҙурыраҡ ҡот осоп сыҡты. Доктор тотоп торған бөрөшөп бөткән йөрәккә ҡарап торҙо ла: «Ул миңә ҡабаттан көс бирә алмай. Китәм. Анауында ғына барып етәм дә, мин дә һүнәм», – тип ҡанаттарын саҡ ҡағып, тәҙрә төбөнә ҡунды һәм, Ҡояштан төшкән нур төҫөнә инә барып, бөтөнләй юҡ булды.

Сәсән шуға тертләп уянып китте. «Сәскәнең йәне һүнде, – тигән уй аңын телеп үтте. – Матурымдың тәне генә бында ҡалды, йәне ҡояш нурына ҡушылды».

Сәскәне ерләнеләр. Сәсән йәшәнеме, тереклек иттеме, көн күрҙеме – үҙе аңламаны. Кем нимә ҡушһа, – шуны үтәне, ҡушмаһа күҙле бүкән ише ултыра бирҙе. Һөйәп ҡуйһаң – ятты. Һөйәп ҡуйһаң – торҙо. Үҙ ирке менән күҙҙәрен йомдо ла асты ғына. Сәскә үлгән ыңғайы уның янынан бер генә минутҡа ла кеше өҙөлмәне. Әммә һәр кемдең үҙ тормошо бар. Сәсән ни тиклем генә бөйөк булмаһын, барыбер кеше тормошон алмаштыра алмай. Уны һаҡларға, ярҙам итергә тәғәйенләнгән кешеләр тәүҙә ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа үҙ мәшәҡәте менән китеп торҙо.

Һуңғараҡ мәшәҡәттәр күбәйҙе, һәм, Сәсән үҙен яҡшыраҡ тотһон өсөн, тәүҙә 20, шунан 50, аҙаҡтан 100 грамм эсемлек ҡуйоп бирҙеләр. Бер ауыҙына алғас, Сәсән үҙе лә тегене ҡойғолай башланы, тәүҙә рюмкалап, шунан стаканлап. Тәүҙә Сәсәнде йәлләнеләр, шунан әрләнеләр, унан һүгә башланылар.

Бер көн Сәсән ҡойма янында уянды. Төрткөләгәнгә һиҫкәнеп китте. Ҡараһа, Урал баҫып тора.

– Эҙләмәгән ер ҡалдырманым, ә һин бында ятаһың, – тип һуҡранды егет. – Әйҙә, ҡайтайыҡ.

Тегенеһе ҡалтырана-ҡалтырана аяҡтарына баҫты. Шаҡшыланып бөткән өҫ кейеменә йәбешкән сүп-сарҙы ҡаҡҡан булды. «Интеллигентлыҡ ҡанында шул», – тип моңһоу ғына һығымталаны Урал. Таксиға ултырҙылар ҙа Сәсәндең ҡала ситендәге өйөнә елдерҙеләр. Ярар әле, бында бөтәһе лә имен-аман ине. Сәскәне ерләгәндән һуң өй йыһазы нисек ҡалған – шул көйө. Урал иң алдан Сәсәнгә укол ҡаҙаны, аҙаҡ диванға һалды үҙен. Шунан тотондо эшкә. Тәүҙә мунса тоҡандырҙы, туңдырғыстан ит киҫәге табып, һурпа ҡайнатырға ҡуйҙы һәм өйҙө тулыһынса йыуып сығарҙы. Тоҙлоҡло һурпа әҙер булғас, уны ике сеүәтәгә бушатты ла береһен – Сәсәндең, икенсеһен үҙенең алдына ҡуйҙы.

– Әйҙә, ризыҡланайыҡ, олатай.

Сәсән ялт итеп күтәрелеп ҡараны егеткә. Күрәһең, һуңғы осорҙа быңдай өндәште ишеткәне булмағандыр.

Һурпаны эсеп ҡуйғас, Сәсәндең маңлайына бөрсөк-бөрсөк тир сыҡты. «Аллаға шөкөр, – тип ҡыуанды Урал, – былай булғас, шәбәйә олатайым». Диванға яҡтырып, йәнә бер укол ҡаҙаны ла уға Урал, Сәсәнгә алмаш кейем эҙләп алды.

– Әйҙә мунсаға.

Сәсән бер һүҙ ҙә өндәшмәйенсә буйһонҙо. Мунсала сисендергәс, Урал бысраҡ кейемде гөрләп янған утҡа ырғытты.

– Үҙемде лә ташла шунда, ут барыһын да таҙарта ул, – тине Сәсән. Көнө буйы беренсе әйткәне шул булды.

– Һине бүтәнсә таҙартырбыҙ, олатай.

Эләүкәгә мендереп һалды Урал Сәсәнде. Тегенеһе һығып алмалы тиргә батҡас, ике ҡулына ике миндек тотоп, алмаш-тилмәш сабырға тотондо. Шунан һалҡын бүлмәгә сығарып, ял иттереп, йөрәк тибешен һананы ла йәнә сапты. Өс тапҡыр шулай иткәндән һуң, ширлеккә һалып, һабынлап йылы һыу менән ҡырып тигәндәй йыуындырҙы. Иң аҙаҡтан йылымыс һыу менән сайындырып, таҙа кейем кейендерҙе һәм күтәреп тиерлек Сәскә менән йоҡлап йөрөгән карауатҡа килтерҙе.

– Мин унда ятмайым, ҡурҡам, – ти бит быныһы.

– Ҡурҡма. Сәскә инәй һине ошонда һалырға үҙе ҡушты. «Минең рухым, фәрештә кеүек баш осонда тороп, уны һаҡлаясаҡ», – тине

Ризалашты Сәсән һәм тәүлеккә яҡын бер уянмай йоҡланы. Урал ҡурҡып бөттө хатта. Әллә тере түгелме икән, тип килә лә ҡарай. Ә бабаһы тыныс ҡына йоҡлай. Ниһайәт, ул торҙо, шым ғына йыуынды һәм аш бүлмәһендәге өҫтәл янына килеп ултырҙы.

– Нисек йоҡланың, олатай? Төштәр күреп йонсоманыңмы?

– Юҡ, бер төш тә күрмәнем. – Үҙе алан-йолан ҡаранды, ҡарашы менән һауытһаба араһын, һыуытҡысты һәрмәне.

– Олатай, эҙләнмә, – тине Урал, бының ни көҫәгәнен самалап. – Өйҙә араҡы юҡ, булғанын мин түгеп бөтөрҙөм. Олатай, һөйләшеп-килешәйек: ташла һин уны. Ә тартып-һуҙып, әҙерәк кенә эскән булып йөрөһәң, ташлай алмайһың. Йәш булһам да, мине тыңла. Араҡының кешене ни ҡиәфәткә төшөргәнен үҙебеҙ күреп торабыҙ бит!

Бер һүҙ ҙә өндәшмәне Сәсән, алдына ҡуйылған ризыҡты ейгәс, ике ҡулын ҡушарлап өҫтәлгә һалды ла Уралға боролдо.

– Күпме ваҡытҡа ҡайттың һин? Нисә көнөң ҡалды әле?

– Һинең хәлең ауыр тип ишеткәс, бер айлыҡ ял һорағайным. Ике аҙна ғына бирҙеләр. Шуның өс көнө ҡалды.

– Өс көн. Әлбиттә, аҙыраҡ. Ләкин ни хәл итәһең, бары менән байрам тигәндәй, өс көндә өлгөрөр кәрәк.

– Нимәгә?

– Беҙгә Шүлгәнташҡа барып ҡайтырға кәрәк. Бик хикмәтле төш күрҙем. Төш тә түгел ул. Йоҡо аралаш башҡа ингән уй.

– Ниндәй уй?

– Шүлгәнташ мәмерйәһенең һүрәттәренең бер төрлөләренән йылан-саян сыға икән, тип күрҙем. Шуны тикшерергә ине. Әгәр минең уйым хаҡлы булһа, кешелекте күптән борсоған бер һорауға яуап табабыҙ.

– Ниндәй һорау, ниндәй яуап?

– Урал, һин ныҡышмай, төпсөнмәй тор. Тәүҙә үҙ уйымдың дөрөҫлөгөн мин үҙем тикшерергә тейешмен.

Өндәшмәне Урал.

– Был иҫерек алкоголле башы менән нимә уйламаҫ. Шуға эйәреп йөрөргә ваҡытым юҡ минең, тиергә самалайһыңмы? Әйтһәң әйтерһең инде. Әммә барып ҡайтайыҡ. Үтенеп һорайым һинән. Рулгә үҙем ултырырға ҡурҡам. Айҙар буйы эсеп йөрөп, барыһын да онотоп, юғалтып бөткәнмендер, тимен.

– Нимәнең руле? Машина юҡ. Шуны ҡуртымға һалып, аҡса алғанһың бит. Хәҙер аҡса ла, машина ла тю-тю.

– Улай икән. Барыбер барыр кәрәк. Һинең аҡсаң бармы? Мин һиңә аҙаҡтан ҡайтарырмын. Такси алайыҡ та барайыҡ.

– Ниндәй ашығыс эш һуң?

– Ныҡыша бит кеше ныҡышҡас. Әйттерергә итә. Ярар, әйтәм. Тик утыҙ ике тешеңдең береһе араһынан бер һүҙ сыҡһа, ҡабаттан ышаныу бөттө һиңә.

– Ярар.

– Шүлгән мәмерйәһендәге аттар, үгеҙҙәр, мамонттар, кешеләр янында трапецияға оҡшаш ниндәйҙер нәмәнең һүрәттәре бар. Берәү генә лә түгел, бер нисә ул. Ана шуларҙың нимә икәнлегенә төшөндөм шикелле мин... Бөттө, бүтән бер һүҙ ҙә әйтмәйем. Тик ана шул тоҫмалдың дөрөҫмө-түгелме икәнлеген мәмерйәгә инеп тикшереү кәрәк.

– Күптән шулай тиҙәр уны.

Урал кемгәлер шылтыратты, йүгереп йөрөп ер аҫтына төшөргә яраҡлы кейем йүнәтте, ашарға алды. Ярты сәғәттән ҡапҡа төбөнә килгән машинаға сығып та ултырҙылар. Ҡуҙғалып киткәс, Урал йәнә шылтыратты.

– Ишетһен ҡолағың. Беҙ иртәгә кискә ҡайтабыҙ, Аллаһ бирһә. Һин шуңарсы килеп, ашарға йүнәтеп тор. Аҫҡыс тупһа аҫтында. – Шунан Сәсәнгә боролоп, – Донъя мәшәҡәттәренән саҡ ҡына ҡотолдоҡ, – тигән булды.

– Ҡотолдоң һиңә. Фотоаппарат алманыҡ та баһа.

– Мәмерйә янында эшләгән егеттәрҙә бар ул.

Дүрт ярым сәғәт үтеүгә, баяғы еңел машина Шүлгәнташ мәмерйәһе янына барып та етте. Һуңғы ваҡытта эсмәгән сағында һөйләшмәҫкә әүерелгән Сәсән, машинанан сығып, тәнен яҙҙы ла:

– Элек беҙ был юлды өс көн үтә торғайныҡ. Ике көн – Собханғолға тиклем, шунан бер көнгә яҡын – Шүлгәнташҡа саҡлы. Ә хәҙер... Рәхмәт Рәхимов менән Ғәбитовҡа.* Елдереп килдек тә еттек, – тине.

*Шул замандағы Башҡортостан етәкселәре.

Уралдың Өфөнән шылтыратыуы үҙенекен иткәйне. Килеүселәр баш-күҙ алып өлгөрмәне, ашханаға сәйгә саҡырҙылар. Шул арала кәрәкле кейем-һалым, яҡтыртҡыстар һәм һәр икеһенә фотоаппарат әҙерләп тә ҡуйҙылар. Бында килеүҙәренә ярты сәғәт уҙҙымы-юҡмы, оҙатып йөрөүсе өсөнсө кешегә эйәреп, Урал менән Сәсән бик бейек һәм киң мәмерйәнең ауыҙына килеп баҫты.

– Бында ингәнең бар инеме? – Сәсән Уралға төбәлде.

– Был бит – Шүлгән ташы. Урал унда ни эшләп йөрөһөн?

Сәсән кеткелдәп көлдө (һуңғы айҙарҙа уның тәүге көлөүе түгелме икән).

– Ҡобайырҙы уҡығанһың икән.

– Уны ла белмәһәң...

– Ниндәй башҡорт булаһың, тип тә өҫтә.

– Бынығы ла хаҡ.

– Ун биш меңләп йыл элек тә кешеләр күмәкләп тә, икешәрләп тә, яңғыҙ ҙа ошо таш өңөнә инеп юғалған. Шуларҙың береһе тип той үҙеңде.

Сәйәхәтселәр таш һарайға инеп юғалды. Кешеләрҙе дөм-ҡараңғылыҡ һәм һалҡын һауа солғап алды. Бары тик баштарына кейгән каскаларға беркетелгән шәмдән ут төшә һәм алдан атлаусы аяҡ аҫтында ташмы, соҡормо барлығын иҫкәртеп килә. Байтаҡ барғас, алдағы кеше туҡтаны.

– Һеҙ Хаос залындағы һүрәттәрҙе күрһәтеүҙе һоранығыҙ бит әле.

– Мин залдарҙы исемләп белмәйем. – Сәсән яуапланы. – Тик, зинһар, һеҙ трапеция тип аталған һүрәттәрҙе күрһәтегеҙ.

– Бына уларҙың икеһе һеҙҙең ҡаршығыҙҙа. Шәмдәрегеҙҙең утын һулаҡайғараҡ алығыҙ. Бына шулай. Ана, күрәһегеҙме, ҡыҙыл охра (буяу) менән төшөрөлгән ат һыны. Өҫтөндә һыбай кеше лә төҫмөрләнә. Һеҙ әйткән һүрәт – трапеция шул аттың тап алдында һәм аттың аяҡ аҫтында бар. Аҫтағы трапециянан түбәндәрәк йәнә бер ат төшөрөлгән.

– Эйе-эйе, – тип һөйләнде үҙ алдына Сәсән. – Ошолайҙыр тип уйлағайным да.

– Нимәне әйтәһең, олатай?

– Һүрәттәрҙе әйтәм, улым. Ун биш мең йыл элек был рәсемдәрҙе тәү тормош кешеһе бик белеп яһаған бит.

Урал бер-бер артлы һүрәттәрҙе фотоға төшөрҙө, әммә Сәсәндең тел төбөн аңлап бөтмәне.

– Бындай трапециялар тағы бармы?

– Эйе, бар. Һүрәттәр залындағы рәсемдәр араһында ла, бүтән урындарҙа ла бар.

– Ҡыҙыҡ, бик ҡыҙыҡ... Трапецияларҙы әйтәм, бер-береһен үҙҙәре ҡабатламай.

– Юҡ. Бындағы бер һүрәт тә икенсеһен ҡабатламай. Бер ат икенсеһенә оҡшаған, әммә нимәһе менән булһа ла айырыла. Мамонттар ҙа, ҡоштар ҙа, кеше менән мөгөҙ морондар ҙа шулай уҡ. Әллә инде уларҙы төрлө кеше төшөргән, әллә инде бер үк кеше һүрәттәрҙе төрлөсә итеп яһаған?

– Мәмерйәнән ситтәге һеҙҙең өйҙә компьютерҙа был һүрәттәрҙең бөтәһе лә бармы?

– Һис шикһеҙ. Һәр һүрәт төрлөсә йыраҡлыҡтан, уңдан, һулдан, өҫтән, аҫтан фотоға төшөрөлгән. Бында кальцит һәм бүтән бысраҡ менән ҡапланған урындар таҙартылған.

– Бик яҡшы. Тағы бер генә һорауым ҡалды.

– Ниндәй?

– Әйтегеҙсе, һүрәттәрҙең бейеклеге, киңлеге, улар төшөрөлгән стеналарҙың ҙурлығы – һәммәһе лә үлсәнгәнме?

– Үпкәләтер итәһегеҙме мине? Һеҙ ғалим кеше лә инде. Әлбиттә, объектты өйрәнеү уның үлсәмдәрен алыуҙан башлана.

– Рәхмәт. Хәҙер ер йөҙөнә сыҡһаҡ та була.

Шул саҡта Урал ҡысҡырып ебәрҙе.

– Йылан-саяндар һуң?

Сәсән көлдө.

– Йылан-саян юҡ. Уныһы минең төштә генә ине бит.

Мәмерйәнән сыҡҡансы ла, ғалимдар өйөндә йыуынып кейем алмаштырғанда ла Сәсән ауыҙ эсенән мөңрәп кенә ниндәйҙер көй көйләп йөрөнө. Кәйефе яҡшы. Тик, ни эшләптер, күңел күтәренлеген бүтәндәргә лә күсерергә, ҡыуанысын уртаҡлашырға теләмәй һуң? Сәсәнгә сәйерһенеп ҡараған Урал шулай уйланы.

Өҫ-башты рәтләп, сәс-һулды йүнәткәс, оҙон өҫтәл янына ризыҡ йыйырға ултырҙылар. Алдындағы аҙыҡ-әүҡәтте барлап сыҡты ла Сәсән һорайһы итте:

– Йомортҡағыҙ юҡмы?

Ашнаҡсы баҙабыраҡ ҡалды.

– Әлләсе... Ит, балыҡ булғас, бөтәүләй көйө картүк тә бешергәс, йомортҡа нейтеп торманым.

– Юҡ-юҡ, һылыу... – Сәсән «ни эшләп өндәштем» тигән көнгә төштө. Ана бит, йәш ҡатынды уңайһыҙ хәлгә ҡуйҙы. – Юҡ. Мин хәҙер үк йомортҡа ашарға кәрәк тигәндән әйтмәйем. Ғөмүмән, бында йомортҡа бармы, тип һорайым.

– Бар, ни эшләп булмаһын. Ҡайһы бер кеше иртәнсәк йомортҡа һорай.

– Ҡайҙа, һылыу, күрһәт әле, нимәлә тотаһығыҙ йомортҡаны.

– Нимәлә тип ни, беҙгә йомортҡаны күп килтермәйҙәр. Ике көнлөк, арта барһа – өс көнлөк. Шуға һыуытҡыста ҡуйып тормайбыҙ. Боҙолорға ирек бирмәйбеҙ. Бына ошо һауытта ултыра, ҡарағыҙ.

Сәсән, йәш ҡатынға эйәреп, аш бүлмәһенә инде һәм, йомортҡа тулы һауытты күргәс, ауыҙы йырылды.

– Шулай булыр тип уйлағайным да. Тап үҙе. Урал, кил әле, бынау һауытты сығарайыҡ.

Урал ҡабаланып Сәсән янына инде. Сәсән, йомортҡалы ҙур һауыттың бер яҡ ҡолағынан тотоп, Уралды көтә ине.

– Ал, ана, икенсе ҡолағынан тот.

Һауытты ҙур бүлмәгә сығарып, оҙон өҫтәлдең башына ултырттылар. Шунан Сәсән бындағы бар кешегә өндәште.

– Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ. Ентекләп, текләп ҡарағыҙ. Йомортҡаға түгел, һауытҡа ҡарағыҙ. Нимәгә оҡшаған?

Бүлмәлә тынлыҡ урынлашты. Кешеләр әле һауытҡа, әле Сәсәнгә күҙ һалды. Аранан берәү, бая мәмерйәгә былар менән бергә төшкән археолог:

– Бәй, был бит мәмерйәләге трапеция һүрәтен хәтерләтә, – тине.

– Афарин! – Сәсән ҡысҡырып ебәрҙе. – Күҙең үткер икән. Тап үҙе. Мәмерйәләге трапеция. Бына арҡыры торған таяҡтары тегендәге ҡыя һыҙыҡтар һымаҡ. Әле генә Урал менән мин тотоп торған ҡолаҡтар трапецияның ике осондағы бөгөлдәр кеүек үк. Икенсе төрлө әйтһәк, ун биш мең йыл элек беҙҙең рәссам бабаларыбыҙ мәмерйә стенаһына йомортҡа һауытын төшөргән. Ҡарағыҙ, бөтөн яҡтан да оҡшаған.

– Ысынлап та.

– Оҡшаған, – тиеште кешеләр.

– Ун биш мең йыл буйы һауыттың үҙгәрмәүен әйт.

– Ә ниңә үҙгәртергә, ти? Йомортҡа йә шуның һымаҡ бүтән нәмә һалырға, әйтәйек, ҡорот-морот, уңайлы ла инде. Төрлө ҙурлыҡта итеп яһап була. Теләһәң – ҡолаҡлы, теләһәң – ҡолаҡһыҙ ит. Эшләр өсөн сыбыҡ-сабыҡ, ваҡ ағас һәр саҡ бар. Яһау ҙа ҡыйын түгел. Шулай булғас, ни эшләп бүтәнде уйлап сығарып

торорға һуң? Иң мөһиме – муйыл, тал сыбығынан эшләнгән һауытта йомортҡа ватылмай.

– Ә шулай ҙа ниңә мәмерйәгә нәҡ был һауыттың һүрәтен төшөргәндәр һуң?

– Был һорауға һорау менән яуап бирергә тура килә. Ун биш мең йыл элек кешеләргә был һүрәттәр ни өсөн кәрәк булған икән? Улар рәсемдәр күргәҙмәһе яһамағандар бит.

Уныһы билдәле, – Сәсән үҙе үк яуапланы. – Боронғо кешеләр бөйөк көс – Хоҙай барлығына ышанғас, уның мәрхәмәтенә өлгәшер, кешеләргә асыуланмаһын өсөн уға ҡорбан килтергәндәр. Бер урында ҡорбан тере мал, кеше рәүешендә булһа, әйтәйек, Латин Американың илдәрендә, мәмерйәләрҙе Хоҙайға табыныу итеп алған кешеләр (әлеге Францияла, Испанияла, Башҡортостанда) ҡорбандарҙы һүрәт рәүешендә биргән. Моғайын, беҙгә – бәндәләренә миһырбанлы булһаң, ошондай ҡорбандар килтерербеҙ, тигән вәғәҙә рәүешендә яңғырағандыр уларҙың табыныуы.

– Эйе, – Сәсән тағы ла йәнләнә төштө. – Тап шулай. Ҡорбан – бүләк вәғәҙә итә кеше үҙ Хоҙайына. Ә нимә бирә ала һуң ул? Әлбиттә, ул заман кешеһе аныҡ фекер йөрөткән һәм тик үҙе нимә белгән, нимә күргән – шуны ғына вәғәҙәләгән. Күргән нәмәһе иһә мамонт, ат, буға, ҡош һәм үҙе урманда-ҡырҙа күпләп йыйған ҡош йомортҡаһы. Ҡоштар, йомортҡанан үрсегән йылан-саян, кеҫәртке кеүек нәмәләр ҙә бихисап булған. Һауыт яһа ла йый ғына. Кешенең аҙыҡ-әүҡәтенең дә күп өлөшөн йомортҡа тәшкил иткәндер, тип уйларға кәрәк. Сөнки мамонт, ат, буға кеүек эре малды, ҡыр кәзәһе һымаҡ вағырағын да әйләнгән һайын тотоп булмай бит. Ә йомортҡаны йәй буйы тиерлек бер ҡурҡыныслыҙ һәм мәшәҡәтһеҙ йыйып була, йыбанма ғына. Башҡа төрлө әйтһәң, йомортҡа таш быуат кешеһе тормошонда бик ныҡ урын алған. Шуға күрә Хоҙайына уны бүләк итергә самалауы – ҡәҙимге күренеш. Ошоға нигеҙләнеп, мин бөгөн башҡорттар ситәүкә тип атаған һауытты таш быуат кешеләре Шүлгәнташ мәмерйәһенә ҡыҙыл буяу менән төшөргәндер, тип әйтә алам.

Сәсән шымды. Ул ғына түгел, бүлмәләге бүтәндәр ҙә өнһөҙ ҡалды. Һәр кеше ишеткәне тураһында уйлай ине. Иң алдан баяғы археолог телгә килде:

– Булыуы бар. Юҡ тип әйтеп булмай.

Бүтәндәр өҙөп кенә бер ни ҙә әйтмәне. Һәр кем үҙ мәшәҡәтенә тотондо ла китте. Кемдер ашарға йүнәтте, кемдер йыуынды, кемдер тышҡа уҡ сығып китте. Хатта Урал да бер һүҙ ҙә өндәшмәне.

Үҙенең фекерен һалҡын ҡаршылағандарына аптырабыраҡ ҡалған Сәсән дә ни тиергә белмәне. Кешеләр уны ҡул сабып хуплар, тигән өмөт унда тыуыуынтыуманы, әммә был тиклем һүҙ ҙә әйтә алмаҫлыҡ тәьҫир булыр тип тә көтмәгәйне. Шуға Уралға ялбыраулы тиерлек ҡарашын төбәне. Тегенеһе аңланы олатаһының ни үтенгәнен. Әммә барыбер өндәшмәй торҙо ла:

– Хөрмәтле ғалим әфәнде хаҡлылыр, – тиеү менән сикләнде. – Һүрәт ситәүкәгә ысынлап та оҡшаған.

Өн һәм һан

Мәмерйәләге тикшеренеүҙе ҡабаттан телгә алманылар, тиһәң дә ярар ине, бына-бына аэропорттың таможня залына инеп китәм тип торғанда, Урал һүҙ башланы.

– Олатай, һин, теге һүрәт тураһындағы фекереңә берәү ҙә тейешле әһәмиәт бирмәне, тип уйлай күрмә. Киреһенсә, ул беҙҙең бөтәбеҙҙең дә уйын аҫтын өҫкә килтерҙе. Шуға барыбыҙ ҙа телдән яҙҙыҡ. Мин әле булһа ла иҫемде йыя алмайым тиерлек. Һинең әйткәнеңде арҡыры-буй үлсәйһе, хуплар йә кире ҡағыр

өсөн дәлилләйһе, беренсе сиратта һәр кемгә үҙен үҙе ышандыраһы бар бит. Үҙең беләһең, бер генә асыш та шунда уҡ ҡуш ҡуллап ҡаршы алынмай. Олатай, ошо асышыңды ентекләп раҫлап бер нисә ғилми журналда баҫтырырға ине. Бына шунан һуң көтөрбөҙ һөҙөмтәһен.

– Эйе-эйе... Бәлки... Шулайҙыр... – Сәсән дә икеле-микеле генә һөйләште.

Шул арала самолетҡа саҡырып иғлан яңғыраны. Сәсән Уралды ҡосаҡлап алды, үҙенең күҙҙәре дымланды. Ҡартаямдыр, ахыры, тип уйланы, кешене оҙатҡанда ла илағы килә. Әллә ул ғына түгел, йәш кеше Уралдың да күңеле йомшарҙы. Бер-береһенә бик яҡын булып киткәйнеләр, йәнә айырылышалар.

Күккә күтәрелеп байтаҡ ваҡыт үткәс, самолет уны эҫе донъяға килтереп төшөрҙө. Ҡыҙыу ҡояш аҫтында бар нәмә көйрәп бара. Кешеләр эҫегә сыҙамлыраҡ булыр өсөн тик аҡтан кейенә һәм күләгәгә йә ҡыйыҡ аҫтына ҡасырға тырыша. Ғәрәп Әмирәттәре был. Бик эҫе мәл ине.

Урал ҡунаҡхана бүлмәһенә ҡасты. Бында һауа һыуытҡыс кондиционер эшләй, шуға эҫелек ҡурып бармай. Егет йыуынып, тамаҡ ялғаны ла ҡағыҙҙарын ҡулына алды. Өфөгә китер алдынан университетта үҙе уҡытасаҡ дәрестәрҙең теҙмәһен әҙерләй башлағайны, шуны тамамлар кәрәк. Бәлки, Шүлгәнташ мәмерйәһендә башына килгән фекерҙе лә тасуир итер.

Кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырлайһың, тиҙәр бит әле. Сәсән менән йөрөгәс, уның уйҙары Уралға ла тынғы бирмәй башланы. Нисек йәшәгән икән бынан ун биш мең йыл элек Шүлгәнташ тирәһендәге кешеләр? Ҡайһылайтып яраҡлаша алды икән улар Уралдың ҡатмарлы тәбиғәтенә? Нисек аралаштылар икән үҙ-ара?

Урал, ҡағыҙҙарға эйелеп, башлаған эшен дауам итте, әммә уйҙары ирекһеҙҙән бик борон булыуы ихтимал көндәргә әйҙәне.

Кеше ерҙә яралғаны бирле үҙен һәм уны әйләндереп алған донъяны танып белергә тырыша. Хәҙер ул ерҙә бер нисә тиҫтә мең йыл йәшәй һәм шул дауамда үҙен аңларға, бүтәндәрҙе төшөнөргә, һыуҙы, күкте, ерҙе өйрәнергә ынтыла. Ике генә һорау ҡуйған кеше үҙе алдына: был кем һәм был нимә – меңләгән, миллионлаған яуап тапҡан инде ул әлеге һорауҙарға, әммә яуапты һаман эҙләй. Сөнки беренсе яуап яңы һорау тыуҙыра, яңы яуап икенсе һорау уята. Ғүмер буйы, йәшәйеш буйы ошолай. Һорау ҙа – яуап, яуап та – һорау.

Бик борон заманда... Урал ирекһеҙҙән Сәсән бабаһының «борон» һүҙенең барлыҡҡа килеү рәүешен тикшергән мәҡәләһен хәтерләне.

Беренсе өн-һүҙ **М** булды. Уның варианты – **Б**. Ошо өн-һүҙ бик борон замандан бирле үҙгәрмәй тиерлек бөгөнгө көнгә килеп еткән һәм һинд-алтай-иран-европа телдәрендә ул әле лә яңғырай. Мәҫәлән: **мин** (башҡортса), **мән** (боронғо төркисә), **бән** (төрөксә), **мой, мое** (урыҫса), **мә** (ҡортса), **му** (инглизса).

Һүҙ, ғөмүмән, тел кешеләрҙең аралашыу ҡоралы булараҡ барлыҡҡа килгән. **М** исемле кешегә аралашыр өсөн икенсеһе кәрәк, һәм беренсе уға исем бирә. Үҙе **М** булғас, күршеһенә **Т** атамаһын ҡуя. Шунан килә: **то** (ҡортса), **ты** (урыҫса), **син** (төркисә **с** менән **т** сиратлаша), **һин** (башҡортса **с һ**-ға үҙгәргән).

Ошо рәүешле барлыҡҡа килгән беренсе өн-һүҙҙәр менән кеше үҙенең, янындағыларҙың кемлеген, үҙен әйләндереп алған йәнле һәм йәнһеҙ нәмәләрҙе исемләй.

Ошо урында Урал үҙ фекеренең бигерәк ҡәтғи, шул саҡтағы хәл-ваҡиғаларҙа үҙе ҡатнашҡан кеүек фекерләүен самалап алды. Шулай әйтергә, моғайын, хаҡы юҡтыр. Әммә боронғоларҙың тормошо тураһында һөйләгәндә, уларҙың һәр хәрәкәтен, һәр теләгән үҙеңдекеләй итеп күҙ алдына килтерәсе. Былай, бәлки, килешеп тә бөтмәйҙер. Ул нисек кенә үҙен элеккеләр урынына ҡуйып ҡарамаһын,

барыбер һуңғы дәүер кешеһе бит. Уның фекерләүгә, хәрәкәткә, ейгән ризығына яңы цивилизация һеңгән. Күпме генә үҙен тәүтормоштоҡолар араһында итеп күҙалламаһын, барыбер сей ит ашап, көнөнә тиҫтәләрсә саҡрым шырлыҡ ярып, ҡулға таяҡ ҡына тотоп, филгә һунар итә алмай.

«Икенселәй ҡараһаң, мин бит оло януарға һунар итергә йыйынмайым, – тип дауамланы ул уйҙарын. – Бары тик боронғо кешеләрҙең фекер ебен аңларға, улар әйткән тәүге һүҙҙәрҙе ҡабатларға ниәтләнәм. Өндәр, һүҙҙәр кеше телендә меңәр йыл буйы үҙгәрешһеҙ тиерлек һаҡлана икән, уларҙы мин дә боронғо яңғырашында ҡабатлай алам бит. Өҫтәүенә, миндә, замандаштарымдағы кеүек, бик әүәлге атай-бабайҙарыбыҙҙың ҡаны хәрәкәт итә. Ошо хәлдәр миңә элеккеләр тураһында беренсе заттан һүҙ әйтергә мөмкинлек бирәләр кеүек тойола», – тине Урал, үҙен аҡларға тырышҡандай.

Ошолайтып, тәү тормош кешеһе ике һүҙ уйлап сығарҙы: М һәм Т – мин һәм һин. Хәҙер шул кеше урынында уйлап ҡарайыҡ: өсөнсө һүҙ нимә тураһында буласаҡ һәм нисек яңғыраясаҡ? Кешегә йәшәү өсөн беренсе сиратта ней кәрәк? Һыу, әлбиттә. Өсөнсө һүҙе тереклеккә йән биреүсе тураһында, тимәк. Яңғырашы уның йәнә бик ҡыҫҡа тартынҡы өн. Ниндәй өн? Бынығын асыҡлар өсөн бөгөнгө телдәргә мөрәжәғәт итәйек. Һыу нисек яңғырай уларҙа? Был өн – һүҙ ц – ш булырға тейеш. Сөнки һыуҙы аңлатҡан һүҙҙәр күп телдә шул өндәр ҡатнашлығында яһала. Башҡорт телендә лә бар улар: шул (яҙғы ҡар һыуы), һул, шай (боҙло һыу), һыу үҙе лә (ц һ-ға үҙгәргән).

Артабан тәүтормош кешеһе үҙенең тән ағзаларына исем бирә башлай. Әлбиттә, тәү сәғәттә уларҙың атамаһы бик ябай һәм, нигеҙҙә, бер генә төшөнсәне бирә. Кешенең тән ағзаларының барыһына ла хас күренеш нимә һуң? Әлбиттә, хәрәкәт. Ҡуҙғалып торған тән ағзаларын Ҡ өн-һүҙ менән билдергән. Торабара һәр тән ағзаһын айырым исем менән әйтеү хәжәте тыуғас, улар бер-береһенән яңғырашы менән айырылған өндәр менән байытылған, әммә иң баштағы исем ҡалған: ҡул, аяҡ, күҙ, керпек, бармаҡ... Ошондай уҡ уртаҡлыҡты төрки телдәрендә генә түгел, уларҙан йыраҡ торған славян, герман, һинд телдәрендә лә күрербеҙ. Мәҫәлән, русса: рука, ног(к)а, г(к)лаз; ҡортса: ҡош (кеше тәненең ал яғы), ҡол (беләк), ҡолм (йоҙроҡ), галгә (бот), ҡун (бил), инглизса dack (бил), hand (ҡул).

Ошо рәүешле тәүтормош кешеһе тәүҙә иң ябай һүҙҙәр – өндәр уйлап таба. Үҙен һәм уны уратып алған мөхитте танып белеү ихтыяжы артҡан һайын, һүҙисемдәр күбәйә. Уның тел, теш, аңҡау, бәләкәй тел, ғорла, тамаҡ, тамаҡ төбө, ирендәрҙән, танау, тын юлынан торған ауыҙ ҡыуышлығы сығарған өндәр яняҡтағы нәмәләрҙе атарға етмәй, һәм ул һүҙҙәрҙе инде өндәр теҙмәһенән төҙөй башлай. Ғүмер үткән һайын, кешенең белеме арта, инде ул нәмәләрҙе генә түгел, хәрәкәтте лә, күҙе айырған төҫтәрҙе, дәүмәлде һәм башҡа бик күп торошто, хәлде исемләргә өйрәнә. Айырым һүҙҙәрҙән теҙмәләр, һөйләмдәр барлыҡҡа килтерә. Әүәл уның һөйләме бер, ике, уҙа барһа – өс һүҙҙән яһалған булһа, хәҙер уларҙың күләме ҙурайғандан-ҙурая, инде кеше нәмәләрҙең, кемдең хәл-торошон ғына түгел, үҙенең, хатта бүтәндәрҙең фекерен һүҙҙәр теҙмәһенә, һөйләмдәр бәйләменә үрә.

Икенсе төрлө әйткәндә, тамаҡ төбөнән, ауыҙ ҡыуышлығынан сыҡҡан беренсе өн-атамаларҙан башланған тел кешенең фекерләүенә, тора-бара фекер үҫешенә, аҡылдың артыуына, төрлө-төрлө белемдең күбәйеүенә килтерҙе. Ябайҙан ҡатмарлыға ынтылды кеше аҡылы. Инде ул үҙен, күршеһен, үҙҙәре уратып алған донъя менән генә сикләнмәйенсә, күҙ ҡарашы талғансы күккә баға, «Ҡояш, ай, йондоҙҙар нисек яна, ниңә көндө төн алмаштыра, офоҡтоң аръяғындағы диңгеҙ

ҡайҙа барып юғала?» кеүек меңәрләгән һорауға яуап эҙләй. Был – кеше фәлсәфә ҡора тип атала. Йәғни кеше иң беренсе әйткән өнөнән башлап иң ҡатмарлы күренештәр тураһында фекер йөрөтөүгә тиклем юл үтте, аҡыл йыйҙы, белеме киңәйҙе. Әлбиттә, меңәр йылдар дауамында ғына уҙа алды был юлды әҙәм балаһы һәм уның башынан алып бөгөнгө көнөнә тиклем, йәғни фәйләсүфкә әүерелгәнсе ул һүҙҙәр, һөйләмдәр менән эш итте – уның юлдашы тел булды.

Ябай өндән башланған тел, ныҡ ҡатмарланыуы арҡаһында, кешене аҡыл эйәһе дәрәжәһенә күтәрә. Шул уҡ ваҡытта ҡатмарлы дөйөмләштереүҙәр, сағыштырыуҙар, үлсәүҙәр, шикләнеүҙәр аша барлыҡҡа килгән аҡыл-фәлсәфә тик тел арҡаһында ғына бар булды һәм һаман үсеш дәүерен кисерә...

Ошо урында Урал үҙенең бөтөнләй икенсе юсыҡҡа төшөп барыуын самала751ны. Ул математик та баһа. Ә уйҙары һандарҙан, формулаларҙан бик йыраҡта йөрөй.

Ысынлап та, тәүге һан ҡасан барлыҡҡа килде икән һуң? Әлбиттә, өн – һүҙҙән һуң инде. Сөнки һан, әйтәйек, **бер** үҙе лә өндәрҙән тора бит. Был турала хатта Библияла әйтелгән: «первым было слово».

Өн-исем ҡушыуҙы кеше үҙенән башлаған һымаҡ, һанауҙы ла ул үҙенән башларға тейеш. Сөнки кеше бөтөн нәмәне лә үҙе өсөн яһай, үҙенең мохтажы өсөн башҡара. Үҙенән артып ҡалһа, күршеһенә бирергә мөмкин. Элек тә шулай булған, хәҙер ҙә шулай ҡалған. Асыҡҡан ике кеше ризыҡҡа юлыҡһа, бер-береһенә һонмай тәүге киҫәкте, ә үҙ ауыҙына тултыра. Бөтөн нәмә лә шулай эшләнә: кейенеү ҙә, биҙәнеү ҙә, эсеү ҙә, автомашина алыу ҙа... Кеше, ниндәй генә бөйөк йә төшөп ҡалған булмаһын, ер йөҙөндә иң кәрәкле, иң тәүге хәстәргә лайыҡ бәндә тип үҙен һанай. Шуға күрә һанды ла үҙенән башлай – бер бармаҡ – имән бармаҡ – **мин** (бән) – **бер**. Үҙенә исем биргәйне бит инде ул **м** (б) тип. Имән бармағын күрһәтеп «**м** (б)» ти. «Бер, беренсе», – тип әйтте ул. Һуңғараҡ, һүҙҙәр ҡатмарлаша төшкәс, «бе» булып яңғырар тәүге һан, күп йылдар үткәс, «бер»гә әүерелер. Бүтән телдәрҙә иһә **б (м)** өнө **н** йә тағы ла яңғырашы яҡын бүтән тартынҡы менән алышыныр. Шунан **one** булып ишетелә (инглизса), **один** булып китә урыҫса.

Боронғо кеше өсөн берҙән артыҡ кеше йәки нәмә күп булып аңлашыла. Шулай булыуы тәбиғи. Сөнки ниндәйҙер табышта (емеш, ит киҫәге, йомортҡа) тағын кем менәндер бүлешеү, һис шикһеҙ, шул нәмәне берҙән күпкә әйләндереү буласаҡ. Шуға күрә минән (берҙән) артһа, күп барлыҡҡа килә тип белә. Күплек атамаһы, әлбиттә, берлек нигеҙендә яһала. Шуға күрә бөтөн дә **мин – беҙ** (башҡортса), **мә – әм** (ҡортса), **ми – we** (инглизса), **я (меня) – мы** (русса) яңғырай. Бүтәнсә әйтһәк, күплек берлек нигеҙендә барлыҡҡа килгән.

Йәғни тәүҙә ике генә һан булған, тип фаразларға мөмкин: **бер** һәм **күп**.

Бүтән һандарҙың барлыҡҡа килеүе кеше фекеренең, уйлау һәләтенең ҡатмарлаша барыу осорон сағылдыра. Уның тормошо ла ҡатмарлана бара һәм туҡтауһыҙ тыуған һорауҙарға яуап эҙләй. Әйтәйек, ғаиләнең ирҙәре һунарға китте, ти. Береһе алдан бара һәм кейектең булыу-булмауы тураһында арттағыларға хәбәр бирә. «Ҡуян күренәме?» «Эйе». «Берәүме?» «Күп». «Күпме күп?» «Бер һәм бер».

Бына ошо рәүешле «ике» барлыҡҡа килде. Йәғни бергә берҙе ҡушыу һөҙөмтәһендә. Артабанғы бөтә һандар ҙа тәүҙә аталған һанға берҙе өҫтәү юлы менән яһала. Бер һәм бер була ике. Ике һәм бер була өс. Өс һәм бер була дүрт... Туғыҙ һәм бер була ун. Ун һәм бер була ун бер...

Ошо асышына ҡыуанып йөрөнө Урал. Йылға яҡын эҙләнеүенең бер булһа ла һөҙөмтәһенә өлгәшә алды бит. Өн менән һандың барлыҡҡа килеү мөмкинлегенә төшөндө. Иң тәүге һандар нигеҙендә бүтәндәренең яһалыу рәүешен

аңланы. Уның уңышы тураһында бөтөн кеше лә белә һымаҡ тойолдо. Шуға һәр кешенең ҡарашында үҙенә рәхмәт бар кеүек ине. Ул һәр ҡаршы осраған кеше менән баш эйеп иҫәнләште, «рәхмәт-рәхмәт» тип ҡабатланы. Бәхеткә күрә, Уралдың урынһыҙға маһайыуы тиҙ үтте. Бер көн һөйөнөп йөрөгәндән һуң үҙенең алданғанын төшөндө. Мине бит берәү ҙә танымай, өҫтәүенә, минең ниндәй уйға килгәнемде улар ҡайҙан белһен, мин бит ул турала берәүгә лә әйтмәнем, тип үҙенең бер ҡатлылығынан көлдө. Шул уҡ көндө үҙенең нимә уйлап сығарғанын компьютер экранына яҙҙы ла Интернеттан Сәсәнгә ебәрҙе. Урал Ғәрәп Әмирәттәренә китер алдынан Сәсәнгә компьютер менән нисек файҙаланырға икәнлеген өйрәткәйне. Әммә оло кеше яңы техникала эшләп алып китеренә бик шикләнгәйне. Яңылышҡан... Урал хәбәр ебәргән көндөң иртәгәһенә үк Сәсәндән яуап килде. Бер-ике һүҙҙән генә торған булһа – бер хәл. Сәсән Уралға үҙенең яңы нәмәһен – йән менән тән тураһында яҙғандарын ебәргәйне. Аҙағына: «Һан хаҡында уйланыуҙарыңды бик хуплайым. Урал исемен, Алла бирһә, аҡларһың, тип уйлайым. Урал – ул «шул исемле тау армыттарында, дүрт ҙур йылға буйында көн күргән кешеләргә яңы тормош биргән батыр. Ә һин кешелеккә яңы һулыш өрөрһөң, тием. Хәҙер инде кешелектең үҫеш баҫҡыстары тураһында күберәк уйла. Бында, бәлки, минең яҙғандарҙың да бер осоҡ ҡына булһа ла файҙаһы тейер».

– Һай, аҡыл эйәһеһең дә инде, олатай, – хатта ҡысҡырып ебәрҙе Урал, хаттың һуңғы юлын уҡығас. – Миңә шул тиклем ҙур бурыс йөкмәтеү менән ҡуша йәүкәләп тә ҡуйған. Ә үҙенең эшен «бәләкәс кенә» тип күрһәтә. Ғәмәлдә ана ниндәй асыш яһаған! Тереклеккә йәнде атай бирә, ти ул. Йән ғаләмдән дә килмәй, ниндәйҙер ҡөҙрәт тә уны өләшеп йөрөмәй, бары тик инә ҡарынына һалып атай бирә. Ышанһаң ышан, ышанмаһаң, тикшереп ҡара. Урал тел шартлатты ла көлөп ебәрҙе. Былай ҙа яҡшы кәйефен Сәсәндең хаты тағы ла күтәрҙе. «Олатайға ентекләп яҙырға кәрәк әле: компьютерына скайп ҡуйһын. Бер-беребеҙгә ҡарашып, фекер алышырбыҙ. Интернет почтаһы, әлбиттә, яҡшы нәмә, «һә» тигәнсе әллә күпме ҡитғаларҙы үтеп, хат килеп етә. Әммә күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеүгә етәме ни?» – тип тә ниәт итте Урал.

Башҡортлоҡ

Ғәрәп иленән ҡайтып, ҡойма янында ятҡан еренән Урал табып алмаһа, Сәсән менән ни булырын ул үҙе лә, бүтән дә белә алмай ине. Бәхеткә, хәлдең бик ҡырҡыу икәнлеген Урал аңланы һәм ете ер аръяғынан ҡайтып етте. Шул турала уйлай ҙа Сәсән, берҙән, Уралға рәхмәт әйтеп бөтә алмай, икенсенән, ояла. Хәмер менән дуҫлыҡтың аҙағы ни менән барып бөтөрөн ул белмәй инеме ни? Белә ине. Шуны эсмәй түҙә алмай инеме? Ала ине. Шуға ҡарамаҫтан, эскегә һалышты. Йәнәһе, ҡайғыһы ҙур, ҡайғыны баҫырға шайтан һыуы ярҙамлаша. Эйе, ярҙамлашты. Тағы бер аҙ ҡойма төбөндә ятһа, теге донъяға китә һәм «эсеп үлде» тигән дан ала ине. Әлдә... «Бөттө, – тип үҙенә һүҙ бирҙе Сәсән. – Ҡабаттан шул яуызды ауыҙыма алмаясаҡмын».

Шул төндө ул төш күрҙе. Имеш, Сәскәһе аҡ фәрештә рәүешендә уң яурынында ултыра, һулында – оҙон ҡолаҡлы, йөнтәҫ ҡойроҡло шайтан. Сәсәндең алдындағы өҫтәлдә уң яҡта – китаптар, һул яғында – затлы шарап менә ҡәһүә. Шайтан яурындан һикереп төштө лә ике рюмкаға шарап, ике сынаяҡҡа ҡәһүә ҡойҙо.

– Әйҙә, эсәбеҙ, – абау, рюмка һона Шайтан. – Шәп шарап, аҙ ғына төшөрәбеҙ. Күңелде күтәрер өсөн генә. Шунан ҡатының менән икәүләп ҡәһүә һемерерһегеҙ. Уға ла рәхәт булып китер. Ир менән ҡатынға рәхәт кәрәк ул... – Шайтан рюмканы этә, үҙенең йөнтәҫ ҡойроғо Сәсәндең муйынын уратып алған, йайлап ҡына быуып быуа.

Шул саҡ Сәскә ҡысҡырып ебәрҙе:

– Үлтерә лә һине!

Шайтан Сәскәгә тозорая:

– Бергә булғың килһә, шым ултыр, сайылдама, тинем һиңә.

Ҡайҙан көс килгәндер Сәсәнгә – ике ҡуллап матҡып тотоп алды ла шайтанды, күтәреп тороп быраҡтырҙы. Баяғы шешәне селпәрәмә килтергәнсе барып бәрелде был.

Быяла ватылған тауышҡа уянып китте Сәсән. Йоҡо урынында тубыҡланып тороп алған. Сәскәһенең ятҡан урыны буш. Баш аҫтына һалып йөрөгән яҫтығын алып елгәргән, ахырыһы. Уныһы яҙыу өҫтәлендә ята. Яҡтыртҡыс шәм ҡолаған, электр лампаһының ярсыҡтары тирә-яҡҡа сәсрәгән. Шайтан тип мендәрҙе елләгәнмен, шикелле, тип уйланы. Төш тиһәң дә төш. Өн аралаш хикмәтле төш. Шайтан ҡоторта, ә Сәскә бахыр теге донъянан тороп та мине ҡурсалай. Ә мин – тинтәк, шул ен-шайтан ҡотҡоһона ышанып йөрөйөм.

Ышаныусанлыҡ, бер ҡатлылыҡ беҙҙең ҡаныбыҙға һеңгән инде. Быныһын бер нисек тә ташлап булмай. Ҡырып та, ышҡып та, йыуып та бөтөрә торған түгел. Мин уны хатта башҡортлоҡ тип атар инем. Әлбиттә, ҡайһы бер бүтән халыҡтың да милли һыҙатында бар былар. Әммә бөтәһендә лә түгел. Һәр милләттең дә ҡайһы бер кешеһендә лә ышаныусанлыҡ менән бер ҡатлылыҡ була. Әммә башҡорттағы кеүек һәр кешеһендә түгел. Бөтә халыҡҡа хас булған өсөн уны башҡортлоҡ тип атар кәрәк. Башҡортлоҡ халәте тип...

Ғөмүмән, нимә һуң ул башҡортлоҡ йә урыҫлыҡ, йә инглизлыҡ. Быныһын билдәләү ҡыйын түгел. Башҡортлоҡ, урыҫлыҡ, инглизлыҡ – ул ошо милләттең күпселек ағзаларына хас холоҡ-фиғел, кәүҙә төҙөлөшө, йөҙ ҡоролошо, күҙ ҡарашындағы уртаҡ сифаттар.

Башҡортто бүтән милләттән холҡо яғынан батырлыҡ, яугирлыҡ, ҡыҙматаҙлыҡ, тура һүҙлелек, бер ҡатлылыҡ, ышаныусанлыҡ, алдай белмәү, ҡунаҡсыллыҡ, олоно-кесене хөрмәтләү, ҡушылғанды теүәл үтәү, әҙ-мәҙ үсексәнлек, бушҡа маҡтанмау айырып тора. Тағы ла мин һанамаған һыҙаттары ла барҙыр. Әммә былары нигеҙҙе тәшкил итә.

Кәүҙә төҙөлөшөнә килгәндә, был мәсьәлә йөҙәр йыл дауамында өйрәнелгән инде. Шуныһы ҡыҙыҡ: бынан 200-300 йыл элек башҡорттоң кәүҙәһе нисек булған, әле лә шулай ҡала. Ирҙәре урта буйлы, киң яурынлы, кәүҙәһенә пропорциональ башлы, шундай уҡ ҡуллы, ултырағы түбәнерәк, аяҡтары пропорционалдән ҡыҫҡараҡ, табаны яҫыраҡ, нигеҙҙә, йәйенкерәк битле кешеләр.

Ҡатындарының кәүҙә төҙөлөшө, һис шикһеҙ, ирҙәрҙекенә оҡшаш. Тик оҙонлоҡтары ирҙәренекенән ун сантиметр тирәһе тәпәшерәк.

Йөҙ ҡоролошо, уның тиреһе төҫөнән башлап күҙ төҫөнә тиклем бер-береһенән айырыла. Бер үк ырыуҙа зәңгәр күҙҙәр ҙә, ҡараһы ла булыуы ихтимал. Йөҙ ҡоролошон, милләттең төп һыҙаттарының береһе тиҙәр. Был йәһәттән башҡорттарҙа айырмалыҡтар бар. Күрәһең, башҡорт халҡының нигеҙендә бер ырыу ғына ятмай. Йөҙ ҡоролошонда европа, монгол, иран-һинд кешеләренекенә хас уртаҡлыҡтар ҙа күп. Был хәл, башҡорттарҙы барлыҡҡа килтереүҙә йә күп ырыуҙар ҡатнашҡан, йә күп ырыуҙарҙы барлыҡҡа килтереүҙә башҡорттар нигеҙҙе тәшкил иткән, тип уйларға мөмкинлек бирә.

Күҙ ҡарашы йәһәтенән милли һыҙаттарҙы эҙләүсе ғалим-ғалимәләр һирәк. Һәр хәлдә Сәсәндең был турала махсус хеҙмәт уҡығаны булманы. Тик уның уҡымауы был турала айырым китаптың юҡлығын аңлатмай. Һәр хәлдә әлегә Сәсән үҙенең күҙәтеүҙәре менән генә сикләнергә булды.

Күҙ ҡарашы менән милләт милләттән айырыла икән шул. Әйтәйек,

башҡорттоң күҙенән күпселек ваҡытта йылылыҡ бөркөлә. Әлбиттә, усал осҡондар сәсрәгән ваҡыт та була. Әммә быныһы гел түгел. Башҡорт әңгәмәсеһенә һөҙөп йә аҫтан ҡарамаҫ, уның күҙ ҡарашы тура. Кеше уға тоҫҡалып һөйләгәндә, ҡырын ҡарай алмай. Үҙен әрләгәндә лә, маҡтағанда ла ҡарашын аҫҡа йүнәлтә. Кешене үҙе маҡтағанда күҙҙәрен ҡыҫа бирербәк ҡарай... Сифаттар теҙмәһен дауам итергә була. Әммә әле Сәсәндең маҡсаты ул түгел. Күҙ ҡарашы – милләттә билдәләгән бер генә һыҙат.

Дөйөм алғанда, кем һуң ул башҡорт?

Аҫаба

Сәсән «...башҡорт булып китергә ынтылыуының ҙур мәғәнәһе бар», – тип яҙҙы ла туҡтап ҡалды. «Ниндәй мәғәнә тураһында һүҙ», тип үҙенән-үҙе һораны. Ҙур мәғәнә булғас, берәү генә түгел бит инде ул. Тимәк, төп мәғәнә бар, янында – эйәрсендәре.

Кеше нимәгәлер ынтылғанда һәр саҡ уны шул аҙымға этәргән сәбәп йә иһә мәнфәғәт була. Кешеләр «башҡорт булырға теләй икән», тимәк, был уларға ни өсөндөр кәрәк. Бынан быуаттан ашыу элгәре типтәрҙәр (башҡорт типтәренән башҡаһы) халыҡ һанын алыу ваҡытында, хисапсыны алдап-йолдап, күбеһенсә ришәүәт биреп, үҙҙәрен башҡорт тип яҙҙырыуға өлгәшә алған. Был турала Башҡортостандың тарих архивында һаҡланған суд ҡарарҙары раҫлай. Башҡорт тип яҙылып, тегеләр аҫабалыҡ хоҡуғы алыуға өлгәшергә ниәт иткәндәр. Әммә һәр урында ла башҡорт йәмғиәте бар бит. Йәмғиәт кемдең аҫаба, кемдең юҡ икәнлеген яҡшы белә. Хисапсыға башҡорт булып яҙылыу йәмғиәттә һине башҡорт тип таныуҙы аңлатмай бит әле. Индермәгәндәр былары типтәрҙәрҙе башҡорт йәмғиәтенә. Һуңғылары ҡырталаша башлаһа, йәмғиәт уларҙы судҡа биргән һәм башҡорт тип танытмаған. Типтәрҙәргә башҡорт булыу беренсе сиратта ер алыу өсөн кәрәк. Сөнки башҡорт (типтәр булмаһа) аҫаба хоҡуғына эйә. Ә аҫабалыҡ йәмғиәттә билдәләнгән ҙурлыҡта ергә хужа була. Ер уға ғүмерлеккә бирелә һәм, ниндәй генә сәбәп, ниндәй генә һылтау булмаһын, аҫабанан тартып алынмай. Хатта үҙе ауырып, оҙаҡ йылдар түшәктә ятһа ла, һуғыш, илселек эше, сауҙа мәшәҡәте менән ситтә оҙаҡ йөрөһә лә, аҫабаның еренә берәү ҙә ҡул һуҙа алмаған. Башҡа халыҡтарҙан, бүтән кешеләрҙән айырмалы, тик башҡортта ғына ошондай хоҡуҡ булған. Аҫабалыҡ иһә ер биргән, тархан, мулла, ғәскәр сардары булыу хоҡуғын тәьмин иткән.

Ҡасан барлыҡҡа килгән һуң аҫабалыҡ һәм күпме дәүер башҡортто айырым хоҡуҡлы итеп килә? «Ай, күптән, бик күптән», – Сәсән үҙ алдына шулай һөйләнеп ҡуйҙы. Ә күҙ алдына элекке замандарҙа булыуы ихтимал күренештәр баҫты.

...Сәсән хан бөгөн ғәҙәттәгенән иртәрәк торҙо. Бүтән көндәрҙә ул ҡояш ҡалҡҡанда уяна ла бер аҙ тау һыртынан күтәрелә барған ҡып-ҡыҙыл түңәрәккә ҡарап, күҙҙәрен сырт-сырт йомғолап, бер аҙ ята ла шунан аяғына баҫа торғайны. Бөгөн әлеге тау һыртындағы ҡараңғылыҡ тарала, аҡһыл төҫкә инә башлағанда күҙҙәрен асты. Йоҡоһо туйған икән, тәне еп-еңел. Бөгөн башҡарылаһы эше иҫенә төштө, кәйефе йәнә күтәрелде һәм ул аяғына баҫты. Баҡырсаҡ менән баҡыр тастан һыу алып, ҡулын, битен йыуҙы. Һалҡынса һыу йоҡоно тамам ҡыуҙы, хан үҙ алдына ғына һамаҡлап ҡуйҙы:

Аҡ таң килде Ирәндектең һыртынан,
Уң эш һорайым йәшенән һәм ҡартынан...

Шыбырлап ҡына әйткән төҫлө ине ул, әммә ишетелгән икән бүтәндәргә лә. Ишеккә эленгән еңел шаршау һелкенде һәм тауыш сыҡты.

– Таң һарыһында сәсән һүҙен әйтте, хәйерле булһын иртә.
– Ә-ә, һинме ни, Арыҫлан батыр? Әйҙә, уҙ. Хәҙер бергәләп иртәнге ризыҡты ейербеҙ.
– Ризыҡтан оло булмам. Тик ни эшләп мине Арыҫлан батыр тинең әле, хан? Мин бит башҡорт батыры.
– Төн сыҡҡансы һинең башҡорт батыры икәнлегеңде онотҡан был, тип уйлайһыңмы әллә? Юҡ. Кисә кис һөйләшкәнде барлап яттым да, бөгөн иртәнсәк бер уй килде. Бәй, мин әйтәм, беҙҙең башҡорт батырының шәхсән генә исеме юҡ та баһа.
– Ни эшләп булмаһын, бар. Атайым менән әсәйем Көндөҙ тыуған бала тип исемләгән мине.
– Уныһын да беләм, энекәш. Өлкән кеше һөйләгәндә саҡ ҡына сабыр ит. – Хандың ирен ситтәрендә генә йылмайыу сағылып китте, зәңгәр күҙҙәренән шаян осҡондар һибелде. Быны шәйләгән батыр һүҙ ҡыҫтыраһы итте.
– Табылған өлкән кеше. Бер айға ҙурыраҡ икән берәү.
– Бер ай – бик күп көн дауамы ул. Өҫтәүенә, мин һинең ханың. Ә хан дәрәжәһе тик өлкән кешегә генә бирелә. Төшөндөңмө?
–Төшөнмәгән ҡайҙа. Тик мине ни эшләп Арыҫлан батыр тигәнеңде генә аңламаным.
– Һөйләргә ирек бирмәйһең бит. Бөгөн әллә ни булған һиңә, арҡыс-торҡос өндәшкеләп тик тораһың.
– Баш өҫтө, хан. Әллә алыҫ юлға сыға була инде, йөрәк өлпөлдәй, күңел осона.
– Мин дә шулай... Арыҫлан батыр исемен мин һиңә хандың бүләге рәүешендә бирергә булдым. Әйтәм бит, бая күҙҙе асыр алдынан ғына килде миңә был фекер.
– Ни менән бәйле?
– Кисә кис һинең менән айырылышҡас, йоҡлар алдынан еңгәң менән һөйләшеп яттыҡ. Һүҙ һинең турала ине. «Башҡорт батырының юлбарыҫты үлтергәнен беләһеңме?» – ти еңгәң». Юҡ, мин әйтәм. «Ирәндеккә ҡатын-ҡыҙҙы, баласағаны еләк йыйырға алып барған батыр. Тегеләр таралышып еләк йыя башлаған. Шул саҡта шырлыҡтан юлбарыҫ сығып, бер баланы аңдып, өҫтөнә ырғыған сағында ғына, ҡылыс тотҡан батыр тегенең юлын киҫкән дә бер һелтәүҙә кәүҙәһенең яртыһын өҙә сапҡан. Ә бала был хәлде һиҙмәй ҙә ҡалған», – ти. Шул дөрөҫмө?
– Мин ул балаға яҡын ғына күләгәлә ултыра инем бит. Ҡылыс һәр саҡтағыса янда. Юлбарыҫты мин шәйләнем, ә ул күрмәгән. Юҡһа, балаға ырғымаҫ ине. Ҡылысты һелтәгәндә лә бик уңай тура килде, яҙа-йоҙа китмәне. Шул ғына...
– Был турала һин миңә һөйләмәнең дә бит.
– Уның нимәһен һөйләйһең. Балаға йыртҡыс һикергәндә һәр ир ҙә шулай итер ине.
– Әллә инде, һәр ир ҙә микән... Быныһы бәхәсле. Әммә һин ҡурҡыу һиҙмәҫ батыр булып сыҡҡанһың. Шуға мин һиңә хан исеменән Арыҫлан батыр исемен бирәм.
– Ә ни эшләп Арыҫлан? Унда юлбарыҫ ине бит.
– Януарҙар араһында юлбарыҫ бик көслө һанала. Әммә унан да көслө арыҫлан бар. Юлбарыҫ тик арыҫландан ғына шөрләй. Юлбарыҫты еңгәс, һин Арыҫлан батыр булаһың инде.
– Рәхмәт, Сәсән хан, ҙурлағаның өсөн.
– Яңы исем һиңә тоғро юлдаш булһын, бәхет һәм еңеү килтерһен... Хәҙер тәғәм ейәйек тә юлға сығырбыҙ. Яҡын ара түгел бит Арҡайым.

– Хан, мин ризыҡланып тормайым. Иртәнгене ашағайным инде. Арба егәйемме, әллә һыбай ғына барабыҙмы? Шуны ғына һорайым тигәйнем.

– Юл алыҫ. Һыбай ныҡ ҡаҡшатыр ул. Арба ек тә һыбайға юртаҡты бәйлә. Кәрәк сағында менеп алырмын.

– Баш өҫтө. «Һә» тигәнсе эшләрмен.

Башҡорт батыры сығып китте, хан иртәнге тамаҡҡа ултырҙы.

Хан юлға ғәҙәттәге кейемендә сыҡты. Киндер ыштан, киндер күлдәк, аяғында тире башлы сарыҡ, унығының ҡунысы балтырын ҡаплап бөтөрә яҙған. Етек һары сәсе артҡа таралып, өлтөк итеп бәйләнгән. Яҡшы яҫы ҡайышҡа тағылған ҡында – ҡылыс, уң ҡулда – һәр саҡтағыса ҡамсы, ҡулында – хан билгеһе зәңгәр яҫы яурынбау. Уға ҡарап Арыҫлан батыр: «Был бөгөн киндерҙән туҡылған билгеһен алған икән, – тип уйланы. – Ғәҙәттәгесә, онотоп китер инде уны. Арбала ҡайһы ергә һалыр икән, урынын шәйләп ҡуйыр кәрәк». Ысынлап та Сәсән хан үҙенең дәрәжә билгеһен тағырға яратмай. Тиренән эшләнгән һәм киндерҙән һуғылған ике яҫы оҙон таҫмаһы бар. Тиреһен оло байрамдарҙа, ҙур ҡунаҡ килгәндә таға хан, киндерен көн дә йөрөтөргә тейеш. Әммә таҡмайынса ҡулына тотоп йөрөй ҙә, ҡайҙа һала – шунда онота. Әлбиттә, зәңгәр билге илдә башҡаса юҡ, хан онотоп китһә лә, барыбер табыла. Зәңгәр буяу тәбиғәттә бик һирәк осрай, хан өсөн махсус яһала ул. Зәңгәр төҫ – зәңгәр күк йөҙө төҫө иҫәпләнә. Күктә хоҙайҙар йәшәй. Ерҙә торған хан хоҙайҙарҙың ерҙәге вариҫы һанала, шуға ул зәңгәр билге йөрөтә.

Сәсән хан һыңар күсәрле арбаға еңел генә менеп ултырҙы. Ҡуш ат егелгән арба һелкенеп, шығырҙап ҡуйҙы. Хан яҡшы уҡ мөһәбәт кәүҙәле, көс-дарман ташып торған ир бит.

Хан урынлашыу менән, менгеһенең теҙгенен саҡ ҡына бушатты ла Арыҫлан батыр:

– Әйҙә, хәйерле юлға! – тип ҡысҡырҙы. – Ханға юл бирегеҙ. – Үҙе арбаның уң яғынан урын алды. Арбаның ике яғынан теҙелгән ун һыбайлы бер үк мәлдә аттарының бөйөрөнә типте:

– Алға! Ханға юл бирегеҙ.

Ике рәт һыбайлы менән ҡоршалған арба урынынан уҡ алға йомолдо. Хан арба ҡабырғаһына тотоноп өлгөрмәһә, артҡы ағасҡа шаҡ бәрелә ине, ярар, үҙендә лә сослоҡ бар икән. Сәсән хан ғауғалы-шаулы кисәләрҙе һөйөп бөтмәһә лә, атта шәп йөрөргә ярата. Шуны белгән һаҡсылар ҙа, арба аттарының башын тотоусы малдарҙы тыймай. Ул ғына ла түгел, ҡайһы берҙә ҡамсы һыҙырып, тиҙлек өҫтәй. Арыҫлан батыр ҙа ярата ел менән ҡыуышып барыуҙы. Шуға әлдән-әле:

– Һеү-һеү! – тип юлсыларға дәрт өҫтәй.

Ҡаланан сығып киткәнсе хан үҙенә баш эйеп ҡалған кешеләрҙе, туҙан борҡотоп ятҡан урамдарҙы, ҡәлғә соҡоро менән бейек ҡапҡа һәм күперҙе ҡарап барҙы ла, арба йомшаҡ юлға төшөп, аҙыраҡ һикертә башлағас, үҙен уратып сапҡан башҡорттарға, уларҙың аттарына иғтибар итте. Быларҙың барыһы ла таныш, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер үҙгәреш бар һымаҡ. Арыҫлан батыр алыҫ юлға сыҡҡанда әлеге туғыҙ һыбайлыны алып сыға. Уларҙың һәр береһен ҡат-ҡат һынап бөткән инде ул. Иң алда барыусы ылауҙы әйҙәй, уның артынан сапҡан дүртәү юлдың алдын һәм уңлы-һуллы ян-яғын байҡай. Шунан Арыҫлан батыр арбаның уң, уның алмашсыһы һул яҡтан килә. Былар һәр саҡ арба өсөн яуаплы. Уларҙың артынан юрттырған икәү юлдың артҡы яғын күҙәтә, ә иң арттағылар етәктәге аттарҙы тота.

Хандың һиҙемләүе дөрөҫ ине. Башҡорттар менгән аттарҙа үҙгәреш ысынлап та бар. Шуға үҙе ышанғас, хан Арыҫлан батырға һөрәнләне:

– Һыбайҙарҙың өҙәңгеһе ҡайҙан килгән?

Арыҫлан батыр, ат юртып барған ыңғайы ялт һикереп, хан арбаһының уң күтәрмәһенә төштө.

– Тимерҙән ул өҙәңгеләр, хан. Элекке ағастан яһалғандар йә һына, йә бауы ысҡынып төшә лә ҡала торғайны. Былар һыныуға ла бирешмәҫ, ысҡынып та төшмәҫ, тимен.

– Ҡайҙан алдың уларҙы?

– Арҡайым тимерлегендә эшләттем. Теге юлы барғанда тимерселәр менән һөйләшеп ҡайтҡайным, эшләп бирҙеләр. Ҡулдарынан килә. Ҡылыс, һөңгө, уҡ башы сүкегәндәрен, өҙәңге яһау уларға нимә генә инде.

– Ә ат йүгәне нимәнән?

– Уныһын да күреп өлгөргән. Күҙҙәрең үткер ҙә инде, хан. Йүгәндәрҙе ҡайыштан иштерҙем әле, яҡшы эшкәртелгән тиренән ҡат-ҡат ишәләр ҙә төйнәй баралар. Үҙе йомшаҡ, үҙе ныҡ, үҙе оҙаҡҡа сыҙам була. Ханҡаланың тиреселәре эшләне.

– Ни эшләп быларҙы миңә алдан әйтмәнең?

– Әлләсе, уның нимәһен әйтеп тораһың? Эйәр-өпсөн – беҙҙең эш бит. Ваҡ-төйәк менән хандың башын ҡатырыу нимәгә? Уны беҙ ҙурыраҡ, ил эштәренә һаҡларға тейешбеҙ.

– Һаҡларға, ил эшенә, тиһең инде... – Хан мығырлағандай итте. Әммә яуаптан ҡәнәғәтлеге битенә сыҡҡайны.

– Эйәрҙәрҙе лә тире ҡайышынан ҡаплатыр китәм әле. Киндер бигерәк тиҙ туҙа, – тип өҫтәне Арыҫлан.

– Шулай инде. Киндер күн була алмай.

Һүҙҙең тамамланғанын тойған Арыҫлан үҙ атына ырғып менде, һәм ылау юлын һәүетемсә дауам итте. Бер нисә тиҫтә саҡрым юл мәшәҡәтһеҙ үтте. Хан арбаһы ыңғай тәгәрләне, башҡорттар аттарын бер көйгә генә юрттырҙы. Байтаҡ ара уҙғас, хан ялҡып киттеме, әллә инде тирәһендәге баҫыуҙа эшләгән кешеләр нимәһе менәндер быњың иғтибарын йәлеп иттеме – ялан эшселәренә яҡыныраҡ туҡтарға ҡушты. Ылауҙы күргән ураҡ тотҡан арпа игеүселәр тубыҡтарына тиклем баштарын эйҙе. Арба туҡтау менән, хан дәрәжә билгеһен яурын аша һалып алды ла ергә төштө.

– Һаумыһығыҙ, ер кешеләре, – тип иҫәнләште ул.

– Һаулыҡ теләйбеҙ үҙеңә, Сәсән хан.

– Нисек йәшәйһегеҙ? Иген эше нисек бара? – Хан һорауҙарын теҙҙе. – Ярар инде, башығыҙҙы күтәрегеҙ.

Кешеләр аяғөҫтә баҫты. Ҡыйыуыраҡтарҙан берәү яуапланы:

– Йәшәйбеҙ әлегә. Иген быйыл яҡшы ғына уңды. Тиҙерәк йыйып алырға тырышабыҙ.

– Тырышығыҙ. Бына беҙ ҙә илде нығытайыҡ, билен биртендермәҫлек итәйек, һеҙҙең кеүектәр тыныс йәшәһен, дошман бимазалай алмаһын тип тырышабыҙ. Әле лә дәүләт мәшәҡәттәре менән юлға сыҡҡанбыҙ.

– Рәхмәт хәстәрең өсөн, хан. Тыныслыҡ һис шикһеҙ кәрәк. Һуғыш сыҡһа, иген йә мал ҡайғыһы буламы ни? Башыңды иҫән итер өсөн һәммәһен ташлап ҡасаһың инде.

– Хоҙайҙың ярҙамы менән тырышлыҡ һалырбыҙ тыныслыҡ өсөн. Бына башҡорттар, ил сигендә ҡорттар яуыз баҫҡынсылар менән алышҡа һәр саҡ әҙер.

– Шулайын шулай ҙа... Ул башҡорттар инде... – Ураҡ тотҡан һаҡаллы берәү шулай тине лә шымып ҡалды. Бер ханға, бер Арыҫланға ҡараны.

– Йә-йә, әйт. Ни эшләп һыу уртлағандай булдың? – Хан ураҡсыға ҡыйыулыҡ өҫтәгәндәй итте.

– Әйтһәм – әйтәйем: башҡорттар быны өсөн рәхмәт тимәҫ, әлбиттә. Әммә хан белеп торһон.

– Нимәне белеп торайым?

– Йыйымды һәм һалымды. Бына ун көн инде ураҡ урабыҙ, көлтә бәйләйбеҙ, ана, тегендә, – ураҡсы арт яғына боролоп, ҡулын иҙәне, – көлтәләрҙе һуғабыҙ. Ун көндөң һигеҙендә иген һуғыла, ә үҙебеҙ ҡурмас ҡурып та ашағаныбыҙ юҡ.

– Ни эшләп ашамайһығыҙ һуң? Уңыш арыу күренә бит.

– Бик ашар инек тә, тик һеҙ әйткән башҡорт менән ҡорттар һағалап ҡына тора. Бер ус ашлыҡ алып ҡына ҡара, хәҙер ҡылыс баш өҫтөнә менә. Тәүҙә һалым йыйыусылар ҡаҙнаға тип иккән игендең өстән бер өлөшө дәүмәлен тартып алды. Шунан килде башҡорттар, быларына кәрәк икән биштең ике өлөшө. Уларҙың киткәнен ҡорттар һағалап ҡына торҙо. Уларына кәрәк булып сыҡты етенең ике өлөшө. Шулай булғас, беҙгә ҡурмаслыҡ ҡаламы ни?

– Унымын ғына әйтәһең. – Һүҙгә ураҡсыларҙың икенсеһе ҡушылды. – Башҡорт менән ҡортҡа ат үҫтерергә, эйәр-өпсөнөн яһарға, ҡышҡылыҡҡа ит бирергә кәрәк. Туймаҫ ҡына оңҡот булдылар инде.

Быларҙы тыңлап торған Арыҫлан түҙмәне.

– Ә һин беләһеңме, һеҙҙең тыныслыҡты һаҡлайым тип минең сиреүҙән генә йыл эсендә ун кеше һәләк булды. Көн һайын тиерлек ҡорт ғәскәренән әллә күпме кеше башын һала! – тип тауышын күтәрҙе.

– Ҡысҡырышмағыҙ! – Хан ике яҡты ла тыйҙы. – Икегеҙ ҙә хаҡлы, әммә икегеҙ ҙә бер-берегеҙгә нахаҡ рәйеп тағаһығыҙ. Мин аңланым һеҙҙе. Нимә булһа ла уйларбыҙ. Әйҙә, ары киттек.

Хан ылауы һайт-һайтлап артабан ҡуҙғалды, ураҡсылар быларға ҡарап тауыштынһыҙ тороп ҡалды.

«Хан күҙенә ҡарап бындай һүҙ әйтә алғас, был халыҡтың йәшәү рәүеше сигенә еткән икән», – тип уйланы Сәсән хан. Бына биш йыл инде ул ил тәхетендә ултыра, шул йылдарҙа халыҡ араһында күп йөрөнө, игенселәр, малсылар, баҡыр иретеүселәр, тимер сүкеүселәр, төҙөүселәр, дин әһелдәре менән ҡуша тәғәм ейгәне лә, икәүҙән-икәү һөйләшеп торғаны ла, йөҙәрләгән кеше йыйылған урындарҙа ҡобайыр әйткәне лә, тарих тикшергәне лә бар. Әммә бөгөнгөләй әсенеп, тормоштан зар-интизар булып һөйләгәндәре юҡ ине. Нисек тип һанай әле теге ураҡсы, ҡаҙнаға – игендең өстән бере, башҡортҡа – биштән икеһе, ҡортҡа етенең икеһе китә, ти. Йәмғеһе, бәй... игенсегә уңыштың бер өлөшө лә ҡалмай ҙа баһа. Нимәгә йәшәргә тейеш һуң ул? Юҡҡа ғына, ҡурмаслыҡ та ҡалдырмайҙар, тимәй икән ураҡсы.

Арҡайымға барып еткәнсе хан менән батыр араһында йүнле-башлы һүҙ булманы. Хан күбеһенсә уйға батып килде, Арыҫлан батыр хандың тыныслығын һаҡлау мәжбүриәтенән сыҡманы. Өҫтәүенә, батырҙың ханға йәне лә көйҙө. Шул ураҡсының һүҙен тыңлап, башҡортто ғәйепләп тормаһа, үҙ һаҡсыларының нисек йәшәгәнен белмәй тиерһең. Арыҫландың өйөндә лә булғаны бар Сәсән хандың. Бүтән күрше-тирәһенән айырылып әллә ҡайҙа киткәне юҡ инде Арыҫландың көнкүреше. Үҙе көнө-төнө хан хеҙмәтендә булғас, өйөнә йоҡларға ғына ҡайта. Аҙыҡ-әүҡәт, донъя кәрәк-ярағы шул башҡорттарға йыйған һалым иҫәбенә ҡаҙнанан бирелә. Өҫтәүенә ҡатыны менән балалары йәмғиәттә көн дә эштә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ана ни тиҙәр унын тураһында. Башҡорт, әйтерһең, кеше хаҡын ашай.

Был турала хан белә. Әммә бая яҡлап ләм-мим тимәне. Хан хеҙмәтендә йәнен

дə, тəнен дə ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып йөрөгəнен, əйтерһең, күрмəгəн. Күрə, күрмəй буламы ни? Əммə маҡтамай. Сөнки башҡорттоң уны ташлап йə хеҙмəтен ҡалдырып бер ҡайҙа ла китə алмаҫын белə.

Əлеге хандың ҡарттаһы Беренсе Сəсəн хан булған саҡта мəңге онотолмаҫтай бер хəл була. Был турала хандар үҙ балаларына, башҡорттар үҙҙəренекенə, хəтерендə һаҡлаған ҡалғандар үҙ балаларына һөйлəп килə. Ысынлап та, мəңге онотолмаҫ хəл шул.

Башҡорттарҙың хан хеҙмəтендə тороуы бик борондан килə бит. Əле Йым хан булған саҡта уҡ уның тирəһенə бер төркөм ҡораллы кеше тупланған, ти. Сөнки бүтəн яугирҙəр йə ҡəҙимге кешелəр һымаҡ, хан да япа-яңғыҙ урам, тыҡрыҡ буйлап та, урман, ялан гиҙеп тə йөрөр булған. Кемдер уға яҫҡынһа, үҙен һаҡларлыҡ көсө, янында ҡоралы бар. Əммə ғүмер үтə килə, ханға һөжүм йышайған. Сөнки хандың дəрəжəһе менəн ҡуша байлығы ла артҡан. Дошманды ҡыйратып ҡайтҡандан һуң иң күп улъя уға эləккəнен кем белмəй. Берəүҙəр был эште ғəҙел һанаһа, икенселəр араһынан ҡайһы берəүҙəр ханды үлтереп, улъяны үҙенə генə тартып алырға ымһына. Ошондай мəлдəрҙең береһендə хан кəңəшселəре, уны һаҡлар өсөн махсус кешелəр беркетергə, тигəн уйға килə. Һаҡсыны иң ҡыйыуҙар араһынан һайлап алалар, уға иң яҡшы ҡоралды бирəлəр. Шуға уны башҡорт тиҙəр. Ҡор – ҡораллы кеше, баш – яҡшы. Йəғни, яҡшы ҡораллы кеше.

Тəүҙə һаҡ эшендə бер генə башҡорт була. Шунан хан уларҙы икəү, торараҡ тағы күберəк итə, шулайтып башҡорт йыйыла: күмəк башҡор, **– т** өнө күмəкте төшөндөрə лə инде.

Беренсе Сəсəн дəүерендə башҡорттар инде ханды ғына түгел, йорттарҙа йорт башлыҡтарын, ҡала менəн өйəҙҙə ҡағандарҙы ла һаҡлай башлай. Йым хан заманында башҡорҙо ашатыу, эсереү, кейемен хəстəрлəү, ҡоралын йүнəтеү хан ҡаҙнаһынан башҡарыла. Башҡорт күбəйгəн һайын, улар ҡаҙнаға ныҒыраҡ бата бара. Шуға хан ҡаҙнаны башҡорт халҡынан ҡотҡарыр өсөн илдəге һəммə ялпы өҫтөнə һалына торған һалым уйлап сығара – башҡорт һалымы. Тəүҙə ул еңел генə була, уның барлығы ла, юҡлығы ла һиҙелмəй. Əммə тора-бара, ул арта. Ана, барлыҡ игендең биштəн ике өлөшөн башҡорт ала, тип илаулай бит игенсе. Бер уйлаһаң, илауларлығы ла бар шул. Иген игеүҙең ниндəйерəк эш икəнлеген ашлыҡты үҫтереп һуҡҡан кеше генə белə. Ашлыҡ бер ҡарыш ҡалҡҡансы игенсенең алтмыш ҡат тире аға. Һуҡа менəн ерҙе һөрөү, тырматыу, сəсеү – һəммəһе лə йəн сығарыр тəн эше бит. Ашлыҡ баш ҡоҫоп, ем йыйғас, уны услам-услам урыу тағы ла тирендə һыҙыра. Көлтəлəп бəйлəп, таганға өйгəс, иген итер өсөн, өйөмдө яңынан һүтеп, шыбағас менəн һуғыу кемдең йəнен ҡыймаһын. Ул эштəрҙең барыһына ла түҙəр ҙə ине игенсе, туҡ башаҡтар инде орлоғон биреп, əҙəм икмəккə туйына ғына тигəндə, теге ҡомһоҙҙар килеп тула. Ҡаҙнаға түлə, башҡортҡа бир, ҡортто онотма. Ə «Үҙеңə ҡалдымы?» – тип һораған кеше юҡ. Ана хан да күтəрелеп бер һүҙ ҙə əйтергə телəмəй китеп барҙы.

Быларын да белə Арыҫлан батыр. Иген игеүҙең еңел кəсеп түгеллеге күреп тора. Үҙ өйөнəн өс кеше: ике ҡыҙы менəн ҡул араһына ингəн улы шул эштə йəмғиəттə ҡатнаша бит. Ҡатыны ғына башҡортто һəм балаларын ҡарау хаҡына йəмғиəт бурысынан бушатылған...

Арыҫлан уйҙарының осона сыға алманы. Юл буйлап ҡаршылағы тау һыртынан йəнтəслим был яҡҡа сапҡан һыбайлыны күреп, иң алдан үҙе ылау башына сыҡты, ян һаҡсыларҙы үҙ артынан эйəртеп, арҡыры сафҡа баҫырға бойорҙо һəм баш атты теҙгененəн алып, атлатыуға күсерҙе.

– Ни булды, батыр? Ниңə яйлатаһың? – тип ҡысҡырған Сəсəн ханға яҡын килеберəк:

– Берәү йән-фарман саба. Тигенгә түгел, – тине.

Һаҡсылар ҡындағы ҡылысын барланы, ян керешенә уҡ һалып ҡуйҙы. Ул арала һыбайлы, ҡойон уйнатып, быларҙың ҡаршыһында атын үрәпсетте.

– Хан ылауымы был? – тип һөрәнләне һыбайлы.

– Ни эшең бар? Һин үҙең кем?

Ул арала хан һаҡсылары килеүсене ян-яҡлап уратып та алды, ҡулдарында ҡылыс ялтланы.

– Мин көтөүсе, һарыҡ көтөүсе.

– Көтөүсе атта йөрөмәй, йәйәү була. Төш!

Һаҡсыларҙың береһе аттың башынан алды, икенсеһе һыбайҙы һуғып та осорҙо. Ерҙә туҙан борҡотоп барып төштө теге кеше. Шулай ҙа ырғып торҙо. Һаҡсы ҡысҡырҙы:

– Көтөүсе булғас, һыбайға ҡайҙан өйрәндең?

– Атайым башҡорт ине. Эшенән сығарҙылар. Шуның атында йөрөп өйрәндем.

– Кем ебәрҙе һине?

– Ҡаған. Олоçобоҙҙоң ҡағаны.

– Ни тине?

– Хан ылауы етеп киләлер, моғайын. Ҡаршы сап, – тине, – атын бирҙе йәшереп кенә.

– Ни тине?! Һүҙеңде ҡыçҡа тот! – Арыçлан ҡыҙа башланы.

– Ҡағанға һөжүм иттеләр. Ул бер үҙе ине. Мин әҙерәк ярҙамлаштым.

– Ә һөжүмселәр күпме?

– Өсәү.

– Кемдәр улар?

– Башҡорттар.

– Башҡорттар? Ҡағанға һөжүм иттеме?

– Эйе.

– Улар ҡағанды һаҡларға тейеш тә баһа.

– Элек һаҡлай торғайнылар.

– Кемдәр улар? Исемдәрен беләһеңме?

– Әлбай, Ҡолбай, Бурçыҡ.

– Бурçыҡ та шундамы?

– Эйе.

– Ә һинең атайың кем?

– Бәхти.

– Ул да тегеләр менәнме?

– Юҡ. Уға килгәйне лә Бурçыҡ әйҙәләп, барманы атайым.

Өҙөк-йыртыҡ ҡына һөйләшеү ылау алға барған ыңғайы булды. Һүҙ бөткәс, Арыçлан ян-яғындағыларға ҡул иҙәне, тегеләр шунда уҡ элекке тәртипкә – ылау эргәләренә таралышты. Уң һаҡсыға өндәште батыр:

– Быны үҙ яныңа ал. Ҡасып китмәһен, ҡара, – арба менән атын тигеҙләне һәм, күҙ асып йомған арала атының теҙгенен баш аша әйләндереп алып, юртып барған ыңғайы көймәгә инде. Арыçлан көтөүсенән ишеткәнен һөйләп бирҙе. Әйтелгәндән ни һығымта яһарға ла өлгөрмәне, батыр:

– Хан, ылауың бара торһон. Мин ҡаған янына саптырып, хәлде үҙ күҙем менән күрәйем дә һине ҡыуып етермен, – тип рөхсәт һораны.

Тегенең ебәргеһе килмәне. Арыçлан булмаһа, донъяһы кителер кеүек.

– Беҙҙең маҡсат – Арҡайымға етеү. Ә һин минең – хандың һаҡсыһы. Ханды һаҡлар урынға, ниндәйҙер ҡағанға китергә тораһың.

– Ҡағанға тыуған янау ханға күсмәһен тим. Ҡурҡынысты бәләкәй сағында юҡ иткән хәйерле.

– Һин теләһә ниндәй янауға ла ҡаршы тора алаһың, шуның өсөн батырһың. – Һуңғы һүҙҙе хан юрый өҫтәне. Яҡшы һүҙ – йән аҙығы. Үпкәләп түгел, дәртләнеп торһон, тип уйланы. Сәптең ҡап уртаһына тейҙе хандың фекер уғы. Арыҫлан һынамыш ҡараш һалды ла, көймәнән сығып, юртып барған атына менде. Бер аҙҙан ылауҙағы һаҡсы унан айырылып ҡалды – Арыҫландың йомошон үтәргә сапты. Хан ылауы ыңғай юртыуға күсте.

Бурсыҡ тураһында Арыҫлан юҡҡа ғына һағайып һорамағайны. Аҡылы үҙенә генә түгел, бүтәндәргә лә етерлек бик батыр яугир ине. Әле ҡағандың атында кемдеңдер йәшерен генә сығып киткәнен шәйләгәс, ауылға инер алдынан һыу буйын ҡаплаған туғайға ашыҡты. Янынан ҡалмай йөрөгән бәләкәй малайын да алды үҙе менән. Туғай араһында юлдың иң тарайған ғына еренә арҡыры арҡан ташланы. Әллә ҡайҙан күренеп ятмаһын тип, арҡан өҫтөнә сыбыҡ-сабыҡ, үлән-фәлән ырғытты. Малайын юлдың аръяғына сығарып, арҡандың осон тотторҙо.

– Мин һайыҫҡан булып шыҡырыҡлармын, шуны ишеткәс тә, һин арҡанды баш осоңа күтәр.

– Ярар.

Бына Арыҫлан ебәргән һаҡсы туғай юлына төштө һәм атына ҡамсы менән һыҙырҙы. Былай ҙа ҡушаяҡлап сапҡан ат һонолоп сабыуға күсте. Арҡанға килеп етте генә тигәндә, Бурсыҡ шыҡырыҡлап ебәрҙе. Малай ҙа, үҙе лә йәһәт арҡанды өҫкә күтәрҙе. Йән-фарман сапҡан аттың аяҡтары араһына арҡан инде, һәм хайуан баш түбән әйләнеп китте. Өҫтөндәге менгеһе аттан да яманыраҡ тәгәрләп барып төштө. Бурсыҡ йәшенгән еренән атылып сыҡты ла, ҡылысын һурып алып, тәкмәсләгәндең боғаҙына терәне.

– Кем һин? Ҡайҙа бараһың?

– Арыҫлан батырҙың башҡорто.

– Ниндәй Арыҫлан?

– Хан башҡорттарының батыры һуң. Хан бөгөн генә уға шул исемде ҡушты.

– Хуш… Һин ҡайҙа сабаһың?

– Ҡағандың хәлен белешергә ҡушты Арыҫлан батыр. «Бел дә, шунда уҡ килеп етеп, миңә әйт», – тине.

– Бар, кире сап. Арыҫлан батырыңа әйт. Юлда Бурсыҡ башҡортто осраттым, тиген. Ҡаған йоҙаҡта ултыра. Башҡорттар япҡан, тиген. Япмаҫ ине, башҡорттарҙы әрләп, игенселәрҙе уларға һөскөрткән. Тегеләре һәнәк, һөңгө тотоп башҡортҡа ташланған. Бер баланы сәнскән, тиген. Башҡорттар күмәкләп һәнәкселәрҙе ҡыуып тараҡҡан һәм ҡағанды ултыртҡан. Хан үҙе араламаһа, ҡотҡосо ҡағанды ҡылыс йөҙөнә алыуҙары бар, тип әйт. Бар, саптыр.

Һаҡсы башҡорт үлән өҙгөләгән атына һикереп менеп өҙәңгеһенә баҫҡайны, аты ҡолай яҙҙы ла һулаҡай алғы тояғын ергә терәр-терәмәҫ кенә ҡуйҙы.

– Атымды имгәткәнһең! – Башҡорт иларҙай булып ҡысҡырып ебәрҙе. Башҡорт өсөн ат йәндән дә ҡәҙерлерәк икәнен Бурсыҡ та белә. Ағас араһына йәшергән үҙ атын сығарҙы.

– Мә, мен. Ҡайтышлай алмаштырып алырһың. Атыңдың аяғының һеңер-фәләне тартылғандыр. Үлән бәйләп йомшартырмын.

Бурсыҡтың аты шәп ине. Оҙаҡламай ылауҙы ҡыуып та етте. Башҡорт үҙе менән булған хәлде Арыҫланға һөйләне. Тегенеһе ханға еткерҙе. Хан бер ни ҙә өндәшмәне. Ҡағанды ла яҡламаны, башҡортто ла әрләмәне.

Арҡайымда эштәрен бөтөрөп, төн үткәреп, иртәнсәк кире юлға сыҡтылар. Йоҙаҡҡа ултыртылған ҡаған торған ауылға яҡынлашҡас, Сәсән хан Арыҫлан батырға ишараланы:

– Ауылға сапҡын ебәр, халыҡты йыйһындар. Берәү ҙә ҡалмаһын. Хәҙер шунда туҡтайбыҙ, – тине.

Бурсыҡтың атын менгән башҡортто оҙатты Арыҫлан. Тояҡ аҫтынан туҙан ғына борҡоп ҡалды.

Хан ылауы ауыл уртаһына етеп туҡтағанда, кешеләр яңы йыйыла башлағайны әле. Уттай эш ваҡытында кем өйҙә торһон. Яландан ҡайтып еткәнсе арыу уҡ ваҡыт үтте. Хан уңарсы ҡаған бикле ултырған йортҡа килде. Мөгәзәйгә ултыртҡандар быны. Мөгәзәй тип тәҙрәһеҙ, һыңар ишекле, бураһы бейек итеп күтәртелгән, яҡшы ағастан һалынған йортто әйтәләр. Бында ауыл, олоҫ халҡына тәғәйен тейелмәҫ ашлыҡ, бал, ҡай саҡта май, баҡыр, сүкелмәгән тимер, ҡоралмаҙар ҙа һаҡлайҙар. Бик ҡырыҫ йылдарҙа ғына сығарып тараталар ашамлыҡты. Түҙәрлек йылдарҙа ашлыҡты алмаштырып ҡуялар.

Мөгәзәй төбөндә бер башҡорт ҡына тора ине. Мөгәзәйҙең ишеге йоҙаҡлы.

– Ҡайҙа бүтәндәрегеҙ? – тип һораны хан.

– Хәҙер киләләр.

– Мин һиңә, улар ҡайҙа, тип һорайым бит. Һин башҡорт түгелме ни?

– Башҡорт.

– Шулай булғас, һорауға дөрөҫ яуап бир.

– Урманға киттеләр улар.

– Ниңә?

– Бисәләребеҙҙе, балаларыбыҙҙы йәшерергә.

– Ни эшләп йәшерәләр?

– Һеҙ бит килеү менән беҙҙе хөкөмләр өсөн балаларыбыҙҙы аманатҡа алаһығыҙ. Шунан ҡотҡарыр өсөн.

– Һиҙенәһегеҙ икән. Ас йоҙаҡты.

– Асыҡ ул. Исем өсөн генә элеп ҡуйҙыҡ шунда.

– Быңдамы ҡаған?

– Эйе.

Ишек асылыу менән, урта йәштәрҙәге ир мөгәзәйҙән сыҡты ла хандың аяғына тәгәрәне.

– Ханым-ханым...

Хан ерәнеп төкөрөп ҡуйҙы, аяғын тартып алды.

– Хәшәрәт. Күлдәген систерегеҙ ҙә биш таяҡ һуғығыҙ.

Арыҫландың егеттәре барып йәбешкәйне ҡағанға, баяғы башҡорт араларына инде.

– Ҡана үҙем. – Тегенең күлдәген йырта тартты, йығып һалды ла ҡулындағы ҡамсы менән ярырға тотондо. Көс тә, ғәйрәт тә бар икән үҙендә: һуҡҡан һайын арҡанан ҡан атылды һәм юлаҡ эҙ ҡалды. Бармаҡ яҫылыҡ биш юлаҡ ярылып ята.

– Тор! Кит бынан. Кешеләрҙе үҙ-ара һөскөртөп йөрөгән бәндә ҡаған була алмай. – Хандың ҡарары ҡәтғи булды.

Оҙаҡламай урам мөйөшөнә ауыл кешеһе йыйылып бөттө. Хандың һүҙе ҡыҫҡа һәм ҡаты булды.

– Һеҙ миңә буйһонмаҫҡа һәм ҡаршы сығырға баҙнат иттегеҙме?

Халыҡ гөжләп алды, ризаһыҙлығын белдерә ине. Берәү ҡысҡырҙы:

– Беҙ бит ханға түгел, башҡортҡа ҡаршы сыҡтыҡ.

– Ә башҡортто кем ҡуя? Башҡорт һалымын кем һала? Хан түгелме ни?

Бөтәһе лә шым булды.

– Минең бойороғомдо үтәмәү түгел, кеше үлтереүгә тиклем барып еткәнһегеҙ. Кем сәнсте башҡорт балаһын? Тотоп бирегеҙ. Юҡһа...

Кешеләр алан-йолан ҡараңды ла иң артҡа боҫҡан берәүҙе эткеләп-төрткөләп алға сығарҙы.

– Ни эшләп үлтерҙең баланы?
– Ул беҙҙе дуңғыҙ тине. Иң алама һүҙ әйтте.
– Баланың һүҙенә ҡарап уның ғүмеренә ҡул һуҙырға һин Хоҙаймы ни?
– Юҡ.
– Аҫырға! – Хан имән бармағын өҫкә күтәрҙе.
Теге бәндә ергә тәгәрәне.
– Ханым, ярлыҡа!
– Юҡ һиңә ярлыҡау. Башҡорт балаһы – ул хан кешеһе. Тимәк, һин ханға ҡул күтәргәнһең! Аҫығыҙ!

Арыҫлан батыр менән килгән өс кеше ауыл кәртәһенән өс һайғау һурып алды ла, бер осон ҡуша бәйләп, икенсе осон ергә терәтте, һәм шунда уҡ дар ағасы барлыҡҡа килде. Быларға йәнә берәү ҡушылды, һәм, ерҙә ятҡан кешене ҡул-аяҡтарынан тотоп, дар аҫтына илттеләр. Берәү муйынына боғалаҡ һалды, икенсе бауҙың буш осон дар аша ырғытып тартҡайны, теге бәндә «һә» тигәнсе өсмөйөштөң осона күтәрелде лә ҡуйҙы һәм шунда уҡ йән дә бирҙе.

Хан:
– Күрҙегеҙме?! – тип ҡысҡырҙы. – Кем дә кем ханға йә уның кешеһенә ҡул күтәрә, ғүмерен ошолай тамамлаясаҡ. Торһон шунда. – Хан аҫыулыға баш иҙәне. – Күҙен, телен ҡарға суҡыһын. Ҡалғандарығыҙға һабаҡ булыр!

Хан арбаға ыңғайлағайны, башҡорттар аттарына һикерешеп менде, һәм икенсе мәлдә ылау һайт-һайтлап, туҙан борҡотоп сығып та китте.

Юлда хан байтаҡ ваҡыт өндәшмәй уйланып барҙы. Яҡшы уҡ ара үткәс, ҡул иҙәп Арыҫланды саҡырҙы. Тегенеһе шунда уҡ арба ситенә йәбеште.
– Арыҫлан батыр, һинең ғаиләңдә нисә кеше әле?
– Үҙем менән ете йән, хан. Биш бала, ҡатыным һәм мин.
– Балаларыңдың нисәүһе ҡул араһына ингән?
– Иң кесеһенән башҡа, бөтәһе лә тиһәң дә ярай. Оло улым ир етеп килә инде. Унан ҡала ҡыҙым да кейәүгә бирерлек булып тулышып бара. Өсөнсө балам – ул. Эшкә бик әрһеҙ. Ишек алдында ла, йәмғиәттә лә алдындағыһын ҡалдырмай эшләй. Дүртенсеһе – әсәһе янында: бешеренә лә, һыйыр ҙа һауа, ҡош-ҡорт та көтә, ваҡ мал артынан да йөрөй. Иң бәләкәйе уйындан бушамай әле.
– Бына һинекеләр йәмғиәт эшендә яҙын сәсеүҙә, көҙөн ураҡта барлығы күпме ер эшкәртә икән?
– Кем һанаһын инде уны?
– Бөгөн ҡайтҡас, минең янда йөрөмәй, тура өйөңә кит һәм әлеге ерҙе һана. Күпме иген эшкәртә, күпме бесән әҙерләй алаһығыҙ икән? Иртәгә миңә әйтерһең.
– Ярар, хан.
– Бар.

Хандың ҡушҡанын Арыҫландың ғаиләһе күмәкләп үтәне. Ололар, балалар ентекләп, ихласлап һананылар. Майҙандың арҡырыһын да, буйын да мөйәтләп* һанай ине улар. (Хәҙерге үлсәмгә күсереп әйтһәң, бер минутта үтелгән ара бер мөйәт). Иртәгәһенә Арыҫлан батыр:
– Хәйерле иртә, хан! – тип сәләмләне. – Бик оҙаҡ ентекләп уйлашҡандан һуң, бәлиғ булған егет йә ҡыҙ 10 мөйәт майҙан ерҙә сәсеп иген игә һәм бесән саба ала, тип ҡуйҙыҡ.
– Бер кешегә ун мөйәт. Һинең ғаиләңә етмеш мөйәт майҙан кәрәк. Шуның өҫтәүенә, ат, һыйыр, ваҡ мал утлатыу өсөн шуның яртыһы, хатта күберәге кәрәк. Дөрөҫмө?

**Бер мөйәт майҙан — бер гектарҙан саҡ ҡына кәмерәк. Ул саҡтағы оҙонлоҡ үлсәме.*

– Дөрөҫ.

– Мейескә яғыр өсөн утын, өйлөк бүрәнә, һарай-ҡоралыҡ ағас үҫерҙәй тағы ер... Бынһын дөйөм урмандан да алып була инде.

– Нимә һанайһың һуң, хан? Аныҡлабыраҡ әйтһәң, бәлки, мин дә ярҙамлашырмын.

– Бына нимә, Арыҫлан батыр. Башҡорттарҙы һалым йыйымынан ситләштереп, әллә үҙҙәренә ер бүлеп бирергәме икән, тип уйлайым. Үҙенән башҡа уның ғаиләһе барыбер йәмәғәт эшендә йөрөй. Ә былай үҙ ерендә эшләр ине. Тырышып эшләһә, иҫән-һау кеше яҙҙан көҙгә тиклем үҙен туйҙырырлыҡ, бер баш һыйыр малы, ике-өс баш кәзә аҫырарлыҡ бесән йүнәтә ала бит, ала. Әллә башҡортҡа әлеге әйткән иген менән бесән йыйырлыҡ һәм йәйгеһен малын көтөрлөк ер бүлеп бирергә лә һалымдан ситләштерергә микән, тим.

– Ул саҡта башҡорт үҙе һалым түләйме?

– Юҡ. Һалымдан уны ҡотҡарыр инек.

– Була инде. Башҡорттоң балалары, ҡатыны барыбер йәмғиәттә бил бөгә. Былай булһа, үҙенә эшләр.

– Хуплайһыңмы?

– Хуплайһыңмы, тип ни... Ә башҡорттоң үҙен кем аҫрай һуң? Ул бит көнөнтөнөн хан хеҙмәтендә. Иген сәсеп игергә, бесән йүнәтергә әмәле ҡалмай.

– Башҡорт өсөн ғаиләһе эшләр. Уның аты өсөн дә, үҙе өсөн дә өҫтәп ер бирәбеҙ инде. Бер баш атҡа, ике һыйырға тигеҙ майҙан.

– Башҡорт бер генә баш йылҡы тотһа, хеҙмәтенең йүне булмаясаҡ. Аты кәмендә икәү булырға тейеш. Мал арый, ауырый, бейә булһа, ҡолонлай.

– Ярар, башҡорттоң үҙенә ғаиләһенә тейгән майҙандың тағы яртыһын бирҙек, ти.

– Улай дөрөҫ түгел, хан. Башҡорттоң үҙенә генә кәмендә ун мөйәт ер кәрәк. Шунһыҙ кешене башҡортлоҡ ҡыҙыҡһындырмай. Әле лә ауыл кешеһенең һәр береһенә өс-биш мөйәт тура килә. Шунан да кәм булһа, кем башҡорт булырға ынтылһын.

– Һүҙең хаҡ батыр, башҡортҡа үҙенә генә ун биш мөйәт майҙан ер булһын. Ғаиләһендәге һәр кешегә – тағы ла өсәр мөйәт.

– Миңә, тимәк, утыҙ мөйәт ер тейә. Эйе, был бүлем минең ғаиләне аҫрарға етә.

– Был ерҙе беҙ **аҫаба** тип атарбыҙ.

– Атай ереме?

– Эйе, атай ере.

– Башҡорттоң бөтәһе лә атай кеше бит инде. Ер ҙә уға башҡорт булған өсөн бирелә.

– Ә башҡорт булыуҙан туҡтаһа? Кеше ҡартайып йә ауырып башҡортлоҡҡа эшкинмәй башланы, ти. Кемдер хан хеҙмәтендә үлеп ҡала...

– Хеҙмәттә үлгән башҡорт өсөн ғаиләһе әле һалымдан өлөш ала бит? Ала. Тимәк, ер ҙә уның ҡарамағында ҡала. Ә ҡартайһа йә ауырыһа, әле лә һалымды бүлешә бит ул, тимәк, ер ҙә уныҡы була.

– Башҡорт ҡартайып йә ауырып үлеп китһә?

– Әле уларҙың ғаиләһе һалым ашаймы һуң?

– Юҡ. Улар ҡәҙимге йәмғиәт ағзаһына әүерелә, йәмғиәт менән ҡуша эшләп йәшәй.

– Тимәк, ҡартайып үлгән башҡорттоң ере лә йәмғиәткә күсә.

Оҙаҡламай бар илгә Сәсән хандың ҡарары таратылды. Аҫаба тураһында ине ул. Шунан бирле башҡорттар аҫаба хоҡуғы менән файҙаланды. Ҡорттар

элеккесә һалымдан өлөш алды, тик был өлөш ҡорт хәрби хеҙмәткә киткән көндән ҡайтҡансыға тиклем генә бүленде.

Ошо рәүешле Сәсән хан илдәге иң ҡырҡыу мәсьәләне хәл итте. Игенселәр ҙә, башҡорттар менән ҡорттар ҙа ҡәнәғәт ҡалды яңы ҡарарҙан. Бөтөн халыҡты ла ризалатҡан ҡарарҙар бик һирәк була.

Бер нисә мең йыл дауамында иҫкермәй һәм үҙгәрмәй һаҡланған аҫаба хоҡуғын Сәсән хан уйлап сығарғайны. Аҡыллы ла, ғәҙел дә, ҡаты ҡуллы ла, киң күңелле лә хан булған ул. Сәсән хандар боронғо Иран дәүләтендә киң билдәле, илгә йәне-тәне менән хеҙмәт иткән нәҫел. Аҡылы ханса, теле шағирса булғанға, сәсәндәр исемен алған улар. Сәсәндәрҙең ижад емеше булып, моғайын, «Гилгәмеш тураһында», «Урал батыр» ҡобайырҙары ҡалғандыр. Ошо ҡобайырҙарҙың ҡайһы бер оҡшашлыҡтары юҡҡа ғына түгел бит.

Ирек, Сәсән хандар тураһында боронғо ирандарҙың «Авеста» әҫәрен уҡып белгәс, үҙенә шул ҡушаматты алды ла инде. «Башҡорттоң иң боронғо ханы һәм шағирының аты яңы тарихта минең исемем булып йәшәһен. Боронғоно оноттормаҫҡа бер сәбәп», – тип уйлағайны Ирек.

Гәзит, журнал гөж килә

Ҡәләмен тотоп, аҡ ҡағыҙға текәлеп уйланып ултырған Урал ҡапыл шылтыраған телефонға тертләне. Тәүҙә тауыштың нимәнән сыҡҡанын төшөнә алмай торҙо. Зыңғырлау йәнә-йәнә ҡабатланғас ҡына, трубканы алды:

– Эйе.

– Урал ибн Ишдәүләт әфәнде? – Шылтыратыусы инглизса өндәште.

– Эйе, мин.

– Һеҙҙең Интернеттағы өн һәм һан тураһындағы фекерҙәрегеҙ беҙҙең журналды бик ҡыҙыҡһындырҙы. Журналыбыҙҙы күргәнегеҙ юҡмы?

– Ентекләберәк аңлатһағыҙ, бәлки, иҫкә лә төшөр.

– Беҙҙең журнал инглиз телендә сыға һәм ғәрәп донъяһына тәғәйенләнгән. Уны алдырыусыларҙың һаны артҡандан-арта. Бигерәк тә Интернеттағы электрон вариантын йыш уҡыйҙар. Беҙ ғәрәптәргә ҡағылышлы, улай ғына түгел, дөйөм донъя, йыһан киңлегендәге мәсьәләләрҙе ғәрәптәргә ҡағылышлы рәүештә сағылдырабыҙ. Бына һеҙҙең шәхес тә беҙҙе шул айҡанлы ҡыҙыҡһындыра. Һеҙ Әмирәттә йәшәгән, шуның университетында эшләгән кешеһегеҙ. Кешелектең ал таңында булыуы ихтимал хәлдәр хаҡында ҡыҙыҡ фекер йөрөтәһегеҙ. Шуға күрә һеҙҙең менән күрешергә теләгәйнек.

– Һеҙҙең журналды белмәйем. Уҡырға насип итмәне. Ә минең шәхес ҡыҙыҡһындыра икән, рәхим итегеҙ, күрешербеҙ.

Күп тә үтмәне, Уралды яҡындағы отелдең ресторанына саҡырҙылар. Барһа, өҫтәл эргәһендә ике кеше ултыра. Береһе алдына аҡ ҡағыҙ менән ручка һалған, бәләкәй генә диктофон күренә, икенсеһе ҡаршыһына ҙур объективлы фотоаппарат ҡуйған.

Урал, мине саҡырыусылар ошоларҙыр, тип һаулыҡ һорашты.

– Әгәр мөмкин булһа, башлайыҡ, – тине үҙен Томас тип таныштырғаны. – Берәй нәмә эсергә теләйһегеҙме? Виски, араҡы, ҡәһүә, сәй?..

– Берәр сынаяҡ сәй эсергә була.

Томас, һүҙҙе оҙаҡҡа һуҙмайынса, һорауҙарын бирә лә башланы. Редакцияның икенсе хеҙмәткәре баянан бирле Уралды фотоға төшөрә ине инде. Бынылы, исмаһам, ҡиәфәт өсөн генә булһа ла, рөхсәт тә һорап маташманы.

– Урал әфәнде, һеҙ, кешелек донъяһында беренсе атама артынан уҡ тәүге һан төшөнсәһе лә тыуған, тиһегеҙ. Бәлки, киреһенсәлер?

– Бының башҡаса булыуы мөмкин түгеллеген мин үҙемдең мәҡәләмдә яҙғайным инде. Шуға ҡабатлап тороу урынлымы икән? Һорауығыҙға яуапты шунан ғына алығыҙ ҙа ҡуйығыҙ.

– Риза. Ул саҡта артабанғы һорау. Һеҙ, таш быуат кешеләре тәүге һүҙҙе-өндө үҙҙәре уйлап сығарған, тиһегеҙ. Өҫтәүенә, йәнде кешегә, бүтән тереклеккә лә атаһы бирә, тип раҫлайһығыҙ. Әммә ислам, христиан, иуда, будда диндәре кешегә һәм башҡа тереклеккә йәнде бар нәмәнән өҫтөн ҡөҙрәт биргән, икенсе төрлө әйткәндә, Алла, Бог, Будда биргән, тиелә дин китаптарында. Шулай уҡ тәүге һүҙҙе лә, һанды ла кешегә шул Ҡөҙрәт әшкәрткән тип белә инек. Ә һеҙ әле килеп, был Ҡөҙрәттең һис ҡатнашы юҡ, тиһегеҙ. Быны нисек аңларға?

– Аңлатмаһы бик ябай. Кешелек дәүеренең башы, таш быуат тураһында һүҙ алып барабыҙ бит. Ул саҡта кешегә Алла ла, Бог та, Будда ла билдәле булмаған. Шуға күрә кеше үҙе белмәгән сығанаҡ менән уның тормошон бәйләү бик үк урынлы түгел кеүек. Өҫтәүенә, ошонда бер иҫкәрмә лә яһап китәйек: Интернетта, мең кешенең йәне һәм тәне хаҡындағы фаразды минең уҡытыусым, бабайым Сәсән ғалимдыҡы, тип һыҙыҡ өҫтөнә алғанмын. Әле һеҙ уны минеке тип әйттегеҙ. Был дөрөҫлөккә тап килмәй.

– Ғәфү үтенәм. Кешелек тураһындағы беҙҙең һөйләшеүгә кире ҡайтайыҡ. Өн менән һан кешеләрҙең диненә ҡаҙәр барлыҡҡа килгән, тиһегеҙ. Шул нигеҙҙә кешелектең асышын ҡөҙрәттән ситләштерергә ниәт итәһегеҙ. Әммә кешеләрҙең Алланы, Богты, Будданы белмәүе уларҙың юҡлығын раҫламай. Әйтәйек, Аллаһ үҙ эшен кешенән башҡа башҡара бит. Кеше әхирәткә күскәс, тамуҡҡамы, ожмахҡамы эләгерен белмәй. Ә Аллаһы Тәғәлә белә һәм һәр кемдең тәғәйен урынын билдәләй. Кеше белмәй тип, уны тамуҡһыҙ йә ожмахһыҙ ҡалдырмай. Быға ни әйтерһегеҙ?

– Һеҙҙең һорауығыҙ күберәк материалист менән идеалистың бер ҡатлы бәхәсен хәтерләтә. Иҫегеҙҙәме, әүәл философия дәрестәрендә бер миҫал килтерә торғайнылар. Имеш, «тәүҙә материя булған» тип раҫлаусы материалист өҫтәлдә ултырған графиндың ҡапҡасын алып кеҫәһенә тыға ла: «Хәҙер уй-фекер менән графинды ябығыҙ», – ти. Идеалист графинды алып бәреп вата ла: «Хәҙер һыу ҡойоғоҙ», – ти. Йәғни быны менән графинды яһар өсөн кеше тәүҙә уны уйында, мейеһендә, күҙ алдында яһарға тейеш. Йәғни тәүҙә – уй, шунан материя тыуа. Ә һеҙ, уй кешенең мейеһендә яралмай, уны кешегә Аллаһы Тәғәлә һала, тиергә итәһегеҙ. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Белмәйем һәм бәхәсләшергә йыйынмайым. Тик шуны ғына әйтергә йыйынам: кеше тәүҙә үҙенә исем биргән: **м (б) – мин** тигән. Шунан үҙен берәү тип һанаған. Ана шуны раҫларға теләйем мин. Кеше был уйға үҙе килгәнме, әллә уйҙы Ҡөҙрәт биргәнме – быныһы миңә ҡараңғы.

– Бүтән төрлө әйтһәң, «Аллаһ бар» тип тә, «юҡ» тип тә раҫламайһығыҙ инде?

– Раҫламайым.

Томас шуны ғына көткәндер, күрәһең, – һикереп торҙо, өҫтәлдәге нәмәләрен йыйып алды һәм иптәшенә:

– Әйҙә, йәһәтерәк. Ағымдағы журналға был материалды өлгөртөргә кәрәк, – тип йүгерә-атлай сығып та китте. Урал менән хушлашырға ла онотто.

Урал журналистың тәртибенә (дөрөҫөрәге – тәртипһеҙлегенә) аптырабыраҡ торҙо ла, ярар, эш тип яңып йөрөгән кешене ғәфү итеү кәрәк. Ҡабаттан уның менән осрашырға ла тура килмәҫ, моғайын, тип уйланы.

Әммә хаталанғайны. Ике аҙнанан саҡ ҡына күберәк ваҡыт үткәс, Урал бер кисен телевизор асһа, уны һөйләйҙәр. Дөрөҫөрәге, уның Томасҡа биргән интервьюһының бер һөйләмен генә эләктереп алғандар ҙа гөж киләләр. Имеш, Урал исемле бер бәндә «Аллаһ юҡ» тип ята. Беҙҙең илебеҙгә кафырҙар Рәсәйенән

килеп инеүе етмәгән, Аллаһыбыҙға һүҙ тигеҙә. Аллаһ бармы-юҡмы икәнен белмәй, имеш.

Урал шаҡ ҡатты ла ҡуйҙы. Томасҡа бөтөнләй икенсе нәмә һөйләгәйне лә баһа. Уның һүҙҙәрен ҡырҡа түкмәстергәндәр, өҫтәүенә, шуның менән уны ғәйепләйҙәр. Урал телевидение редакцияһына шылтыратты.

– Әл-джазирмы? Мин Урал булам, Башҡортостан тигән илдән, Урал исемле тауҙан килгән кешемен. Һеҙ бит миңә ялған ғәйеп тағаһығыҙ.

– Ялғанмы ни? Беҙ, журналистар, ялғанлайбыҙ, тимәк? Әл-джазир ялғанлай, ғәрәп гәзиттәре – бөтәһе лә алдай. Бер Урал ибн Ишдәүләт кенә хаҡ. Шулаймы?

– Гәзиттәр ҙә яҙғанмы?

– Гәзит уҡымайһығыҙмы ни?

– Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғәрәпсә уҡый белмәйем.

– Ғәрәпсә белмәүегеҙ менән маһаяһығыҙ инде?

– Юҡ. Әйтәм бит, белмәүем оят.

– Шулай ҙа гәзиттәргә күҙ һалығыҙ. Һеҙҙең менән телефондан әрләшеүҙән фәтеүә юҡ. Гәзит-журналдарҙы ҡарағыҙ ҙа фекерегеҙҙе әйтерһегеҙ. Шунан күҙ күрер...

Урал гәзиттәр һатып ала була урамға сығып китте.

Алдар менән Тәфтиләү

Аҫабаның төбөнә төшөү Сәсәндең үҙен дә тетрәндерҙе һәм елкендерҙе. Башҡортто халыҡ-милләт иткән нәмә ошо аҫаба бит инде. Атай ере. Атайҙан ҡалған ер уландың үҙен, ғаиләһен туйҙырған, кейендергән, ямғырҙан, һыуыҡтан һаҡлар өй, көтөү-көтөү мал аҫрарлыҡ көтөүлек һәм сабынлыҡ, эсәр һыу, тартыр ҡурай, күкрәгеңде киреп йырларлыҡ иркенлек – һәммәһе лә атай ере. Яҙмышы ла, булмышы ла ер менән бәйләнгәс, йәнен-тәнен аямайынса һаҡлаған уны башҡорт. «Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын». Аҫаба тураһында шул бөйөк йыр!

Сәсән хан дәүеренән бирле килгән аҫаба хоҡуғы башҡортто ошонда туплаған, тырым-тырағай түгел, берлектә генә атай ерен һаҡлап булырын төшөндөргән, шул ер өсөн йыраҡ мәмләкәттәргә яу менән дә, сауҙа менән дә, илсе булып та, белем эстәп тә, белем сәсеп тә барырға күнеккәндәр. «Әсәм килен булған ер, кендегемде киҫкән ер...» Башҡорттоң бөтөн ҡобайыры, риүәйәте, йыры, таҡмағы, әкиәте – ергә барып тоташа. Ир менән ҡатын мөхәббәте тураһында тасуир итһә лә, тел төбөндә ер ята.

Аҫаба – атай ере – ашатыр, эсерер, кейендерер ер генә түгел, аҫаба – йәшәү рәүеше, хоҡуҡтар һәм йөкләмәләр теҙмәһе, халыҡ-ара килешеүҙәр нигеҙе, аҫаба – мәктәп-мәҙрәсәләрҙәге уҡыу әсбаптарын башлаусы ла, фәнде, тарихты өйрәтеүсе лә, һағыныуҙы баҫыр, ижадҡа дәртләндерер ҡоромаҫ сығанаҡ та ул...

Сәсән, аҫаба тураһында уйлаған һайын, уның киңлеген, тәрәнлеген, бөйөклөгөн ныҡыраҡ төшөнә барҙы. Аҫаба башҡорт өсөн иң ыңғай, иң ҡулай, иң мөҡәддәс күренеш кенә түгел, уның ҡайғыһы, аһ-зары, түгелгән ҡаны менән күҙ йәше лә. «Әгәр беҙҙең ҡанды бергә йыйһаң, ҡыҙылайыр ине диңгеҙҙәр».

– Батырлыҡ менән бахырлыҡ, ғорурлыҡ менән мәкер... – Шул һүҙҙәрҙе әйтеүе булды, ҡылт итеп Алдар менән Тәфтиләү иҫенә төштө Сәсәндең. – Ошо икәү әле әйткән һыҙаттарҙың мәңге иҫкермәҫ миҫалы инде...

...Тәфтиләү, йүгерә-атлай килеп, ун ике сатырлы аҡ тирмәгә тиҙ генә инергә ынтылғайны ла, ишек төбөндәге ике ҡарауыл мылтыҡтарын уға арҡыры ҡуйҙы. Һағауылдарҙың күҙе килеүсегә терәлде. Бер һүҙ әйтмәһәләр ҙә, тегенеһе быларҙың ни теләгәнен аңланы.

– Тевкелев Алексей Иванович ғали йәнәптәренең саҡыртыуы буйынса, – тине. Тегеләр һаман ҡымшанманы, әммә тирмә ишегенән берәү сыҡты, күренеп тора – офицер. Уныһы Тәфтиләүҙе баштан-аяҡ күҙ менән һөҙҙө лә:

– Индерегеҙ, – тип бойорҙо.

Мылтыҡтар тайшанды, Тәфтиләү алға атланы. Эстә йәнә бер ишек бар икән, быныһын Тәфтиләү һаҡ ҡына этеп асты, танауына тәмәке, тир, хушбуй ҡатнашмаһынан ауыр еҫ бәрелде. Күҙе алдында тирмә уртаһындағы ҙур булмаған өҫтәл тирәләй баҫҡан бер нисә ир һәм төптәрәк ултырғыста ултырған кеше пәйҙә булды. Быныһының етек сәстәре һәленеп төшкән, киң маңлайы менән бит остарында бөрсөк тир күренә ине. Күлдәк иҙеүе ысҡынған, һул ҡулының бармағында ҙур ҡашлы йөҙөк нур сағылдырып ҡуйҙы. Тәфтиләү ишек төбөндә тура ҡатты. Кемгә төбәп кенә өндәшергә белмәһә лә, ултырыусыға ҡараш йүнәлтеп:

– Ғали йәнәптәренең ҡушыуы буйынса килдем: Алексей Тевкелев, – тип ярып әйтте.

Тирмәләгеләр, барыһы ла шым ҡалып, инеүсегә текәлде. Ултырғыстағы кеше, кеҫәһенән ҙур ҡулъяулыҡ сығарып, маңлайын, битен, муйынын һөрттө, һәм инеүсегә ҡарап ултырғандан һуң:

– Йүнле мыйығың да юҡ, үҙеңде шәреҡ белгесе тиҙәр. Нисә йәш һуң һиңә? – тип һораны.

– Егерме ике йәш, ғали йәнәптәре, – «Батша үҙе ошо икән», – тип уйлап өлгөрҙө. – Мыйыҡҡа килгәндә, беҙҙең нәҫелдә йүнләп үҫмәй ул.

– Ниндәй нәҫелдән инде һин? Татарҙанмы? – Батшаның күҙ ҡарашы ҡатҡылланды.

– Эйе...

Тәфтиләүҙең аҫҡа ҡарағанын шәйләгән батша:

– Нәҫелеңдән оялаһыңмы? Унан оялыу яҙыҡ – кеше ата-әсәһен дә, тыуған ерен дә һайлап ала алмай, – тип шелтәләне.

– Оялмайым. Мин – Сыңғыҙ хандың вариҫы. – Тәфтиләүҙең башы сөйөлөп китте.

– О-о! Бөйөк Сыңғыҙ хан!.. Ә ни эшләп, улай булғас, исемеңде үҙгәртеп йөрөйһөң?

«Быныһын да белә икән», – тип кенә уйланы Тәфтиләү.

– Ҡотломөхәммәт тип әйтеүе ҡыйын бит урыҫтарға. Шуға Алексей ҡушаматы алдым. Атайҙы урыҫтар элек тә Иван ти торғайны.

– Суҡындыңмы?

– Юҡ.

– Беселгәнһеңме?

– Эйе.

– Тимәк, магометан.

– Эйе, мосолман.

– Мосолман Ҡотло ... мөх ... ә... – Батшаның теле әйләнмәне, ҡулын һелтәне, – дөрөҫ икән, әйтеп булмай. Мосолман Леша, кил әле яҡынырaҡ.

Тәфтиләү өҫтәлгә яҡынлашты, баянан бирле быларҙы күҙәткән эре һөйәкле ирҙәр ситкәрәк тайпылды, Тәфтиләү батша менән күҙгә-күҙ ҡалды.

– Сыңғыҙ вариҫы булғас, был һуғышта һин минең еңелеүҙе теләргә, хәл ҡәҙәреңсә шуға булышырға тейешһең. Дөрөҫмө?

– Юҡ, ғали йәнәптәре. Сыңғыҙ дәүере күптән уҙған, Урҙалар туҙған. Көсө ташып торған Рәсәйҙе теләк менән генә еңеп булмаҫын белмәгән кеше иҫәр булыр ине. Был һуғышта һин еңәсәкһең, ғали йәнәптәре.

– Ҡайҙан килә был һүҙҙәр? Ялған түгелме?

– Түгел, мин бит ғәскәр араһында йөрөйөм. Был юлы ғәскәр һан яғынан да күп, ҡорал да яҡшы, һалдаттарҙың өҫтө лә бөтөн, тамағы ла туҡ, еңергә теләге лә ҙур.

– Ҡара-ҡара, күп һуғыш кискән сардар тиерһең, – батша яуаптан ҡәнәғәт ҡалды.

– Әйт әле, «сардар», – батша көләмһерәне. – Һуғыш башларҙан элек һеҙҙең татарҙар, ғәскәрҙе теҙеп ҡуйып, ике саф алдында ике батыр көрәштерәме ни?

– Эйе. Көрәштермәй, ә һуғыштыра. Был йола бик борондан килә. Кәрәк-кәрәкмәгәнгә артыҡ ҡан ҡоймаҫ өсөн уйлап сығарылған ул. Ике яҡтан да батыр сығарып һуғыштыралар ҙа, кемдеке еңә – шул еңелгәндең сардарына һуғышта еңелгән һымаҡ шарттар ҡуя. Шарттар үтәлһә, һуғыш булмай, ҡан ҡойошҡа юл ябыла. Йөҙәр, бәлки, меңәр йыл буйы килгән ғәҙәт был. Татарҙар урыҫ кенәзлектәренә ҡаршы һуғышҡанда ла батыр сығарған.

– Шунан?

– Урыҫтар был ғәҙәтте белмәгәс, алдан батыр әҙерләмәгән. Шуға ил еңелгән.

– Беҙ ҙә еңелербеҙме икән?

– Төрөктәр батыр шартын ҡуйҙымы?

– Эйе, ғәскәр сафы алдында батырҙар һуғышһын, тигәндәр. Һуғыш майҙанын да күрһәткәндәр. Күрәһең, уларҙың батыры әҙер, ә беҙҙеке – юҡ... – Батша шымды, уйланып ултырҙы ла: – Ярар, бар. Ошоларҙы һорашырға тип саҡырғайным мин һине, тылмас, – тине. – Бик йыраҡ китмә, тылмас булараҡ миңә кәрәгең тейеүе бар, Сыңғыҙ вариҫы. – Батша баш иҙәне.

Әммә Тәфтиләү урынынан ҡуҙғалманы. Ишеккә боролаһы урынға, батшаға һүҙ ҡатты:

– Ғали йәнәптәре, рөхсәт итегеҙ.

– Тағы ни?..

– Төрөк батырына ҡаршы сығыр яугирыбыҙ бар!

– Кем ул? Ҡайҙан беләһең?

– Төрөктәр боронғоно ҡыуып, батырҙар һуғыштырырға уйлар тип, беҙҙең яҡтан булырҙай кешене ҡарап йөрөнөм мин. Башҡорт ғәскәренең бер сардары, Алдар атлы. Кәүҙәгә лә бик мөһабәт, көсө лә ташып тора, йәштән йыйындарҙа көрәшкән, ҡылыс, һөңгө һуғышына ла маһир.

– Ҡайҙан беләһең һин уны был тиклем?

– Әйтәм бит, ҡарап йөрөнөм, тип. Башҡорт менән татар телдәре бик яҡын бит. Араларында йөрөп һөйләштем, батырҙар, көрәшселәр тураһында һораштым. Алдарҙы әйткәстәре, уны ла күрҙем. Бик булдыҡлы яугир.

– Ярар, бар алып кил әле.

Тәфтиләү йылп итеп сығып та китте. Батша тел шартлатты. Тегенең артынан ишек ябылғас:

– Ошолай булырға тейеш ул сардар. Өйрәнегеҙ, – тине янындағыларға. – Кәрәк булыр тип, күҙәтә йөрөнөм, ти бит. Ә беҙҙекеләр әйткәндә лә эшләй белмәй.

– Әммә ул – татар, – тине кемдер.

Батша быың үҙ һүҙҙәрен иҫәнә төшөргәндә тиҙ шәйләне. Батша йыш ҡына: «Татарға ышан да хәнйәреңде ҡулыңда тот. Артыңдан килтереп ҡаҙайым тигәндә үҙең сәнсеп өлгөрөрлөк булһын»,– ти торғайны. Шуға ишаралай инде теге.

Тирмәлә ул-был иткәнсе, өлкән һаҡсы ишекте асып өндәште:

– Тевкелев Алексей Алдар тигән берәүҙе алып килгән.

– Индер.

Ишек төбөндә икәү пәйҙә булды. Яңы килеүсе янында баяғы Тәфтиләү малай кеүек кенә тора ине. Ялпаҡ битле, киң яурынлы бәһлеүән аяҡтарын киреп

баҫҡан, ҡояшта-елдә бите ҡара янған, яңы ҡырҙырып сәсе алынған башы ғына үҙенеке түгел кеүек ағарып тора. Батша быға һынамсыл ҡарап ултырҙы.

– Алдар. Нисек була инде был урыҫса? – Тәфтиләүгә текәлде.

– Мастер лжи.

– Шулай уҡмы ни? Кил әле бында алдау оҫтаһы. Ҡул көрәшен беләһеңме?

– Беләм.

– Һин урыҫса ла һөйләшәһеңме?

– Һөйләшәм.

– Ҡайҙа өйрәндең?

– Урыҫ менән аралашып йәшәйбеҙ бит.

– Әйҙә ултыр, ҡул көрәштерәбеҙ.

– Әйҙә. – Алдар батшаның усына усын терәне лә бармаҡтарын ҡыҫты. Тәфтиләү быға шыбырланы:

– Еңеп ҡуйма.

Әммә бер аҙҙан көсәнеүҙән йөҙө ҡып-ҡыҙыл булған батшаның ҡулы бөгөлөп төштө. Тәфтиләү ыҫылданы:

– Ни эшләнең? Ғәфү үтен.

Алдар уға әйләнеп кенә ҡараны ла өндәшмәне. Батша:

– Көслөһөң икән, – тине. – Мин һине төрөк батырына ҡаршы һуғышҡа сығарам. Ең. Еңһәң, данға һәм байлыҡҡа күмермен. Еңелһәң...

– Еңелһәң – үлерһең. – Алдар батшаның һүҙен үҙе тамамлап ҡуйҙы. – Төрөк батыры үҙенә ҡаршы сыҡҡанды тере ҡалдырмай.

– Ярар, бар, әҙерлән.

Батша тирмәһенән сыҡҡас, Алдар эре-эре аҙымдар менән үҙ ғәскәре торған яҡҡа ыңғайланы. Тәфтиләү йүгерә-атлай тигәндәй быға эйәрҙе. Һөйләшмәнеләр, һәр икеһе үҙ уйына сумды. «Бөйөк Петр һынлы батшаға мынау айыу кеүек башҡортто килтереп дөрөҫ эшләнемме һуң мин? – тип баш ватты Тәфтиләү. – Мин бит уның кем икәнлеген дә йүнләп белмәйем. Батыр, тинеләр. Бөрйән улыҫынан. Уныһы ҡайҙалыр инде? Төрөктө еңә алмаһа? Еңмәү генә түгел, майҙандан тороп ҡасһа?» Тәфтиләүҙең башы шикләнеү менән тулды. Әгәр Алдар еңә алмаһа, үҙенә лә йүнле көн булмаясағын һиҙенә бит инде. Шуны раҫлап, Алдар һүҙ ҡатты:

– Кем тинең әле үҙеңде? Ләксәйме?

– Алексей Тевкелев.

– Ләксәй Тәфтиләү икән. Ярар. Әйт әле, Тәфтиләү, төрөк батыры тураһында нимә ишеткәнең бар? Нindәйерәк кеше, көс-ғәйрәте ҡайһылай икән? Ҡайһы ҡорал менән яҡшы һуғыша, нимәһе ҡайтыш?

– Алдар, былар тураһында беҙҙекеләр бер нәмә лә белмәй. Яуап эҙләп төрөк яғына сығып китеп булмай бит инде. Үҙеңдең ҡоралыңды, атыңды яҡшынан әҙерлә.

– Уныһын һинһеҙ ҙә беләм.

Башҡорт ғәскәре торған ергә килеп еттеләр. Былар ҙа, батша һымаҡ, тирмәлә йәшәй ине. Алдар килеү менән үҙенең йөҙ баштарын йыйҙы.

– Егеттәр, Питер батша миңә иртәгә төрөк батырына ҡаршы сығырға ҡушты.

– Һо!

– О-о-һо!

– Уһылдашмағыҙ. Батша һүҙен йығып булмай, ни булһа – шул булыр, сығам.

– Сығам ғына түгел, еңәм, тиген. – Берәү сәмләндерҙе.

– Берәү ҙә еңелер өсөн майҙан тотмай. Мин һеҙҙе, егеттәр янында булығыҙ, тип әйтергә саҡырҙым. Иртәгә – һуғыш. Яҡшылап әҙерләнегеҙ. Минең менән

бер-бер хәл булһа, Аҡъял ҡала сардар булып. Хәҙер таралышығыҙ, миңә лә әҙерләнер кәрәк.

Яугирҙар үҙ урынына китте, тик быларҙы шым ғына күҙәткән Тәфтиләү һаман ултыра бирҙе.

– Һин дә ҡайтһаң була, тылмас. – Алдар дорфа ғына өндәште.

– Ҡайтырмын. Тик һин майҙанға ниндәй ҡорал менән сыҡҡаныңды беләйем тим.

– Ниндәй-ниндәй? Уҡ менән ян, һөңгө менән ҡылыс. Беҙҙә бүтән ҡорал юҡ.

– Батырҙарға уҡ-һаҙаҡ йөрөтөргә ярамай.

– Иртәгә күҙ күрер.

Алдар Тәфтиләү менән орҙом-бәрҙем һөйләшеүенең сәбәбен үҙе лә аңламаны. Ни эшләптер был бәндә күңеленә ятманы. Әллә ниндәй күренеп торған оҡшатмаҫтай яғы ла юҡ һымаҡ. Теленең шымалығымы, күҙҙәренең ялт-йолт килеп тороуымы ытырғыныс тыуҙырҙы ла ҡуйҙы.

Төшөндә Алдар Һаҡмар буйын күрҙе. Имеш, ауыл ирҙәре бесән саба. Бил быуарынан үҫкән үлән шул тиклем матур булып сәскәгә күмелгән. Иңкеш, ҡорт, себен-серәкәй гөжләп тора. Кәкүк саҡыра башланы. Эй саҡыра, эй саҡыра, туҡтау белмәй. Шул тиклем оҙонмо икән Алдарҙың ғүмере? Уянып китте Алдар. Баҡһаң, саң ҡағалар. Ғәскәрҙе уяталар. Саң тауышын кәкүк саҡырыуы тип ятҡан да баһа.

Алдар атын аҙ ғына ашатты, эйәр-өпсөнөн бик ентекләп тикшерҙе, һөңгө, ҡылысын янығыс менән шымартты. Үҙе тыныс, хатта вайымһыҙыраҡ булырға ла тырышты. Әммә үлем менән йәшәү араһы бер уҡ оҙонлоғо ғына ҡалған саҡта яһалмаланып буламы инде? Борсолоуы йөҙөнә сыҡҡайны. Бына яугирҙары ла һуғышҡа әҙер булып бөттө. Майҙанға сығып теҙелергә бойороҡ көтөп торалар ине, һыбайланған Тәфтиләү килеп етте.

– Әйҙә, һине батша саҡырта.

Петр батша үҙенә яу идараһы урыны итеп бейек кенә түмәләсте һайлағайны. Батша, оҙон аяҡтарын һуҙып баҫып тегеләй-былай йөрөп ята. Сабып килеп туҡтаған ике һыбайлыны күреп туҡтаны, Алдар менән Тәфтиләүҙе танығас, быларҙы саҡырып ҡул иҙәне.

– Хәйерле иртә, ғали йәнәптәре.

Тәфтиләү батшаның алдында тубыҡланды.

Алдар ҙа шулай итте.

– Тор, башҡорт, – тине батша. – Минең идара урыны шәпме?

– Бик яҡшы, ғали йәнәптәре, бар тирә-яҡ күренеп тора. Тик алғы һыҙыҡҡа яҡын. Ана тегендә күп итеп тыуҙар ҡаҙаҡларға ҡуш.

– Уныһы нимәгә?

– Әйтәм бит, алғы һыҙыҡҡа яҡын, тип. Ғали йәнәптәрен дошман яғынан уҡ менән алып була. Шуға йыраҡтан батша үҙе күренмәһен өсөн, елберҙәп торған ҡаҙаҡлы тыуҙар уны һаҡлар ине, тием.

– Ошо тиклем ергә уҡ еткереп буламы ни, иҫәр.

Алдар бәхәсләшеп торманы. Йәйәһен алып, һаҙаҡтан уҡ сығарып һалды ла:

– Ана, майҙан уртаһындағы ҡаҙыҡтағы әләмде күрәһеңме? Минең уҡ шул ағасҡа ҡаҙаласаҡ.

Батша ла, ярандары ла, ауыҙ ҡыйшайтып көлөп, быны күҙәтергә тотондо. Йәнәһе, һөйләй инде башҡорт. Ошо тиклем ерҙән беләк йыуанлыҡ ҡаҙыҡҡа уҡ тигеҙерһең тигеҙмәй ҙә. Алдар еләненән бер һүренде тартып алды, һул ҡулының баш бармағын төкөрөкләп, һүрендене шуға йәбештерҙе һәм, ҡулын алға һоноп ҡарап торҙо. Һүренде, елгә елберҙәп, бармаҡтан ыҫҡынып киткәйне, елдең

ҡаршыһынараҡ йәйәһен һалып, кереште тартты һәм, йәнә бер тоҫҡап, атып ебәрҙе. Уҡ әләмле ҡаҙыҡтың ҡап уртаһына барып ҡаҙалды.

– Әйттем бит мин һиңә, ғали йәнәптәре. – Алдарҙың тауышында тантана-фәлән тойолманы. – Минең һымаҡ атыусы төрөк батыры табылмаймы ни? Байраҡтарҙы ҡаҙаҡларға ҡуш, ғали йәнәптәре.

Батша ярандарына екерҙе:

– Ни эшләп тораһығыҙ, йүгерегеҙ! Башығыҙ эшләмәй икән, аяғығыҙ тик тормаһын. – Ярандары һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Батша Алдарға ла дорфа өндәште. – Ә һин анауындараҡ тор, ваҡыты еткәс, майҙанға өндәшерҙәр.

Алдар ҙа, Тәфтиләү ҙә шым ғына ситкә шылды. Ҡыҙыу ҡанлы батшаның күҙенән йыраҡтараҡ булғаның хәйерле.

Ике тау ҡыҫымындағы яланға ике яҡтың да ғәскәре теҙелде, һәр ике яҡ та үҙ байрағын күтәрҙе һәм һәр ике яҡта ла яу борғоһо һөрән һалды. Шул саҡта ике саф та уртаға өҙөлгәндәй бүленде, һәм ике яҡтан һыбайлы ике батыр килеп сыҡты. Төрөк батыры тимер күлдәген кейгән, башында – тимер башлыҡ, ҡулында – һөңгө, һул ҡабырға яғында – кәкре ҡылыс. Батыр, күрәһең, кәүҙәгә бик еллелер, аҫтындағы аты, биле һынырҙай булып, саҡ юрта. Алдар кәүҙәгә саҡ ҡына ҡайтыштыр, уның да атына еңел түгел, өҙәңгеһе тубығына етерҙәй булып тора. Алдар үҙе еңел генә күлдәктән, башында – таҡыя, уң ҡулында – оҙон һөңгө, һул яғында – ҡылыс. Һыбайлыларҙың һәр икеһе лә, аттарын һулаҡайға тартып, берберенән йыраҡлашты һәм кире боролоп туҡтаны. Бына «Ор!» фарманы яңғыраны, һәм һыбайлылар ҡара-ҡаршы сабып китте. Аттар яҡынайҙы, бына башҡабаш тиңләштеләр. Алдар төрөктөң һөңгөһөнөң осо күтәрелгәнде шәйләне, был минең күкрәккә тоҫҡай, тип уйлап өлгөрҙө лә кәүҙәһен ҡапыл һулға эйҙе, шул уҡ ваҡытта уң ҡулы – һөңгө һабын ҡыҫып тотҡан уң ҡулы хәрәкәтһеҙ ҡалды һәм, ат сапҡан ыңғайы, һөңгөнөң осо нимәгәләр төртөлдө һәм ҡулды шаҡарҙы. Әммә Алдар ҡулын ысҡындырманы. Үҙенең һөңгөһө төрөк батырының эсенә ҡаҙалғанын шәйләне. Хәҙер йә һөңгө, шаҡарылып, уның үҙен эйәрҙән бәреп төшөрә, йә уң ҡулы ысҡынып китә. Әммә береһе лә булманы. Алдар һул ҡулы менән дә һөңгө һабын эләктереп алды. Йән-фарман сапҡан ыңғайы ҡапыл кәртә яһалғас, ат үрәпсене. Ә төрөктөң аты, һыбайлы ботон ҡыҫа алмағас, өҫтөндәге кешеһен һыпырылдырып, артабан сапты. Төрөк батыры ергә быраҡтырылды, һөңгө кәүҙәгә нығыраҡ инде. Алдар шул ыңғайы аттан ырғып төштө лә ерҙәге кешегә текәлде. Мөһабәт кәүҙә ҡыбырламай ине инде, ҙур баштың ауыҙынан ҡан һарҡый башланы. Алдар ҡылысын ҡынынан һурып алды ла, тимер башлыҡты ысҡындырып та тормай, ерҙәгенең муйынына һелтәне һәм һөңгөһөн һурып алды, ҡылысын кире һынланы ла киҫелгән башты тотоп күтәрҙе. Шунан атына ырғып менде лә Петр батша ултырған убаға сапты. Сафҡа баҫҡан ғәскәр «Ура!» яңғырата. Алдар атының ауыҙлығын ҡапыл тартты, тегенеһе шып туҡтаны. Һыбайлы ергә һикереп төштө лә батша алдына төрөктөң башын ырғытты.

Петр ҡысҡырып ебәрҙе:

– Виват, Россия! – Шунан Алдарҙы ҡосаҡлап, өс ҡат үпте. – Һин уны булдырҙың! Рәсәй ҡоралының ныҡлығын күрһәттең. Килтерегеҙ батырға бүләкте. – Алдарҙың ҡулына көмөш ҡынлы ҡылыс тотторҙо. Үҙе көмөш һауытҡа араҡы ҡойоп алды. – Һинең һаулыҡҡа, беҙҙең еңеүгә. Артабан беҙ уларҙы ҡыйратасаҡбыҙ. Ә һиңә батшаның махсус указы буласаҡ.

Урыҫ әрмеһе был һуғышта төрөктәрҙе ҡыйратты. Шунан һуң батша ярандары менән ҡуша өс көн, өс төн байрам итте. Мине онотҡандыр инде был, тип бөткәйне Алдар. Юҡ, онотмаған икән. Дүртенсе көндө батша сапҡыны килеп тапты уны.

– Әйҙә, Петр Алексеевич таптыра һине.

Барып инһә, батша тирмәһе тәмәке төтөнө, араҡы әсеһе, тағы әллә ниндәй еҫ менән тулған. Иҫерек бәндәләр йөрөй шунда. Петр батша тәпәшәк кенә өҫтәл янында берәүҙең елкәһенә ҡулын һалған да ултыра:

– Бел, Алексей, бына бер аҙ тын алайыҡ та Урта Азия аша Һинд океанына тиклем китәсәкбеҙ. Рәсәй ҡоралының көсөн күрһәтәсәкбеҙ әле беҙ ундағы төрөкмөрөк-ҡырғыҙҙарға. Ә һине Һинд походына төп тылмас итеп аласаҡмын. Тылмас бит ул, аҡылы булһа, тәржемәсе генә түгел, ҙур дипломат та... Тот, эсәбеҙ. – Шул саҡ батша ишек төбөндәге Алдарҙы күреп ҡалды. – Ана, беҙҙең янға тағы бер магометан килгән. Батыр ул. Төрөктөң башын ана нисек сапты. «Ҡырт» итеп кенә ҡалды. Ошондай батырҙарҙы, магометан булһа ла, яратам мин. Һинд походында бына ошоноң кеүек батырҙар беҙгә юл ярып барасаҡ. Әйҙә, кил, башҡорт. Бына һиңә батша указы.

– Рәхмәт, ғали йәнәптәре.

– Ни әйткәнмен мин указда, беләһеңме?

– Юҡ әле.

– Унда мин һиңә тархан исеме бирҙерттем. Балаларыңа ла, балаларыңдың балаларына ла ҡала ул исем.

– Рәхмәт, бадишаһыбыҙ. Ләкин минең ундай исемем бар бит инде.

– Ҡайҙан булһын ул һиндә?

– Иҫәнгелде атайымдың вариҫы булараҡ бар ул. Атайымдың атаһы ла тархан ине.

– Ярар, булһын. Ике исем булыр. Береһе икенсеһенә ҡамасау түгел. Бар, минең хаҡҡа ғибәҙәтеңдә утә. Һин бит эсмәйһең? Ә беҙ Алексей Тевкелев менән эсәбеҙ әле. Беҙҙең еңеү, беҙҙең байрам бит. Эсһәк тә ярай.

Алдар ҡайтып китте. Ғәскәр тубына ғына түгел, Башҡортостанға уҡ ҡайтып китте. Батша указы уға артабан һуғышта ҡатнашыуҙы тыя ине. Батырлыҡ күрһәткән кешеләрҙе һаҡлау йәһәтенән шулай эшләнгәйне.

Тәфтиләүгә алдан ҡайтыу эләкмәне, ҡайтыуға ынтылып та торманы ул. Батшаның үҙенә яҡынлатыуы һанһыҙ бүтән мал-мөлкәттән, ирек һәм бүтән төрлө азатлыҡтарҙан ҡиммәт ине. Батша уға ҡарата ла указ сығарҙы. Өлкән тылмас итеп ҡуйҙы, эш хаҡын арттырҙы. Шуға ҡыуанып, көнөн-төнөн дә эшләргә әҙер ине Тәфтиләү.

***

Алдар менән Тәфтиләүҙең икенсе осрашыуы тәүгеһенән һуң байтаҡ йыл үткәс булды. Алексей Тевкелев Анна батшабикәнең әмерен үтәр өсөн Өфөгә килде. Ул саҡта Өфөнөң ҡалалығын әйтер инем инде. «Ҡала» тигәндән беҙ ҙур-ҙур таш йорттарҙы, киң урамдарҙы күҙ алдына килтерәбеҙ. Ә бында ҡәҙимге ағас ауыл өйҙәре, яҙлы-көҙлө батҡаҡҡа сумған урамдар... Ҙур ауыл инде. Тик башҡаларынан уны ағас ҡәлғәһе айырып тора. Шулай уҡ ағастан һалынған сиркәүе бар.

Тәфтиләү быларына иғтибар итеп тә торманы. Йәшәп торорлоҡ йорт бирҙеләр, уға шул етте. Уның бит маҡсаты башҡа, Өфөнөң матурлығын йә бысрағын тикшереү түгел. Шуға Өфө провинцияһының башлығы менән күрешкәндә бик һалҡын ғына һөйләште. Урыны ла бар ине инде. Батшабикәнең шәхсән йомошсоһо бит. «Ғали йәнәптәренең бойороғон үтәр өсөн миңә башҡорттар араһынан бик абруйлы, ышаныслы, үҙҙәренең йәмғиәтендә генә түгел, күрше халыҡтарҙа ла, мәҫәлән, ҡалмаҡта, татарҙа, ҡырғыҙҙа һүҙе үткән кешеләр кәрәк», – тине. Наместник аптыраны. Башҡорт араһында ундай кеше бар тиме ни?.. Анауы Таймаҫ Шаимов ҡына булмаһа? Үҙе тархан, үҙе урыҫ власы ҡушҡанды йүгереп йөрөп үтәй. Бүтән халыҡта абруйы бармы-юҡмы икәнен белмәй. Әммә быны ҡәләм осона алып ҡуйҙы. Тағы кем бар? Ай-һай, юҡтыр.

– Алдарбай нисек?

– Ҡуй, юҡты һөйләмәгеҙ. Үткән болала иң ҙур башлыҡтары шул булды инде. Күпме саф христиандың башына еттеләр. Шуның этлеге генә булды. Болала ҡатнашыусыларҙы ярлыҡау тураһында Сенаттың ҡарары булмаһа, дар ағасын биҙәп торор ине инде ул башкиҫәр.

Тәфтиләү өндәшмәне. Алдарҙың башҡорт болаһының башында торғанын белә ине. Әммә был тиклем ҡәһәрлелер, тип уйламағайны. Шуға өндәшмәне. Әммә бер нисә көндән Ырымбурға китер алдынан наместникка әмер бирҙе: «Таймаҫ менән Алдарҙы Ырымбурға минең ҡашыма ебәрегеҙ!»

Өфөнән Ырымбурға күбеһенсә Ағиҙел буйлап, шунан Һаҡмар, Яйыҡ яғалап йөрөйҙәр. Бүтән төрлө лә юлы бар. Дим буйлап китәһең дә бараһың. Шунан – Һайылмыш, артабан Яйыҡҡа сығаһың. Тәүгеһендә урман-ер күберәк, икенсеһендә – ялан-ер.

– Ә ҡайһыһы хәүефһеҙерәк?

– Икеһе лә бер сама инде. Башҡорт донъяһы аша уҙаһың бит. Ҡайҙа ла тотоп башыңды киҫеүҙәре бар.

– Ҡыуандырҙың. Һаҡсыларҙы күберәк ҡуйығыҙ. Ялан юлынан китербеҙ.

– Дөрөҫ. Ялан яғы, исмаһам, асығыраҡ.

Тәфтиләү Ырымбурға ул-былһыҙ ғына барып етте. Башҡорттар бик киң күңелле, ҡунаҡсыл халыҡ ине. Туҡтаған ерҙәрендә ихлас ҡаршыланылар, һыйланылар. Тәфтиләүҙең татар икәнен белгәс, үҙҙәренекенә яҡын телдә һөйләшкәс, бигерәк иренеләр. Күңелдәре яландары кеүек киң, тип уйланы Тәфтиләү. Ә яландары... Ер яңы ҡарҙан әрселеп тә бөтмәгән саҡ ине. Күктә иркә ҡояш менән талпынып-талпынып һайраған һабантурғай һәм наҙлы ғына иҫкән ел. Ат тояҡтары тауышы булмаһа, шымдан ҡолаҡ һаңғырауланыр һымаҡ. Их, иркен ер. Кескәй генә түмәлсәйҙәр бер-береһенә юлсыларҙы тапшыра торамы ни! Һирәкһаяҡ ҡына урман осрай ҙа йәнә һабантурғайлы ялан йәйрәй. Ошо ерҙәрҙә шаулап үҫкән игенгә, елгә һыҙғырып ултырған ҡылғанға, әскелтем еҫен ян-яҡҡа сәскән юшанға хужа булһаң ине ул. Бында йылҡы өйөрө утлаһа, тегендәрәк – һыйыр көтөүе, анау уйһыулыҡта – һарыҡ-ҡуй. Сәскән иген дә, үҙе үҫкән гөл баҡса һымаҡ бесәнлек тә күкрәп ятыр ине. Тәфтиләү ошолайтып татлы хыялға ла бирелеп алды.

Иркен донъяға һоҡланыу тойғоһон Алдар ҙа кисерә барҙы. Өфөнән бойороҡ килгәс, Алдар тиҙ генә йыйынды ла, унлаған иң ышаныслы кешеһен алып, Ырымбурға юлға сыҡты. Һуңғы ваҡытта оҙон юлға йөрөгәне лә юҡ. Аҙаҡҡы болала күп ер үтте инде үҙе. Үтте тип әйтеүе генә анһат, утлы юл бит. Һине ҡайҙа үлем һағалағанын, әллә уҡ, әллә пуля ҡаҙалырын белеп буламы ни. Әммә дошман иленә, еренә, ғаиләһенә, бисәләренә, балаларына яҫҡынмаһын, нисек йәшәргә, кемдең һүҙен һүҙ итергә өйрәтмәһен, бойормаһын өсөн ҡулына уҡ-һаҙаҡ, һөңгө менән ҡылыс алды ул. Ул ҡоралды Төрөк һуғышында тегеләрҙең батырын йыҡҡаны бирле тотҡаны ла юҡ ине. Мәжбүр иттеләр. Тиктомалдан бирәү ҙә ҡулына ҡылыс йә хәнйәр алмай, дошман ихтыярһыҙлаһа инде...

Башҡорт болаһы баҫылғаны бирле урыҫ власы уның барлығын онотоп маташты. Ни өсөн икәнлеген, әлбиттә, белә Алдар: власҡа ҡаршы бола ҡуптар ҙа рәхмәт көтәһеңме ни! Әммә Алдарға ынтылырға үҙҙәренең ҡулдары ҡыҫҡа. Петр Беренсе батша биргән йәрлеге бар бит. Батша үҙ ҡулы менән тотторған ҡылысты ҡынынан һурып, башыңды ла өҙә сабыр. Алдарҙан булыр ул. Шулай тип тә шыртланылар. Ә бөгөн килеп, иҫтәренә төшөргәндәр. Ни эшләп? Өҫтәүенә, яҡшы ҡоралланған унлап егет алырға ла ҡушҡандар.

Төрлөсә уйланды Алдар, әммә нимәгә саҡыртҡандарын белә алманы. Ҡорал тотоп килергә бойорғас, язаларға түгел инде, урыҫтың ихтыяжын һаҡларға эш

ҡушаларҙыр, тип уйланы. Ә дошманлаштан китһә... Ана, йәйрәп ята бит уның иле. Бормаланып-бормаланып аҡҡан Һаҡмарҙың бер яры ҡая таш та урман, икенсеһе – һөҙәк ер ҙә ялан. Күктә һабантурғай, ер өҫтөндә һулап туйғыһыҙ һауа. Ошо тиклем хозурлыҡты дошманға бирә була тиме башҡорт? Ана, Алдарҙың йылҡылары, тегендәрәк – һыйыр малы. Ерҙе дошман алһа, уларҙы Алдар ҡайҙа утлатыр? Уландарына ни ҡалдырыр ҙа ейәндәренә ни әйтер? Юҡ инде, юҡ. Ала алмаҫтар минең ерҙе. Атай-бабайҙарым меңәр йыл элек васыят иткән уны миңә. Минән һуң балаларыма күсәсәк ул.

Алдар, үҙ алдына һөйләшкәндәй итеп, йоҙроҡлап эйәр ҡашына һуҡты. Менгеһе тертләп китте хатта. Йоҙроҡ та елле, ҡул да ҡаты шул.

Ырымбурҙа Алдар генерал-губернаторҙың кәнсәһенә ингәйне, һине бында саҡырған кеше юҡ, тинеләр. Аптырап торҙо ла батыр, кире боролоп сығып киткәйне, баянан бирле баш күтәрмәй нимәлер яҙған берәү телгә килде.

– Уны, бәлки, теге йәшерен экспедицияға саҡырғандарҙыр. Баш ҡаланан килгән бәндә исемлек биргәйне лә инде, шунда юҡмы икән был?

Икенсеһе ҡағыҙ ҡутарҙы.

– Исемеңде кем тинең әле?

– Алдарбай.

– Бөрйәндәнме?

– Эйе, бөрйән ырыуы.

– Бар анауы күрше йортҡа. Алексей Иванович Тевкелев тигән кеше саҡырған һине.

– Бая уҡ шулай тиҙәр уны.

– Тевкелевты беләһеңме?

– Белмәгән ҡайҙа. Төрөккә ҡаршы ғали йәнәптәре Петр батша ҡарамағында бергә булдыҡ.

– Бында ла үҙҙәренекен табалар, баш ҡала ҡомаҡтарын әйтәм. Беҙгә генә һан юҡ. – Теге кеше тағы ла ниҙер мыңғырланы. Алдар елтләтә баҫып сығып китте.

Тәфтиләү тыйнаҡ ҡына йылмайып ҡаршыланы Алдарҙы. Бынаһы тегене ҡосаҡлап уҡ алырға иткәйне лә, Тәфтиләү ҡулын ғына һуҙғас, күрешеү менән генә сикләнергә тура килде. Тәфтиләү, һүҙҙе оҙонға һуҙмай ғына:

– Һине, Ҡырым һуғышынан һуң нык үҙгәргән, тиҙәр? – тип һораны.

– Әлләсе...

– Бола башында йөрөгәнһең икән?

– Беҙ теләп күтәрелмәнек. Тамаҡ аҫырау ғына түгел, тын алырға ирек ҡуймай башланылар. Иҙелеп йәшәгәнсе, ирек даулағаның мең артыҡ.

– Эйелгән башты ҡылыс киҫмәй, тиҙәр. Буйһонорға ине.

– Бахыр баштан баҡыр баҡа яҡшыраҡ.

– Петр батшаға биргән антыңды оноттоңмо?

– Ант итмәнем мин уға. Беҙҙең батша ғали йәнәптәренә, тышҡы һуғыштарҙа ҡатнашасаҡбыҙ, сик эштәрен башҡарасаҡбыҙ, тигән йөкләмәбеҙ генә бар.

– Ант бирмәгәс, бола сығарһаң да буламы?

– Бола – ул эске эш, тышҡы сәйәсәтте беҙ барыбер үтәйбеҙ.

– Улай икән... Бер-ике көн ял ит. Таптырырмын мин һине.

Ырымбурҙың шау-шыуына бер аҙ күнегә төшөүгә, ысынлап та, Алдарҙы эҙләтеп алды Тәфтиләү. Алдар уның кәнсәһенә ингәндә, Таймаҫ шунда ултыра ине. Ҡул бирмәү генә түгел, эйәк тә ҡаҡмаҫҡа уйлағайны уға Алдар, тегенеһе үҙе башын эйепме-эйә, «әссәләмәғәләйкүм»дән һалдыра. Сәләмен алды Алдар, әммә ҡулын бирмәне. Был Тәфтиләүҙең үткер ҡарашынан ситтә ҡалманы.

– Нимә? Бигүк оҡшамаймы әллә күрешеү? – ти һалды.

– Оҡшай, оҡшай. – Таймаҫ алдан алды. – Алдар һынлы батыр менән осрашыу үҙе бер бәхет.

– Улай икән... Һин дә шулай уйлайһыңмы, Алдар тархан?

– Аллаһы Тәғәлә күрештергән икән, юҡҡа түгелдер. Ә үткән эшкә – салауат. – Шулайтып ҡотолдо Алдар. Үҙе, беҙҙең араны Тәфтиләү белә икән, тип уйланы. Бола ваҡытында Таймаҫ урыҫ яғында йөрөнө бит, башҡорттоң берҙәмлеген ҡаҡшатып. Шуға ишаралай инде Тәфтиләү.

– Ярар, салауат икән, шулай булһын. Мин һеҙҙе Рәсәйҙән ситтә бик ҙур эш башҡарырға саҡырҙым. Тик уға тиклем һеҙ үҙегеҙҙең ышаныслы, Рәсәй эштәренә ныҡ бирелгән кеше икәнлегегеҙҙе күрһәтергә бурыслыһығыҙ.

– Ҡайһылайтып? – Таймаҫ ырғып та сыҡты.

– Ҡөрьән үбеп, батшабикәбеҙ Аннаға тоғролоҡҡа ант итеп.

– Итәбеҙ. – Таймаҫ йәнә алдын булды.

– Һеҙ икәү генә түгел, һеҙҙең менән килгән бөтөн кеше лә.

– Улар менән һөйләшергә кәрәк. – Алдар шарт ҡуйҙы.

– Ышаныс юҡмы ни?

– Ышаныс булмаһа, беҙҙең менән килмәҫтәр ҙә ине. Әммә кемдең нимә уйлағанын белеп булмай. Эсен ярып ҡарарға ҡабаҡ түгел бит.

– Ярар, һөйләшегеҙ.

Иртәгәһен шул уҡ кәнсәгә йыйылдылар. Мулла саҡырғайнылар. Тәфтиләү килештереп башына таҡыя, аяғына ситек кейеп алған. Намаҙҙан намаҙға йөрөгән мөьмин тиерһең. Алдар үҙенең егеттәрен килтерҙе, береһе лә ҡалманы. Таймаҫтыҡылар ун ғына кеше түгел, егермегә тула яҙғайны. Шуға кәнсәлә урын да саҡсаҡ ҡына булып ҡалды. Тәүҙә Тәфтиләү ант итте:

– Рәсәй йөмһүриәтенең аҡ батшабикәһе Аннаға мәңге тоғролоҡ һаҡлаясаҡмын, илдең эсендә лә, тышында ла батшабикәнең ихтыярын теүәл үтәйәсәкмен. Ошо хаҡта Аллаһыбыҙ хозурында Ҡөрьән-Кәрим тотоп ант итәм!

Быңдай анттың ниндәй эҙемтәгә килтерәсәген яҡшы аңланы Алдар батыр. Бар миҙгелдә лә, илдең эсендә лә батша сәйәсәтен үткәрергә ант бирһәң, үҙеңдең һәм халҡыңдың мәнфәғәтен юҡҡа сығарҙың тигән һүҙ бит был. Шуға Алдар үҙенсәләргә булды. Тәфтиләүҙән һуң уҡ:

– Хәҙрәт, – тип муллаға өндәште, – хәҙер беҙҙәр антҡа киләйек. Мин әйтеп торормон, егеттәрем ҡабатлар. Шунан аҙаҡ һәр кем Ҡөрьән тотоп «Ант!» тип әйтер. Шул саҡта эш тиҙерәк барыр.

– Әйҙә, риза, – тине хәҙрәт.

Алдар:

– Рәсәй йөмһүриәтенең аҡ батшабикәһе Аннаға тоғролоҡ һаҡлаясаҡмын, был юҫыҡта батшабикәнең ихтыярын теүәл үтәйәсәкмен, – тип Ҡөрьәнгә ҡулын һалды. – Ошо хаҡта Аллаһыбыҙ хозурында Ҡөрьән-Кәрим тотоп ант итәм.

Уның һәр һүҙен ҡабатлап торған ирҙәр берәм-берәм китап тотҡандан һуң, ҡуш ҡуллап битен һыпырҙы.

«Батыр ғына түгел, хәйләкәр ҙә икән был башҡорт», – тип уйланы Тәфтиләү. Алдар бит ул әйткәнде ҡабатланы тиерлек, ләкин әйтеп бөтөрмәне. Илдең эсендә батша юлын тотасаҡмын, тимәне. Үҙенең балаларына, батшаға ҡаршы сығырға урын ҡалдырҙы. Тәфтиләү күтәрелеп бәрелергә иткәйне лә – ҡул һелтәне. Минең бит үҙ йомошом, сит илдә бурысымды үтәр өсөн кәрәк Алдарҙың анты. Ә Рәсәйгә ҡайтҡас, теләһә нимә эшләһен. Быныһы өсөн Тәфтиләү яуаплы түгел.

Ант биреү тамамланғас, Тәфтиләү Алдар менән Таймаҫты ҡалдырҙы ла бүтәндәргә таралырға ҡушты. Үҙҙәре генә ҡалғас:

– Иртәгәнән башлап ылау хәстәрләйбеҙ. Дөйәләргә, аттарға йөк артмаҡлайбыҙ, аҙыҡ-әүҡәттән тыш, кейем-һалым, тирмәләр, ятып йөрөрлөк урын, ҡорал – һәммәһен дә алыр кәрәк. Улары әҙерләнгән инде. Һеҙҙең егеттәрегеҙгә етәк аттары алырбыҙ. Былары тураһында ла хәстәрлек күрелгән, – тине.

– Ҡайҙа йыйынабыҙ һуң? Ниндәй эшкә? – Алдар нисәнсе тапҡыр инде һорай Тәфтиләүҙән. Тегенеһе тағын әйтмәне.

– Аныҡ ҡынаһын мин дә белеп бөтмәйем. Ошо көндәрҙә баш ҡаланан сапҡын килергә тейеш. Шунан һуң белербеҙ.

Тәфтиләүгә йөкмәтелгән эш тураһында Ырымбурҙа ике генә кеше белә ине: ул үҙе һәм генерал-губернатор. Ниәтләгән эшкә берәйһе ҡамасау булмаһын, аяҡ салмаһын өсөн, көнө еткәнсе был турала өндәшмәҫкә булдылар. Ана бит, Тәфтиләү сапҡынға һылтаны ла ҡуйҙы. Эштең мөһимлеген, ныҡ яуаплы икәнлеген бөтөнөһө лә тойҙо, әммә ни икәнен генә белмәне.

Ылау әҙер булды. Дөйәләргә, аттарға йөк артмаҡлатылды. Алдар менән Таймаҫтың башҡорттарынан башҡа, иллегә яҡын йәйәү урыҫ һалдаты ҡушылды. Ат башында йөрөүселәрҙе лә һанаһаң, йөҙгә яҡын кеше йыйылды. Ниндәй генә милләткә, ниндәй генә дингә ҡарамаһын кеше, бөтөнөһө лә алыҫ юлға таң һарыһынан сығыуҙы хуп күрә. Уның үҙ мәғәнәһе бар. Сөнки көнсығышта ҡалҡҡан ҡояш яңы энергия, яңы көс килтерә. Кешенең генә түгел, бар тереклектең дә ҡояш нурҙары менән ҡуша күңеле күтәрелә, тәнендә яңы ғәйрәт ҡуба. Ҡара донъя (төн), теге донъя (ҡәбер) менән кешеләр алама көстө, әҙәмгә ҡаршы торор йылан-саян һәм шулар һымаҡ кире көстө бәйләй. Шуға берәү ҙә оҙон юлға төнгә ҡаршы сыҡмай һәм үҙе изге һанаған эшкә ҡояш байығас тотонмай.

Тәфтиләүҙең ылауы ла таң менән ҡуҙғалды. Мосолмандар бисмиллаһ әйтте, христиандар суҡынды. Тәфтиләү генә береһен дә эшләмәне. Теге көн таҡыя кейеп йөрөһә лә, үҙен ике диндең береһен булһа ла тотҡан кеше хисапламай ине.

– Ҡуҙғалдыҡ! – тине лә атының бөйөрөнә типте. Аты юртып китте. Әммә дөйәләр менән ауыр йөк артмаҡлаған аттар аҙымдарын һанап ҡына баҫты. Шуға Тәфтиләүгә лә атлауға күсергә ҡалды. Ул көндө ылау юлға күнекте, шуға бик үк ыратып алға бара алманы. Ййыҡты кискәс, ҡуналҡаға туҡтанылар, тағы ла бер көндән Тоҙ күленә еттеләр. Ошонда килгәс кенә, Тәфтиләү ылауҙың өлкәндәрен йыйҙы.

– Күреп торам: күҙегеҙгә һорау яҙылған. Был татар ҡайҙа алып бара беҙҙе, тиһегеҙ инде. Бына башҡорт ере бөттө, Рәсәйҙең сигенә еттек. Артабан ҡырғыҙ-ҡайсаҡ далаһы китә. Үҙҙәре был яҡты Кесе йөҙ ере ти. Дөрөҫмө, Алдар батыр? Һин был яҡта йөрөгәнһең бит.

– Эйе, булғылағаным бар.

– Ҡайҙа тиклем барҙың?

– Өҙөп кенә әйтеүе ҡыйын. Йәй көнө эш, ҡайсаҡтар күсеп йөрөй мал артынан. Шуға төрлөсә булды юл. Кесе йөҙҙөң ырыуҙарына барғыланым.

– Ә һин, Таймаҫ?

– Төркөстанға еткәнем булды.

– Унда ни ҡараның?

– Төркөстанда мосолмандарҙың бик күркәм бинаһы бар. Уны Бәләкәй хаж тиҙәр. Шуға барҙым.

– Ә беҙҙең маҡсат – Кесе йөҙҙөң ханы Әбелхәйерҙе күреү. Шунда барырға тейешбеҙ.

– Ул беҙҙең барырҙы беләме? – Алдар тәфсирләп һораны.

– Эйе. Мәскәүҙән үк хәбәр иттергәйнек.

– Юҡһа, улар бик алыҫҡа йәйләп тә сығып китә торған. Табыуы ҡыйынға ҡалмаһын, тием.

– Ҡыйын саҡта ярҙамлашырҙар тип, һеҙҙе алып сыҡтым да инде мин. Бөгөн барығыҙҙан да юлда бик иғтибарлы, һаҡ булыуығыҙҙы талап итәм. Юлда теләһә кем күп була торған. Бигерәк тә сит илдә хәүеф янауы бар.

Тәфтиләү ошолай иҫкәртте, ҡайҙа юл тотоуҙарын әйтте, әммә ни маҡсаттан йөрөгәндәрен әйтмәне. Быныһын ул Кесе йөҙгә етер алдынан ғына систе – Алдар менән Таймаҫҡа һәм урыҫ поручикка ғына.

– Беҙ бында батшабикәбеҙ Аннаның бик мөһим йомошон үтәп йөрөйбөҙ. Батшабикәбеҙ ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарҙы, ҡарағалпаҡтарҙы, бәлки, тағын кемдәрҙелер Рәсәйгә ҡушылырға күндерергә итә. Мөмкин булһа, ҡушылыу шарттарын һөйләшергә ебәрҙе. Әммә был эште асыҡтан-асыҡ башҡарырға ярамай. Ҡайсаҡтар араһында Рәсәйгә инеүгә ныҡ ҡаршылар бар. Был турала һүҙ сығарһа, хатта Әбелхәйерҙең үҙен үлтереү менән дә янайҙар. Шуға күрә беҙҙең бында килеүҙе мөмкин тиклем сер итергә кәрәк. Әбелхәйер үҙе лә шулай ти.

– Улай икән...

Кис ҡуналҡаға туҡтар алдынан Алдар батыр Тәфтиләүгә шыбырланы.

– Беҙҙең нимәгә килеүҙе яр һалмай дөрөҫ эшләнең. Ҡайсаҡтар Рәсәй илселегенең килерен көтә, тик кем ҡасан булырын белмәй. Беҙҙең ылауҙы илселектең бер ярсығы тип уйлай.

– Ҡайҙан беләһең?

– Ҡайсаҡтар араһында минең яҡын кешеләрем бар. Шуларға сапҡын ебәргәйнем инде.

Тәфтиләүҙең ҡыҫыҡ күҙҙәре шар булды.

– Ҡасан?

– Ырымбурға килгәс тә. Бөгәсә төндә береһе беҙҙе ҡыуып етте.

– Ай-һай!..

Алдар хәйләкәр генә йылмайып ҡуйҙы.

– Әммә, тәҡсир, һин күргән хәүефһеҙлек сараһы аҙыраҡ. Шуны әйтәйем тигәйнем һиңә.

– Ниңә аҙ?

– Сөнки бөгөн төндә ылауға һөжүм итәсәктәр. Ҡайсаҡтар ылауға һинең баш икәнеңде белә, әммә илсе икәнеңде белеп бөтмәй. Бөгәсә төнөн һине... үлтерергә уйлайҙар.

– Ни һөйләйһең һин? – Тәфтиләүҙең ҡото осто.

– Ҡурҡма. Беҙ алдан сараһын күреп ҡуйырбыҙ.

– Ҡайһылайтып?

– Һинең тирмәңде төнөн ике һалдат һаҡлай бит?

– Эйе.

– Береһе тышта ултырһын, икенсеһе һинең урынға инеп ятһын. Ә үҙең, ҡараңғы төшөп, күҙ бәйләнгәс, беҙҙең янға ҡыуышҡа кил. Шунда ҡунырһың.

Йөҙө ап-аҡ булған Тәфтиләүгә ҡарап, Алдар көлөмһөрәне.

– Илсегә үлем юҡ, тиҙәр. Әммә һинең илсе икәнлекте илгә иғлан итеүсе юҡ бит әле. Шуға беҙҙең кеүек фәҡирҙәр ярҙамына таянырға тура килер.

Тәфтиләү Алдар әйткәндәрҙең дөрөҫлөгөнә бик үк ышанып та бөтмәне. Хатта, был һөйләгәндәр уның үҙ этлеге түгелме икән, тип ҡуйҙы. Әммә Алдарҙың ҡушҡанын үтәмәй ҙә сараһы юҡ ине.

...Төн уртаһында шарт та шорт мылтыҡ атҡанға, кешеләр ҡысҡырышҡанға уяндылар. Уянды тип, Алдар йоҡламай ҙа ине, Тәфтиләү генә мышнай башлағайны. Алдар ҡыуыштан сығып ҡараны.

– Ни булған?

– Беҙҙекеләр бер ҡайсаҡты эләктергән. Тәфтиләү тирмәһе яғынан далаға йүгерә ине, ти.

– Нисек тотҡандар һуң?

– Һин өйрәткәнсә, тирмәнән егермеләп аҙым ситтә ер өҫтөнән бау тартҡайныҡ. Береһе шуға эләгеп тәгәрәгән, икенсеһе ҡасып ҡотолған.

– Ни эшләп йөрөгән һуң?

– Әллә инде. Аҙашып килеп сыҡтым, тип әйтә, ти.

– Әйт, бәйләп һалһындар, ебәрмәһендәр.

Мыҡты кәүҙәле ине ҡайсаҡ. Усаҡ янына йығып һалып ҡуйғандар. Иртән тороп, үҙ тирмәһенә киткәйне Тәфтиләү, күп тә үтмәне, һөрәнләп ебәрҙе:

– Алдар! Алдар батыр, бында кил!

Алдар йүгереп барһа, ни күҙе менән күрһен, Тәфтиләү тирмә алдында ҡалтыранып ултыра. Янында мылтыҡ тотҡан һалдат ни эшләргә белмәй тапана.

– Белмәйем, мин берәүҙе лә күрмәнем... – тип мығырлай үҙе.

Алдар тирмәгә күҙ һалды. Эстә муйынынан салынған һалдат ята. Тирмәнең кейеҙе арт яҡтан бысаҡ менән бүҫелгән.

– Илама, – тип тынысландырҙы Алдар Тәфтиләүҙе. – Иҫән-һауһың бит үҙең. Ярар, тирмәлә йоҡламаның. Һине һуялар ине.

– Рәхмәт-рәхмәт иҫкәрткәнең өсөн.

Ошонан һуң Тәфтиләү Алдарҙан айырылып йоҡламаҫҡа булып китте. Тик был да һөнәр түгел бит инде. Илсенең ялсыға йәбешеп ятыуы оҡшаған эшме ни? Әбелхәйер хан менән Тәфтиләү рәсми танышҡас, яйын тура килтереп Алдар ил хужаһына шыбырланы.

– Илсе өсөн хәҙер хан яуаплы инде. Уның тирмәһен үҙ ҡашыңа алһаң, уңайлы булыр.

Шулай итте Әбелхәйер. Тәфтиләүгә яҫҡынғандарын әйткәйнеләр инде уға. Тәфтиләүҙе күрше тирмәгә һалыу, берҙән, Рәсәйҙән килгән ҡунаҡҡа күрһәтелгән хөрмәт булып танылды. Икенсенән, хан тирмәһе ышаныслы һаҡлана ине. Өсөнсөнән, хан менән Тәфтиләү хәҙер йыш осраша башланы. Илсе эшен көйләү өсөн ошонан да яҡшы шарт булыуы мөмкин дә түгел. Алдарҙың тәҡдиме өс яҡҡа ла хуш килде.

Өсөнсө күрешеү

Ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарҙы Рәсәйгә ҡушыу ниәте менән йөрөгән илселектең эше ҡайһылай тамамланғаны тарихҡа яҡшы мәғлүм. Был турала Сәсән үҙе лә уҡыны, тарихсылар ҙа һөйләне. Ҡазан ханлығын ҡолатҡандан һуң, Рәсәй үҙ сиктәрен киңәйтеү өсөн алып барған иң әүҙем сәйәсәт һөҙөмтәһе икәнлеген дә белә ул. Әммә ошо сәйәсәтте бик уңышлы үткәрә тороп та, үҙ халҡын һарыҡ урынына ҡырыуҙы аңлай алмай. Дөрөҫөрәге, аҡылы менән аңлай, әммә күңеленә, башына һыйҙыра алмай. Алдар менән Тәфтиләү тураһында ҡайта-ҡайта уйланы ла Сәсән, кешенең холоҡ һәм ғәҙәт ҡатмарлығына йәнә бер хайран ҡалды.

Теге саҡта Тәфтиләү илселеге Әбелхәйер хан йортонда айҙан ашыу ятып та бер ни ҙә сығара алмағас, ни эшләргә белмәй өҙгөләнгән Тәфтиләүгә ҡарап, йәлләне уны Алдар батыр.

– Тәҡсир, – тине ул. – Әбелхәйерҙең теләге Рәсәй яғында булһа ла, күреп тораһың, ҡулы ҡыҫҡа. Ырыуҙарының яртыһы Рәсәйгә инеүгә ҡаршы. Уныһы ла аңлашыла: кем үҙенең байман тормошон үҙ ҡулы менән тотоп быуаулаһын.

– Ә һин ниңә Рәсәйҙе быуау тип беләһең?

– Нимә һуң ул? Башҡорттар Рәсәйгә нимә хаҡына ҡушылды? Аҫабалыҡ, ер һәм ситтәрҙән уны һаҡлау өсөн. Нимәһе бар бөгөн? Аҫабаһын ҡыйратып бөтөп

бара. Ерен алып, зауыт һала килмешәктәрҙе тултыра. Ситтәрҙән һаҡлайһы урынға, ҡалмаҡтарҙы саҡырып туҡмата. Ошо түгелме ни быҒау?

– Рәсәй булмаһа, башҡортто татар мырҙалары, Себер хандары ҡырып бөтөрә ине. Шуны иҫәпкә алмай һөйләйһең.

– Эйе, тәүге мәлдә Аҡ батшанан башҡорт изгелек күрҙе. Әммә ул батшаға баш һалғанда тап шулай булырға тейеш тип, шуның хаҡына күпме бал, тире, аҡса бирҙе, Рәсәйҙең сиген һаҡланы, сит ерҙәргә һуғышҡа йөрөнө. Шуның өсөн меңәрләгән башҡорт киҫелде, аҫылды, бисәләре мәсхәрә ителде.

– Болармағыҙ. Шым ғына ултырһағыҙ, ана, татар кеүек, һеҙҙе берәү ҙә аҫмаҫ та, киҫмәҫ тә ине.

– Таламаһын урыҫ ерҙе!

– Һеҙҙә ер күп. Һеҙ уны барыбер сәсмәйһегеҙ, урмайһығыҙ. Йөҙәр йылдар буйы ята сиҙәм булып. Ил эсендә батша берәү була, һәм уның һүҙе – ҡайҙа ла һүҙ. Ә һеҙ торған булаһығыҙ ҙа, батша тегеләй, тиһегеҙ. Донъя үҙгәрә, тормош алға бара, батшаның һүҙе лә башҡалана.

– Һүҙен тота белмәһә, батша түгел, ҡол булыр... Халҡын яҡлай алмаһа, батша түгел, хур булыр.

– Батырмы тиһәм мин һине... – Тәфтиләү бик ҡаты әйтер итте лә телен тешләне. Алдарҙы асыуландырыу йә үпкәләтеү һис ҡулай түгел уға. Алдарҙы, кирәһенсә, йүпәтләп, эшкә егергә кәрәк бит. – Телгә лә оҫта икәнһең, – тип осланы һүҙен Тәфтиләү.

– Ҡулы батыр берҙе йыҡһа, һүҙе батыр меңде йығыр.

– Әйтәм бит, оҫта, тип... – Тәфтиләү нимәнелер иҫләргә тырышҡан булды. – Бая ҡайсаҡ ырыуҙары тураһында нимәләр әйтергә иткәйнеңме?

– Эйе. Ҡайсаҡтың бөтөн ырыуын да бер төптән Рәсәй ҡашына ҡаратыу мөмкин булмаҫ. Хан йыйынында был мәсьәлә сыға башлар, сыҡмайынса хәле юҡ. Сөнки ил яҙмышы хәл ителә бит. Ул саҡта Әбелхәйер хандың һүҙе аҫҡа ҡаласаҡ. Бында ике юл бар. Беренсе: һиңә һәр ырыу башы менән айырым һөйләшеп, кемгә бүләк, кемгә вәғәҙә биреп, үҙ яғыңа ауҙарырға кәрәк. Икенсеһе: ҡайсаҡтарҙың үҙҙәренә ҡаршы яҡтың көсөн ҡулланыр кәрәк. Быныһы – ҡарағалпаҡтар. Ул бахырҙарҙы бер яҡтан уғыҙ, икенсенән ҡалмаҡ, өсөнсөнән ҡайсаҡ ҡыҫа. Әгәр шуларҙың бөтәһенән дә яҡлайым тиһә, Рәсәйгә һыйынасаҡ ҡарағалпаҡ. Ә ҡарағалпаҡтың был яҡҡа боролғанын күрһә, ҡайсаҡ ырыуҙарының да күбеһе уйға ҡаласаҡ.

– Дөрөҫ фекерләйһең, батыр. Мин дә шул уйҙа инем. – Һуңғыһын Тәфтиләү, әлбиттә, шыттырҙы. Шулай уйлаһа, күптән инде ҡарағалпаҡ ҡәүеме менән күрешер ине. – Ә һин ҡарағалпаҡтарҙы беләһеңме?

– Беләһеңме, тип... Ныҡлап белеп тә бөтмәйем. Бер генә булғайным уларҙа. Әммә башҡорт ҡарағалпаҡ менән борон-борондан дуҫ йәшәне, ҡыҙ биреп, ҡыҙ алып туғанлашҡан саҡтар ҙа йыш. Бигерәк тә ҡыпсаҡ нәҫелдәре...

– Бик яҡшы. Һин уларға барып ҡайт. Бынан йыраҡ та түгел бит йәшәгән ерҙәре. Ә мин бында ҡайсаҡтар менән күрешә торайым.

Иртәгәһенә Алдар өс егетен эйәртеп сығып та китте. Арал диңгеҙе тирәһендә ҡош-ҡорт аулауҙы һылтау иттеләр.

Ҡарағалпаҡтарҙың хәлен Алдар үҙ башынан кискән кеүек дөп-дөрөҫ әйткәйне. Быларҙың килерен ҡарағалпаҡтар ҙа көтөп торған булып сыҡты. Әлбиттә, улар ҡайсаҡтарға илселек килгәнен ишеткән һәм үҙ ниәтен уға еткерергә булып бөткәндәр икән. Алдар батыр ике көнөн юлда үткәрҙе, өсөнсө көндә ҡарағалпаҡтар менән күреште. Хатта хужаларының һүҙе бер булды: «Рәсәй беҙҙе ситтәр ҡыҫыуынан ҡотҡарһа, беҙ уның хозурына инәсәкбеҙ».

Тағы ла ун көндән Әбелхәйер хан янында ырыуҙар йыйыны үтте. Уға тиклем

бер көн элек йәнә Тәфтиләүгә яҫҡындылар. Әммә был юлы ла уны үлтерә, йә ҡурҡыта – илселек эшенән дүндерә алманылар.

Хан йыйыны күпселек тауыш менән «Рәсәй дәүләтенә инергә!» тигән ҡарар сығарҙы. Шулайтып Әбелхәйер хан Рәсәй эсендәге ҡайсаҡтар ханы булып китте. Ә Тәфтиләү башҡарған эше өсөн бүләктәргә күмелде. Алдар менән Таймаҫ та буш ҡалманы. Алдар өсөнсөгә тархан исеме алды, йәнә бер ҡылыслы булды.

Эште кем үтәһә лә, ул башҡарылғас, хаҡын алыусылар күп була.

***

Ирек сәсәнгә Татарстанға юл төштө. Татарстандың Яҙыусылар берлеге Башҡортостандағы ойошма вәкилдәрен халыҡ менән осрашыуға саҡырғайны. Беҙҙән кеше күп барманы. Өсәү генә. Бер автомобилдә өс яҙыусы ла шофер. Юл оҙон, 500 саҡрым тирәһе. Шуның яртыһы – Башҡортостан, ҡалғаны Татарстан буйлап һуҙыла. Йылан һымаҡ борғоланған ҡара асфальт юл ҡарға ҡапланған яландар, урмандар аша уҙа. Өфө, Кушнаренко, Дүртөйлө, Илеш районлары әлеге юл менән Аҡтаныш районына тоташа. Шунан – Аҙнаҡай, Яр Саллы, Алабуға яҡтары. Меңәр йылдар буйы ошо тирәлә бер халыҡ көн иткән, әле лә шулай. Бихисап төрлө ваҡиға булған, әммә халыҡ һаман ҡалған. Бындағы кешеләрҙе ҡарағура үләне менән тиңләп булыр ине, моғайын. Ҡарағура оҙон, ҡарағусҡыл йәшел ҡыяҡлы, көпшә һабаҡтарында күренер-күренмәҫ кенә сәскәһе була, ваҡыты еткәс, орлоғо ярала. Мал ярата уны. Күрәһең, йылҡы, һыйыр малына туҡлыҡлы тәме бар. Ҡуйы булып, ярты метрҙай буйға тиерлек үҫә. Ҡайырылып һелтәп ебәрһәң салғы менән, ярты ҡосаҡ үлән бакуйға ята ла ҡуя. Һелтәгән һайын ҡырт-ҡырт бесән арта ғына. Тағы шуныһы бар: үлән кипкән саҡта бик үк шиңмәй, күләме лә, ауырлығы ла ныҡ кәмемәй. Шуға күрә ҡарағураны мал да ғыршлатып ашай, бесәнсе лә саба, урман кейектәре лә урап үтмәй. Өҫтәүенә, йәйге ҡыҙыу ҡояш ҡурып ҡороторға тырыша, яҙлы-көҙлө өҫтөнә аҡ ҡырау ята. Әммә ҡарағура бирешмәй. Саҡ ҡына уңайлы шарт булыу менән, йәнә баш күтәрә, йәнә ҡарағусҡыл йәшел ҡыяҡтары үргә ынтыла.

Был яҡта йәшәгән халыҡ та шулай. Күп йөҙ йылдар бер төптән йәшәгән арыйҙар йәмғиәте тарҡалып, әллә нисә халыҡҡа бүленеп бөттө, баяғылар ҡалды. Донъя тарихында бөйөк күсенеү тип аталған халыҡтар ҡуҙғалыуы дәүләттәрҙе ҡыйратып, сәйәсәттәрҙе төтөн кеүек күккә осороп уҙҙы. Тегеләр ҡалды. Сыңғыҙ хан башлығындағы оло яу, иҫке йәмғиәтте емереп, яңыһын ҡороп, әллә нисә быуат хакимлыҡ итте. Баяғы халыҡ йәшәне. Урыҫ дәүләтен ҙурайтабыҙ тип, Ҡазан исемле ханлыҡты ҡолаттылар, ҡырҙылар, яндырҙылар. Әлегеләр көн итте. Социалистик йәмғиәт ҡорабыҙ, шуға күрә һәр милләт үҙ дәүләтен булдырһын тип, быларҙы ла бүлеп, тарҡатып бөттөләр. Әммә халыҡ йәшәне. Яңынан «хөрриәткә сығабыҙ, аҡса ғына бар нәмәгә баш буласаҡ» тип дау килделәр, баяғылар һаман бар. Ҡарағура һымаҡ.

Шул халыҡтың бөгөнгө ул һәм ҡыҙҙары менән күрешкәйне Сәсән. Бының һөйләшкәнен, тел үҙенсәлектәрен тыңлап торҙо ла берәү: «Һин беҙҙең балалар кеүек һөйләшәһең», – тине. «Нисек?» «Һаҡау. «Ҫ», «Ҙ», «Һ» тип әйтәһең». Бәләкәй саҡта яңы теле асылғанда беҙҙекеләр ҙә шулай һөйләшә. Шунан китап уҡый, мәктәптә белем эстәй башлағас, теле үҙгәрә».

Сәсән теге кешегә ни тип яуапларға ла белмәгәйне. Яуап биреүҙең кәрәге лә юҡ ине инде. Ул бит тик ысынбарлыҡты ғына асты. Бала теле – боронғо халыҡ теле, тине.

Шуларҙы уйлай-уйлай юлланды Сәсән Ҡазанға. Ирек был яҡта егерме йыллап булмағайны. Ныҡ үҙгәргән икән Ҡазан. Матурланған, төҙөкләнгән. Бейек аҡ йорттар, киң урамдар хасил булған. Ер аҫтына ла төшөп киткән ҡала. Хәҙер уның метроһы бар. Иҫке, яңы мәсеттәр,   сиркәүҙәр Ҡазанды биҙәй. Тик Сөйөмбикә

манараһы һәм уның тирәһендәге ҡәлғә стеналары, боронғо губернатор йорто шул көйө ултыра.

Бына дүрт манаралы мөһабәт яңы мәсет. Уны төҙөп бик дөрөҫ эшләне Татарстан һәм Ҡазан етәкселәре. Күпме беҙҙең диндәш ҡәрҙәштәребеҙ ошо ҡәлғә тирәһендә йәненән яҙҙы, улар хаҡында иҫкә төшөргән дә йә иҫкә алырлыҡ та урын юҡ ине. Исмаһам, хәҙер һау кешеләр әруахтарҙы ошонда хәтерләй ала.

Ҡазан Кремлен урап, Сәсән Оло Иҙел ярына сыҡты. Анау ҡәлғә зинданынан йәйрәп ятҡан Иҙелгә мөлдөрәп ҡарап торҙомо икән беҙҙең азатлыҡ, беҙҙең аҫабалыҡ өсөн башын һалған башҡорттар, тип уйланы Сәсән. Үҙенең күҙҙәренән йәш тамды. Эй, тормош. Күҙкәйҙәремдән аҡҡан йәш һымаҡ әсеһең шул. Тотош зиннәт кеүек кенә кешеләрем, ошо тормоштоң тоҙло һурпаһын сөсөләтәм тип, Ҡазан таштарын ҡан менән йыуған...

...Алдар тархандың бүрәнәнән һалынған ҙур өйөнөң ишеге шарт асылып китте. Шәм янына һалып уҡып ултырған китабы битләнде. Алдар, быңдай һөмһөҙлөккә аптырап, күҙҙәрен ҡараңғылыҡ өңөрәйтеп торған ишеккә төбәне. Оло кәүҙәле берәү икенсеһен тун елкәһенән бөрөп тотҡан көйө тупһа аша һөйрәкләп индерҙе лә тегене иҙәнгә ырғытты.

– Бына, атай, һин яҡлаған булаһың. Ә ул, күрше ауылда өйҙән өйгә йөрөп, ҡылыс ялтыратырға ҡоторта. Былай ҙа саҡ торған халыҡ һинең анау сыраң кеүек сәсрәп янырға әҙер тора.

– Кем ул? – Алдар тархан иҙәндә ятҡанға ымланы.

– Кем булһын, Йәмлих. Һинең яратҡан ҡоҙаң. Бер аҙна ғына элек барыһын да йыйып, был да бар ине, ҡоралға тотонаһы булмағыҙ, тип әйттем бит әле. Алдар батыр тыйҙы, тип ҡат-ҡат ҡабатланым. Был әллә һаңғырау, әллә ҫиңмай инде – һәммәһен дә кире эшләй. Әллә юрый шулаймы, белмәҫһең. Үҙең һөйләш.

Алдар байтаҡ ҡарап ултырҙы иҙәндә ятҡан кешегә, шунан һораны:

– Йә, ни тиерһең?

Иҙәндә ятыусы яйлап тороп ултырҙы, ялтыр башын, битен һыйпаны.

– Һиңә әйтеүе рәхәт, ҡоҙа, – тип башланы. – Һин – тархан, һин – староста. Һинең ереңде лә, малыңды ла таламайҙар, һалым да һалмайҙар. Ә минең... Минең нимәм ҡалды. Ун баш йылҡым бар ине, хатта утын ташырға бер ҡорсаңғы ла ҡалдырманылар. Һыйыр малынан ҡыҫыр ике тана ҡалды. Киләләр ҙә ҡысҡыралар: «Башкир, коня давай. Не будь скупым, корову давай». Күрше Хәмиттең балалары менән бисәләрен тейәп алып киттеләр, Әбдрәшит ҡорҙаш йәй буйына бөксәңләп ҡарағасҡа өс күс ҡундырғайны. Урманда эҙләп йөрөп табып, шуның шуныһын яндырып киттеләр... Әйт, тархан, нимә эшләргә һуң беҙгә? Ҡоралға тотонмағыҙ, тиһең. Ә ни эшләргә? Шыр яланғас таланып, хурланып астан үлгәнсе, бер урыҫты булһа ла һуйып, үсемде ҡандырып, һуғышта үләм мин. Хурланып үлде, тимәҫтәр.

Алдар, ҡоҙаһын тыңлаған һайын, тештәрен ҡыҫты, ҡулдары үҙҙәренән -үҙҙәре йоҙроҡланды. Һикереп торғоһо, таланған, йәберләнгән башҡортон ҡосаҡлап илағыһы, шунан атҡа менеп, батша биргән ҡылысын шул уҡ батша ҡуйған бәндәләрҙең башын ҡырт ҡырҡыр өсөн ҡындан һурғыһы килде. Әммә тыйылды. Һуғыш юлы, яу юлы илде нығытыр юл түгел икәнде яҡшы белә шул ул. Күп кисте, күп күрҙе, утлы юлдарҙы ла күп буйланы. Тик дау илде ҡаҡшатты ғына. Һуңғы дүрт-биш йылда айырыуса бөлгөнлөккә төшөрҙө һуғыш. Элегерәк башҡорт атҡа менеп, ҡылыс, һөңгө тағып, батша ҡәлғәләрен яндырып-ҡыйратып алһа, гөбөрнатырҙың да, бүтәндәренең дә теле сиселә, күңеле йомшара торғайны. Был юлы – юҡ. Күпме әңгәрҙәй ир-егет башын һалды, ни тиклем бисә-сәсә, бала-саға ҡоллоҡҡа ҡыуылды. Талап алынған малдың һаны юҡ. Ерҙе боҙалар, күпме зауыт һалалар, ауыл-ауыл крепостной тигәндәрен күсерҙеләр. Батша, моғайын,

бындағы ярандарының ни ҡыланғанын белеп бөтмәйҙер. Боронғо һуғыштарҙың һәммәһендә лә Мәскәү бындағыларҙы аҡылға ултырта, аңдарына ҡайтара торғайны. Әлеге хәлде батша белмәйҙер. Еткерергә кәрәк батшаға. Туҡтатһын ҡан ҡойоуҙы. Һуңғы башҡорттоң башын киҫмәҫтәре борон, сик ҡуйһын был башбаштаҡлыҡҡа.

Алдар тархан Иҫәкәйев Ҡырғыҙстанға барып, ҡайсаҡтарҙы Рәсәй хозурына алып ҡайтышҡандан һуң, илселек башлығы Тәфтиләүгә ҡабаттан Рәсәй батшалығына ҡаршы болала ҡатнашмаҫҡа тип һүҙ биргәйне. Һуңғы бола биш йылға яҡын бара. Ҡушылманы баш күтәреүселәргә Алдар. Шул уҡ Тәфтиләү ике йөҙгә яҡын ауылды үртәткән, ә Һөйәңтүҙ (Саянтуз – урындағы һөйләшсә) тигән ерҙә йөҙҙән ашыу кешене бер һарайға бикләп, тереләй яндыртҡан. Хатта ошоно ишеткәс тә ҡылыс тотманы Алдар. Тәфтиләү ҙә һүҙ биргәйне лә... Батша мәнфәғәте юлында башҡортто яҡлармын, тигәйне. Киреһен эшләгән, вәхши... Ҡайһылайтырға? Миңә лә ҡылыс ҡайрарғамы ни? Тәфтиләүҙең башын өҙә сапһаң, тынысланыр, бәлки, башҡорт баштары?

Алдар төнө буйы ятҡан урынында борғоланды. Күҙенә йоҡо килмәне. Ҡайһылайтырға? Уй умарталағы ҡорт кеүек мыжғыны. Ниһайәт, иртән яҡтырыуға тынысланып килеп торҙо. Ҡарары бар ине. Уландарын, яҡындарын сәй табынына саҡырҙы.

– Балалар, ағай-эне, – тине ул ризыҡ йыйып бөтөр   алдынан, – мин юлға сығырға булдым. Батша бетеүен, батша ҡылысы менән еләнен, юллыҡ аҡса, ризыҡ һалығыҙ. Ике ярҙамсы һәм яҡшы аттар әҙерләгеҙ. Тәүҙә Ҡыпсаҡ тарханына һуғылам. Ул ни әйтер? Минең уйҙы хуплаһа – бергәләп, булмаһа, бер үҙем Мәскәүгә юлланам, батша ҡашына. Башҡорт донъяһында ни барлығын түкмәй-сәсмәй һөйләйем. Кирилын да, Румәнсовын да, Тәфтиләүен дә әйтәм. Батша, моғайын, бындағы хәлдәрҙе белмәйҙер. Белһә, ошо тиклем итеп башҡорт донъяһын туҙҙыртмаҫ ине. Беҙ ҙә бит уның подданныйҙары.

Алдарҙың яҡындары тауыш-тынһыҙ ғына таралышты. Яҡшығамы, яманғамы иртәгә буласаҡ ваҡиғалар – кем генә белһен. Һәр хәлдә Алдарҙың ҡарары бығаса ҡолаҡ ишетеп, күҙ күреп өйрәнелгән хәл түгел. Дөрөҫ, Мәскәү тигән ергә элек тә илселәр йөрөгән. Әммә улар бит бер нисә генә кеше, ә яу, урыҫтар атағанса әйтһәң, бола һәр быуынға тура килгән. Шуға илселәр тураһында белеүселәр һирәк, ә яуҙы белмәгән кеше юҡ.

***

Алдар тархан менән уның ҡыпсаҡтан ҡушылған юлдашы һәм дүрт ярҙамсыһы Һамарға етеп килә ине инде. Тағы бер тапҡыр туҡтаттылар.

– Кем һеҙ? Ҡайҙа бараһығыҙ?

Алдар күреп тора: ҡаршыһында – үҙҙәре менән күрше булып тиерлек йәшәгән казактар.

– Беҙ башҡорт иленән, Рәсәй батшаһына махсус өндәмә менән китеп барабыҙ. Бына батша ғали йәнәптәре үҙе биргән бетеү. Беҙҙе туҡтатырға берәүҙең дә хоҡуғы юҡ.

Башҡорттарҙың ҡаршыһында торғандарҙың береһе ҡысҡырып ебәрҙе:

– Был бит Алдарка! Мин уны таныйым. Беҙ уның менән бергә Әбелхәйергә барҙыҡ. Ҡырғыҙҙарға...

– Ә-ә! Иван, һинме ни! – Алдар ҙа таныны тегене.

Үҙ-ара хәл-әхүәл белештеләр. Шунан Иван өҫтәне:

– Алексей Иванович раҫ әйткән икән.

– Нимәне?

– «Алдар был яҡҡа килә ул. Һин уны көт», – тине.

– Ниндәй Алексей Иванович?
– Әйтерһең, белмәйһең! Тевкелев һуң!
– Ул да бындамы ни?
– Әллә инде. Әфәнделәрҙе белеп бөтөрөп буламы ни, бөгөн – бында, иртәгә – тегендә. Хәҙер бик ҙур түрә, генерал бит ул.
– Шулаймы ни? Ярар, күрһәң, сәләм әйт. Башҡорт ҡанын ағыҙған өсөн алтынланған яурыны, тиген.
– Хе-хе. Ярар, Алдарка, күреп торам, арығанһың, аттарың да талсыҡҡан. Әйҙә, туҡтап ял итеп кит. Анауында беҙҙең казарма бар.
– Рәхмәт, Иван, хәстәрең өсөн. Беҙҙең алға барырлыҡ рәт бар әле. Юл кешеһенең юлда булғаны хәйерле, ти. На, малҡай!
– Үпкәләштән булмаһын, Алдарка, мин һине сәйһеҙ ебәрә алмайым. Эйәр минең арттан. Эй, хлопцы, уратығыҙ, быларҙы. Береһе лә ситкә китмәһен. Әйҙәгеҙ!
Утыҙлаған һыбайлы әлеге алтауҙы ҡамап алды ла «үҙ теләктәре менән» Һамар ҡәлғәһенә индерҙе. Йылы, яҡты өйгә урынлаштырҙылар. Сәй яһарға ҡайнаған һыу, хатта тәғәм итер икмәк тә бар. Тик бер генә нәмә булманы – азатлыҡ. Алдар ҡысҡырып та, өгөтләп тә ҡараны, бетеүен дә күрһәтте, илсене берәүҙең дә туҡтатырға хоҡуғы юҡлығын ҡабат-ҡабат туҡыны – ишетмәнеләр. Дөрөҫөрәге, йылмайып баш ҡаҡтылар, әммә ишекте асманылар.
Өсөнсө көн тигәндә Алдарҙы саҡырҙылар.
– Әйҙә, күрше йортҡа. Бөтөн һүҙеңде лә шунда әйтерһең.
Индерҙеләр. Алдар аптырап китте. Бүлмәлә күҙҙәрен ҡыҫа төшөп, хәйләкәр генә, әммә уҫал йылмайып Тәфтиләү ултыра, бә-әй... Кереүсене күргәс, аяғөҫтө баҫты, ишеккә табан бер нисә аҙым яһаны.
– Алдар батыр, ҡайһылай ҡартайып киткәнһең, әллә ҡара сәсең дә ҡалмаған инде.
– Шуның ҡарауы, һин үҙгәрмәгәнһең.
– Һаумы-һаумы! Бир ҡулыңды, биш булһын.
– Бирер инем. Тик ҡулыңдан ҡан аға, башҡорт ҡаны.
– Ә һинеке тап-таҙа. Минең менән күрешер өсөн урыҫ ҡанына буямай һаҡлағанһыңдыр.
– Беҙ бит үҙебеҙҙең антҡа хыянат итмәйбеҙ.
– Аллаға шөкөр, беҙ ҙә антҡа тоғро кешебеҙ. Рәсәй батшаһына биргән антыбыҙ барлыҡ вәғәҙә-мәғәҙәләрҙән дә өҫтөн...

***

Ошо урынға еткәс, Сәсән тертләп китте. Алдар менән Тәфтиләүҙең өсөнсө күрешеүе булғанмы әле? Был турала берәү ҙә белмәй. Тәүге икәүһе тураһында тарих ҡомартҡылары бар. Әммә өсөнсөһөн раҫлаусы бер документ та юҡ. Әлбиттә, ул заманда рәсми түгел күрешеү-һөйләшеүҙәрҙе берәү ҙә ҡағыҙға теркәп бармаған. Был ике кешенең осрашыуы ла ихтимал ине. Сөнки башҡорт донъяһында Алдар батыр бик йоғонтоло кешеләрҙең береһе була. Ә Тәфтиләү заманында батша исеменән эш иткән йылғыр бәндә бит. Өҫтәүенә, башҡорт болаһын баҫтырыуҙа иң мәкерле сардар һаналған. Бындай кешенең Алдар һынлы Алдарҙың тын алышын самаламай, ситләп үтеүе мөмкин түгел...
Сәсән фекер ебенең осона сыға алмай ҡалды, телефон шылтыраны.
– Алло, был тарихсы Ирек әфәндеме?
– Эйе, тарихсы тиергә лә була. Дөрөҫөрәге, яҙыусы.
– Яҙыусы? Тарих яҙыусымы ни?
– Бәлки, шулайҙыр ҙа.
– Миңә, һеҙҙе Алексей Тевкелев һәм уның боронғо бабалары ҡыҙыҡһындырған, шуларҙы һеҙ махсус өйрәнгәнһегеҙ, тигәйнеләр.

– «Махсус өйрәнеү» тигәне арттырыуҙыр, моғайын. Сөнки махсус өйрәнеү ниндәйҙер мәсьәләне фән кимәлендә тикшереүҙе күҙ уңында тота. Ә мин бит үҙемдең мәнфәғәттән генә сығып, белем офоҡтарымды киңәйтеү һәм әҙәби әҫәр яҙғанда кәрәге тейер, бәлки, тип кенә ҡыҙыҡһындым.

– Һәр хәлдә, һеҙҙә Тәфтиләүҙең шәжәрәһе бар, тиҙәр?

– Эйе, бар. Мин уны үҙем төҙөнөм.

– Зинһар, әйтегеҙ әле, Тәфтиләүҙәрҙең ҡан бабаларының осо бөйөк Сыңғыҙ ханға барып тоташамы?

– Эйе, бөгөнгө Тәфтиләүҙәр – Сыңғыҙҙың варисҭары.

– Һеҙ ошо яҙмаларығыҙҙы беҙгә күрһәтә алаһығыҙмы?

– Кем ул – һеҙ?

– Беҙ халыҡ-ара полиция – Интерполдың урындағы вәкиле. Беҙгә Монгол Республикаһынан мөрәжәғәт, иттеләр. Унда бер кеше, Сыңғыҙ хандың ҡәберен эҙләп, ҡаҙыныу эштәре менән шөғөлләнгән икән. Шул үҙен, Өфөлә йәшәйем, Тевкелевмын, Сыңғыҙҙың хәҙерге быуынымын, тип йөрөй, ти. Бының дөрөҫлөгөн йә түгеллеген раҫлауҙы һорайҙар.

– Ярар, мин һеҙҙең менән осрашырмын.

«Вәт, донъя, – тип уйланы Сәсән, – вәт, Сыңғыҙ ҡаны һаман кешеләргә һәүетемсә генә йәшәргә ирек бирмәй бит. Ә теге заманда һуң...»

***

Алдар ҡулдарын йоҙроҡланы, хатта бармаҡ остары ағарып китте. Әммә Тәфтиләүгә тейеүҙән үҙен тыя алды. Башын сәсрәтә генә һуҡһаң, тереләй яндырылған башҡорттарҙың үсе бер аҙ булһа ла ҡаныр ине инде. Тик Алдар дошманын яуҙа ғына дөмбәҫләргә күнеккән шул. Ә былай... яуһыҙ кеше үлтереүҙе ул енәйәт күрә. Алдар тештәрен шығырҙатты, күҙҙәре зәһәр ут сәсте. Тәфтиләү ҙә бының хәлен аңланы. Ярһып китеп бер һуҡһа, йәнендә йәһәннәмгә оҙатыр, тип уйланы һәм өҫтәлдә ултырған ҡыңғырауҙы зыңғырлатты. Шунда уҡ ишек төбөндә ике һаҡсы пәйҙә булды. Тәфтиләү уларға өндәшмәне лә, берәр төрлө ишара ла яһаманы. Тик һаҡсыларҙың бындалығын Алдар белерлек итеп ишек яғына һирпелеп ҡараны. Алдар бармаҡтарын яҙҙы, тыныслана төштө. Шунан Тәфтиләүгә текәлеп:

– Әйт, әле, Ҡотләхмәт, – тине, һуңғы һүҙгә айырыуса баҫым яһап, – башҡорт илендә һиңә ни кәрәк? Үҙеңдең Питереңдә йә Ҡасимыңда[*] ғына тыныс ятһаң ни була?

– Алдарбай, һин, әлбиттә, ҙур кеше. Өс тапҡыр тарханлыҡ алғанһың. Әммә Питер менән Ҡасим тормошон саҡ ҡына ла белмәйһең. Унда тыныс йәшәр өсөн бик күп аҡса, байлыҡ кәрәк. Тик атай-бабайҙар беҙгә уны ҡалдырмаған. Атай ҡарттың Коломнала ус аяһындай ере бар ине. Уның менән ҡайҙа бараһың? Крәҫтиән бер аяғын баҫһа, икенсеһен ҡуйырға урын юҡ. Сыңғыҙ хандың балаларының балалары бай булған да бит, беҙгә килеп еткәнсе байлығы тишек шөмәндән ҡойолоп бөткән. Йөрөйөм инде шуға хәрби хеҙмәт юлында. Тамаҡ туйырлыҡ ризыҡ хаҡына.

– Байлыҡ артынан ҡыуып, башҡорт ерен талайһыңмы?

– Талағаным юҡ.

– Сәрмәсән буйындағы аҫаба башҡорт ерҙәрен полковник Тәфтиләү алмаған, тиерһең әле?

---

[*] *Ҡасим — хәҙер Мәскәү янындағы ҡала. Борон татар биҫтәһе тип аталған. Ҡотләхмәт Мәмеш (Алексей Иванович Тевкелев) Ҡасим мырҙаһы булған.*

– Алдым. Әммә таламаным. Аҫабалар менән килешеп, ҡуртымға алынған ер ул. Ышанмаһаң, килешеү ҡағыҙҙарын күрһәтәм.

– Ә ни эшләп алты башҡорт, дүрт татар ауылы һинән михнәт сигеп, зар илай һуң?

– Ялҡау улар. Эшләргә теләмәйҙәр. Ерҙе бит эшкәртер кәрәк. Шуға крәҫтиәнде ситтән килтертәм. Тағы ла шуныһын белеп тор, тархан: бындағы халыҡтың ризаһыҙлығын уятмаҫ өсөн мосолман кешеләрен йыям мин. Ислам өммәтенән. – Тәфтиләү һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылмайҙы, ирен ситендә генә мыҫҡыллау һыҙаты сағылып ҡалды. – Батшаға ни һөйләргә самалайһың инде һин?

– Батша ғали йәнәптәренә һеҙҙең өҫтән һөйләргә йыйынам. Башҡорт Комиссияһы башҡорттоң хәлен ыңғайлатырға тейеш, тине ул. Ғәмәлдә Кирилов та, Неплюев та, һин дә тик башҡорттоң хәлен алыу яғын ғына ҡарайһығыҙ. Һеҙҙең баш-баштаҡлыҡҡа батшанан башҡа берәү ҙә сик ҡуя алмаҫҡа оҡшай.

– Ярар, ҡыҙма, тархан. «Ғәйеп атта ла бар, тәртәлә лә» тигән кеүек, үҙегеҙ ҙә урыҫтың ҡанын аҙ түкмәнегеҙ бит. Урға (Орск. – **Ред.**) китеп барған күпме ғәскәрҙе ҡырҙығыҙ. Һеҙ берәүҙең башын сабып өҙгәс, икенсене тағы ҡылыс аҫтына тығырҙар, тип көткәйнегеҙме ни? Һуғышта һуғышаһың инде. Утҡа ут, үлемгә үлем менән яуап бирмәһәң... Һеҙ бит бөтөнләй шашаһығыҙ.

– Һинең кеүек, беҙ тере кешеләрҙе утта яндырманыҡ.

– Алдар тархан, оло башың менән ни һөйләйһең һин? Уй буйында күпме ауылды үртәнегеҙ? Ағиҙелдең түбән яғындағы ауылдарҙа йәш балаларҙың башын ҡойма бүрәнәләре араһына ҡыҫып, юҡ иттегеҙ. Шунан һуң кешелеклелек тураһында һөйләр китәһең.

– Был мәшхәрҙе беҙ башламаныҡ. Экспедиция тигән нәмәгеҙҙең нимәгә кәрәклеген белер өсөн Өфө ҡәлғәһенә барған илселәрҙе Кирил ни эшләтте? Береһен аҫты, икенсеһен иҫһеҙ итеп туҡматтырҙы. Илсе ине бит улар. Ҡырғыҙҡайсаҡҡа барғанда беҙҙе шулайтһалар, ни булыр ине? Шуға күрә, Алексей Иванович, боланың башын үҙегеҙҙән эҙләгеҙ.

– Ярар-ярар, булғандыр. Минең һиңә тәҡдимем бар.

– Ниндәй?

– Һин хәҙер Минзәләгә* бар. Унда хөкүмәт кешеләре менән һеҙҙекеләр араһында боланы туҡтатыу буйынса һөйләшеү башлана. Шунда ҡатнашһаң, бик яҡшы булыр ине.

– Минзәләгә? Кемдәр була унда?

– Сенат бит махсус кешеләр ҡуйҙы. Шулар унда.

– Юҡ, мин батшаға барам. Халыҡҡа, батшаға барам, тип сығып киттем. Тимәк, юлым – батшаға.

– Сенат комиссияһы менән һөйләшмәйенсә тороп, батша ҡабул итмәйәсәк, бел шуны.

Алдар уйға ҡалды.

– Мин юлдаштарым менән кәңәшләшәйем әле.

– Кәңәшләш. Тик бер нәмәне бел: иртәгә иртән Минзәләгә юлға сыҡһаң, һеҙҙе беҙҙең һыбайлылар оҙата барыр. Үҙең беләһең, Ҡазан юлында ла, Мәскәү юлында ла урыҫ ғәскәре күп хәҙер. Улар аша үтеү бик ҡыйын. Үҙеңде тотоп зинданға-фәлән бикләп ҡуймаһындар, тием. Һамар янында ла тоттолар бит, шуның кеүек.

Ышанды Алдар тархан. Тәфтиләүҙең һүҙенә ышанды. Ышанмаҫлыҡ та түгел ине шул. Бишенсе йыл бара бит инде бола. Күпме ҡан ҡойолдо, ғүмер өҙөлдө, ауыл-ҡәлғә яндырылды, күпме мөлкәт юҡҡа сыҡты. Туҡтатыр кәрәк ине был

**Минзәлә — башҡорттарҙың болаларын баҫтырыу һәм урындағы халыҡты ҡурҡытып тотоу өсөн төҙөлгән ҡәлғә. Аҙаҡтан ҡалаға әүерелә. Хәҙер Татарстанға ҡарай.*

ҡыйралышты. Тиҙерәк туҡтатыр кәрәк. Хатта бер көн генә иртәрәк бөтһә лә һуғыш, күпме кеше иҫән ҡала бит. Алдар батша ғали йәнәптәренә юлға тап шуның өсөн сыҡты ла инде. Әгәр ҡыйралышҡа Минзәләлә кәртә ҡуйып була икән, ниңә Питерға китеп барырға ти?

Ошо уйҙан ризалашты Алдар тархан менән юлдаштары. Иртәнге яҡта, уларҙы оҙата була, Тәфтиләү ҙә йорт алдына сыҡты. Алдар менән ҡосаҡлашып хушлашты, хәйерле юл, оҙон ғүмер теләне лә үҙ кешеләренең өлкәненә:

– Бына һиңә хат. Унда һинең кемде оҙата барғаныңды яҙғанмын. Туҡтатһалар, шуны күрһәтерһең. Ә быныһын, – Тәфтиләү еп киҫәге менән ағас сыбығының һыныған тотторҙо, – берәүгә лә күрһәтмә. Минзәләлә ҡәлғә начальнигына бирерһең.

Минзәләгә әллә ни хәүеф-хәтәрһеҙ генә барып еттеләр. Алдар менән юлдаштарын ҡәлғәгә ингәс тә аттарынан төшөрөп бындағы түрә янына индерҙеләр. Уларҙы оҙата килгән өлкән һалдат түрәгә Тәфтиләү ебәргән еп менән сыбыҡты тотторҙо. Быныһы баш ҡағып ҡына аңлағанын белдерҙе һәм бүлмә ишеген асып ҡысҡырҙы:

– Команда! Ин бында!

Ул арала ҡоралды һаҡсылар йүгерешеп бүлмәгә инеп тулды.

– Ҡулға алығыҙ!

Алдар менән юлдаштарын шунда уҡ ҡулдарын шаҡарып бәйләнеләр ҙә зинданға индереп ташланылар. Шул уҡ төндә таңға табан Алдарҙы сығарып аҫтылар, юлдаштарын, иҙеп туҡмағандан һуң, ҡәлғәнең тышына ырғыттылар.

– Белеп тороғоҙ: кем дә кем Рәсәй батшаһына ҡаршы ҡул күтәрә, уға дар ағасы әҙер.

Тәфтиләү Минзәләгә ебәргән еп киҫәге менән сыбыҡ... «Алдарҙы аҫырға» тигән билдә ине. Был турала, әлбиттә, бер нисә кеше генә белде. Алдар батыр, Тәфтиләүҙең таҫма теленә ышанып, мәкер ҡорбаны булды.

***

Ирек сәсән һәләк булған Алдарҙы күҙ алдына килтерҙе лә ирекһеҙҙән йәнә илап ебәрҙе. «Эй, бәхетһеҙ халҡым минең, ни генә төшмәгән һинең башыңа», – тип һөйләнде. Шунан аҙыраҡ тынысланды һәм, Алдар тархан янында ултырған кеүек, ҡысҡырып әйтте:

– Белеп ҡуй, һинең көрәшле ғүмерең һәм дар ағасында үлемең бушҡа булманы. Һинең үлемең меңдәрсә күңелдә нәфрәт уятты, көрәшкә саҡырҙы. Тәфтиләүҙәр ҡанға батырған боланан һуң, Бүгәсәүгә иш булып, Кинйәләр, Салауаттар күтәрелә әле. Ун һигеҙенсе, ун туғыҙынсы быуаттарҙа башҡорт үҙ ерен, иркен, аҫабалығын ҡорал тотоп тағы ла күп тапҡыр яҡлай һәм һаҡлай. Егерменсе быуатта ер һелкеткән күтәрелеш Әхмәтзәки Вәлиди башлығында була. Ул сит илдә көрәшкән саҡта Сөләймән Мырҙабулатов башҡорттарҙы яуға алып сыға. Ошонан һуң ҡулға ҡорал тотоп, ҡабат иҙеүселәргә ҡаршы һуғышҡа күтәрелмәгән башҡорт. Әммә был ирек, азатлыҡ, ер өсөн алыш бөткәнде аңлатмай...

Әйткәндәй, ирек һәм азатлыҡ – ике һүҙ ҙә бер үк тигәндәй төшөнсәне бирә. Икеһе ике телдән, йәғни барлыҡҡа килеү тарихтары айырым булһа ла, хәҙер башҡорт теленең һығылмалылығын раҫлап, бер ҡатарҙан йәшәйҙәр. Ирек менән азатлыҡ төшөнсәһе атай-әсәй телебеҙҙә бер мәғәнә бирһә лә, һәр кеше, һәр төркөм, һәр халыҡ-милләт, һәр дәүләт уны үҙенсә аңлай. Бер ғаиләлә ирек – үҙенсә, икенсеһендә – башҡаса. Ғаиләлә ирек төшөнсәһенең киңлеге йә тарлығы күбеһенсә ғаилә башлығының (ир йә ҡатын, ҡайны йә ҡәйнә, ҡайны йә бейем) ҡаты йә йомшаҡ күңеллегенән килә. Әгәр ғаилә башлығы бик ҡаты кеше булһа, ирек төшөнсәһе бик тар мәғәнәлә ҡабул ителә. Аҡыллы һәм хуш күңелле булһа, ғаиләлә ғәҙәттәр бик еңел үтәлешле һәм барыһының да донъяһына ярайһы

урынлаша. Кешеләр төркөмө, әйтәйек, бер туғандар, балалар баҡсаһында айырым төркөм, мәктәптә синыф, заводта цех, хеҙмәткәрҙәрҙә бүлек һ.б.) шулай уҡ иректе үҙҙәренсә аңлай һәм үҙҙәренсә урынлаштыра. Быларға ҡануниәт тарафынан билдәләнгән ирек төшөнсәһе лә йоғонто яһай, әммә ҡанунда яҙылған менән кешеләр төркөмөндә ғәмәлдә ҡабул ителгән ирек – икеһе тап килмәй.

Халыҡ-милләттәрҙә лә шулай. Бында ҡанун билдәләгән ирек төшөнсәһе менән халыҡтыҡы бик яҡын килә, әммә бер үк мәғәнә бирмәй. Сөнки халыҡ иркенә уның боронтан урынлашҡан күсәгилештәре, ғөрөф-ғәҙәттәре, дине йоғонто яһай. Шуға бер халыҡтың ирке икенсеһенекә тап килмәй. Әйтәйек, башҡорттоң ирке менән урыҫтың ирке бер үк түгел. Ике халыҡ-милләт тә бер үк дәүләттә йәшәһә лә.

Дәүләттәрҙең ирек төшөнсәһе лә бер түгел. Әйтәйек, Рәсәй азатлығы менән АҠШ иркенең бер түгеллеген оҙаҡ һөйләп тораһы юҡ. Сөнки айырма күп.

Ана шул айырымлылыҡ тормошта үҙен бик ныҡ һиҙҙертә һәм бик йыш сәкәләштәргә килтерә. «Тиңдәр араһында тиң булыу» тигән лозунг йөрөй. Дөрөҫ түгел лозунг. Кешеләр бер ваҡытта ла тиң була алмай. Хатта бер туған ике ир бала йә ике ҡыҙ бала булһа ла, шуларҙың береһе икенсеһе алдында өҫтөнлөк тота. Ғаиләлә лә, кешеләр төркөмөндә лә, халыҡ-милләттә лә, дәүләттәр араһында ла өҫтөнлөк тотоусы иректе үҙе аңлағанса урынлаштыра. Ғаиләлә лә, халыҡта ла, дәүләттәр араһында ла шулай. Әммә, ирек төшөнсәһе тап килмәгәнлектән, ике төрлө ирек араһында сәкәләш (ике кеше, ғаилә араһында), халыҡ һәм дәүләттәр араһында үҙ иркен урынлаштырыу өсөн бик йыш ҡына һуғыш сыға.

Урыҫ дәүләте эсендә үҙ иркен урынлаштырырға ынтылған башҡорт, әлбиттә, бик ныҡ ҡаршылыҡҡа юлыҡҡан, күп ваҡыт был сәкәләш ҙур ҡан ҡойошҡа килтергән. 1556 йылда үҙ ҡулы менән иркен сикләгән башҡорт. Быны ул белә һәм йөҙәр йылдар буйы таный. Ул үҙе баш һалған урыҫтан иркен кире ҡайтарыуҙы дауламай (тарихта бындай ынтылыш та булған), ә сикләүҙәр төшөнсәһенең башҡорт өсөн дә, урыҫ өсөн дә бер булыуын талап итә. Ошо берлеккә ике яҡ та өлгәшә алһа, сәкәләштәр тынасаҡ. Бөтөнләй үк бөтмәһә лә, улар бик ныҡ кәмейәсәк...

Ҡасыу

Ҡапыл ишеккә һуҡҡанғамы-типкәнгәме тертләп, Урал ырғып торҙо. Шунда уҡ ишек шар асылды, һәм сәсе туҙған, күҙе аҡайған теге журналист пәйҙә булды. Үҙе йыш-йыш тын ала, йүгергән, ахырыһы. Исемен дә онотоп өлгөргән инде уның Урал. Әммә хикмәт исемдә түгел инде. Томас ҡысҡырып ебәрҙе:

– Тиҙ бул, кейен, ал документ һәм аҡсаларыңды! Ҡастыҡ!

– Ҡайҙа? Кемдән?

– Бында киләләр улар! Ваһаптар, террорсылар! Әллә бер ни ҙә белмәй ултыраһыңмы? Ҡара, ана, тәҙрәгә.

Урал шаршауҙы шылдырып, тышҡа баҡты. Унда урам тулы халыҡ, демонстрация, митингылағы һымаҡ. Йоҙроҡтарын болғап, нимәлер ҡысҡыралар.

– Кемдәр улар? Ни кәрәк?

– Ни кәрәкһен? Һин кәрәк! Һине ҡулға төшөрөргә, үлтерергә килә улар. Отелдең беренсе ҡатына тулғандар инде. Хәҙер бында буласаҡтар. Хәбәр һөйләп торма, йыйын йәһәт! Ҡалғанын юлда һөйләрмен.

Урал сумаҙан һөйрәп сығарҙы, кейем-һалымын тултыра башланы.

– Ташла сепрәгеңде! Сепрәк түгел, баш ҡайғыһы бында. Паспортың менән аҡсаңды ал да аяғыңа, өҫтөңә кей!

Журналист ишек төбөнә барып баҫты.

– Тиҙ бул! Ана, лифт бында килә!

Урал әйткәнде тыңланы. Өйҙә кейә торған еңел күлдәк, салбар өҫтөнә кәзәкәй

эләктерҙе лә аяғына ботинка кейҙе. Ярар, паспорты, бүтән документтары һәр саҡ кеҫәһендә йөрөй, ә аҡса хәҙер пластик картала инде. Сығып ишекте ябыуы булды, соландың теге осондағы лифт асылыу менән, ҡысҡырыша-ҡысҡырыша, бер төркөм кеше килеп сыҡты.

– Әйҙә бында! – Журналист һөйрәп тигәндәй Уралды янғын осрағы өсөн төҙөлгән баҫҡысҡа әйҙәне. Тыпыр-тыпыр, шунан, өс-дүрт тупһаны бер ырғып, түбән яҡҡа ташландылар. Әлдә бында кеше-маҙар юҡ ине. Ун дүртенсе ҡаттан иң аҫҡа атылып тигәндәй төштөләр. Арттан ҡысҡырыусы, алдан сығып юлдарын быуыусы булманы.

– Тышҡы ишектә аҫҡыс ҡына булһа ярар ине. – Журналист теләне.

Әлдә теләге ҡабул булды. Янғын осрағына һаҡланған артҡы ишек тыштан бикләнә, эстән, йоҙаҡҡа тығып, аҫҡыс ҡуйыла. Ҡағиҙә шулай. Аҫҡыс бар ине! Журналист менән Урал отелдең артҡы яғына килеп сыҡтылар ҙа, боролоп та ҡарамай, кеше аҙ йөрөгән ҡапҡанан урамға ташландылар. Ә урамда, энә төртөрлөк тә урын ҡалдырмай, кеше тулғайны.

– Үлем уға, үлем!

– Аллаға һүҙ тигеҙергә баҙнаты өсөн – үлем!

– Иленә ут асырға, ватанын шартлатырға!

– Туғандарын юҡ итеп, тамырын ҡоросторға кәрәк!

Томас Уралды етәкләп кешеһеҙ ишек алды аша әллә ниндәй тыҡрыҡҡа, шунан сәйхана кеүек урынға индерҙе.

– Ошонда ултырып тор. Сәй эс. Берәү менән дә һөйләшмә. – Өҫтәл янына баҫтырып, журналист үҙе сәйханасыға ғәрәпсәләп ниҙер әйтте һәм сығып та китте.

Көтөлмәгән хәлдәрҙән шаңҡыған Урал ғәрәп килтергән сәйҙе эсеп бөтөүгә, журналист яңынан килеп инде.

– Әйҙә, машина әҙер.

Машинаға ултырҙылар. Журналист – рулгә, Урал янына. Ҡуҙғалып китеп, кешеһеҙ урамға сыҡҡас ҡына, Урал һорайһы итте:

– Кемдәр улар? Кемдең үлемен талап итәләр?

– Иҫәр... Һине үлтерергә йыйыналар бит.

– Мине? Ни өсөн?

– Әйтеп торалар ҙа инде: Аллаға һүҙ тигеҙгән өсөн, тип.

– Аллаға тел тигеҙгәнем юҡ минең. Башым икеме ни?

– Мин, Урал әфәнде, һеҙҙән ғәфү үтенәм. Сөнки һеҙ беҙҙең баҫмаға биргән интервьюла фекерегеҙҙе саҡ ҡына үҙгәрткәйнем. Һеҙ бит, ислам дине барлыҡҡа килгәнгә тиклем булған кеше тарихына Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең ҡатнашы юҡ, тинегеҙ.

– Эйе, әйттем. Был шулай.

– Мин уны «кеше тарихына Алланың ҡатнашы юҡ» тип яҙҙым. Ғәрәптәр бит шуға шаулаша. Ерҙе лә, кешене лә Алла барлыҡҡа килтергән. Шуға күрә, тарихтың теләһә ниндәй осоронда ла уны бар итеүсе берҙән-бер илаһ Аллаһ, тип беләмосолмандар. Ә һеҙҙең исемдән яҙылған мәҡәләлә киреһе әйтелә һәм ваһаптар уны тап һеҙҙеке тип белә.

– Мин был фекерҙе кире ҡағыуҙы талап итәм.

– Талап итерһегеҙ, уны баҫтырып та сығарырбыҙ. Тик хәҙергә һеҙгә Әмирлектән табан ялтыратырға кәрәк. Юҡһа, ярһыған ғәрәптәр үҙегеҙҙе өҙгөләп ырғытыр.

– Бына бит, тик торғандан дин ҡәрҙәшенән дин дошманына әүерелдем.

– Шуға ғәфү үтенәм бит.

– Мине ҡайҙа алып бараһың инде?

– Аэропортҡа. Һеҙгә тиҙерәк Әмирлектән һыпыртыу фарыз. Юҡһа хәлдең хөрт булыуы ихтимал.

Аэропортҡа килеү менән, Урал билет һатыу кассаһына йүгерҙе.

– Миңә Рәсәй ҡалаларының береһенә яҡын арала осҡан самолетҡа билет кәрәк.

Кассала эшләүсе Уралдың паспортын баштан-аяҡ битләне, ундағы фото менән кешене сағыштырҙы, фамилияһын, исемен һораны. Шунан янындағы телефондан шылтыратты. Күп тә үтмәне, кассаға йәнә бер ир килеп инде. Хәҙер икәүләп, бер Уралға, бер документҡа ҡарап, ниҙер һөйләштеләр. Ахырҙа Уралдың янында торған журналист түҙмәне:

– Әйтегеҙ, зинһар: берәр проблема бармы? Ниңә билет бирмәйһегеҙ?

Кассалағылар йылдамыраҡ ҡуҙғалды.

– Юҡ-юҡ, проблема юҡ. Һеҙ ҡайҙа тиклем билет алырға уйлайһығыҙ?

– Иң яҡын арала ҡайһы самолет ҡайҙа оса?

– «Ютейер» авиакомпанияһы самолеты Силәбегә оса.

– Бик яҡшы, бер билет бирегеҙ.

– Хәҙер, әфәнде.

Ул арала баштан-аяҡ ҡоралланған, баштарына каска, күҙҙәрен ҡаплап битлек кейгән һалдаттар йүгерешеп ингәс, кассалар залын, ишектәрҙе, юғарыға илтеүсе эскалатор тирәһен ҡамап алдылар. Уралдың йөрәге жыу итте. Ҡасып булманы. Былар уны тота килгән! Кассаға йәнә бер ир инде – генерал. Урал менән журналист аңларлыҡ итеп ярым ғәрәп, ярым инглиз телендә:

– Бирҙегеҙме билет? Һатығыҙ. Тайһын бынан. Бәләһенән баш-аяҡ, – тине.

Кассир тиҙ генә билет тотторҙо, Урал хаҡты пластик карта менән түләне һәм журналист менән хушлашты. Айырылыштылар, шунда ғына нимәлер иҫенә төшөп, Урал туҡтаны.

– Әфәндем, ғәфү үтенәм. Телефонығыҙҙы биреп тороғоҙ әле, минеке отелдә ятып ҡалған.

– Рәхим итегеҙ.

Залдағы кешеләр Урал менән журналисҡа төбәлгәйне. Урал юлдашынан телефон алып, һандарына баҫа башлағайны, генерал ниҙер ҡысҡырып ебәрҙе. Аяғүрә баҫып торған һалдаттар гөр-р итеп иҙәнгә ҡоланы. Генерал йүгереп килеп Уралдан телефонды тартып алды ла үҙ кеҫәһенә һалды. Үҙе Уралға төбәлде.

– Шартлатырға итәһегеҙме әллә?

– Шартлатырға?

– Һандарығыҙҙы әйтегеҙ.

Урал Рәсәйгә шылтыратыу өсөн тәүге һандарҙы әйтте һәм туҡтап ҡалды. Артабан кемдең телефонын әйтергә белмәй икеләнде. Атаһыныҡынмы? Хәҙер улар борсолорға тотона инде. Бәй, Сәсән ағайға шылтыратайым һуң! Урал һандарҙы әйтте, генерал йыйҙы.

– Алло, Сәсән ағаймы?

– Эйе.

– Һаумыһығыҙ. Был – Урал.

– Уралмы? Бына рәхмәт. Мин һиңә шылтыратам да шылтыратам. Ә унда ғәрәпсә яуап бирәләр.

– Бында хәлдәр сетерекле генә.

– Шулайҙыр тием шул. Телевизорҙың бөтөн каналы ла шуны һөйләй.

– Нимәне?

– Һине. Ни булды?

– Хәбәр оҙон ул, Сәсән ағай. Һуңынан һөйләрмен. Мин хәҙер Силәбегә осам.

– Бик яҡшы, ҡаршыларбыҙ.

– Күрешкәнсегә тиклем, хуш.

– Хуш бул, имен йөрө.

Һөйләшеп бөтөүе булды, Уралды йүгертеп алып та киттеләр. Самолет осорға

ваҡыт етмәүгә ҡарамаҫтан, пассажирҙарҙы ашыҡтырып ултыртырға тотондолар. Аэропорт ишегенән сығыр алдынан Урал артына боролдо. Томас залдың теге осонда ҡулын болғай.

– Хуш, рәхмәт, – тип ҡысҡырҙы Урал.

– Хуш, иҫән-һау осоғоҙ!

Кешеләр самолетҡа инеү менән, моторҙар ҡабынды, һәм лайнер осоу юлынан елдереп барҙы ла күккә күтәрелеп китте.

«Мин уны таптым!»

Урал самолетта йоҡлап ала торғайны. Өфө-Мәскәү һауа юлын күп ярҙы бит инде. Самолет креслоһына ултырыу менән ойоп китә ине. Был юлы улай уҡ булманы. Әммә барыбер йоҡланы. Осорға тейешле дүрт сәғәттең өс ярымын, бәлки, күҙ асып үткәргәндер. Әммә шунан һуң серемгә киткәнен үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Юлдың сигенә етәрәк кеше ауырая, тиҙәр бит. Күрәһең, шул тәьҫир иткәндер. Йоҡлап китте.

Самолеттағы радио ҡысҡырып һөйләй башлағанға уянды.

– Хөрмәтле пассажирҙар, – тине радио. – Лайнерҙың командиры һөйләй. Хәҙер беҙҙең юлда билдәләнмәгән туҡталыш буласаҡ. Беҙ Өфө аэропортына түбәнләйбеҙ. Быны беҙ Башҡортостан хөкүмәтенең үтенесе буйынса башҡарабыҙ. Сөнки һуңғы көндәрҙә бар донъяға даны таралған, Сәүед Ғәрәбстаны ғына түгел, бөтөн донъя мосолмандарын тетрәткән кеше Урал Ишдәүләт улы беҙҙең бортта бара Силәбегә барышлай, ошо кешене Өфөлә ҡалдырып китеүҙе үтенде Башҡортостан хөкүмәте.

Самолеттағы бар кеше шаулатып ҡул сапты. Уралға аяғүрә баҫып, баш эйеүҙән башҡа сара ҡалманы.

Самолет еңел генә ултырҙы һәм Өфө аэропорты вокзалы ҡаршыһына килеп туҡтаны. Барлыҡ кеше иллюминаторға терәлде. Нисек ҡаршыларҙар Уралды? Шул ҡыҙыҡһындыра бөтөнөһөн дә. Ҡояш офоҡ артына йәшеренгән, әммә аэропорт шәмдәре әле янмаған мәл ине. Аэровокзал бинаһына табан трап буйлап ныҡ баҫып Урал төшөп китте. Ҡаршы килгән кеше ҡулындағы сәскәләрҙе болғай-болғай һөрәнләй:

– Урал улым! Илгә имен-һау ҡайтыуың менән!

Урал бынан ҡысҡыра:

– Сәсән олатай! Мин таптым уны, таптым!

Уҙамандар арҡа ҡағып ҡосаҡлашты ла йүгерә-атлай аэровокзалға йүнәлде. Самолеттағы кешеләр яурындарын ғына һикертте. Йәнәһе, Башҡортостан хөкүмәтенең өйрәһе бик шыйыҡ булды. Уралды оркестр, ҡосаҡ-ҡосаҡ сәскә менән ҡаршыларҙар, тип уйлағандарҙыр. Ә бында ни бары бер кеше....

– Нимәне таптым тиһең һин? – Сәсән Уралға текәлде. Был Әмирәттә булған хәлдәрҙе һөйләр, тип көткәйне, ә ул әллә нәмә табыуын һөрәнләй.

– Сәсән олатай, мин йыһандарҙа йондоҙ һәм планеталарҙың барлыҡҡа килеү, ҙурайыу, йәшәү һәм һәләк булыу формулаһын таптым.

– Ҡотлайым, улым!

– Сәсән олатай, мин тағы ла кешеләрҙең кәүҙәһе һәм ғүмер оҙонлоғо бербереһенә бәйле икәнлеген күрһәткән формула сығарҙым.

– Оһо! Ғәрәп Әмирәттәренең ҡомонда яҙылғайнымы әллә?

– Ҡомдан   арҡан ғына ишәләр шул. – Егет тә өлкән кешенең үҙе кеүек шаяртты.

– Ҡомдан арҡан оҙон була, оҙон булһа ла, буш була. Шуға күрә арҡан менән булашмайыҡ, тәүҙә тамаҡ ялғайыҡ. Алыҫ юлдан асыҡҡанһыңдыр ҙа, талсыҡҡанһыңдыр ҙа.

– Уғаса, олатай, бер генә нәмәне әйт: Урал тауын нишләп күк тиҙәр?

Ирек сәсән атлап барған ерендә туҡтап ҡалды.

– Ҙур һорау ҡуйҙың, улым. Мин уға бөгөн генә яуап бирә алмам. Әлегә ҡайтып тамаҡ туйҙырайыҡ, ял итәйек. Иртәгә күҙ күрер.

Сәсәндең өйө юлсыларҙы уттарын балҡытып ҡаршыланы. Машинанан төшкәс тә, Ирек Уралды өйгә әйҙәне. Ишек асылыу менән, аш яғынан сибәр генә ҡатын сығып баҫты.

– Һаумыһығыҙ, мин Ҡәҙриә.

– Минең хәләл ефетем, – тип өҫтәне Сәсән.

– Һаумыһығыҙ. – Урал уңайһыҙланды. – Олатай, алдан иҫкәртһәң ни була. Буш ҡул көйө инәй менән күрешеү килешмәй ҙә инде.

– Инәй тисе. – Ҡәҙриә лә үпкәләгән булды. – Мин, моғайын, һеҙҙең тиҫтерҙер.

– Йәш түгел, никах оло. Дөрөҫ әйтә. – Сәсән ҡунаҡты яҡлашты.

– Ярар, һин әйткәс, дөрөҫтөр. – Ризалашты ҡатын. – Әйҙәгеҙ, ҡулдарығыҙҙы йыуығыҙ. Сәйем әҙер.

Табында ла, унан һуң да һүҙ Ғәрәп Әмирәттәре, ундағы хәлдәр тураһында барҙы. Сәсән олатай егеттең бая һөрәнләгән математик формулалары тураһында өндәшмәне. Ул һорамағас, үҙе һүҙ башлауҙы Урал да килештермәне.

Иртәгәһенә алыҫ юлдан, күп ваҡиғаларҙан һуң арыған тәнгә ял биреп, ҡояш яҡшы уҡ күтәрелгәс торҙо Урал. Һый өҫтәлдә ине, Сәсән машинаһы тирәһендә ниҙер эшләй.

– Торҙоңмо? Кисәге вәғәҙәне үтәргә мин әҙер. Әйҙәгеҙ, ултырышығыҙ машинаға.

Ҙур ғына сумка тотҡан, юл кейеме кейгән Ҡәҙриә лә килеп сыҡты, һәм оҙаҡламай етеҙ машина көнсығышҡа табан юл алды.

Белорет ҡалаһын үтеп, Учалы юлына төшкәс, бер аҙ барҙылар, шунан урман башланды, оҙон һыртҡа күтәрелделәр, һәм ҡапыл күҙ алдында бик киң панорама асылды. Ошо урында машинаны туҡтатты ла Ирек, күмәкләп ергә төшөп баҫтылар. Күкрәктәргә еләҫ һауа тулды, йәйрәп ятҡан иркенлек күңелде ғорурландырҙы. Ана ята Уралтау. Уралдың өҫтө бүтән тауҙар һымаҡ түгел, ә күгелйем булып тора. Йырҙа ла йырлана бит, күгәреп тә ята Уралтау, тип. Зәңгәр ҙә, йәшкелт тә түгел, ә күгелйем.

– Алла миңә күп ерҙәрҙе күрергә насип итте, – тине Сәсән. – Ҡаф тауын да күрҙем, Араратты, Карпат, бүтән бейеклектәрҙе. Уларҙың ҡайһы бер түбәһе болоттарҙан да бейегерәк. Әммә төҫө Уралтауҙыҡы һымаҡ түгел. Ҡараһыу-күк төҫ тик Уралда ғына бар.

Өс кеше юл ситендә байтаҡ ҡына торҙо ла, машинаны ҡалдырып, үҙҙәре тауҙың иң түбәһенә менде. Армыт-армыт тауҙар, урман һәм ҡояшта йылҡылдап күренеп ҡалған йылға...

– Бик борон, күп миллион йылдар әүәл ҡап-ҡараңғы донъяла бер туҙан бөртөгө икенсеһенә йәбешкән, шунан уларға өсөнсөһө, дүртенсеһе ҡушылған. Улар протон тип аталған. Протондар ышҡылып, электрон тыуҙырған. Протон үҙе кеүектәрҙе тартҡан, электрон – эткән. Шулайтып электр барлыҡҡа килгән. – Урал үҙенең теорияһын һөйләргә тотондо. – Протон-электрондар бик күбәйеп, ҙур электр яһаған һәм йыһан яҡтырған. Йәғни ҡояш тыуған. Ҡояш тирәләй аҡрынлап планеталар үҫкән, һәм улар әле лә әйәртенешеп йыһан гиҙәләр...

– Математик, әйт әле, ошо планеталар тарафы берәр заман туҡтармы, сағыу ҡояш һүнерме?

– Юҡ. Был – мәңгелек.

– Һин бит, планеталарҙың башы – бер туҙан бөртөгө, тинең. Башланышы булғас, аҙағы ла бар, тимәк.

– Дөрөҫ. Юҡтан бер нәмә лә бар булмай һәм бар юҡҡа сыҡмай. Әммә бер

төрлө матдә йә энергия икенсе төргә күсә ала. Шуға йыһандың сиге юҡ. Ул башҡа йыһанға күсә, әүерелә.

– Һин әйткән барлыҡҡа килеүҙе һәм икенсе матдәгә күсеү ваҡытын һанап буламы?

– Була. Ана шул инде минең математик формула.

Быларҙы ҡыҙыҡһынып тыңлаған Ҡәҙриә сәпәкәйләп ебәрҙе.

– Тимәк, Ерҙең юҡҡа сыҡҡан көнөн Урал һанап бирә ала. Быйыл ахрызаман етә, тиҙәр бит, шул дөрөҫмө?

– Юҡ, быйыл ахрызаман булмай. Минең иҫәпләүҙәр ерҙә ҙур катаклизм бер мең дә илле ете йылдан һуң килеү ихтималлығын күрһәтә.

– Кисә, кешеләрҙең ғүмерен һанай торған формула ла таптым, ти инең.

– Эйе. Кешенең ғүмер оҙонлоғо уның кәүҙәһенең бейеклегенә туранан-тура бәйле. Оҙонораҡ кеше оҙағыраҡ йәшәй. Әлбиттә, был – мөмкинлек. Һәр кешенең ғүмере һаулыҡ, төрлө хәлдәр, кешенең әйләнә-тирәһе һәм башҡа күп хикмәттәрҙән ҡорола. Әммә бик боронғо болот кеүек кәүҙәле кешеләр бик оҙаҡ йәшәгән. Тора барған һайын, кешенең тәне тығыҙлана һәм кәүҙәһе кесерәйә, ғүмере ҡыҫҡара.

– Беҙ тарихта иң бәләкәйҙәрме?

– Эйе. Әммә киләсәктә тағы ла кесерәйәсәк әле кеше.

– Йәғни бер заман кешенең тыуымы менән үлеме араһында күҙ асып йомған хәтлем генә ара ҡаласаҡмы ни?

– Эйе, шулайыраҡ. Әммә кеше, үҙенең ғүмерен кәмендә ике йөҙ йылға еткереп була, ти бит.

– Һәр кеше лә ике йөҙ йыл йәшәһә, ул тиклем халыҡты туйындырырлыҡ ризыҡ булырмы икән һуң?

– Кешенең организмы үҙгәрә килә, уның ризығы ла үҙгәрә бит. Яңы төр ризыҡ яһалыр...

Үҙ-ара хәбәрҙәренә әүрәгән ирҙәр, моңло йыр ишетеп, шымып ҡалды. Оҙон толомло сәсен һүтеп, ел ыңғайына тағатҡан Ҡәҙриә бирелеп китеп йырлай ине.

Күктән генә төшкән, һай, аҡҡоштоң
Һомай ҙа ғына, тиҙәр, исеме...

Ҡатын артына боролдо ла, үҙен тыңлап шым торған ирҙәрҙе күргәс, оялып ҡарашын ергә сәнсте, йыр туҡтаны. Баяғы әңгәмәне ялғап, Сәсән һамаҡланы:

– Үлем тигән яуыздың
Төрөн һанап беләйек,
Көслө көсһөҙҙө еңгән
Йоланы беҙ өҙәйек.

Шуны ғына көткәнме-юҡмы, әммә Урал да уға ҡушылды:

– Һыуҙар кисеп, тау ашып,
Күп йыл буйы килгәнмен,
Күп йылдарҙы уҙғанмын;
Күҙ йәшергән Үлемде
Эҙләп бында тапмаһам,
Башын сабып өҙмәһәм,
Әйткәнемә етмәһәм,
Уны ерҙән йыймаһам,
Урал булып йөрмәмен!

Венер ФӘТТӘХ

Тәҙрә төбөндә ярангөл

Яралары асыҡ, моңһоу ҡарай
Тәҙрә төбөндәге ярангөл.
Миһырбанлы булам тиһәң әгәр,
Гөлдәрҙең дә икән зарын бел.

Ярангөл, беләм, яра һалған
Йөрәк яныуҙары ямандыр.
Моңһоуланып ҡарамасы миңә,
Йөрәкте һыҙлатма, ярангөл.

Кемдең генә яралар һалырға
Барҙы икән һалҡын ҡулдары?
Ярангөлгә ҡағылғанда әллә
Усал булды микән уйҙары?

Яраларын кем дауалар инде,
Бик һыҙланып ҡарай ярангөл.
Мин ҡарайым уға, бәлки, тиеп,
Ярангөлдә минең ярамдыр.

Йәшлегемә талпынам

Мин ярата инем йәй көнөндә
Ямғыр алды йәшен йәшнәүен.
Шул йәшендәр араһында ҡалды
Минең йәшлек — ярһып йәшәүем.

Мин яратам бөгөн әле булһа
Йүгерергә йәшен артынан.

Венер Әхнәф улы Фәттәхов (Венер Фәттәх; 1956) Дүртөйлөлә тыуған, шунда мәктәпте тамамлай, 25 йыл ғүмерен милиция хеҙмәтенә бағышлай. БДУ-ла, Идара итеү академияһында белем ала.

Венер Фәттәх — бер нисә шиғырҙар һәм хикәйәләр йыйынтығы авторы. Әҫәрҙәре «Толпар», «Һәнәк» журналдарында, «Ҡыҙыл таң», «Өмөт» гәзиттәрендә даими баҫылып килә.

Йәшен йәшнәп ямғыр килә ҡалһа,
Йәшлегемә ҡабат талпынам.

Хыялдарым

Яңынан-яңы хистәргә
Төрөнә хыялдарым,
Йәшлегемә талпыныуын,
Тырыштым, тыялманым.

Ваҡытҡа һыялманым,
Йәшлектән туялманым.
Төштә булһа ла ҡайтырға
Тырыша хыялдарым.

Йәш саҡтағы уй-хистәрҙе
Һағына хыялдарым.
Йәнемә таралған улар, —
Тырыштым, йыялманым.

Ашыҡмағыҙ әле минән
Китергә, хыялдарым.
Күңел ташларға теләмәй
Йәшлегем буяуҙарын.

Бер бабай гармун уйнай

Ауылыма ҡайтҡан инем,
Тып-тын ҡалған урамдар.
Һайрар ҡоштар, әтәстәр ҙә
Әллә ҡайҙа булғандар.

Түбән оста яңғыҙ ғына
Бер бабай гармун уйнай.
Аңлап булмай: әллә йәне,
Әллә гармуны илай.

Яңғыҙ гармун тауыштары
Күңел ҡылдарын тырнай.
Бөтөп бара йәш быуындар,
Ауылда моңдар тормай.

Йөрәктәрҙе сымырҙатып
Бер бабай гармун уйнай.
Үҙе уйнай, күҙе йәшле,
Моңло йәшлеген уйлай.

Ауылыма, эх, йыш ҡайтып
Гармун уйнағым килә.

Унда ҡалъандарҙың йәнен
Уятҡылаъым килә.

Әйҙә, бабай, бер уйнайыҡ,
Йәшлекте иҫкә алып,
Ауылдың йәмен ҡайтарып,
Күңелдәргә моң һалып.
Ауылдың йәмен ҡайтарып,
Күңелдәргә моң һалып.

Асия ЧАНЫШЕВА

Именлектәр һиңә, Илем!

Именлектәр теләйем һиңә, Илем,
Аяҡ баҫып йөрөгән еремә.
Башҡортостан ҡырҙарында үҫкән
Икмәгемде ҡуям түремә!

Икмәгеңде ҡуям түрҙәремә,
Сәскәләрҙән үрәм таҡыя.
Таҡыялай үргән һәр бер йырым
Халҡым күңеленә моң ҡоя.

Именлектәр теләйем Илемә,
Аяҡ баҫып йөрөгән еремә!
Моң йыямын изге тупраъымдан
Йөрәгемдән сыҡҡан йырыма!..

Йырсым китте...

Кемдең үсен
Алыр өсөн генә
Мине моңъа күмеп китте ул?
Шаулай моңо күңел ҡылдарымда,
Ҡырын ҡараш ташлап үтте ул...

... Күңелемде
Солъап алъан моңо
Күҙҙәремдән алды йоҡомдо.
Моңһоу ъына елдәр олоп үтә,
Яндырыръа ҡурҡам утымды.

Мамыҡ шәлгә ябынам да, тороп,
Тәҙрәгә һирпәм күҙемде.

Асия Чанышева (1937) Бүздәк районынан. Бер нисә шиғри йыйынтыҡ авторы.

Көҙөн сәскә аткан
Ҡына гөлөм
Яҡтыртҡандай була йөҙөмдө.

Шартлар булып тибә йөрәккәйем,
Күкрәгемә нимә ҡаҙалды?
Йырлағанда, йырсы минең яҡҡа
Ник боролоп ҡырын ҡараны?

Һиҙеп мәллә
Минең уйҙарымды,
Күҙ ҡарашын һалды әйләнеп.
Бәлки, йөҙөн борғандыр ул,
Башҡа ҡараштарҙан әрләнеп?

Йырланы ла китте...
Моңо ҡалды...
Үҙ яғына китеп юғалды...
Ҡолағыма һеңгән ошо аҡ моң
Йөрәк ҡылдарыма юл алды.

Йырсым китте...
Мәгәр йөрәгемдә
Мәңге әсенерлек эҙ ҡалды...
Ниңә минең яндан үткән саҡта
Йырлап, ҡырын ҡарап күҙ һалды?

Бер гөл күрҙем

Болондарға сыҡҡас ял итергә,
Бер гөл күрҙем: ергә эйелгән.
Күҙен йомоп, башын аҫҡа эйгән,
Әллә инде йәне өҙөлгән...

...Көләс гөлдәр араһынан үтеп
Баҫтым һулығандың янына.
Мине күреп, бахыр, телгә килде:
— Һыу һип! Үләм! — тиеп ялына.

Усым менән йыйып, ысыҡ һиптем
Күҙҙәремә баҡҡан бахырға.
Күҙ алдымда минең терелде лә,
Ул оҙатып ҡуйҙы ахырҙа.

Ҡулдарымда — сәскә бәйләмдәре,
Ә мин яңғыҙ гөлдө һағынам.
Башын аҫҡа эйеп юл сатында
Көтә төҫлө мине тағын да.

ҺӨЙГӘН ЙӘР, ТЫУҒАН ЕР ҺӘМ ЙЫҺАН...

(Гөлнур Яҡупованың «Ҡатындар» трилогияһына ҡарата)

“Автограф”, ”Мөхәббәткә мәҙхиә”, “Йөрәк хаты”, “Әҙәм вә Һауа” тип аталған һәм башҡа шиғри йыйынтыҡтары менән уҡыусыларының һөйөүен яулаған, киң танылыу тапҡан шағирә Гөлнур Яҡупова проза өлкәһенә көтмәгәндә килеп инде һәм “Йыртҡыс ҡаны” исемле китабы, шул китапҡа ингән повестары һәм хикәйәләрендәге үҙенсәлекле сюжет, хикәйәләү мағирлығы, тел байлығы, фантазия осошо менән таң ҡалдырҙы.

Бына әҙибәнең өр-яңы ижад емеше – **“Ҡыҙ бала”**, **“Бер һөйгәнем өсөн”**, **“Кесе йыһан – Оло йыһан”** тигән романдарҙан (китаптарҙан) торған **“Ҡатындар”** трилогияһы. Әҫәр башта “Ағиҙел” журналында донъя күрҙе, һәм был башҡорт әҙәбиәтендә, йәмәғәтселек тормошонда ҡыуанысłы ваҡиға булды.

Трилогия һуғыштан һуңғы ауыл тормошон һүрәтләүҙән башланып китә лә, артабан хикәйәләүҙең эпик ҡоласы бөгөнгө көндөң ҡырҡыу ижтимағи-сәйәси, социаль-иҡтисади, рухи-әхлаҡи проблемаларын яҡтыртыу планында киңәйә бара. Романдарҙа ил тормошондағы, йәмғиәт үҫешендәге мөһим этаптар яҡтыртыла, дәүер һынылыштарын халыҡтың нисек кисереүе конкрет яҙмыштар, ябай кешеләрҙең бик үк ябайҙан булмаған тормош-көнкүреше аша асыла. Әҫәрҙең сюжет һыҙығының үҙәгенә сәңгелдәк тирбәтеүсе, донъяның ҡото, уты, тотҡаһы булған ҡатын-ҡыҙҙарҙың гүзәл, баҙыҡ образдары ҡуйылған, иҫ киткес бай, шағиранә образлы, һутлы тел менән уларҙың холоҡ-ҡылығы һүрәтләнгән, ҡабатланмаҫ характерҙары тыуҙырылған, кешелеклелектең, мәрхәмәттең, мөхәббәттең илаһи көсө данланған. Ҡоласлы әҫәрҙең буйынан-буйына донъяны әлмисаҡтан бирле изгелек, иман, мөхәббәт, ярлыҡау төшөнсәләре тотоп тороуы хаҡындағы фәлсәфәүи ҡараш үткәрелгән, был фекер күп төрлө сағыу эпизодтарҙа раҫланған, илһөйәрлек, телһөйәрлек идеяһы һалынған.

Өс романды бергә бәйләп тороусы төп героиня Нурия – бөтөн булмышы менән нур булып әйләнә-тирәһен балҡытыусы, бәхет таратыусы ҡыҙ – ниндәй генә ауыр хәлдәргә юлыҡмаһын, бер ваҡытта ла кешелек бәҫен төшөрмәй, мәрхәмәтлелеген юғалтмай, яҙмыш һынауҙарын йырып сыҡҡан көслө шәхес булып күҙ алдына баҫа.

Өс бала табып та, ире менән өс йыл да тороп ҡарамаған, йәшлеге заяға үткән, әммә ире тормошо менән түгел, үҙ бәҫен төшөрмәй йәшәргә көс, тәүәккәллек, рух ныҡлығы тапҡан әсәһе Гәүһәр, үткәндәрен, йәшлеген һағынып ҡыуанған-моңайған, фиҙакәр хеҙмәте өсөн орденға лайыҡ булған данлыҡлы һауынсы – өләсәһе Зөлхизә, аҡыл шишмәһе бер ҡасан да ҡоромаусы зирәк, ғәҙел, тура һүҙле, ҡорос ихтыярлы, донъя һынлы донъяға һыр бирмәгән, рәнйетелгән бәғзе берәүҙәргә күкрәген ҡалҡан итеп ҡуйып ҡурсалаған ил инәһе – ҡартәсәһе Рәйхана, һөйгән йәре Фәсхетдин-Әдисәй артынан ер аяғы ер башы ерҙән, Ҡырым яҡтарынан Толпарлыға күсеп

килгән, “бер һөйгәне өсөн алтмыш һөймәгәнде һөйгән“, бирнә итеп килтергән үҙенең “Зингер“ машинаһында толпарлыларҙы сын яһау итеп кейендергән һөймәлекле Татар киленкәй-әбекәй-Йәнкиҫәк, мөһабәт ирен үҙенә ғүмерлеккә ғашиҡ иттергән Гуля - Гөлсөм, йөрәгендә иҫ киткес ауыр кисерештәр йөрөткән, әммә һис ҡасан бахыр булмаған Гөлбикә, итәк тулы бала баҡҡан Рабиға, мөхәббәт һынауҙарын үтеп сыҡҡан үҙе сибәр, үҙе уңған, үҙе йомарт Фариза, көнүҙәк мәсьәләләрҙе ҡыйыу яҡтыртҡан мәҡәләләре, йөрәктәргә уйылып ингән талантлы шиғырҙары менән халыҡ араһында танылыу тапҡан журналист, шағирә Менәүәрә-Гөлсирен, тоғро йөрәкле “урман ҡыҙы” Әсмә, ете ят Украина ерендә саялығы, етди хеҙмәттәре менән ихтирам ҡаҙанған фән докторы Мәүлиҙәнең колоритлы, башҡалар менән һис бер бутамаҫлыҡ итеп ҡойоп ҡуйылған булмыштары башҡорт әҙәбиәте классикаһында, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева романдарында тыуҙырылған гүзәл ҡатын-ҡыҙҙар образдары галереяһын тулыландыра.

Трилогияла Салпа Сәғүрә, Сәмәй ҡортҡа, Көнсөл Маһый, Таштояҡ Миләүшә һәм Зоя исемле – ҡушаматлы эпизодик, әммә хәтерҙән юйылмаҫлыҡ итеп теүәл ижад ителгән образдар ҡараңғы буяуҙарҙа бирелә. Барыбер ҙә яҙыусы уларҙың характерҙарын эволюцияла күрһәтә, хаталарын аңлау юлына баҫҡан һәр берәүҙең йәмғиәттә ярлыҡанырға хоҡуғы барлығына ишаралай. Һәр даим көн менән төн алмашынған, яҡтылыҡ менән ҡараңғылыҡ, изгелек менән яуызлыҡ араһында мәңгелек алыш барған һымаҡ, һөйөү, тоғролоҡ, сафлыҡ янында хаслыҡ, мәкер, интригалар, хыянат, көнләшеү һәм үс йәшәүен иҫкәртә, инсафлыҡҡа, ҡатын-ҡыҙҙағы аҡыл, сабырлыҡ сифаттарына өҫтөнлөк бирә автор.

Романдарҙа ир-аттарҙың баҙыҡ, онотолмаҫлыҡ образдары ла етерлек. Нурияның “үҙенә үҙе инселәп алған олатаһы” – йор телле, ҡыйыу холоҡло Әхмәҙин – Толпарлы аҡһаҡалы Бүреһуҡҡан-Бөркөтсө олатай, ҡан олатаһы – дан ҡурайсы Абдрахман, киң күңелле, йомарт Балбабай, өс донъяны ла үҙенекеләй көткән изге йәнле, етемдәргә терәк-таяныс булған, атайһыҙарҡаһыҙ Нурия менән туғандарына атайҙы алмаштырған Самат ағай образдары ҡалҡыу һынландырылған. Әллә нисәмә быуын балаларға белем биргән уҡытыусыларҙың Уҡытыусыһы, ил, халыҡ тормошона һәр саҡ рәсми ҡалыптарға һыймаған үҙ ҡарашы булған, үҙенсәлекле холоҡло Әмин абыйҙың, илле йыл буйы вазифаһын намыҫ менән башҡарған, кешеләрҙе яратҡан, йәш быуынға ғына түгел, кәрәк саҡта үҙенән өлкәнерәктәргә лә “атай” була алған, ғәрәсәтле туҡһанынсы йылдарҙа ҡот осҡос енәйәттәрҙең Толпарлыны урап үтеүендә хеҙмәте баһалап бөтөргөһөҙ булған участковый милиционер Сәмиғуллиндың, ауылдаштарының сәләмәтлеген һаҡлау эшенә бөтөн ғүмерен бағышлаған, нәсел сирҙәрен, халыҡ медицинаһы өлгөләрен теркәп барған дәфтәр төҙөп, йәш табиптар өсөн ҡимммәте сикһеҙ таяныс-дәреслек ҡалдырған, үҙ һөнәренә тоғролоғо, фиҙакәрлеге менән хайран иткән фельдшер Әүхәт ағайҙарҙың образдары уҡыусы күңеленә уйылып ҡала. Толпарлыла айырым коммунизм төҙөргә талпынған, һәр ваҡыт яңы идеялар менән янып йәшәүсе, көрәшсән рухлы, ғалим, етәксе, депутат булараҡ халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлап йөрөй торғас, дошман мәкеренән саҡ һәләк булмаған Сыңғыҙ, талантлы рәссам булып етешкән Кәбир, йөҙөк ҡашылай күрмәлекле ҡыҙ Нурияның һөйөүен яулай алған сибәр ҙә, аҡыллы ла, сихри зәңгәр күҙле, тыныс холоҡло, ныҡышмал, бер һүҙле, интернатура, ординатура үтеп, үҙ профессияһының оҫтаһы булып танылған, ауыл ерендә эшләп универсаль табипҡа әйләнгән, абруйлы диагност кимәленә күтәрелгән Фатих, йәшлек мөхәббәтенә тоғро ҡалған, ҡатмарлы һынау-кисерештәр

аша һөйгәне менән ҡауышҡан, райондың иң алдынғы механизаторы, һуңынан фермерға әйләнгән ярҙамсыл, кешелекле, кеселекле Әшрәф, генерал дәрәжәһенә күтәрелгән Харис, мәктәп директоры Сабир – Вафич, бригадир Понимаешь Искәндәр, Толпарлының "ҡарабаш турғайы", һәр яңылыҡты эҫе мәлендә таратып тороусы Хәйривара һәм башҡаларҙың образдары ла индивидуаль һыҙаттарҙа, тик үҙҙәренсә генә холоҡ-фиғелендә, эш-ҡылыҡтарында кәүҙәләндерелгән. Әйтергә кәрәк, авторҙың шундай күләмле әҫәрҙә бәләкәйерәк персонаждарҙы ла тулы ҡанлы итеп йәшәтә алыуы, уларҙың һәр ҡайһыһына айырым һыҙаттар, телмәр, ҡылыҡ-ғәҙәттәр бүлеп биреүе һәм ваҡиғалар ағышында аҙаштырмауы һоҡландыра.

"Ҡыҙ бала" тип аталған беренсе китапта бөтөн хәл-ваҡиғалар төп героиня Нурия тирәһендә әйләнә, уның уй-кисерештәре, һәр ваҡиғаға, төрлө тормош күренештәренә, кешеләрҙең эш-ҡылығына үҙ баһаһын сығара барыуы менән оҙатыла килә. Тормоштоң аяуһыҙ елдәре әле әсә ҡарынында – "кесе йыһан"да сағында уҡ ҡаты бәрелә башлаһа ла, күңеле һис кенә лә ҡатмаған, ғәйеплеләрҙе эҙләмәгән илгәҙәк Нурия бәләкәйҙән үк һәр күренешкә иғтибарлы, төпсөр, ҡыҙыҡһыныусан булыуы, нимә күрһә шуның хаҡында "уйылып уйлап" китеүсәнлеге менән тиҫтерҙәренән айырылып тора. Ҡыҙ остоғо сағынан уҡ ололарҙан ҡалышмай фекер йөрөткәне, яғымлы, уңған бала булғаны өсөн уны барыһы ла яраталар. Ҡыҙ баланың һынсыл ҡарашынан бер ни ҙә ситтә ҡалмай, белгәнен тәрәнәйтер, аныҡлар, белмәгәненә өйрәнер өсөн ул таш аҡтарырға ла әҙер. Нурияның шәхес булараҡ формалашыуында өләсәһе менән ҡартәсәһенең роле ҙур. Толпарлы ауылы халҡы араһында Зирәк Рәйхана тигән даны таралған, олоһо-кесеһе хөрмәт иткән ағинәй ейәнсәрен биш-алты йәшендә саҡта уҡ: "Үҫкәс, шәп ҡатын буласаҡһың", – тип нарыҡлап ҡуя. Берҙән-бер улының, гөлдәй ҡатынын, алмалай өс балаһын ташлап, зарыҡтырып, башына тай типкәндәй, сит-ят тарафтарға сығып китеүенә, аҙаҡтан бик һирәк кенә ҡайтып әйләнеүенә йөрәге әрнеп, бөгөлөп төшһә лә, ғәжәйеп ихтыярлы, ғәҙел ҡатын ейән-ейәнсәрҙәрен тәрбиәләп аяҡҡа баҫтырыр, етемһерәп, ирле көйө тол ҡалған йәш кенә килененә терәк булыр өсөн бар көсөн һала. Һуңынан, киленен яусылап килгәндәрендә лә, күңеленә ни тиклем ауыр булмаһын, ни тиклем эстән үрһәләнмәһен, фатихаһын биреп, бәхет теләй. Нурияның отҡорлоғо, үткер телле булыуы, ғәҙеллек һөйөүе, намыҫты алға ҡуйыуы – нәҡ ҡартәсәһе Рәйхананан күскән асыл һыҙаттар ул.

Рәйхана ҡартәсәһе Нурияның бер ҡанаты булһа, икенсе ҡанаты әсәһенең әсәһе – өләсәһе Зөлхизә. Ун өс йәшендә генә үгәй әсәһе тарафынан илле йәшлек бабайға көсләп оҙатылған етем ҡыҙ үҙенә ҡаныҡырға тип теш ҡайрап торған оло көндәше Мәғүҙә менән илгәҙәклеге, сабыйҙарса бер ҡатлы сафлығы, эскерһеҙлеге арҡаһында килешеп йәшәй, улдары ыңғайына үҙен инәй тип йөрөткән кесе көндәшен Мәғүҙә үҙ ҡыҙылай күреп ярата, ҡурсый. Нурияның һәр тере йән менән уртаҡ телде тиҙ генә табыу һәләте – булмышындағы асыл сифат Зөлхизә өләсәһенән мираҫ булып күскән. Бәләкәй ҡыҙсыҡ, мәңгелеккә ауылдың мөхәббәт алиһәһе булып ҡалған Фариза еңгәһенә һөйҙөргөс һорап барып, уның менән еп-еңел уртаҡ тел таба, серҙәшенә әйләнә. Ишеткәндәрен күңеленең һәр күҙәнәгенән үткәреп, үҙе тойоп-кисергәндәй күҙ алдына баҫтырып тыңлай алыу, аҙаҡтан был тарихтарҙы бүтән тыңлаусыларға иҫ китмәле итеп еткерә белеү һәләте лә Нурияға һандуғастар көнләшерлек моңло йырсы, ҡарһүҙ оҫтаһы өләсәһенән килә. Күгәреп ятҡан бейек тауҙар араһынан Толпарлы яҡтарына килеп сыҡҡан

мөһабәт килбәтле, батыр йөрәкле, эсе тулы йыр-моң булған ире Абдрахманды өҙөлөп һөйһә лә, улының ғаиләһен тарҡатмау хаҡына, оло мөхәббәтенән баш тарта алған, йөрәгендә дөрләп ут янһа ла, тешен ҡыҫып түҙгән, һыр бирмәгән Зөлхизәнән күскән Нурияға сабырлыҡ, ғорурлыҡ, иплелек сифаттары.

Ҡайҙа ғына йөрөмәһен, ниҙәр генә ҡылмаһын, төп героиня күркәм холҡо, телдәрлеге, мәғлүмәтле әңгәмәсе, тоғро дуҫ булыуы менән матур күңелле кешеләрҙе үҙенә тартып тора. Эргәһендә һәр ваҡыт тиҫтерҙәре – Сабир, Кәбир, Харис, Әшрәф, Әхиәр, Фатих – йәмғеһе алты малай, һуңынан өрлөктәй мөһабәт ир арыҫландарына әйләнгән, төрлөһө төрлө һәләткә эйә булған егеттәр өйөрөлә, улар уйында ла гел бергә, бөткөһөҙ колхоз эшендә лә Нурияға ярҙам итергә өлгөрәләр. Өй тулы ҡатын-ҡыҙ булып, атай наҙын татымай, атай һүҙен ишетмәй, атаһы тере килеш етем тилмереп үҫкән Нурия Бүреһуҡҡан ҡушаматлы Әхмәҙин олатайға эйәләшә. Үҙе йәш сағында өҙөлөп һөйөп тә, ҡауыша алмаған һөйгәне Рәйхананың ейәнсәрен киң күңелле ҡарт йылы ҡанаттары аҫтына ала, Нурияға атаһы Баязит, Бөйөк Ватан һуғышында батырҙарса һәләк булған олатаһы Абдрахман менән ҡартатаһы Һатыбал бирә алмаған тәрбиәне һеңдерә, йөрәк йылыһын бүлә. Күпте күргән, кисергән был уҙаман ваҡиғаларҙы ирҙәрсә баһалауы менән фәһемле һабаҡ бирә, иҫ киткес ҡыҙыҡһыныусан ҡыҙыҡайҙың күңел һандығын тағы ла байыта төшә. Һәр минутын файҙалы, белем юлында үткәргән ҡыҙ өсөн бай тормош тәжрибәһен етерлек туплаған, Мәскәүҙе илбаҫарҙарҙан һаҡлап ҡан ҡойған Әхмәҙин ысын мәғәнәһендә рухи таяныс, ауыр минуттарҙа ирҙәрсә ныҡлы терәк була. Һарығолаҡ менән шаярып уйнап йөрөгән саҡтары, ҡулға өйрәтелгән бөркөт-ыласынды эйәләштергәндә мәш килгән бәхетле минуттары, еткән ҡыҙ осорона аяҡ баҫҡас та, Нурия йөрәгендә иң-иң ҡәҙерле иҫтәлектәр булып һаҡлана. Үҙ сиратында, ул үҙе лә олатайҙы татлы теле, мәрхәмәт һыйған кескәй йөрәге, мөхәббәт сәскән күҙҙәре менән йыуата, ҡартлыҡ көндәренә шатлыҡлы минуттар өҫтәй.

“Бер һөйгәнем өсөн…” тигән икенсе китапта инде үҫмер ҡыҙ ҡорона ингән, һуңынан мәктәптә тәүҙә пионервожатый, бер аҙҙан уҡытыусы булып эш башлаған, педагогия институтына ситтән тороп уҡырға ингән Нурияның донъя ағышына, йәшәйешкә ҡарата ҡараштары киңәйеүе, тормош һабаҡтары ала-ала, шәхес булып формалашыу баҫҡыстары тағы ла киңерәк фонда яҡтыртыла.

Совет йәмғиәтендәге хеҙмәт кешеһенә булған битараф мөнәсәбәт, колхоздың бихисап эшенә аттай егелгән, ҡул менән балсыҡтан кирбес һуҡҡан, айҙар буйына өҙлөкһөҙ ҡойоп яуған ямғыр аҫтында сөгөлдөр баҫыуында бил бөккән колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыр эшен һанға һуҡмау, план үтәүҙе генә талап итеү, “ысвикла бисәләре”нең баштан-аяҡ батҡаҡҡа батып, шөҡәтһеҙ ҡиәфәткә ингән саҡтарында үҙ-үҙҙәренән ҡыҫҡырып көлөүҙәре, үртәлеүҙәре, йәшенле ямғыр мәлендәге тетрәндергес фажиғә – былар барыһы ла Нурияны кешеләр яҙмышы һәм үҙенең киләсәге-күрәсәге тураһында етди уйланырға этәрә, өлкәнәйтеп ебәрә. “Ҡыҙыҡһығыҙ, гәрсә ҡыҙғаныусһығыҙ, уҫалһығыҙ, гәрсә йыуашһығыҙ, матурһығыҙ, гәрсә бисураһығыҙ”, – ти ул баҫыуҙа бергә эшләгән апайҙар хаҡында, уларға арнап ҡисса яҙырға хыяллана.

Тормош ауырлыҡтары героиняны һынай тора, холҡона сабырлыҡ өҫтәй бара. Атай йылыһын тойоп үҫмәһә лә, кәбәркә эсендә затлы аҫылташтар ятҡандай ҡәҙерләп һаҡлаған, “атай еҫе” һеңгән “Казбек” ҡумтаһын юҡ-юҡта ла асып ҡарап йыуанһа ла, атаһы тураһындағы уйҙары хәҙер инде бала саҡтағыса әрнеүле булмаһа ла, әле лә атай тип зарығыуҙары иҫкермәгән, ә, киреһенсә, яңыра ғына барғанын һәр саҡ тойоп йөрөгән балиғ ҡыҙ “бер ҡасан

да һайыҡмаç һағышым булдың даһа, атай!” тип өҙгөләнә. Әммә атаһының ситтә яңы ғаилә ҡороуын ишеткәс, уға рәнйемәй, уның яңы тыуған балаһын яҡын күреп, туған тип ҡабул итә. Күп йылдарҙан һуң, ауыл зыяратында атаһы Баязит Ҡарамырҙиндың ҡәбере эргәһендә уйланып торғанында, бала саҡтан бәгеренә таш булып ҡатҡан үпкәләренән, оҙаҡ яфаланһа ла, арына алғаны, үҙендә көс табып атаһын ғәфү иткәне өсөн һөйөнә.

Посылка йәшниктәрен “атай” тип ҡосаҡлап йөрөп үҫкән, атай төҫөн күрмәгән игеҙәк ҡустыһы менән һеңлеһе Камил менән Камилаға, әсәһе күрше ауылдағы тол иргә кейәүгә сыҡҡандан һуң, Нурия атайҙы ла, әсәйҙе лә алмаштыра, ҡартайған, ярҙамға мохтаж өләсәһе менән ҡартәсәһенә ышаныслы таянысҡа әйләнә. Әсәһенең яңы ғаиләлә тыуған ҡыҙын да оло йөрәкле Нурия ҡәҙерле туғаны тип ҡабул итә. Һәр ҡайһыһы үҙенсә матур, мөхәббәтле, бәхеткә лайыҡ булған ғәзиз кешеләренең яҙмышын ҡабатламаç өсөн, уларҙың әсе һабағын үҙенең бер ваҡытта ла онотмаçҡа тейешлеген, балаларын атай тупһаһында, атай йортонда, атай икмәге ашатып үҫтерергә бурыслы икәнлеген Нурия күңеленә ныҡлап беркетә. Сөнки ул әсәй тапҡан икмәктең ниндәй әсе икәнлеген, уға күҙ йәштәре, нахаҡ һүҙ үте, йоҡоһоҙ төндәр зары ҡушылғанлығын үҙәгенә үткәнсе белә. Шуға күрә лә ул Фатихы менән ҡауышҡан мәлдә үк тыуасаҡ балалары алдында биргән антын хәләл ефетенә еткерә.

Әйләнә-тирәһендәге тиҫтерҙәренең яҙмышы, эш-ҡылыҡтары ла героиняның холҡона йоғонто яһай, тормош һабаҡтары бирә, күңеле аша кисерелеп, зиһене аша үткәрелеп, үҙ аҡылы юллаған фәлсәфәгә әйләнә бара. Шуға ла ул, әсәһе кисергән хәсрәттәрҙе кисермәç өсөн, ғәзиз балаһының атайлы – арҡалыларға ҡарап ынйыуҙарын теләмәгәнгә күрә, юлы ижад, дан мөхитендә ятҡан, ҡала тормошонда йәшәргә тейешле Кәбирҙең мөхәббәтенән ваз кисә. Һөйгәне Олексийҙың тыуған яғы Украинала вузда уҡыусы, белем тауҙарына үрләүсе, буласаҡ ҡайныҡәйнәһенә үҙенең һис тә басурманка түгел, ә бәçле, арҙаҡлы, абруйлы башҡорт ҡыҙы икәнлеген ҡат-ҡат иçбатлаусы сая рухлы, ныҡышмал, тәүәккәл әхирәте Мәүлиҙә Нурияға теләһә ниндәй тормош һынауҙарында ла үҙен ышаныслы, намыçлы, ныҡышмал, батыр тоторға өлгө күрһәтә. Икенсе йән дуçы Әсмә ҡайнар һөйөүе хаҡына үҙ-үҙен ҡорбан итеүе менән һәр ваҡыт әҙләнеүсән, хәҡиҡәттең төбөнә төшөргә яратыусан Нурияның күңел донъяһында мөһим урын ала. Бер ниндәй йәшәү шарттары булмаған, айыу-бүреләр ҡамауындағы төпкөл, ташландыҡ Айыусы ауылында армияла ҡаты ғәрипләнгән инвалид Артурын, уның ата-әсәһен ҡарауы-тәрбиәләүе, бынамын тигән уңған булған, һәр эшкә ҡулы килешкән, күңеле матур Әшрәфтең мөхәббәтен кире ҡағыуы, хатта үҙен әсәлек бәхетен кисереүҙән дә мәхрүм итеүе Нурияны сикһеҙ ғәжәпләндерә лә, һоҡландыра ла, ғибрәт-фәһем дә бирә. Мөхәббәт хисенең кешене ниндәй юғарылыҡҡа күтәреүе һәм ниндәй мәхрүмлектәр кисерергә, ниндәй ҡаты һынауҙар аша үтергә этәреүе уны кешеләр яҙмышы хаҡында тәрәнерәк уйландырта төшә, фәлсәфәүи фекерҙәр төйнәүгә алып килә. Романда атаҡлы дастандарҙа, үлемһеҙ ҡиссаларҙа данланған мөхәббәт көсөнөң, һөйөүгә тоғролоҡтоң тере миçалы булған Әсмәнең һоҡланғыс та, драматик-трагик та яҙмышы тәрән психологизм менән һүрәтләнгән. Ғөмүмән, “Бер һөйгәнем өсөн...” исемле икенсе китапта Гөлнур Яҡупова мәңгелек теманы – мөхәббәт темаһын, уның илаһи бөйөк көс булыуын Толпарлы, Айыусы, башҡа тирә-йүн ауылдары кешеләренең яҙмыштарына, кешелек хәтерендә мәңге юйылмай һаҡланған ҡиссаларға бәйләп, юғары шиғриәтле итеп, лирик-романтик сағыу төçбуяуҙарға мансып та, фәлсәфәүи планда ла яҡтыртып бирә.

“Кесе йыһан – Оло йыһан” тигән өсөнсө романдың тәүге өлөшөндә етмешенсе-һикһәненсе йылдарҙа халыҡтың тыныс, һил донъяла яҡты хыялдар, ҙур маҡсаттар ҡуйып йәшәп ятыуы талғын хикәйәләнһә, артабан бер-бер артлы ил башлыҡтарын ерләгән, Чернобыль фажиғәһенән тетрәнгән, Горбачев, Ельцин замандарындағы үҙгәртеп ҡороуҙарҙы үҙ башынан кисергән, аптырап-баҙап, шаңҡып ҡалған халыҡ көнкүреше байҡала. СССР тарҡалыуын яҙыусы халыҡ мәҡәле ярҙамында бик ҡыҫҡа һәм бик тапҡыр характерлай: “Үгеҙ үлде, уртаға ярылды”. Ғөмүмән, ҡыйралыш-юғалтыуҙар тулып ятҡан ғәрәсәтле туҡһанынсы йылдарҙағы ил тормошо, толпарлыларҙың ауыр һынауҙар кисереүе, баҙар иҡтисады шарттарында берәүҙәрҙең бөйөрөн һатып “Жигули” машинаһы алырлыҡ аҡса эшләүе, уның урынына ун машина хаҡына торошло сәләмәтлеген юғалтыуы, икенселәренең ҙур ҡалаларға китеп гастарбайтер булып йөрөүе, урам һепереүе, хулигандар, экстремистар тарафынан үлтерелеүе, егәрле, йүнселдәренең иһә аяҡҡа баҫып, тернәкләнеп, эшҡыуарлыҡҡа тотоноуы, ҡалған ауылдаштарын да эш менән тәьмин итеүе, Афған, Чечня һуғыштары тоҡаныуы, уларҙың дәһшәтле еле Толпарлы ауылы кешеләренә лә килеп ҡағылыуы етеҙ, динамикалы хикәйәләү темпында бирелә. Демократия елдәре иҫкән үҙгәртеп ҡороу осоронда халыҡтың торғонлоҡ йылдарында йоҡомһорап киткән үҙаңы, милли тойғоһо уяныуы ла күрһәтелә.

Романдарҙа хикәйәләү беренсе заттан, төп героиня позицияһынан алып барыла, Нурияның характеры, кешелек булмышы, рухи донъяһы психологик ракурста тәрән һәм күп яҡлы асыла. Яҙыусы һайлаған был алым ҙур тәжрибә, һөнәри оҫталыҡ, тасуирлау сараларының төрлө һәм үтемле булыуын талап итә. Сөнки төп героинянан ҡала бүтән персонаждар ҡатнашҡан хәл-ваҡиғаларҙы һәр яҡлап объектив күрһәтеү мөмкинлеген сикләү, эпик ҡоласты, панорамлыҡты тарайтыу хәүефен тыуҙыра, хикәйәләүсе үҙе күрмәгән-кисермәгән хәлдәрҙе бөтөн булған реаллегендә ентекле итеп, буяуҙар палитраһы ҡуйылығында һүрәтләүҙә ауырлыҡтар килеп тыуа. Автор, күрәһең, ошо ҡатмарлы алымға үҙенә ышанып йөрьәт иткән һәм ысынлап та әҫәрҙә беренсе заттан бәйәнләүҙең ҡаршылыҡтарын еңеп кенә ҡалмаған, ә өҫтөнлөктәрен дә таба алған. Яҙыусы героиняһының бала саҡтан уҡ хыял ҡорорға әүәҫлегенә, уйылып уйға батыусан, бөтә ишеткән-уҡығанын “кино итеп” күҙ алдына баҫтырыусан, үҙен дә шунда ҡатнашып йөрөүсе һымаҡ хис итеүсәнлегенә баҫым яһай һәм шуны ғәжәйеп оҫта файҙалана. “…Уф, әлеге шул ишеткән бер хәбәрҙе күҙ алдыма килтереп, күңелемә ала торған сәйер ғәҙәтем… нисәлер минутҡа ғына булһа ла икенсе бер донъяның пәрҙәһен саҡ ҡына асып ҡарағандай буламсы?.. Һәм ҡапыл үҙемдең бәләкәй кәүҙәмдән һыпырылып сығам да һомғол, матур Фариза еңгәмә әйләнәм…” – ти Гөлнур Яҡупованың Нурияһы. Шулай уҡ автор, әле Муса, әле Ишбирҙе, әле Мәүлиҙә, әле Айгиз, әле Әсмәнең һ.б. телдән һөйләгәндәренә йә ҡағыҙға яҙғандарына һылтанып, был геройҙар ҡатнашлығындағы тормош күренештәрен улар күҙлегенән, уларҙың күңел призмаһы аша ҡарап хикәйәләп ала. Тарихи сығанаҡтарға, халыҡтың ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларына, матбуғат, сәнғәт мәғлүмәттәренә мөрәжәғәт итеү, уларҙы әҫәр туҡымаһына тәбиғи үреп ебәреү ҙә һөҙөмтәлә монотонлыҡтан, бер төрлөлөктән, ҡоро констатациялап сығыуҙан арындыра.

Өсөнсө роман аҫылығында Нурия, Фатихы менән ҡауышып, гөрләтеп туй үткәреп, матур ғаилә ҡора, утыҙ йылдан ашыу йөрәктәре “унисон” типкән мөхәббәтле тормошта ғүмер кисерә, ул һәм ҡыҙ үҫтерә, уларҙы башлы-күҙле итеп, өләсәй, ҡартәсәй булыу бәхетен

татый. Әммә уның тормошо һикәлтәһеҙ генә бармай. Мөхәббәтендә һынау, тәрән тетрәнеү кисерә. Иренең ординатурала уҡыған сағындағы хыянаты хаҡында хәйләкәр, эскерле, иманһыҙ бер ҡатындан хат килеп төшөүе Нурияның һил тормошон зил-зибәр итә. Йәш сағында ла “имеш тә, һынамаҡҡа була” ошондайыраҡ бер хат яҙған була ул, бына килеп егерме йыл үткәс, Фатихтан ул табыуы, уның ир-егет булып үҫеп етеүе, атаһын таптырыуы хаҡында хәбәр итә. Зоя исемле был ҡатындың хаслығы, Һигеҙбөгөл йылғаһы шикелле, Нурияның алдына килә лә ята, килә лә ята, хәсрәт кистерә. Фатихтың ҡайғылы саҡта әмәлләнеп, мәкерле ауға эләктерелгәнен белһә лә, тоғролоғон һаҡлай алмаған йәренең хыянаты оторо намыҫсан ҡатындың йәнен үрһәләндерә, баҫырау йылан тынын быуғандай тойола. Намыҫсан, ғорур Нурияның рәнйеү, үпкә кисерештәре ярҙарынан ташып сыға, зиһенен томан ҡаплай, күкрәгендә, гүйә, вулкан ҡубарыла.

Фатихынең күҙенә бәреп әйтеүҙән, сикәһенә сабыуҙан, алама һүҙҙәр ҡысҡырыуҙан уны һәр саҡтағыса сабыр аҡылы, һәр нәмәнән үҙенә һабаҡ ала белеүе ҡотҡарып ҡала, боронғо Канаки халҡының үҫмер сағында уҡып тәьҫирләнгән, асыулы-рәнйеүле мәлдә кеше асылын йылан еңеп барыуы тураһындағы легендаһы иҫенә килеп төшөп, героиняның зиһенен яҡтыртып ебәрә, һаташыулы-ярһыулы халәтенән айырып ала. Тәрән кисерештәрҙән тетрәнгән ҡатындың иҫ юҫығына Мысырға сәйәхәт ҡылғанда күргән башы ҡатын, сүрәтендәге инә ыласын Изида алиһәнең һыны килеп инә. “Изида гимны”ның тәү ҡарашҡа шаҡ ҡатырғыс, парадоксаль, әммә төбөндә ятҡан иҫ киткес аҡыллы, ғибрәтле, фәһемле: ”Мин – бисә, үҙем изге, үҙем иблисә, мин – баламдың да әсәһе, иремдең дә әсәһе, атамдың да әсәһе, мин – кешелектең әсәһе… мин – Тәү әсә” тигән һүҙҙәре, “төпкө аңыңа баҡ, иң изге, мөҡәддәс асылыңа ҡайт, шунан ғына хөкөм ҡыл башҡаларға” тип ишаралауы – героиня быны шулай ҡабул итә – уны бер аҙға һыуындырып, айыҡ аҡыл менән уйлар хәлгә еткерә. Һәр саҡтағыса, ул күңеленән генә яҡын кешеләрен барлай, уларҙың һүҙҙәре ҡолағында яңғырағандай була. Нурия ҡартәсәһенең “Асыу – аҡыл дошманы, ҡолоҡасым!” тигән мәҡәлен, өләсәһенең “Сабырлыҡтың төбө – һары алтын” тигән һамағын, өс бала табып иренән тороп ҡалған әсәһенең “Айырылыу – ҡанатың ҡайырылыу” тигәнен, Татар әбекәйҙең “Бер һөйгәнем өсөн алтмыш һөймәгәнде һөйөрмөн” тип тәҡрарлауын, Фариза еңгәһенең “Мөхәббәт уты тамуҡ утынан ете өлөш артыҡ булыр” тигән раҫлауын ишеткәндәй була, уларҙың ҡурсалауын тоя. Ул ҡартәсәһенән аҡылынан юйҙыртмауын, өләсәһенән сабырлыҡ өҫтәүен, әсәһенән ҡанатын бәпләүен, Татар әбекәйенән ят берәүҙе иренең балаһы итеп һөйөргә, үҙ итергә көс биреүен, Фариза еңгәһенән мөхәббәтенән дүнмәҫкә, көнләшеү утында көл булмаҫҡа өйрәтеүен үтенеп һорай. Илле йәшендә ошо бик ауыр һынауҙы кисеп сыҡҡан, дәғүәләре менән йәнен теткән “үҙем”дәрҙе еңә алған Нурия әхирәте Әсмәгә: “Аулаҡта апайҙарҙан ишеткән “Һөйгән – һигеҙ, йән теләгән – бер” тигәнде саҡ аңланым”, – ти. Бала саҡта Нурия Бөркөтсө Әхмәҙин бабайға: “Йылғалар нисек үргә аға ала?» – тип һорау биргән була. “Аҡмай сараһы юҡ!”, – тип яуап бирә аҡһаҡал. Бик күп йылдар үткәс кенә аңлай ул был хәҡиҡәтте. Фатихының хыянаты аша сығыр өсөн, артабан бөтөн ғаилә булып йәшәр өсөн Нурия Зәңгәр шишмә һымаҡ үргә аға, тау булып ятҡан үпкәһен, ғәрлеген артылып сыға, уның рухы ҙурая, сынығa. Әсе һынау кисергән героиня халыҡ әйткән “Ямандың күперенән үткәнсе, ярҙан ос” тигән һүҙҙең хаҡлығына ышана,

саҡ ҡына үҙенең күперен яндырмай ҡалыуына һөйөнә.

Әсмә Әшрәфкә кейәүгә сығып, биш сабыйға ғүмер биреү, әсә, ир ҡатыны булыу бәхетен кисерә, әммә уларҙың тормош арбаһы ла ҡаршылыҡтарһыҙ ғына алға тәгәрәмәй. Нурия һымаҡ уҡ, бер талай ваҡытҡа Әсмәгә, Таштояҡ Миләүшәнең яһиллығы арҡаһында, Әшрәфенә рәнйеп, иҫ киткес ауыр тойғолар кисерергә тура килә. Ваҡыт үтә килә, уның күңел яралары бөтәшә, саҡмалай сая рухлы, сыҙам, эре һөйәкле, оло күңелле, оло йөрәкле Әсмә Миләүшәнең хаслығының ҡорбанына әйләнгән ирен ғәфү итергә, уның бер минутлыҡ көсһөҙләгән ярлыҡарға, артабан тормош йәмен тойоп йәшәргә үҙендә көс таба, эшҡыуарлыҡ сәскә атҡан заманда, үҙ булмышына тоғро ҡалып, урман ҡыҙы йылҡысылыҡ эшенә тотона, ире Әшрәф менән ең һыҙғанып донъя көтә.

Яҙыусы, ана шулай, мөхәббәт янында нәфрәт, тоғролоҡ янында хыянат йәнәш йөрөүен, дастандарҙа йырланырлыҡ, китаптарға торошло көслө һөйөү хистәренең мәле менән тоноҡланып йә һүнеп, рәнйеш, әрнеү, ғазап, ғәрлек хистәренә сорналыуын, уны еңеү өсөн биниһая рух һәм аҡыл көсө кәрәк булыуын, был көскә сәңгелдәк тирбәтеүсе, донъяның ҡот-ырыҫын һаҡлаусы Ҡатын, Әсә эйә булыуын бар тормошсанлығында, фәһемле итеп, тәрән психологизм аша асып бирә.

Сабый саҡтан алып күңелендә бәпләп йөрөткән, һуңынан көндәлектәренә теркәлә барған бәйәндәренән Нурия үҙе, яҡындары, толпарлылар, замандаштары яҙмышы, ил тормошо хаҡында роман ижад итә, был әҫәрҙең яҙылып ташҡа баҫылырын ауылдаштары ла “Ил көтә ләһә!” тип, тулҡынланып, өмөтләнеп көтә, роман өсөн материалдар алып килеп бирә тора. Уларҙың берәүҙәре, мәҫәлән, Афған һуғышында ҡатнашҡан Муса үҙ башынан кисергәндәрҙе Нурияға бәйнәбәйнә айырым тарих итеп һөйләй, һәм улар романға документаль ерлектәге йәнле хикәйәт булып инеп китә, икенселәре, мәҫәлән Чечня һуғышында янып-көйгән, ауыр йәрәхәт алған Айгиз тау халҡының фажиғәһен яҙма рәүештә Нурияға алып килеп тапшыра. Чечня фажиғәһен тауҙар илендәге мәғәнәһеҙ ҡан ҡойош эсендә йөрөгән кеше күҙлегенән һүрәтләү, реаль картиналарҙы психологик тәрәнлек менән яҡтыртыу әҫәрҙең тормошсан яңғырашын көсәйтеп ебәрә. XX быуаттағы ил тормошон, халыҡ яҙмышын хикәйәләгән бәйәндәренең дауамын иһә Нурияның үҙе һымаҡ зирәк, төпсөр, уйсан ейәнсәре Айһылыу XXI быуатта дауам итергә йыйына.

Тәүге ике романда төп ваҡиғалар башлыса Толпарлы ауылында ғына барһа ла, СССР тигән ҙур державаның эҫе һулышы һәр саҡ тойолоп тора, йәмғиәттә барған мөһим ижтимағисәйәси, иҡтисади-социаль хәл-ваҡиғалар Толпарлы ауылы тормошона, кешеләре яҙмышына ҡағыла тора. Ауыл бөтөн донъя, тотош ил кисергәнде кисереп, һәр яңылыҡҡа һиҙгер ҡалып, үҙ ҡарашын актив белдереп, үҙенсә ҡатнашып, донъяуи проблемаларҙы үҙенсә үлсәп-баһалап, хәл итеү юлдары хаҡында баш ватып йәшәп ята. Ауыл – донъяның кендеге, ауыл – илдең түле, ауыл – илдең хәтер бағыусыһы, ти Нурия. Һуғыштан һуңғы йылдарҙан алып бөгөнгө көндәргәсә һуҙылған ил тормошон хикәйәләү фонында Толпарлы ауылы халҡы, шул ауылдан сыҡҡан, илдең төрлө мөйөштәрендәге – Өфө, Свердловск, Силәбе, Ырымбур, Мәскәү, Харьков, Хабаровск, Кемерово, Тубыл, Донецкиҙағы һ.б. – кешеләрҙең татыу, дуҫ, берҙәм ғаилә булып, берҙәй уй-маҡсаттар менән йәшәүҙәре, эшләүҙәре яҡтыртыла, совет халҡы өсөн уртаҡ булған психология, характер һыҙаттары асыла, шул уҡ ваҡытта һәр береһенең үҙенсәлекле яҙмыштары,

булмыштары һүрәтләнә. Һуңғы романда был ҡеүәтле державаның емерелеүенең Толпарлы ауылынан төрлө тарафтарға таралған кешеләр яҙмышына ла ҡағылыуы, дуҫлыҡ, туғанлыҡ, берҙәмлек хистәренең, элекке ҡиммәттәрҙең юйыла барыу ҡурҡынысы күрһәтелә.

Баҙар иҡтисады шарттарында ауылдарҙың, бигерәк тә төпкөлдә ятҡан бәләкәй ауылдарҙың меҫкен хәле Аҡмәте исемен Бөйөрһөҙ ауыл атамаһына алмаштырыу тарихында, гастарбайтер булып сит тарафтарға эшкә киткән ауыл кешеләренең фажиғәле үлемен, ташландыҡ ауылдарҙа бер ярҙамһыҙ ҡалған ҡарт-ҡороноң иҫ киткес мохтажлыҡ кисереп йәшәүен хикәйәләгән эпизодтарҙа асыла. Толпарлы һымаҡ ҙурыраҡ ауылдарҙа халыҡтың боронғо һөнәрҙәрҙе тергеҙеп, заман ихтыяждарына ярашлы көн күрергә ынтылып ятыуы, хәллерәктәрҙең үҙ бизнесын асып, тернәкләнеп китеүе, башҡаларҙы ла эш менән тәьмин итеүе кеүек күренештәр – бөгөнгө йәмғиәттең социаль йөҙө асыҡ сағыла.

Трилогияла төп героиня Нурияның география уҡытыусыһы булыуына, уның сәйәхәттәргә күп йөрөүенә, шулай уҡ астрономия уҡытыуына ла бәйле бик күп ғилми-популяр характерҙағы мәғлүмәттәр, күк есемдәре һәм уларҙың, мәҫәлән, Галлей кометаһының Ер тормошона яһаған һәләкәтле йоғонтоһо, Украиналағы мең гектар майҙандағы “Таш ҡәберҙәр“ тигән тәбиғәт ҡурсаулығы, ундағы петрофлигтарҙың башҡорттарҙың боронғо тамғаларын хәтерләтеүе, ҡәҙимге башҡорт ерҙәрендә аҡҡан Оло Һатҡы йылғаһында XIX быуатта ҡоролған боронғо плотина хасил иткән атаҡлы шарлауыҡ ҡеүәтенә эшләгән завод, бронза быуаты цивилизацияһы үрнәге булған Тәгәрмәсҡала – Арҡайым хаҡында хыял һәм ысынбарлыҡ ҡатнашмаһынан туҡылған күләмле тасуирлама, радио-гәзит хәбәрҙәре хаҡында фекер алышыуҙар, шулай уҡ рәссам Кәбирҙең картиналары күргәҙмәһенә бәйле рәсем сәнғәте, атаҡлы рәссамдарҙың мәшһүр картиналары, уларҙың яҙылыу тарихы, грек мифологияһы образдарының һынланыш үҙенсәлектәре, бөйөк аҡыл эйәләренең фекерҙәрен ситуацияға бәйләнешле килтереп ялғау, уҡылған китаптар, тыңланған музыка хаҡында уй-хистәр, тәьҫораттар менән бүлешеү, һуғыштан миктәгән илдең күтәрелеп, нығынып килеүен күрһәтеүсе геройҙарҙың тормош-көнкүрешенә ингән яңынан-яңы магнитофон, фотоаппарат һымаҡ ҡулланылыш тауарҙары, артабан иһә XXI быуат атрибуттары: компьютер, Интернет селтәре, кеҫә телефоны һ.б. хаҡында юл айҡанлы сюжет һыҙығына бәйләнешле телгә алыуҙар, халыҡ телендә йөрөгән бөткөһөҙ лаҡаптар, көләмәстәр, ҡушаматтар, ер-һыуға, атай-олатайҙарҙың үткәненә бәйле тарихтар, шәжәрә-риүәйәттәр, мәҡәл-әйтемдәр, донъя халыҡтары ижадынан булған ифрат ҡыҙыҡлы һәм ғибрәтле легендаларҙы, сәнғәт гәүһәрҙәрен геройҙар яҙмышына бәйле оҫта үреп биреү – былар барыһы ла хикәйәләү офоҡтарын киңәйтеп ебәрә, йөкмәткене байыта. Ә инде тәбиғәт күренештәрен һүрәтләүҙә авторҙың шағирәлеге ярылып ята. Нурияның хәләл ефете Фатихтың табип булыуына, Хоҙай тарафынан һирәктәргә генә бирелгән һоҡланғыс һәләткә – дөрөҫ диагноз ҡуйыу һәләтенә эйә булыуына бәйләп, ғәжәп эрудициялы әҙибә медицина өлкәһенә ҡараған терминдар менән дә иркен эш итә, дауалау алымдары хаҡында ентекле һәм белеп һүрәтләй. Ә сөгөлдөр баҫыуындағы, йәшелсәлектәге, кирбес һуғыуҙағы күренештәрҙе тасуирлауын уҡып, әйтерһең дә үҙе шунда эшләгән, тип уйлап ҡуяһың. Ә һунар картиналары, урман хикәйәттәре?! Былар барыһы ла трилогияның тормошсанлығын, ышандырыу көсөн арттыра.

Трилогияла үҙҙәре айырым-айырым тамамланған хикәйә, хикәйәт, повесть булырлыҡ тарихтар урын ала. Мәҫәлән, Әсмәнең Артурға булған тәүге ҡайнар һөйөүе боронғо дастандарҙа, ҡиссаларҙа йырланған данлыҡлы мөхәббәт тарихтарына торошло. Афған илендәге һуғыш эпизодтары, ундағы халыҡтың көнитмеше, Тимерсе ҡарт хаҡындағы тарих күләмле повесть кимәлендә. Айгиздең бер туған Зарина һәм Хасбулат Үмәровтар менән танышыу-яҡынлашыу тарихы, фажиғәне йөрәге тәрән һәм нескә тойған үҫмер чечен ҡыҙы Заринаның иншаһы, ундағы: “Санжа туңды. Уның йыры боҙ аҫтында тонсоҡто. Ҡарт чинара төбөндәге эскәмйәлә ғашиҡ парҙар ултырмай, сал сәсле олатайҙар гәп ҡормай”, – тип, милләте кисергән һәләкәтте туңған йылға һәм тонсоҡҡан йыр менән сағыштырыусы ҡыҫҡа, әммә тос мәғәнәле, иҫ киткес тапҡыр, тәрән образлы юлдарҙа әйтеп биреүсе кыҙҙың яҙмышы, Айгизгә хеҙмәттәшенән, яуҙа һәләк булған Сашок Пиафҡа көнләшеп, үҙенең тере мәйет булыуына әрнеп ятҡан ҡаты яралы Валера дуҫынан килгән хат – һәр береһе үҙе бер әҫәргә торошло.

Романдарҙа вағыраҡ сюжет тармаҡтарын хасил итеүсе төрлө характерҙағы – көнкүреш, мөхәббәт, сәнғәт, сәйәси, хәрби, мәғариф, медицина, фән, география, астрономия, тарих, журналистика, экология һ.б. өлкәләргә ҡараған материалдарға, шулай уҡ мифологик, фольклор-этнографик материалдарға таянып, хикәйәләүҙе үҙәк сюжет һыҙығына оҫта бәйләп үреп алып барыу, жанр-стилдәрҙең органик синтезына өлгәшеү күҙгә бәрелеп тора. Өсөнсө романда, атаһы ҡаҙаҡ, әсәһе башҡорт булған, үзбәктәр һәм урыҫтар араһында үҫкән, дүрт телде белгән, сикләнгән хәрби контингент составында Афғанстандағы һуғышта ҡатнашҡан хәрби летчик Муса образына бәйле, Афған илендә йәшәүсе халыҡтар, уларҙың телдәре, диалекттары, төркиҙәрҙәге уртаҡ топонимика күренештәре телгә алына. Шулай уҡ, Мусаны үлемдән ҡотҡарыусы Тимерсе ҡарт образына бәйләп, Һомайғошҡа табыныусы, борон заманда Урал тауы аръяғынан күсеп килгән Мөйтән ырыуынан таралған, телдәре иран теленә яҡын булған пуштундар хаҡында тарихи белешмәләр, тел-ҡан берлеге, уртаҡ тарихи тамырҙар хаҡында фекерҙәр, тарихсы-этнолог Люсяның башҡорттарҙың бик боронғо халыҡ икәнлеген иҫбатлаусы этногенез, этнонимикаға бәйле архив сығанаҡтарына һылтанмалар яһауы, Геродот, Ибн Фаҙлан, Лев Толстой, Зәки Вәлидиҙең башҡорттар хаҡындағы яҙмаларына, хеҙмәттәренә таяныуҙар, боронғо башҡорт амазонкалары, Ерәнсә сәсән менән уның ҡатыны Бәндәбикә тураһындағы һәм башҡа күп төрлө ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр роман йөкмәткеһен ифрат байыталар, интеллектуаль яңғырашын көсәйтәләр, хикәйәләү ҡоласын киңәйтәләр. Арҡайымда алған тәьҫораттар йоғонтоһонда героиняның сал үткәнгә күңеленән «сәйәхәт ҡылғаны»нда башҡорттоң данлы тарихының айырым биттәре сағылып ҡала: Нурия хәтер баҫмаларында Тымыҡ океандан алып Көнбайыш Европағаса ятҡан киңлектәрҙә йәшәгән барса халыҡтарҙы дер ҡалтыратҡан бөйөк Сыңғыҙхан ҡашындағы ғорур ҡиәфәтле яугирҙы-башҡорттоң данлыҡлы Майҡы бейен сырамыта, Рим империяһы менән даулашҡан затташтарҙы, сармат батшаһының Боспор ярҙарында һалған эҙҙәрен күрә, Ҡытай тарафтарында һөрәндәрен яңғыратҡан башҡорт яугирҙарын, Афғанда, Һиндиҡуш тауҙарында тауыш биргән мөйтән ырыуын, Амударъя менән Һырдаръя тулҡындарында йырланған башҡорт йырын ишетә… Нурияның әхирәте Мәүлиҙәнең Олексийҙы яратып, кейәүгә сығып, уның ватанын үҙ

итеүенә бәйле, 1948 йылда Украинаға ярҙамға бер вагон башҡорт йәштәре китеүе, әлеге мәлдә ун дүрт мең башҡорттоң шунда йәшәүе, ә Башҡортостанда илле биш мең тирәһе украин төпләнеүе, Украинаның атом энергетикаһы министры булған, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең улы Нур Ниғмәтуллин, Ярослав Мудрый ордены кавалеры академик Вил Һәүбән улы Бакиров һымаҡ күренекле шәхестәр хаҡында белешмәләр ҙә – ҡыҙыҡлы рәсми-фактик материалдар әҫәрҙең художество туҡымаһына органик инеп киткән.

Яҙыусы романдағы хәл-ваҡиғаларҙың осона сығыуҙың, геройҙарҙың яҙмышын йомғаҡлап ҡуйыуҙың да оригиналь алымын тапҡан. Бәйәндәрен компьютерҙа баҫыусы, шәжәрә ағасындағы яңы ботаҡтарҙы өҫтәй барасаҡ ейәнсәре Айһылыуҙы етәкләп, төп героиня Нурия “мәңгелек ауылы”на зыярат ҡылырға килә. Фани донъяла эш-көштәрен бөтөрөп, баҡыйлыҡҡа күскән яҡындары, ауылдаштары – бәйәндәрендәге оло быуын геройҙары менән күңеленән генә осраша-әңгәмәләшә, әруахтарға яңылыҡтарҙы еткерә, тереләрҙең бөгөнгө хәл-әхүәлен һөйләй, ейәнсәренә мәрхүмдәрҙең ҡәберҙәрен күрһәтә-аңлата, һорауҙарына яуап бирә, нәҫел ептәрен ялғай. Шул рәүешле яҙыусы, ҡоро теркәп-теҙеп кенә сыҡмайынса, ялҡытҡыс хәбәр сурытмайынса, әҫәрҙең тотош рухына тәбиғи ярашып, тап килеп тороусы финал картинаһын тыуҙыра, трилогиялағы хәл-ваҡиғаларҙы бер орсоҡҡа сирата, геройҙарҙың яҙмышына нөктә ҡуя.

Башланышында шәхсән яҙмышты яҡтыртыуға ҡоролған интим-романтик пландағы, лирик төҫ-буяуҙарҙағы әҫәр, кескәй инештән башланған һәм үҙ юлында көсәйә-кеүәтләнә килеп, ахыр сиктә алҡынып ятҡан ярһыу даръяға әүерелә барған ажғыр тулҡынлы йылға һымаҡ, героиняның башынан кисергәндәре, тотош илҡәүем, донъя яҙмышы, бәғзе урындарҙа боронғо тарихтарға ла барып ялғанып, сикһеҙ Йыһан менән тоташып, фәлсәфәүи тәрән һығымталар яһауғаса олғаша. Әҫәр илебеҙҙең, халҡыбыҙҙың, уның айырым вәкилдәренең XX быуаттағы үткән юлын, XXI быуатҡа аяҡ баҫҡандағы сағыу тормош биттәрен эҙмә-эҙлекле рәүештә киңәйгәндә-киңәйә килгән эпик һулышлы, мөһим ижтимағи-социаль яңғырашлы әҙәби панорамаға әйләнә. Географияға, геологияға, астрономияға, тарихҡа, иҡтисадҡа, сәйәсәткә, психологияға, хәрби армия тормошона, профессиональ һәм халыҡ медицинаһына, сәнғәткә, ауыҙ-тел ижадына һ.б.ҡағылышлы иҫ киткес бай бихисап ғилми мәғлүмәттәрҙең зауыҡлы нәфис тел менән, ситуацияға ярашлы, сюжет һыҙығына урынлы һәм сама белеп индерелеүе яҡтылыҡ, сафлыҡ, матурлыҡ тойғоларын уятыусы, уҡыусыла юғары зауыҡ тәрбиәләүсе, тарихи хәтер офоҡтарын балҡытыусы, илһөйәрлеккә, телһөйәрлеккә, милли ғорурлыҡҡа өндәүсе автор – Гөлнур Яҡупованың «Ҡатындар» трилогияһының ысын мәғәнәһендә энциклопедик характерҙағы, эпик ҡоласлы әҫәр булыуын иҫбатлай.

Гөлфирә ГӘРӘЕВА,
филология фәндәре докторы,
БДУ профессоры.

Миңлеғәле
НӘЗЕРҒОЛОВ

ТӘУАРИХТАРЗЫҢ СТИЛЬ ҺЫЗАТТАРЫ

Сал быуаттарҙан беҙҙең көндәргәсә һаҡланып ҡалған башҡорт тарихи яҙмалары араһында тәуарих жанрына ҡарағандары ла осрай. Шәжәрәләрҙән айырмалы рәүештә, уларҙа, ғәҙәттә, ниндәй ҙә булһа бер ырыу йәки ҡәбиләнең генә түгел, ырыу-ҡәбиләләр берләшмәһенең, халыҡтың, хатта тотош этник региондың тарихы яҡтыртылыр булған.

«Тәуарих» һүҙе ғәрәп-фарсы сығышлы һәм «тарих» һүҙенең күплек мәғәнәһен белдерә. Был исемдәге жанрҙың төрки-башҡорт яҙма әҙәбиәте майҙанына сығыуы яҡынса XV-XVI быуаттарға ҡарай. Ул замандарға инде шәжәрә жанры һиҙелерлек эволюция кисергән, башҡорт ырыу-ҡәбиләләре берләшеп, берҙәм халыҡ булараҡ тамам ойошоп бөткән була[1]. Ғәрәп һәм фарсы телдәрендәге тарихи сығанаҡтарҙы, хеҙмәттәрҙе төрки теленә күпләп тәржемә итеүҙәр ҙә нәҡ ошо дәүергә тура килә[2]. Мәҫәлән, XVI быуат башында, дөрөҫөрәге, 1502 – 1504 йылдарҙа, Урта Азия төркиҙәре араһында «Тәуарих-и гузидә – Носратнамә» («Һайланма тарихтар – Еңеүҙәр китабы») исемле ҡулъяҙма китабы киң тарала һәм популяр була. Ул асылда Рәшидетдин Һамаданиҙың (1247 – 1318) атаҡлы «Жәмиғ әт-тәуарих» («Тарихтар тупланмаһы»), Низаметдин Шамиҙың (1392 – 1393 йылдар тирәһендә тыуған) «Зафарнамә» («Өҫтөнлөк китабы»), Алатдин Жүвәйниҙең (1226 – 1283) «Тарих-и жиһанһуш» («Йыһанды яулап алыусы тарихы»), Хамидулла Ҡәзвиниҙең (1281–1282 йылдар тирәһендә тыуған) «Тарих-и гузидә» («Һайланма тарих») әҫәрҙәренең өлөшләтә тәржемәһенән ғибәрәт. 1558 йылда йәнә Үтәмеш-хажи исемле авторҙың «Сыңғыҙнамә», 1602 йылда Ҡадырғәли Жалаириҙың «Жәмиғ әт-тәуарих» тигән китаптары яҙыла һәм таралыу таба. Уларҙың икеһендә лә Иран тарихсыһы Рәшидетдиндең үрҙә телгә алынған әҫәренең айырым бүлектәренән тәржемәләр бар.

Саф төрки тәуарихтарҙың яҙыла башлауына тап ошондай факторҙар ыңғай йоғонто яһай һәм уңайлы ерлек әҙерләй. Уҙған быуаттарҙа башҡорттар араһында был тип әҫәрҙәрҙән бигерәк тә билдәһеҙ авторҙың «Сыңғыҙнамә»

Миңлеғәле Нәзерғолов (1953) Йылайыр районының Ишбулды ауылында тыуған. БДУ-ның филология факультетын тамамлаған, 1980 йылдан бирле Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй. Филология фәндәре докторы, БР һәм РФ Яҙыусылар союзы ағзаһы.
Ҡәләмдәшебеҙҙе күркәм юбилейы менән ҡотлайбыҙ!

һәм Хисаметдин Мөслимиҙең «Тәуарих-и Болғария» китаптары популяр була. Уларҙың ҡулъяҙма күсермәләрен, баҫма варианттарын халыҡта әле лә йыш осратырға мөмкин. Мәҫәлән, 1989 йылдың йәйендә Башҡортостандың Йылайыр районы Ҡашҡар ауылынан ошо юлдарҙың авторы тарафынан «Сыңғыҙнамә»нең фрагмент хәлендәге бик боронғо бер күсермәһе табып алып ҡайтылды. Был ҡомартҡылар шулай уҡ илебеҙҙең бик күп китапхана һәм архив фондтарында һаҡлана.

Аноним «Сыңғыҙнамә» әҫәренең яҙылыу ваҡыты хаҡында аныҡ ҡына фекер йөрөтөүе ҡыйын – беҙҙең көндәргәсә һаҡланып ҡалған текстарҙа ул күрһәтелмәгән. Мәгәр, уның Сәйет Йәғәфәр етәкселегендәге 1681–1683 йылдарҙағы башҡорт яуы тураһындағы хикәйәт менән тамамланыуынан сығып, XVII йөҙ йыллыҡ аҙаҡтарында ижад ителгән, тип фараз ҡылырға мөмкин. Татар тарихсыһы М. А. Усманов үҙенең «XVII-XVIII быуат татар тарихи сығанаҡтары» (Ҡазан, 1972) исемле хеҙмәтендә шундайыраҡ фекер әйтә. Ләкин әҫәрҙең элгәргерәк варианттары булыуы хаҡында ла мәғлүмәттәр бар. Мәҫәлән, 1925 йылда донъя күргән «Татар әдәбияты тарихы. Феодализм дәвере» китабында Ғәли Рәхим (Мөхәмметғәли Мөхәмметшакир улы Әбдрәхимов) Ғәлимйән Баруди китапханаһында «Сыңғыҙнамә»нең 1635 йылға ҡараған күсермәһенең киҫәге һаҡланыуы хаҡында яҙа, ә исеме бөтә донъяға таралған башҡорт ғалимы Зәки Вәлиди Туған (1890 – 1970) үҙенең «Рус археографик йәмғиәтенең Көнсығыш бүлеге яҙмалары» серияһында (Петроград, 1915, XXII том) баҫылып сыҡҡан мәҡәләһендә XX быуат башында башҡорттарҙа 1610 – 1611 йылдарға нисбәтле ҡулъяҙма нөсхәне осратыуы тураһында хәбәр итә. Икенсе башҡорт эмигрант ғалимы Абдулҡадир Инан (Фәтхелҡадир Мостафа улы Сөләймәнов, 1889 – 1976) иһә, үҙенең күп яҡлы тарихи-сағыштырма тикшеренеүҙәре һөҙөмтәһендә, «Сыңғыҙнамә»нең яҙылыу замананы XVI быуаттан да һуң булмаҫҡа тейеш, тигән һығымтаға килә[3].

Тимәк, ҡомартҡының беҙҙең көндәргә килеп еткән баҫма (ул 1822 йылда Ибраһим Хәлфин һәм 1882 йылда Рәхимйән Йыһаншин тырышлыҡтары менән Ҡазанда ике тапҡыр нәшер ителгән) һәм күсермә нөсхәләре боронғораҡ тәуарихтарҙың тулыландырылған варианттары булыуы бик ихтимал. Әҫәрҙең башҡорт тарихсыһы һәм шағиры Ғарифулла Кейековтың (1861– 1918) яҙма мираҫында һаҡланған варианты ла ошо уҡ фекерҙе нығыта[4].

Әйтергә кәрәк, йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө буйынса Көньяҡ Уралда ижад ителгән «Сыңғыҙнамә» шул уҡ исемдәге Урта Азия ҡомартҡыһынан күпкә айырыла. «Сыңғыҙ хаҡындағы китап» (ҡайһы бер күсермәләрҙә – «дәфтәр») тип аталһа ла, уның бер генә бүлеге Сыңғыҙ ханға арналған һәм унда төп геройҙың яугирлыҡ эшмәкәрлеге, хәрби походтары түгел, ә донъяға килеүенән алып тәхеткә ултырыуына тиклемге тормошо һәм шуға бәйле хәл-ваҡиғалар һүрәтләнгән.

Композицион йәһәттән аноним «Сыңғыҙнамә» инешкә һәм алты «дастан»ға (ҡайһы бер күсермәләрҙә – «ҡисса») бүленә. Инештә Сыңғыҙ хандың нәҫел-нәсәп силсиләһе бирелгән. Генеалогия дини-мифик геройҙар – Нух пәйғәмбәр һәм уның улы Йәфәттән башлана ла Сыңғыҙҙың 12-се быуын нәҫеле Борһан солтан исеме менән барып ослана.

Әҫәрҙең төп өлөшөн тәшкил иткән бүлектәр жанр һәм күләм йәһәтенән төрлө-төрлө. Автор уларҙың һәммәһен дә «дастан» (йәки «ҡисса») тип атаһа ла, тәүге өс бүлек һуңғыларынан ҡырҡа айырылып тора. Сыңғыҙ хан, Аҡһаҡ Тимер, Ғайса улы Әмәт хаҡындағы бүлектәр ысын мәғәнәһендәге әҙәби әҫәрҙәр булып ҡабул ителә. Уларҙың һәр береһенең үҙаллы сюжеты, композицияһы, образдар системаһы бар. Был өс бүлекте «дастандар» тип атау бик үк дөрөҫ булмаҫ. Жанр тәбиғәте менән улар күберәк ҡиссаға тартым. Сөнки, мәғлүм

булыуынса, дастандарҙың төп жанр үҙенсәлектәре ҡаһарманлыҡ йәки мөхәббәт сюжетына ҡоролған шиғри йәки шиғыр менән проза аралашҡан формалағы ҙур эпик әҫәрҙәрҙә сағылһа, ҡиссаларҙыҡы сәсмә рәүештә яҙылған сағыштырмаса бәләкәй күләмле тарихи-әҙәби әҫәрҙәрҙә кәүҙәләнеш таба[5]. Һуңғы өс бүлектә урта быуат көнсығыш агиографик әҙәбиәте һәм шәжәрә жанры традициялары үҙен ныҡ һиҙҙерә. Улар асылда хандар, батшалар исеме теҙмәләренән һәм шулар менән аралашҡан кескәй легенда һәм риүәйәттәрҙән тора.

Ҡомартҡылағы айырым мотивтар сығышы менән урта быуат ғәрәп, фарсы, монгол һәм дөйөм төрки-әҙәби ҡомартҡыларына, шул иҫәптән Жүвәйниҙең «Тарих-и жиһанһуш», Рәшидетдиндең «Жәмиғ әт-тәуарих», монголдарҙың «Юань чао би ши» («Ҡәҙерле риүәйәт») һәм «Алтан дептер» («Алтын дәфтәр») әҫәрҙәренә, йәнә лә «Китабы деде-и Ҡорҡут» («Ҡорҡот-ата китабы») һәм Әбүлғазиҙың «Шәжәрә-и тәрк» («Төркиҙәр шәжәрәһе») кеүек яҙмаларға барып тоташа.

Тәуарихтың һәр бүлегендә тиерлек боронғо башҡорт шәжәрәләре менән бәйләнеш күҙәтелә. Мәҫәлән, беренсе бүлектәге ырыу башлыҡтарының ханды эҙләп табып, үҙ илдәренә алып ҡайтыуҙарына бәйле мотив Ҡара табын ырыуы шәжәрәһендә, икенсе бүлектәге Самат хан менән аждаһаға ҡағылышлы легенда Юрматы ырыуы шәжәрәһендә осрай. «Сыңғыҙнамә»лә шулай уҡ башҡорт фольклоры менән ауаздашлыҡ көслө. Әйтәйек, Ғөләмәлек Күркле һәм Аланғу һылыуҙарға бәйле ғәжәйеп хәл-ваҡиғалар күпмелер айырмалыҡлы рәүештә «Түңгәүерҙәр ҡәбиләһе» һәм «Бөрйәндәр хан заманында» тигән легендаларҙа сағылыш алғандар, Аҡһаҡ Тимергә арналған ҡиссаның төп мотивы Буяғым хан тураһындағы боронғо легендалы йыр өсөн, ә Бүдәнәтәй менән Билгүтәй аҡһаҡалдарҙың әйткән васыят һүҙе күп йәһәттән «Яҡшы ҡатын һәм яман ҡатын», «Яҡшы кеше һәм яман кеше», «Дөрөҫ һүҙ», «Йырау һүҙе», «Маҡтау» кеүек дидактик ҡобайырҙар өсөн уртаҡ.

Өҫтәп шуны ла әйтергә кәрәк: тәуарихтағы ҡайһы бер мотивтар XIX-XX быуат баштарында Тажетдин Ялсығол, Ғәли Соҡорой, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Ғарифулла Кейеков, Шәйехзада Бабич әҫәрҙәренә килеп инә һәм дауам итә. Тәүге бүлегенең төп геройҙары булып башлыса башҡорт ырыу башлыҡтары сығыш яһауы, һуңғы ике бүлектә («Фасыл фи бәйән дастан фи Идегәбәк», «Фасыл фи бәйән дастан фи әттарих») күберәк Көньяҡ Уралда барған хәл-ваҡиғалар, башҡорт яуҙары тасуир ителеүе һәм текста «алыҫ», «шыпа һуҡыр», «инеү», «кәмә», «шоңҡар», «ҡала» кеүек нәғеҙ башҡорт һүҙҙәре һәм һүҙ формалары йыш осрауы ла «Сыңғыҙнамә»не башҡорт ерлегенә яҡынайта. Ҡомартҡының ошондай үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, А. Инан, һуңыраҡ Ғ. Хөсәйенов уның авторы башҡорт булыуы ихтималлығына күрһәттеләр[6].

Жанр тәбиғәтенең ҡатмарлы синкретик характерҙа булыуы, әлбиттә, «Сыңғыҙнамә»нең тел-стиль сараларына ла эҙен һалмай ҡалмаған. Автор инештә һәм һуңғы өс бүлектә хикәйәләүҙең шәжәрәгә һәм дини агиографик әҙәбиәткә хас алымдарына өҫтөнлөк бирһә, тәүге өс бүлектә ваҡиғаларҙы ҡисса һәм хикәйәттәрҙәгесә иркенләп, тәфсилләп бәйән итә. Ул ғына ла түгел, халыҡ мәҡәлдәрен, әйтемдәрҙе, ҡанатлы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе мул ҡулланып яҙа, ҡайһы бер фекерҙәрен, уйхистәрен шиғри юлдар аша ла еткерә.

Бүдәнәтәй менән Билгүтәйҙең васыят һүҙҙәре, мәҫәлән, тотошлайы менән тиерлек халыҡ мәҡәлдәренән туҡылған:

«Бүдәнәтәй, Билгүтәй әйделәр: «Ай жиңгә! Безнең ғаҡыл, васыят, өгөт улдыр кем: Бу энеләремез сиңә, тәҡи бәкләренә, йәнә ил олуғларына яман улалар. Яхшы тотар. Имде беленләр: уңар йортның нишаны, билгесе бу торор: жаудин илен күп итер; ҡала төбөн үҙ

5 «Ағиҙел», №9.

итер; тәрәзәсен, түбәсен киң итер; жау илгә, ят нөкәргә серен әйтмәсләр; ололарын түргә кечерер, кечеләрен хеҙмәт ҡылдырыр. Йәнә беленләр кем: уңмаҫ йортның нишаны бу торор: үҙ йортын яманлар, кеше йортын маҡтар; үҙ ағасын яманлар, кеше ағасын маҡтар; үҙ ыруғын яманлар, кеше ыруғын маҡтар; олосы торор, кечесе сүзләр; атасы торор, уғлы сүзләр, мәғкәлче булыр. Ерән атҡа менгән ҡыҙыл йөзле уғландин киңәш сораған – ул кеше кеше булып йорт көтмәҫ; ил утаған ил булса, ул ил ил булмаҫ; мал көтмәгән мал көтсә, ҡыу үләнне утлатыр; ҡош чөймәгән ҡош чөйсә, «Ҡарға берлән ҡаҙ алырмын!» – дир; төйә көтмәгән төйә көтсә, «Кеше атын ейәрмен!» – дир; күн күрмәгән күн күрсә, «Күн итекне кейәмен!» – дир; мал тапмаған мал тапса, «Кеше күҙгә алмаймын!» – дир. Анындик тыуар көтмәгән тыуар көтөп, малсызлар маллы булып, безнең бу энеләремезне андағ кешеләр аҙдырыр», – диделәр. «Һәр йәнә белмәгәнләр белерләр, үгрәнмәгәнләр үгрәнерләр, – диделәр. – Моңа дәлил сүз дә һәм бардыр. Икмәкчедән киңәш сорамағыл, ҡасабчыдан киңәш сорамағыл. Күргән күргәнен әйтер, күтәргән икмәген сатыр. Имде тәнресенә тәүбә ҡылсын! Олуғлардин, бәкләрдин киңәш сорасын! Имде васыятым, өгөтөм, әйтер сүзем мондин артыҡ юҡтыр», – диделәр...»

Әйткәндәй, халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәр әҫәрҙең бүтән өлөштәрендә лә йыш осрай. Бына уларҙың бер нисәһе: «Боланға эйәргән чәчәккә аунар, дуңғыҙға эйәргән балчыҡҡа аунар», «Күргән күргәнен әйтер, күтәргән икмәген сатыр», «Үҙ йортон яманлаған үҙгә* йортта сүгүш булыр**», «Анасын яманлаған ят дошманға тотҡон булыр», «Үҙ кешесен яманлаған ят дошманға хур булыр», «Ғаҡыллылар белерләр, ғаҡылсызлар көлөрләр» һәм башҡалар.

Ҡомартҡыла боронғо миф һәм әкиәттәргә хас һүрәтләү алымдары ла ҙур урын тота. Мәҫәлән, Ғөләмәлек Күркле әҙәми заттан түгел, ә ҡояш нурынан ауырға ҡала. Бындай хәлде хурлыҡ тип ҡабул иткән Алтын хан үҙенең ҡыҙын «ҡырҡ ҡыҙ-ҡыны, күк күгәрсене, алтын ҡоро, тутыйғошо, һүнмәҫ сырағы, төкәнмәҫ аҙығы менән Тора тауынан Төн диңгеҙенә алтын кәмәгә һалып» ебәрә. Ғөләмәлек Күркле үҙе лә ғәҙәттәге ер ҡыҙы түгел. Ул ҡарап көлһә – ҡороған ағас яңынан йәнләнеп, япраҡланып үҫеп китә, сәсен тараһа – сәсенән ынйылар түгелә, төкөрһә – төкөрөктәре алтын булып ергә төшә. Унының ҡояштан түлләнеп тапҡан улы Дуйын Баян да, үҙе вафат булғандан һуң, кәләше Аланғу бүлмәһенә ҡояш нуры булып инеп, «йылҡы яллы күк бүре» төҫөндә ярыҡтан кире сыға килеп ла «Сыңғыҙ! Сыңғыҙ!» – тип ҡысҡыра, урман эсенә инеп юғала. Шунан Аланғу йөклө ҡала һәм, көнө, мәле еткәс, ғәжәйеп матур һынлы бер ир бала таба. Уға Сыңғыҙ тип исем ҡушалар...

Икенсе бүлектең төп геройы Аҡһаҡ Тимерҙең донъяға килеүе лә ғәҙәттәгесә түгел. Ул ваҡиғала ла тылсымдың, илаһи көстөң ҡатнашы бар. Хәйер, тексҡа мөрәжәғәт итәйек:

«Һиндостан шәһәрендә Чынғыз хан урлы Жадай хан ханлыҡ ҡылыр ирде. Көнләрдә бер көн ятып (торор) ирде. Яман дөш күрде. Ҡурҡып-сискәнеп уйғанды. Дер-дер ҡалтырап торды. Фалкәрләрне, фал бағыучыларны жыйдырды. Талағын ҡаратты, аҡтартты.

Фалкәрләр, фал бағыучылар әйделәр: «Ай, ханым! Талағында андағ күренер кем: үҙ милкеңдә, Алмалыҡ дигән ауылда бер кешедин хәтәреңез бар торор. Ул кеше ҡырҡчы уғлы, ҡазанчы уғлы, улаҡчы, тауыҡчы уғлы, тухчы уғлы Тарағай дигән кешедер, – диделәр. – Әммә ул Тарағайның нишаны, билгесе улдыр кем: жауырынында миңе бар, сул күҙендә ағы бар. Ул Тарағайның хатуны йөкле торыр. Аның ҡорсағындағы баласындин әжәлең, үлемең етеп торор», – диделәр.

* Үҙгә — бүтән, башка.

** Сүгүш булыр — бында: һүгелеп йәшәр.

Анда Жадай хан фал бағыучылардин бу сүзне ишетеп торор. Ул Алмалыҡ ауылындағы Тарағайны эҙләтеп таптырды. Жадай ханның ҡашыға алып килделәр. Ҡарадылар. Ул әйтелгән нишанлары анда бар ирде. Жауырынында миңе, сул күҙендә ағы бар торор.

Жадай хан сорады: «Ай, Тарағай! Синең йөкле хатуның бармы?» – диде. Ул Тарағай әйде: «Бәли*, бардыр», – диде. Андин суң Жадай хан әйде: «Ай, Тарағай! Синең хатуның ҡорсағындағы балаң мине үлтерер ирмеш. Ул туғмастин борон мин аны үлтерермен!» – дип Тарағайның хатунын алдырды.

Ул ахмаҡ тәҡдирне тәдбир** берлән бозмаҡ теләде. Әммә хаҡ тәғәләнең тәҡдире нитәк боҙолор. Андин суң киңәйттеләр. «Бу хатунны үлтерәлик, эчен яралиҡ», – диделәр. Хан үҙе әйде: «Бу хатунның ҡорсағындағы балаҫын үлтерер булсаңыз, ул ҡорсағындағы баласыны тезләп үлтереӊ! Анасы үлмәҫен!» – диде.

Андин суң ул хатунны йыҡып, андағ тезләделәр кем: исе-усы китте, үлә ҡалды. Андин хан әйде: «Имде баласы дәгел, анасы һәм үлә язды булғай кем, ебәреңләр», – диде. Андин суң ул хатунны күтәреп алып, арбаға салып киттеләр.

Андин суң Жадай хан: «Ҡурҡынычтин ҡотолдым!» – дип торор ирде. Ханлыҡҡа мәғрүр, мәшғүл ирде.

Андин йәнә бер әнчә көнләрдин суң ул меҫкен тезләп үлгән хатунның күҙе ярды, бер ир уғлан туғдырды. Ул уғланны алып баҡтытар ирсә, бер аяҡы аҡсаҡ ирде. Андағ әйделәр кем: «Ошбундағ имгәнтин үлмәдең, ҡотолоп турдың, жаның тимер икәндер», – диделәр. Ул уғланның атын ул сәбәптин Аҡсаҡ Тимер ҡундылар».

Шулай итеп, тәуарихтағы, бигерәк тә уның беренсе һәм икенсе бүлектәрендәге айырым юлдар фантастик һәм тылсымлы әкиәттәргә ауаздаш яңғырай. Әкиәти алымдарҙы, халыҡ ижадының ошо төрөнә хас һүрәтләү сараларын автор бер ҙә юҡтан ғына ҡулланмағандыр, тип уйларға кәрәк. Уның Сынғыҙ хан, Аҡһаҡ Тимер кеүек шәхестәрҙе ерҙә тейешле миссия үтәү өсөн Хаҡ Тәғәлә махсус яратҡанлығын һыҙыҡ өҫтөнә алырға теләгәнлеге бында айырым-асыҡ.

Шуныһы ла ҡыҙыҡлы: монголдарҙың үрҙә телгә алынған «Юань чао би ши» әҫәрендә лә Сыңғыҙҙың донъяға килеүе серле – мөғжизәле итеп бирелгән. Үҙенең ауырға ҡалыуын әсәһе Аланғу (ҡулъяҙмала: Аланхоа), мәҫәлән, бында түбәндәгесә бәйән итә: «һәр төн тирмәнең яҡтылыҡ һирпеп торған өҫкө тишегенән һәм ишектән минең янға алтын төҫөндәге кеше инеп, ҡорһағымды һыйпай торғайны; унан бөркөлгән яҡтылыҡ нурҙары ҡарыныма үтеп керҙе...»[7]

XIX быуаттың утыҙынсы йылдарында күренекле ғалим-ориенталист В.И.Даль түбәндәгеләрҙе яҙып ҡалдырған: «Уларҙың (башҡорттарҙың. – **М. Н.**) әкиәттәрендә һәм йырҙарында ырыу башлығы итеп йыш ҡына һоҡланғыс Сыңғыҙ хан телгә алына. Уның атаһын ҡояш нурынан түлләнгән ғиффәтле ҡыҙ тапҡан булһа, уның үҙен нур булып килеп инеп, йылҡы яллы күк бүре булып сығып киткән заттан ауырға ҡалған тол Аланғу тыуҙырған, имеш...»[8]

Был һүҙҙәр Сыңғыҙ хан тураһындағы сюжеттарҙың халҡыбыҙҙа элек-электән яҙма рәүештә лә, телдән һөйләү рәүешендә лә киң таралғанлығын йәнә бер дәлилләп тора. Моғайын да, улар башта фольклор вариантында йәшәгәндер. Әгәр шулай икән, әкиәттәргә хас тылсым, фантастика, гиперболика кеүек алымдарҙың йыш ҡулланылыуы үҙенән-үҙе аңлашыла.

Үрҙә килтерелгән һуңғы өҙөктә иғтибарҙы йәлеп иткән тағы бер нәмә бар. Ул да булһа – төш күреү һәм уны юрау эпизоды. Жадай хандың төшө алда барасаҡ ваҡиғаларға тон бирә, әҫәрҙең үҙенсә бер серле асҡысы булып ҡабул ителә. Фалкәрҙәрҙең юрамы ысынлап та юш килә: һуңыраҡ хан үҙе тыумаҫ борон уҡ йәнен ҡыйҙым тип һанап йөрөгән егеттең ҡулынан һәләк булып ҡала.

*Бәли — эйе, шулай.

** Тәдбир — берәй төрлө сара, ысул.

Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтергә кәрәк: төш күреү эпизоды – урта быуат көнсығыш әҙәбиәтендә ярайһы уҡ йыш ҡулланылған әҙәби сара. Байтаҡ ҡына поэмалар, дастандар, ҡиссалар төп геройҙарҙың береһенең төш күреүен һүрәтләүҙән башлана. Ул төш ниндәй ҙә булһа мәғәнәгә эйә. Әҫәрҙәге хәл-ваҡиғалар үҫешенә көслө йоғонто яһай, айырым геройҙарҙың яҙмышын алдан иҫкәртә. Был әҙәби сара заманында Урал-Волга буйы төрки әҙәбиәтендә лә актив ҡулланылған. Миҫал итеп Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-и Йософ», Ҡотбиҙың «Хөсрәү вә Ширин», Сәйф Сарайҙың «Сөһәил вә Гөлдөрсөн», Баһауиҙың «Ҡисса-и Буҙйегет» әҫәрҙәрен телгә алырға була.

Әҙәби сара булараҡ төш күреүҙе ҡулланыу һәм шуға ярашлы сюжет ҡороу Хисаметдин Мөслимиҙең «Тәуарих-и Болғария» (тулы исеме «Рисалә-и тәуарих-и Болғария вә ҙикр-и мәүләнә хәҙрәт-и Аҡсаҡ Тимер вә хараб-и шәһри Болғар» – «Болғар тарихтарын хикәйәләү һәм хәҙрәт Аҡһаҡ Тимерҙе, шулай уҡ Болғар ҡалаһының емерелеүен хәтергә төшөрөү») әҫәренә лә хас. Ундағы Аҡһаҡ Тимер үҙе төштәр күрә һәм төшөнә ингән Хызыр Ильяс әмере буйынса эш итә. Хәйер, был әҫәр бер Аҡһаҡ Тимер тураһында ғына түгел. Ул – синкретик жанрлы, ҡатмарлы структуралы тәуарих. Уның туҡымаһында, нәфис әҙәбиәт элементтары менән бергә, донъяны танып белеүҙең тарих, география, астрономия, философия, фольклор, теология, лингвистика кеүек бүтән өлкәләренә ҡарар элементтарҙы ла осратырға мөмкин. Улар үҙ-ара сиратлашып, тығыҙ аралашып киләләр.

Композицияһы буйынса «Тәуарих-и Болғария» өс өлөшкә: инеш, төп һәм йомғаҡ өлөштәргә бүленә.

Инештә автор үҙе менән таныштыра, әҫәрҙең яҙылыу ваҡытын һәм урынын әйтә.

Төп өлөш ике бүлектән (тәуарихта: мәҡәлә) ғибәрәт. Тәүгеһе, үҙ сиратында, төрлө күләмле һәм йөкмәткеле һигеҙ бүлексәгә бүленә. Унда Башҡортостан тәбиғәтенә, географияһына ҡағылышлы мәғлүмәттәр ҙә бар. Икенсе бүлек заманында фольклорҙа ла, яҙма әҙәбиәттә лә киң таралған хан ҡыҙы Туйбикәгә бәйле легенда менән асыла. Унан һуң килгән ваҡ бүлексәләрҙә Мөхәмәт пәйғәмбәрҙең эйәрсендәрен күргән ирҙәрҙең һәм ҡатындарҙың, шулай уҡ танылған дин әһелдәренең исемдәре атала һәм уларҙың ҡәбер урындары күрһәтелә. Был бүлексәләр урта быуат көнсығыш этнографик әҙәбиәте традицияларында яҙылған. Уларҙа боронғо башҡорт һәм татар шәжәрәләре мәғлүмәттәре лә киң файҙаланылған.

Әҫәрҙең йомғаҡ өлөшө (хәтимә) тотошлайы менән Аҡһаҡ Тимергә бағышланған. «Сыңғыҙнамә»нән айырмалы рәүештә, бында төп геройҙың бала сағы, йәшлек йылдары һүрәтләнмәй, бөтә иғтибар уның һәләкәтле яуҙарын тасуирлауға бирелә.

Стиль үҙенсәлектәре хаҡында һүҙ башларҙан элек шуны билдәләп үтеү кәрәктер: художество-эстетик сифаттары буйынса Х. Мөслими әҫәре билдәһеҙ авторҙың «Сыңғыҙнамә»һенән күпкә ҡайтышыраҡ, түбәнерәк. Төп өлөшөнөң күпселек бүлексәләре ғәрәп, фарсы һүҙҙәре менән ныҡ сыбарланған ауыр һәм ҡатмарлы телдә яҙылған, уларҙа, тасуири хикәйәләүҙән бигерәк, факттарҙы атау, мәғлүмәтлелек өҫтөнлөк итә. «Әнһари мәшһүрләр (мәшһүр йылғалар) бәйәнендә» бүлексәһенән алынған түбәндәге өҙөк быға асыҡ миҫал була ала:

«Бу Уралның жаниби ғәрбисендән* бәйән идәлем: нәһер Ҡыйғудыр – Әй даръясына ҡояр. Әй дарьясы Өфө иделенә ҡояр. «Танып» дидеке вә һәм «Бөрө» дидеке йылға Аҡ Иделгә ҡояр. Үҙән йылғасы Өфө иделенә ҡояр. Нәһер Базы, Сәрмәсән, Ҡармасан Аҡ Иделгә ҡояр. Нәһер Сөн һәм Аҡ Иделгә ҡояр. Нәһер Ыҡ һәм анда ҡояр. Нәһер Мәлә Ыҡҡа ҡояр. Ирәнә вә һәм Зәй йылғасы, Бөргә ҡушылып, Аҡ Иделгә ҡояр. Мәшһүр

Жаниби ғәрби – көнбайыш.

йылғалардан «Аҡ Идел чуашисе» диерләр вә һәм «Кичеү» дидеке йылға Аҡ Иделгә ҡоярлар. Чулман иделе һәм Ноҡрат иделе Аҡ Иделгә ҡояр.

Аҡ Иделнең Чулман иделе илән ҡушылдыҡы ердә бер тағ[*] вардыр. Аны «Йүнчә» диерләр. Анда бер чишмә вардыр. Аны «Чишмә-и рижал әл-ғәйеп»[**] диерләр. Анда рижал әл-ғәйепнең ҡотобыны[***] дәфен әйләмешләр[****]. Исеме Ғәбдессамаддыр. Жаниби шималдан[5*] Аҡ Идел илән Чулман иделенә ҡойған чишмәләр чуҡтыр. Әммә йылғалардан мәшһүре Инеш йылғасыдыр. Чирмешән Йылғасы икедер, беренә «олуғ», беренә «кечек» димешләр. Аҡ Иделгә ҡойған йылғалар чуҡтыр... Ғәйре мәшһүр йылғалар (да) чуҡтыр, барын язмаҡ мөмкин дәгелдер. «Атлас» китабында күренгән бунлардыр...»[9]

Әҫәрҙә Ерҙең һәм йыһандың ғәжәйеп серле күренештәрен тасуирлауға ҙур урын бирелгән. Бындай осраҡтарҙа Х. Мөслими йыш ҡына төрлө мифтарға, легендаларға таяна, уларҙан өҙөктәр килтерә.

«Бәхри Жөржән[6*] – бу диңгеҙ Ҡәмәр[7*] тәрбиәсеңдә дер. Мәшриҡтән[8*] чыкар. Бу диңгездә тағ кеби аждаһалар вардыр. Вә бу диңгездә атаулар[9*] вардыр. Атауларында әдәм сүрәтле женләр көнтөн ашамаҡ-эчмәк, вә чалғы чалмаҡта[10*] вә рәҡис дәүран[11*] әйләмәктә. Бу женләрнең шәһәрене «Магин» диерләр. һинд лөғәтенчә «ожмах нәзире»[12*] димәктер. Вә бу атауда әнуағ[13*] жимеш ағачлары чуҡтыр. Вә чишмәләре сөттән вә хәмердән аҡмыштыр. Өрмиә рәләйһиссәләм анларны дәғүәт итмәгә[14*] варды. Анлар аның сүзене ҡабул әйләмәделәр. «Әгәр беҙгә сәнең «ожмах», «тамуғ» дидеке сүзең раҫ булса, беҙгә донъяда ожмах вирсен, ахирәттә[*] тамуғ берлә ғазап әйләсен», – диделәр.

Өрмиә ғәләйһиссәләм анларның сүзләрене аллаһы табаракә вә тәғәләйә ғарыз әйләде[**]. Аллаһы тәғәлә, анларның ғазабыны тәьхир идел[***], Исрафил ғәләйһиссәләмнең һәләк сурына[****] дәкен[5*] ожмах нәзире ҡылды вә әнуағ[6*] чишмәләр ағызды. Анларның әғдәде йөҙ сиксән мең мөзәккәр[7*], йөҙ сиксән мең мөғәннәҫтер[8*]. Уғлан туғмаҡ улмаз[9*], вә Һәм ҡари улмазлар[10*], иллә йәүем әл-фөзәғ[11*] анлар ғиш-ғишрәттәдер[12*]. Безнең төркидә ул шәһәрне «барсаң – ҡайтмаҫ» диерләр. Хәзрәти Искәндәр Зөлҡәрнәйен ул шәһәрә уғрадылар[13*]. Хаҡ табаракә вә тәғәләнең ғәжәйеп сонғына[14*] баҡып сәждә әйләде...»[10]

Тәбиғәттең серҙәрен, тарихи ваҡиғаларҙың айышын автор ошо рәүешле күберәк дингә, Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәтенә бәйләп аңлатырға тырыша. Һөҙөмтәлә әҫәр тексына ғәрәп телендәге байтаҡ дини һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, хатта тотош һөйләмдәр килеп ингән, һәм улар ябай уҡыусының йөкмәткене ҡабул итеүен, аңлауын шаҡтай ауырлаштыра. Шулай ҙа ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына булһа ла сюжетлылыҡтың, тасуирилыҡтың булыуы, диалог һәм монологтарҙың ҡулланылыуы бындай бүлексәләргә

---

[*] *Тағ — тау.*
[**] *«Чишмә-и рижал әл-ғәйеп» — «Ғәйеп булған ир-егеттәр шишмәһе».*
[***] *Ҡотоб — башлыҡ, етәксе.*
[****] *Дәфен әйләү — ерләү.*
[5*] *Жаниби шимал — төньяк*
[6*] *Бәхри Жөржән — Каспий диңгеҙе.*
[7*] *Кәмәр — Ай.*
[8*] *Мәшриҡ — көнсығыш.*
[9*] *Атау — утрау.*
[10*] *Чалғы чалмаҡ — чалғы (музыка ҡоралы) уйнау.*
[11*] *Рәҡис дәүран әйләү — өйөрөлөп бейеү.*
[12*] *Ожмах нәзире — ожмах кеүек.*
[13*] *Әнуағ — төрлө-төрлө.*
[14*] *Дәғүәт итмәгә — дингә өндәргә.*

[*] *Ахирәт — «теге» донъя.*
[**] *Ғарыз әйләү — еткереү.*
[***] *Тәьхир идеү — кисектереү.*
[****] *Һәләк суры — һәләк булыу бәхетһеҙлеге.*
[5*] *Дәкен — тиклем.*
[6*] *Әнуағ — иҫәп, һан.*
[7*] *Мөзәккәр — ир-егет.*
[8*] *Мөғәннәҫ — ҡатын-ҡыҙ.*
[9*] *Туғмаҡ улмаз — тыуҙырмау.*
[10*] *Ҡари улмау — ҡартаймау.*
[11*] *Йәүем әл-фөзәғ — Ҡиәмәткә тиклемге һәр көндә.*
[12*] *Ғиш-ғишрәт — кәйеф-сафа.*
[13*] *Уғрау — барыу.*
[14*] *Ғәжәйеп сонғы — ғәжәйеп эштәре.*

беллетристик төҫ бирә, уларҙы күпмелер дәрәжәлә ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итә.

Әгәр төп өлөшөнөң беренсе бүлегендә «Фасыл фи әш-шөһүр әл-ғәрәбиә» («Ғәрәпсә аталмыш айҙар тураһындағы бүлек»), «Фасыл фи ғәжәйеп эл-әбхар» («Диңгеҙҙәргә бәйле ғәжәйеп хәл-күренештәр тураһындағы бүлек»), «Фасыл фи ғәжәйеп әл-ғарыз» («Географиҡ киңлектәге ғәжәйеп хәл-күренештәр тураһындағы бүлек») кеүек бүлексәләр үҙҙәренең нарративлығы менән дини-дидактик йөкмәткеле күп һандағы хикмәт, парсаларҙы хәтерләтеп торһа, икенсе бүлекте асып ебәргән хан ҡыҙы Туйбикәгә ҡағылышлы сюжет һәм Аҡһаҡ Тимергә арналған йомғаҡ өлөш жанр тәбиғәте менән легенда, хикәйәт, ҡиссаға яҡын торалар.

«Сыңғыҙнамә» авторынан айырмалы рәүештә, Х. Мөслими барыһы хаҡында ла үҙ осороноң «китап теле» менән һөйләй, фәҡәт яҙма әҙәбиәткә хас булған тел саралары менән эш итә. Халыҡсан йор һүҙлелек, мәҡәл-әйтемдәр, ҡанатлы фразалар ҡулланып бәйән итеү унның әҫәрендә бөтөнләй юҡ дәрәжәһендә. Аҡһаҡ Тимер ҡиссаһынан түбәндә килтерелгән өҙөк әйтелгәндәргә тағы бер дәлил:

«Тарихи һижрәтнең сикез йөҙ дә алтмыш икенче йылында Аҡсаҡ Тимерне Аллаһы тәғә мосаллат эйләде...[*] Ул хәҙрәт Миртимер Хытайның шәрҡи сәрхәдендә[**] Тәхти Сөләймән дидеке шәһәрнең ҡәрибендә[***] Алмалы дигән ауылдандыр. Ул заманда Хытайның падишаһы Чынгиз ирде. (Ул) кафыр ирде. Аны дин исламға дәғүәт эйләде. Ҡабул әйләмәдеге өчөн аны үлтерде вә Хытайның чуҡ шәһәрләрен харап эйләде. Ахырында хытай халҡы аңа бәйғәт вирделәр[****]. Хәражә[5*] риза улдылар. Хытайның йортона Чынгизның уғлы Торомтайны падишаһ эйләде.

Ул заманда ҡызылбашның[6*] Мошат дидеке шәһәрендә Надиршаһ исемле кемсәнә хоруж эйләде...[7*] Күп шәһәрләрне алды вә ғилмадан улғучыларны ҡатил эйләде...[8*] Вә ахырында Бохараны, вә һәм Сәмәрҡәндне, вә Үргәнчне вә Хиуаны алды. Ханларыны үлтерде, үҙенең батил мәҙһәбенә[9*] өндәде. Әһли сөннәтләр[10*] доға вә зарилыҡ әйләделәр. Аллаһы тәғә анларның доғаларыны ҡабул әйләде... вә Хызыр Зәндәне ебәрде. «Барғыл, ҡолом, Миртимерне (күр), Бохараға барсын. Анларны ҡызылбашлыҡтан хәлас әйләсен[11*]вә һәм Надиршаһны үлтерсен!» – диде...

(Хызыр Ильяс) Миртимернең төшөнә керде. «Әй, егет, тиҙлек үзрә[12*] Бохараға варғыл, инша-и Аллаһы тәғәлә. Ул Надир-шаһның үлеме сәнең әлеңдәдер[13*]. Сәнең башыңдан чуҡ эшләр кичсә кәрәктер, – диде. – Жәмиғ рәуахи Бохара[*] сәнең өчөн монтазирлардыр»[**], – диде. Бу рәүештә күреп уйғанды, сәждә-и шөкрә әйләде[***].

Әл-ҡисса[****], иртә тороп – Төркөстанның ул заманда ханы Нуғайбәк дигән ирде – аңа чуҡ хазина вирде, хәҙрәт Әхмәт Йәсәүинең ҡәберенә астана[5*] бина әйләмәк өчөн... Ҡырҡ бең ғәскәре илә ул арада Аҡсаҡ Тимер Бохараға кәлде, ҡәлғәне хисар идеп...[6*], ҡызылбаш бәғене әнуағ[7*] ғазап берлә үлтерде. Ҡалдыҡы ғәскәрене Бохараның олуғларына ҡол идеп тәҡсим әйләде[8*]. Бохарала ике ай торды...»[10]

Бындай юлдарҙан образлылыҡ, хис-

---

[*] *Мосаллат әйләу — хаким ҡылыу.*

[**] *Власть биреү; шәрҡи сәрхәд — көнсығыш сик.*

[***] *Ҡәриб — эргә, ян.*

[****] *Бәйғәт виреү — буйһоноу.*

[5*] *Хәраж — яһаҡ.*

[6*] *Ҡызылбаш — бында: иранлы.*

[7*] *Хоруж әйләү — бола сығарыу.*

[8*] *Ҡатил әйләү — үлтереү.*

[9*] *Батил мәзһәб — ялған юл.*

[10*] *Әһли сөннәт — сөнни мосолман халҡы.*

[11*] *Хәлас әйләү — ҡотҡарыу.*

[12*] *Тиҙлек үзрә — тиҙлек менән.*

[13*] *Әл — ҡул.*

[*] *Жәмиғ рәуахы Бохара — бөтә Бохара рухы.*

[**] *Монтазир — ышаныусы.*

[***] *Сәждә-и шөкрә әйләү — хөрмәт йөҙөнән тубыҡланып маңлайҙы ергә терәү.*

[****] *Әл-ҡисса — шулай итеп, ҡыҫҡаһы.*

[5*] *Астана бина әйләү — мавзолей төҙөү.*

[6*] *Хисар — ҡамап алыу.*

[7*] *Әнуағ — күп төрлө.*

[8*] *Тәҡсим әйләү — бүлеп биреү, таратыу.*

тойғо ҡатыш йәнле һәм мауыҡтырғыс хикәйәләү элементтарын эҙләү, әлбиттә, ҙур һөҙөмтә бирмәй. Уларға бары тик ҡоро нарративлыҡ, сюжетлылыҡ хас.

XIX быуат башҡорт яҙыусыһы Ғәли Соҡоройҙоң (1826–1889) «Тәуарих-и Болғария, йәки Тәҡриб-и Ғари» («Болғар тарихтары, йәки Ғариҙың яҡынса аңлатмалары») исемле әҫәре иһә был йәһәттән ҡыҙыҡлыраҡ та, әһәмиәтлерәк тә. Әлеге көндә Рәсәй Фәндәр академияһы Көнсығышты өйрәнеү институтының Санкт-Петербург филиалы фондында һаҡланған был тәуарих (шифры – B 2662) авторҙың улы Ғарифулла Кейеков күсермәһендә килеп еткән. Күләме – 61 ҡулъяҙма ҡағыҙ.

Әҫәр инеш һүҙҙән һәм төп өлөштән тора, һуңғыһы, үҙ сиратында, ете бүлеккә бүленгән. Инештә тәуарихтың яҙылыу һәм күсерелеү тарихы яҡтыртылған. Төп өлөштөң тәүге бүлеге үрҙә телгә алынған «Туйбикә» (фольклорҙа һәм яҙма әҙәбиәттә ул «Тутыйбикә», «Хан ҡыҙы», «Хан ҡыҙының фалиж булыуы» исемдәре менән дә билдәле) легендаһына арналған. Автор уның ҡыҫҡаса йөкмәткеһен бирә һәм уға ҡарата үҙенең мөнәсәбәтен дә белдереп үтә. Артабанғы бүлектә XVIII-XIX быуаттарҙа йәшәгән һәм Х. Мөслимиҙең «Тәуарих-и Болғария»һында хәтергә алынмаған ғалимдар, дин эшмәкәрҙәре тураһында библиографик мәғлүмәттәр бирелгән. Өсөнсө бүлектең үҙәгендә Аҡһаҡ Тимер образы һәм уның ҡылған эштәре тора. Дүртенсе бүлек Х. Мөслими тәуарихының тәүге бүлегенең етенсе бүлексәһенә иҫкәрмәләрҙән ғибәрәт. Ошонда уҡ Ғ. Соҡорой Көньяҡ Уралдың, Рәсәйҙең географик урынын, тәбиғәтен тасуирлай. «Робоғи мәскүн бәйәне» («Ерҙең кеше йәшәй торған дүрт өлөшө бәйәне») тип аталған бүлектә ул Ер шарының географик төҙөлөшөн күҙалларға ынтыла. Алтынсы бүлектә уҙған замандарҙа Урал-Волга буйҙарында йәшәгән уҡымышлыларҙың, мулла һәм мөҙәристәрҙең тормошона бәйле ҡыҙыҡлы ваҡиғалар һүрәтләнгән. Һуңғы бүлектә иһә автор XIX быуат татар тарихсыһы Хөсәйен Әмирхандың «Тәуарих-и Болғария» (1883) исемле китабын шәрехләй, төҙәтмәләр, өҫтәмәләр индерә.

Был әҫәргә лә, күренеүенсә, жанр синкретиклығы, идея-тематик сыбарлыҡ хас. Ғ. Соҡорой тарихи тема менән генә сикләнеп ҡалмай, география, биобиблиография, әҙәбиәт һәм дин мәсьәләләренә лә ҡағылып үтә, урыны-урыны менән үҙенең әҙәби ижад емештәренә мөрәжәғәт итә. Хикәйәләү барышында ул, мәҫәлән, үҙенең «Ҡафият әл-аҫар» («Рифмалы әҫәрҙәр»), «Әғләм һади» («Күренекле шәхестәр»), «Шәмғ әз-зия» («Шәм яҡтыһы»), «Жәмиғ әл-леуа» («Байраҡтар йыйыны»), «Ағъяны мази» («Үткән замандың абруйлы кешеләре»), «Нәсим әссаба» («Иртәнге йомшаҡ ел»), «Дибажа-и Фаиза» («Фаиза китабына инеш») кеүек ҡулъяҙма һәм баҫма китаптарын телгә ала, уларға һылтанмалар яһай. Тәуарих менән шулай уҡ «Мәдхи Ҡазан» («Ҡазанды маҡтау») әҫәре һәм Тажетдин Ялсығолдоң (1767 – 1838) «Тарихнамә-и болғар» («Болгарҙар тураһында тарихи яҙма») китабының Ғ. Соҡорой тарафынан башҡарылған күсермәһе араһында ла идея-тематик бәйләнеш күҙәтелә. Шулай итеп, «Тәуарих-и Болғария...» әҙиптең дөйөм ижады аша үткән, һәммә әҫәрҙәрен дә тиерлек бер епкә төйнәгән ҡомартҡы булып ҡабул ителә.

Әйткәнебеҙсә, Х.Мөслими әҫәренә ҡарағанда, Ғ. Соҡорой тәуарихы сағыштырмаса бай һәм мауыҡтырғыс тел менән яҙылған. Автор хәл-күренештәрҙе ҡоро атап ҡына үтмәй, йыш ҡына хистойғоло тасуирлауға күсеп китә, сағыштырыу, метафора, метанимия, эпитет кеүек ассоциатив һүрәтләү сараларын ҡулланып, образлы хикәйәләүгә бирелә. Текстан өҙөк:

«... Ул уҡ беҙ зыярат әйләмеш* мәҡәмдә боронғолар аҫары заһир булып** торадыр. Мәҫәлән, идел ярындан тағ

* *Зыярат әйләү — хөрмәт йөҙөнән барып күреү.*

** *Аҫар — бында: эҙ. Заһир булыу — асыҡ күренеп тороу.*

өҫтөнә бер чаҡрым миҡдары булыр. Ҡайу тағ өҫтөндә боронғолар мәҡәм[***] тотҡан нишаны[****] бар. Вә андин түбәнерәк ҡәбер ғәләмәте бар. Ағачлы ерләрдә. Вә аны ҡойма илә чолғап алғанлар. Вә һәм ҡәбер тигрәсе, тағ арасы кеби, чишмәле сазыраҡ ер кеби ағачлыҡтыр. Вә андин түбәнерәк мәҙкүр[*] чишмә бар. Ҡайу[**] чишмәнең сыулары олуғ айыу миҡдары түп-түгәрәк чүлмәк кеби таш эчендә торадыр. Вә чишмәнең тарафы тип-тигеҙ булып, униң артҡаны чүлмәк кеби айыуның һәр тарафындан бер-бер ағып торадыр. Вә андин ағып йөҙ сажин[***] миҡдары барып иделгә төшәдер. Вә бу илә ағып бармаҡыда өч-дүрт буй айыу миҡдары олуғ ташның өҫтөндән жулаб[****] арҡасы кебек тар юлдан ағып барадыр. Бу хәлләрнең барын әдәми эше кебек сәнғәт илә, хикмәт илә эшләгән кебек фәһемләнәдер...» (12б-13а биттәр).

Тәбиғәт күренештәренең ошолай сағыу буяуҙарҙа тасуирланыуы, моғайын, авторҙың тәжрибәле әҙип, танылған һүҙ оҫтаһы булыуынан да киләләр. Был юлдар шағирҙың «Зәй буйы», «Фасли яҙ» шиғырҙарын һәм Ирәкте ырыуы башҡорттары тарихын яҡтыртҡан «Тәзкирәти әл-әхуан вә әл-әхбаб» («Туғандарыбыҙ һәм яҡындарыбыҙ иҫтәлеге») исемле яҙмаһының айырым өлөштәрен хәтергә төшөрә.

«... Вә һәм мәҙкүр мулла Сибәғәтулла хәҙрәт Ури шәһәренә күчкәч, мулла Байморат Мөхәррәм улғыны килтергәндәр. Бохара-и Шәрифтә[5*] уҡып ҡайтҡан кешедер. Мәмсә ауылында дәрес әйткән. Андин Ҡазанға килгән. Дәүләте артып, йөрәкләнеп, һауа[6*] вә һәүәс[7*] илә әһли донъя[8*] сүрәтенә кергәндер. Әһли донъя кәсепләренә ҡатышып, байлар халҡы берлә халыҡланған. Ғилмаға[9*] бирелә торған мәғруф[10*] садаҡаларға гүзәл нәрҫә бирелмәсә, алмай икән. Шул сәбәпле Ҡазан байлары арасында сатыу малын ҡарағанда рәүнәкле[11*] күренмәсә, «Синең бу малыңны Байморат мулла садаҡа да алмас» дигән сүз шундан ҡалған. Бик ғали кейемдәр ясаған вә бик ғали ғимаратлар[12*] төҙөгән. Тамам Биҫтә байлары ҡиәфәтенә кергән. Әммә Бохара-и Шәрифкә барса да мәшәйех[13*] күралмаған, дигән. Танауы хушбуй еҫенә ярамай юҡары ҡарап ҡайтҡан...»

Тәуарихтың һуңғы, етенсе, бүлегенән килтерелгән был өҙөк тә художестволы образлылыҡҡа миҫал булырҙай. Байморат мулланың булмышы бик уңышлы деталдәрҙә асып бирелгән. Автор уның характерындағы кире һыҙаттарҙы туранан-тура тәнҡитләмәй, бының өсөн неҫкә юмор, сарказм алымдарын ҡуллана. Ҡазан байҙары телендә йөрөгән әйтемде лә индереп ебәреүе был алымдарҙы тағы ла балҡытып ебәргән һәм хикәйәләүҙе уғата йәнле һәм ҡыҙыҡлы иткән.

Әлбиттә, тәуарихында Ғ. Соҡорой фәҡәт художестволы алымдарға ғына өҫтөнлөк бирмәй, күпселегендә ғилми әҙәбиәткә хас булғанса тыныс тонда бәйән итә, уҡыусының иғтибарын мәғлүмәт һәм факттарға йүнәлтә, XIX быуатта йәшәгән һәм ижад иткән күренекле башҡорт шағиры Һибәтулла Салиховҡа бәйле юлдар быға конкрет миҫал була алыр ине:

«... Вә суңыра ул ук Дәүләтша ишан-хәзрәткә урыныны биреп, һижрәт[*] ҡалдырғучы һибәтулла исемле мулла мәҙкүр мәшәйехенә хәлфә булып ҡалғандыр вә, күп китаплар тәсниф итеп[**], печатнайға баҫтырылып, жәмиғ тәуабиғ шәһәр Болғарға мөнтәшир[***] булғандыр. Аның тәснифләрендән берәүсе – төркичә

[***] Мәкәм — урын.
[****] Нишан — эҙ, билдә.
[*] Мәҙкүр — үрҙә телгә алынған.
[**] Ҡайу — әлеге.
[***] Сажин — метр системаһы ҡабул ителгәнгә тиклем ҡулланылған һәм оҙонлоғо 2,134 метрға тиң булған рус үлсәү берәмеге (сажень).
[****] Жулаб — ҡаҙ.: бәләкәй ат.
[5*] Бохара-и Шәриф — Изге Бохара.
[6*] Һауа — хис-тойғо.
[7*] Һәүәҫ — ниәт, теләк.
[8*] Әһли донъя — донъя әһелдәре.
[9*] Ғилма — ғалимдар.
[10*] Мәғрүф — билгеле.
[11*] Рәүнәкле — ялтыр, матур.
[12*] Ғимарәт — бина, йорт.
[13*] Мәшәйех — ишандар, дин ғалимдары.
[*] Һижрәт — күсеү.
[**] Тәсниф итеү — китап яҙыу.
[***] Жәмиғ тәуабиғ шәһәр Болғарға мөнтәшир — Болғар иленең бөтә тарафтарына таралыу.

«Мәнзүм мәжмәғ әл-әдәп»[****] китабыдыр. Вә анда мәҙкүр шәйехенә мәрҫиәсе дә бардыр. Вә һәм берсе – «Төхфәт әл-әүлад»[5*] исемле тәжүид[6*] китабыдыр. Вә һәм берсе – «Дөрр әл-ҡәләм»[7*] исемле вәғәз китабыдыр. Вә ул уҡ мәҙкүр Һибәтулла хәҙрәт үҙенең шәйехенең вафаты суңында Оренбур Ҡарғалысына имамлыҡҡа алынғандыр. Юҡарыда мәҙкүр Вәлит ишан-хәзрәтнең мәсжедендә имам вә мәдрәсәсендә мөдәррис, вә ханаҡасында[8*] мөршид[9*] булып, зур хөрмәтләр илән мөштәһәр[10*] жиһан улып мәғишәт[11*] ҡылыш, атасы Сәйетбаттал исемле башҡорт булғандыр...»

Бында авторҙың үҙ ҡәләмдәшенең тормош юлы һәм эшмәкәрлегенән тыш, әҙәби ижад емештәрен дә яҡшы белеүенә һоҡланмау мөмкин түгел. Ғөмүмән, Ғ. Соҡорой үҙ әҫәрендә Тажетдин Ялсығол, Ғәбдерәхим Усман (Утыҙ Имәни) кеүек бүтән танылған әҙиптәрҙе лә телгә ала, ҡайһы берҙәренең шиғырҙарынан өҙөктәр килтереп, үҙ ҡарашын белдерә. Бындай осраҡтарҙа ул ниндәйҙер кимәлдә әҙәбиәтсе ғалим булып күҙ алдына баҫа.

Ғ.Соҡорой тәуарихының тағы бер үҙенсәлекле яғы шунда: автор күп нәмәгә тәнҡит күҙлегенән баға, элгәрге тәуарихтарҙың ыңғай яҡтары менән бергә хаталы, кәмселекле яҡтарын да асырға ынтыла. Бигерәк тә Х. Мөслимиҙең «Тәуарих-и Болғария»һын ҡаты тәнҡит утына тота ул. Мәҫәлән, «Аҡһаҡ Тимер ҡиссаһы» тип исемләнгән өсөнсө бүлек түбәнге һүҙҙәр менән башланып китә:

«Тарих һижридән ете йөҙ йыллар үткән суңында сикез йөҙ йыл булмаҫ борон Аҡсаҡ Тимер исемле бер надан падишаһ чығып, күп шәһәрләргә фетнә вә фәсәдләр[*] салып йөрөгәндер. Ҡайу Аҡсаҡ Тимернең әүүәл вөжүдкә килмәгенең[**] вә падишаһлыҡҡа ирешмәгенең ҡиссасы «Чынғызнамә» исемле китапта мәстүрдер[***]...».

Тимәк, Ғ. Соҡорой билдәһеҙ авторҙың «Сыңғыҙнамә» әҫәре менән дә таныш булған һәм яҡшы белгән. Тәүге ике һөйләмдән үк уның Аҡһаҡ Тимергә кире ҡараште булғанлығы асыҡ тойолоп ҡала.

Артабан автор, Х. Мөслими әҫәрендәге мәғлүмәттәрҙе күҙҙән үткәреп, һүҙен түбәндәгесә дауам итә: «Әммә «Тәуарих-и Болғария» исемле китапта Аҡсаҡ Тимерне мәдехләгән[****] төсле булып, әкиәтләр аҙғандыр. Аңа әүәрә[5*] булырлыҡ сүзләр дәгел. Мәҫәлән, «Фәлән шәйех зыяратына вә фәлән хафиз[6*] барды», – дигәндер. Зыяраттан мөҡәддәм[7*] шундайын хәсрәтләр заһир[8*] ҡылғач, ул мәғсиәтләр[9*] зыяратлар берлә юйылырға мөмкинмедер?! Ҫәмән әз-заканы[10*] садаҡаға биреү берлә әҫәм әззана[11*] мәхү булмаған[12*] кеби вә һәм аҡ ҡошның рәнжеү кенәсе ҡара ҡошны хөрмәтләү берлә кичерелмәгән кеби бу илә зыярат берлә ғарат әл-мөьминин ғасияны[13*] мәхү булмаҫ... Әл-хасил[14*], бу Аҡсаҡ Тимернең афаты әһли исламға хәддин тәжәүез[15*] булғандыр. Вә бәғзе әл-мәғасырин[16*], Аҡсаҡ Тимернең фазаилыны* ҡисса ҡылып, бу илә әйләндер ки: «Төркөстаңдағы шәйех мәшһүр Әхмәт Йәсәүи мәрхүмнең астанасыны[**] ғимарат ҡылған», – диеп. Әммә ғаҡыл берлә уйлағанда, ул уҡ бина – астана Болғардағы бер нәфсенең ханасыны бурағанға да каффарат[***] булмаҫ! Анда

[****] *«Мәнзүм мәжмәғ әл-әдәп» — «Әҙәп хаҡында шиғри йыйынтыҡ».*

[5*] *«Төхфәт әл-әүлад» — «Балаларға бүләк».*

[6*] *Тәжүид — Ҡөрьәнде дөрөҫ уҡырға өйрәтеүсе фән.*

[7*] *«Дөрр әл-ҡәләм» — «Ынйы һүҙҙәр».*

[8*] *Ханака — суфыйҙарҙың йәшәй торған урыны.*

[9*] *Мөршид — тура юл күрһәтеүсе.*

[10*] *Мөштәһәр — данлыҡлы.*

[11*] *Мәғишәт кылыу — йәшәү, тормош көтөү.*

[*] *Фәсәд — бола.*

[**] *Вөжүдкә килеү — тыуыу.*

[***] *Мәстүр — яҙылған.*

[****] *Мәдехләү — маҡтау.*

[5*] *Әүәрә — бында: лайыҡ.*

[6*] *Хафиз — Ҡөрьәнде яттан белеүсе.*

[7*] *Мөҡәддәм — элгәре.*

[8*] *Заһир — асыҡ.*

[9*] *Мәғсиәт — гонаһлы эш.*

[10*] *Ҫәмән әз-зана — аҡса.*

[11*] *Әсәм әз-зана — гонаһлык.*

[12*] *Мәхү булмау — юҡҡа сыҡмау.*

[13*] *Ғарат әл-мөьминын ғасияны — мосолмандарҙы талау гонаһы.*

[14*] *Әл-хасил — ҡыҫҡаһы.*

[15*] *Хәддин тәжәүез — сиктән тыш.*

[16*] *Әл-мәғасырин — замандаш.*

[*] *Фәзаил — өҫтөнлөк.*

[**] *Астана — һарайҙың ишек төбө.*

[***] *Каффарат — гонаһтан арыныу өмөтө менән ҡылынған эш.*

кәшәнә төҙөгәнче, Болғарға бер мәдрәсә салып китсә, әллә ничә мең мәртәбә артыҡ булыр иде!..»

Был тәуарихты тәнҡитләгәндә Ғ. Соҡорой уға ҡарата үҙенең остаздары Мөхәмәтморат Бәдәхшани һәм Ғәбденнасир Ғәбдрәхим улы әйткән һүҙҙәрҙе лә килтерә, уларға һылтанмалар яһай. Әҫәрҙә кәмселектәр һәм етешһеҙлектәрҙең күп булыуы уны тамам ҡуҙғыта, ярһыу бер хәлгә килтерә.

«... «Тәуарих-и Болғария»ның хата сүзләре күптер, бәлки, баштан-аяҡ хатадан мөрәккәб[****] бер әкиәттер, димешләр. Мәҫәлән, Аҡсаҡ Тимерне бер мәртәбә «Чынғыз ваҡытында иде», – диеп сөйләйдер, бер мәртәбә «Царь Ибан Вачилиеч ваҡытында иде», – диеп сөйләйдер. Вә һәм Истамбулның фатихы[5*] судында барған кебек сөйләйдер. Хәл, аңа Аҡсаҡ Тимер Йылдырым Баязид заманында йөрөгәндер. Истамбул Йылдырым Баязиддан бик күп суң фатих булғандыр. Аһ, шундайын хаталар күптер! Бәҫ, тәсниф ҡылғучы кемсәнә ғилем берлә тәсниф ҡылмаған буладыр. Мәгәр мөжәррәд[6*] надан ҡартлардан ишеткән әкиәтләрне яҙып жыйған буладыр...»

Тәнҡиттең ярһыулығы, күренеүенсә, хикәйәләүҙең дә ярһыулы ғына, эмоционаллегенә килтергән. Бындай юлдар әҫәргә яңы стилистик биҙәктәр өҫтәй, йәнлелек индерә.

Әйтелгәндәрҙән сығып, шундай һығымта яһарға була: халыҡтың ауыҙ-тел ижады, шәжәрә жанры һәм урта быуат көнсығыш тарихи әҙәбиәтенең уртаҡ ерлегендә майҙанға килеп үҫеш алған тәуарих жанрына үҙенең ҡатнаш-синкретик тәбиғәтенә ярашлы стиль төрлөлөгө, һүрәтләү, хикәйәләү алымдарының күп ҡырлылығы хас. Был жанрҙағы әҫәрҙәрҙә үткәндәр сағыштырмаса киң һәм иркен бәйән ителә, фольклор һәм яҙма әҙәбиәт мотивтары үҙ-ара берләшеп-аралашып, тығыҙ үрелеп килә. Ғ. Соҡоройҙоң «Тәуарих-и Болғария, йәки Тәҡриб-и Ғари» әҫәрендә урыны-урыны менән әҙәби-ғилми тәнҡит элементтарының осрауы XIX быуат аҙаҡтарына тәуарих жанрының ҡырҡа үҙгәреш, трансформация кисерә башлауына ишаралай.

[8] Заһир — асыҡ.*
[9] Мәғсиәт — гонаһлы эш.*
[10] Ҫәмән әз-зана — аҡса.*
[11] Әсәм әз-зана — гонаһлык.*
[12] Мәхү булмау — юҡҡа сыҡмау.*
[13] Ғарат әл-мөьминын ғасыяны — мосолмандарҙы талау гонаһы.*
[14] Әл-хасил — ҡыҫҡаһы.*
[15] Хәддин тәжәүез — сиктән тыш.*
[16] Әл-мәғасырин — замандаш.*
[*] Фәзаил — өҫтөнлөк.
[**] Астана — һарайҙың ишек төбө.
[***] Каффарат — гонаһтан арыныу өмөтө менән ҡылынған эш.
[****] Мөрәккәб — йыйылған, торған.
[5] Фатих — яулап алыныу.*
[6] Мөжәррәд — бында: яланғас, бер ни белмәгән.*

---

[1] Ҡара; Кузеев Р.Г. Происхождение башкирского народа: этнический состав, история расселения. М.: Наука, 1974. С.502-504.
[2] Ҡара: Султанов Т.И. Некоторые вопросы тюркской средневековой переводной исторической литературы // Тюркологический сборник. 1976. М.: Наука, 1978. С.141, 152.
[3] Inan A. Destan-I Nesi-I Cinqiz Han kitabi hakkinda // Azerbaucan yurt bilgisi. III. 25,28. 1934.
[4] Был хаҡта ҡара: Нәҙерғолов М. Шағир һәм ғалим Ғарифулла Кейеков // Ағиҙел. 1986. №8. 123-сө б.
[5] Ҡара: Краткая литературная энциклопедия: Б 9-ти томах. М., 1964. Т.2. 530-532-се бб; Хөсәйенов Ғ. Быуаттар тауышы. Өфө: Башҡ. китап нәшр., 1984. 228-232-се бб.
[6] Ҡара: Инан А. Күрһәтелгән хеҙмәт; Хөсәйенов Ғ. Быуаттар тауышы. Өфө, 1984. 123-сө б.
[7] Данзан Лубсан, Алтан төбчи (Золотое сказание) / Пер. с монг. яз., комм. и приложение Н.П.Шастиной. М.: Наука, 1973. С.56.
[8] Даль В.И. Башкирская русалка // Башкирия в русской литературе. Т.1. Уфа: Башкнигоиздат, 1989. С. 173.
[9] Башҡорт әҙәбиәте антологияһы / Төҙ., баш һүҙ авт. М. Нәҙерғолов, Ғ. Хөсәйенов. Өфө: Китап, 1999. 294-се б.
[10] Шунда уҡ. 296-297-се бб.
[11] Шунда уҡ. 298-299-сы бб.

ЙЫЛДАРҘА ҠАЛҒАН ЙЫРҘАР

(Яҡуп Ҡолмойҙоң тыуыуына – 95 йыл)

Яҙ килә лә китә,
Йөрәк көтә-көтә,
Йәшлек үтә-үтә
Яҙ һымаҡ.
Һин былбылым минең,
Йырланмаған йырым,
Балҡып кил һин
Атҡан таң һымаҡ.

Ниндәй иҫ киткес йыр! Һүҙҙәре лә, көйө лә камил, бер бөтөн булып уҡмашҡан, моңо йөрәктәрҙе елкетә, уйландыра ла, моңландыра ла... Был илаһи йырҙың авторын республикала белмәгән кеше бармы икән? Моғайын, юҡтыр. Уның авторы – Башҡортостандың сәсән телле йырсы-шағиры Яҡуп Ҡолмой.

– «Былбылым»ды яҙғас, мәрхүм Яҡуп Ҡолмой шундай шатланып йөрөнө, – тип яҙҙы һуңынан композитор Заһир Исмәғилев, – ул уны үҙенең кәләшенә, Фатимаһына, арнаған булған. Миңә һүҙҙәре иҫ киткес оҡшаны. Бөтә әйбер һүҙҙән тора. Әгәр ҙә шиғыр матур булһа, моңо ла матур сыға. Шиғыр йырлап тормаһа, моңо булмаһа, унан бер нәмә лә килеп сыҡмай. «Былбылым» шул тиклем халыҡҡа яҡын булды – һүҙҙәре лә, көйө лә халыҡсан.

Был һүҙҙәрҙе Заһир Исмәғилев 2002 йылда Башҡортостан телевидениеһының «Хазина» ижад берекмәһе етәксеһе Юлай Ғәйнетдиновҡа биргән интервьюһында әйткәйне.

Ә бына шағир үҙе «Хәтер хазинаһы» исемле китабында был хаҡта ошолай ти: «Былбылым»дың яҙылыу яҙмышы көтөлмәгәнсә булды, тиһәм, ҡайһы берәүҙәр, бәлки, ышанып та бөтмәҫ. Бынан алда Заһир Ғарипович менән «Икебеҙ ҙә һауынсы», «Һалдат йыры», «Сәңгелдәк йыры» тигән йырҙар менән эфирға сыҡҡайныҡ.

Бер саҡ Заһир Ғарипович:

– Беләһеңме, ҡустым, беҙгә саф мөхәббәт тойғоһон сағылдырған, мәңгелеккә ҡалырлыҡ йыр яҙырға кәрәк. Унда ғүмерҙең үҙыуы ла, һөйгәнеңде юҡһыныу ҙа, тоғролоҡ та сағылһын. Мөхәббәт кешене ғүмер буйы оҙатып килә. Ә был хаҡта кешене уйландырырлыҡ йыр юҡ әле хәҙергә. Әйҙә, яҙып ҡарайыҡ, – тине.

Композиторҙың эскерһеҙ теләге мине ҡанатландырҙы. Ниндәй генә тойғоға, уй-хискә батманым мин ул шиғырлы көндәрҙә? Төндә көнгә ялғап, ҡағыҙ биттәрен сыбарларға тура килде. Нисектер, ҡолаҡ төбөндә, былбыл һүҙе сыңланы, һандуғас һайрағаны ишетелгәндәй булды. Һөйгәнеңде шул моңло ҡошҡа тиңләү – бер табыш, йыр жанрында бер асыш булып тойолдо. Ике-өс көн буйына бер

нисә вариантта «Былбылым» тигән йырға оҡшаш шиғыр яҙҙым. Уның өсөһөн дә Заһир Ғариповичҡа күрһәтергә батырсылыҡ иттем.

Ике-өс көн үттеме-юҡмы, радионың музыкаль редакцияһының ике аппаратты тоташтырған йәнәш телефонында Заһир Ғариповичтың көр тауышын ишеттек.

– Ҡолмойҙоң яңы шиғырына йыр яҙҙым, шуны һеҙгә лә телефон аша йырлап ишеттерәм. – Йырлап туҡтағас, трубкаға өрҙө лә:

– Йә, оҡшаймы? – тип өндәште.

– Иҫ киткес! Йырың ғына түгел, ә үҙеңдең йырлауың оҡшай. Халыҡҡа иң башта үҙең йырлап ишеттер, ағай.

Һүҙендә торҙо Заһир Ғарипович. Ижадына арналған бер сәғәтлек ял концертын үҙе алып барҙы. Әле халыҡҡа ишетелмәгән «Былбылым» йырын да тәү башлап үҙе йырлап ишеттерҙе. Был һирәк осрай торған концерттың магнитофон таҫмаһына яҙылған программаһы үткәндең бер ҡомартҡыһы булып радионың фонотекаһында әле һаман һаҡлана. Унда композиторҙың ошондай һүҙҙәре бар: «Композитор йырламайынса көй яҙа алмай. Мин дә әҫәрҙәремде йырлап, көйләп яҙам. Әгәр ул күңелемә оҡшай икән, ул нотаға теркәлә. Хәҙер һеҙгә «Былбылым» тигән яңы йырҙы йырлап ишеттерәм. Уның һүҙҙәрен шағир Яҡуп Ҡолмой яҙҙы».

Әйткәндәй,«Былбылым» йырын беренсе булып профессиональ йырсы Нажиә Аллаярова башҡарҙы. Был хаҡта ул шулай хәтерләй:

– 60-сы йылдар башында уйламағанда дәрескә уҡытыусым Миләүшә Мортазина менән бергә таныш булмаған бер ағай килеп инде. Һуңынан уның радиола эшләгән шағир Яҡуп Ҡолмой икәнен белдем. Уҡытыусым ҡулындағы нотаһын фортепьяноға ҡуйҙы ла йырлай ҙа башланы. Көйөн тәү тапҡыр ишетһәм дә, хыял күңелде тибрәтте. Етмәһә уҡытыусым да: «Тап һинең тауыш өсөн генә яҙылған был көй, – ти. – «Былбылым» тип атала. Өйрәнеп, радиоға барып яҙылырһың. – Мин шунда уҡ ризалаштым.

Бына шулай тәү тапҡыр «Былбылым» мине йыр һөйөүселәргә серҙәш итте. Ул миңә ғүмер буйы йыр тауына үрләргә юлдаш булды. «Былбылым» – тауышымдың көмөш шишмәһе ул. Артабан Яҡуп ағайҙың «Һин минең сафлығым», «Йылмай әле бер генә», «Йырым һиңә, башҡалам» тигән йырҙары репертуарымды биҙәне. Был иҫтәлекле юбилей көндәрендә йырсы-шағирға үҙемдең оло хөрмәтемде һәм рәхмәтемде белдерәм».

Эйе, шағир йыр жанры өҫтөндә айырыуса онотолоп, мөкиббән китеп, бирелеп эшләй. Ә «Былбылым» сәнғәттә төплө тәжрибә туплаған атаҡлы композиторҙың халыҡ фольклорына таянып эшләүе һөҙөмтәһендә тыуған бөйөк йыр ул. Башҡорт йыр сәнғәтенең аҫыл бер үрнәге. Ғөмүмән, Я. Ҡолмой шиғырҙарына йыр яҙмаған берәй композитор бармы икән? Уларҙы йыйып баҫтырғанда киләсәк быуын өсөн бына тигән ҡомартҡы ҡалыр ине. Ә бит бөгөн шағирҙың йәмғеһе өс йөҙҙән ашыу йыры бар! Уларҙы йыйып туплап, айырым йыйынтыҡ итеп баҫтырып сығарыу – күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Халыҡлашып, киң танылыу яулаған иң аҫыл йырҙарынан З. Исмәғилев музыкаһына «Һалдат йыры», Камил Рәхимов музыкаһына «Тыуған илем», Тәлғәт Шәрипов музыкаһына «Өфө вальсы», «Томбойоҡ бүләк итмә», Таһир Кәримов музыкаһына «Көтөүсе йыры», Халиҡ Заимов музыкаһына «Мәктәп полькаһы», «Мәктәп мазуркаһы», Әкрәм Дауытов көйөнә «Йәшлегемә ҡайтар», Хөсәйен Әхмәтов көйөнә «Эй тыуған яҡ, эй матур яҡ», Рәүеф Мортазин көйөнә «Пограничник йыры»н ғына ла атау етәлер.

Шағирҙың иң һуңғы йырҙарының береһе «Йөҙөк ҡашы» тип атала, уға композитор Хөсәйен Әхмәтов йөрәк өҙгөс моңло көй яҙған. Тик бер «Күңелем ҡылдары» исемле йыйынтыҡҡа ғына шағирҙың 60-тан артыҡ шиғыр һәм йыр текстары ингән. Авторҙың йыр тексты һан яғынан ғына түгел, ә сифаты яғынан да

йылдар үтеү менән бәҫен юғалтмай. «Тыуған яҡҡа», «Тыуған илем», «Халҡыма», «Тыуған яғым», «Өфө вальсы», «Башҡортостан», «Эҙең ҡалһын», «Пограничник йыры», «Һалдат йыры», «Һин минең сафлығым», «Торатауым», «Һәләүегем» – һүҙ һәм көй камиллығы яғынан башҡорт милли йыр сәнғәтенең аҫыл өлгөләренән һанала. Улар барыһы ла нәфис образлы, тормошсан, күңелгә ятышлы шиғри яңғырашы менән уҡыусы хәтерендә тиҙ ҡала һәм әҫәрләндерә, эстетик тәрбиә яғынан әһәмиәтле. Йырҙары киң тематикалы: лирик йырҙар, Тыуған ил һәм тыуған ер, тыуған яҡҡа бағышланған йырҙар, балалар өсөн яҙылғандары ла байтаҡ. Ә тыныслыҡ һәм фронт шиғырҙарына, айырыуса мөхәббәт темаһына яҙылған йырҙары бөгөн дә онотолмай, күбеһе күптән халыҡлашып бөткән.

Я. Ҡолмойҙоң һәр йырының үҙ тарихы бар. Мәҫәлән, бына «Көтөүсе йыры»н алып ҡарайыҡ.

Башҡорт халҡы борон-борондан көтөүселәр тураһында һоҡланып йырлаған, Я. Ҡолмой шиғырында көтөүсе көслө рухлы, юғары аңлы, хеҙмәте менән маҡталған, белемле, ябай кеше. 1960 йылда был йыр тарихы хаҡында радио тыңлаусыларға ул былай тип һөйләне:

«...Ишембай районы Ҡанаҡай ауылында минең киң күкрәкле, оҙон буйлы ҡустым Мотиғулла эшләй. Йыр яҙғанда мин уның образын күҙ алдында тоттом. Ҡустымдың бөҙрә ағастарға төрөнгән йәмле Һәләүек буйҙарын яңғыратып йырлай-йырлай көтөү көтөүе әле һаман күҙ алдымда».

Ҡояш менән бергә сыға көтөүгә,
Ҡояш менән бергә ҡайта көтөүҙән.
Көтөүсене сибәр ҡыҙҙар ярата,
Шат йырҙары уйҙарымды тарата.
Көтөүсенең ҡурай моңо
Сиртә йөрәк ҡылдарын.
Кемде генә һөйә икән –
Белһәң ине уйҙарын.

«Көтөүсе йыры»ның һүҙҙәре композитор Таһир Кәримовҡа бик оҡшай. Көйө халыҡҡа тиҙ барып етә. Нотаһын һорап хаттар күп килә. Был популярлыҡтың сере, бәлки, шағирҙың йырға һалынған шиғырҙарының бер-береһенә оҡшаш булмауы, һәр йырҙа хәтерҙә ҡалырлыҡ образдар булыуынандыр? Композиторҙарҙың оҙон ғүмерле һәм үҙенсәлекле көйҙәр яҙыуына, бәлки, ошо сәбәпселер.

Я.Ҡолмойҙоң «Тыуған илем» исемле шиғырына ла һоҡланмау мөмкин түгел. Ул унда Тыуған илен шиңмәҫ гөл баҡсаһына, һүнмәҫ ҡояшҡа, бөтмәҫ хазинаға сағыштыра. Камил Рәхимов был шиғырға халыҡсан көй ижад итеп, уны Башҡортостанды данлаусы үлемһеҙ йырҙарҙың береһе яһай. Был йырҙы Башҡортостан халҡы тиҫтәләгән йылдар буйына бөйөк йырсы Илфак Смаҡов башҡарыуында тыңланы.

Ғүмәр Әбделмәнов, Мәғәфүр Хисмәтуллин, Флүрә Ноғоманова, Зәки Мәхмүтов, Нажиә Аллаярова, Ғәлиә Солтанова, Ғәли Хәмзин, Римма Мусина, Фәниә Хәлитова, Йәмилә Халиҡовалар Яҡуп Ҡолмой йырҙарын иң оҫта башҡарыусыларҙан булды.

Ғүмеренең һуңғы йылдарында Яҡуп Ҡолмой көндәлектәр яҙҙы. Унда Башҡортостандың сәйәси, мәҙәни һәм әҙәби тормошо, оло талант эйәләре менән дуҫлыҡ, ижад һәм ижадташтары хаҡындағы, шулай уҡ шағирҙың фәлсәфәүи уйланыуҙары тупланған. 1992 йылды сағылдырған көндәлектәрҙә, мәҫәлән, бына ошондай юлдар ҙа бар: «Ниңә халыҡ мине шулай ҙурлай, тыңлай, ярата икән? Ысынлап та мин йырсы-шағирмынмы? Әгәр мин киткәс, исмаһам, халҡым йөрәгендә тик бер генә йырым булһа ла һаҡланһа, ниндәй бәхетле булыр инем мин!» Был юлдарҙа олоғайған шағирҙың үҙ ижадының халҡына файҙалы

булыуына өмөт-ышанысы ла, халҡына хеҙмәт итергә тырышыуы ла, йырҙарының ғүмерле булырына хыялы ла ята.

Шағир Яҡуп Ҡолмой төрлө йылдарҙа үҙе аралашҡан сәнғәт, мәҙәниәт әһелдәре, атаҡлы башҡарыусылар хаҡында ижади һүрәтләмәләр, портреттар, иҫтәлектәр һәм хәтерләүҙәр ҙә яҙҙы. Улар араһында мәшһүр композиторҙар З. Исмәғилев, Р. Мортазин, Т. Кәримов, Т. Шәрипов, Н. Мөстәҡимов, Ә. Дауытов, Х. Заимов, Ш. Ибраһимов, Х. Әхмәтов, йырсыларҙан И. Смаҡов, З. Мәхмүтов, М. Хисмәтуллин, Б. Вәлиева, Н. Аллаяровалар бар. Әйткәндәй, шағирҙың әле эшләнеп бөтмәгән ҡараламалары буйынса халыҡҡа әҙиптең әҙәби мираҫын ҡайтарыу йүнәлешендә уның туғаны, йәғни мин, журналист Миләүшә Ҡолмөхәмәтова, шөғөлләнәм. Я. Ҡолмой йырҙарын айырым йыйынтыҡ итеп баҫтырып сығарыу, әйткәнемсә, күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. Улар сәнғәт академияһы, сәнғәт училищелары һәм мәктәптәре, башҡорт мәктәптәре, ҡалаларҙағы башҡорт лицейҙары һәм гимназияларының музыка уҡытыусылары, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары өсөн бына тигән методик ҡулланма булыр ине.

Ҡайҙа барһам, шунда тыңлайым мин
Үҙ халҡымдың йөрәк моңдарын.
Шул моң һаҡлай йырҙың оҙонлоғон,
Сиртә-сиртә күңел ҡылдарын.
Халҡым моңо – йөрәк түрендә,
Уға үлем килмәҫ ғүмергә,–

тигәйне шағир үҙенең бер шиғырында.

Йырҙың халыҡ тормошонда ни тиклем әһәмиәткә эйә булыуын, йырҙың кеше менән һәр саҡ йәнәш атлап, эшкә рухландырып, ҡайғыһын таратып, шатлығын уртаҡлашып, ҙур тәрбиәүи көскә эйә булыуын:

Шиғыр һәм йыр – ике ҡанатым,
Елдәй елгән ярһыу пар атым,–

тип атай Яҡуп Ҡолмой.

Ҙур йылға бәләкәй шишмәләрҙән һут алған кеүек, шағир Яҡуп Ҡолмойҙоң да ижад шишмәһе булған тыуған яҡтары бар. Уның тормош юлы һәм яҙмышы ҡатмарлы ваҡиғаларҙан тора. Шағир 1918 йылдың 7 сентябрендә Ишембай районы Ҡанаҡай ауылында Бәкән йылғаһы буйында урынлашҡан бәләкәй генә өйҙә донъя көтөүсе һунарсы Хәйрулла менән Кинйәбикәнең кинйә балаһы булып донъяға килә. Илдә ҡан ҡойошло Граждандар һуғышы барған ваҡыттар… Яҡуп донъяға тыуыр мәл еткәндә генә ауылға аҡ чехтар бәреп инә. Кинйәбикә, бына-бына тыуырға тейеш балаһын һаҡлап ҡалыу ниәте менән, ҡурҡыштан, аптыраштан (ире урманда һунарҙа була) мөгәрәпкә төшөп йәшенә. Ә өҫтә шарт та шорт атышалар, аҡырышалар. Инәй мөгәрәптә ятҡан иҫке сепрәк өҫтөндә бәләкәсенә ғүмер бирә, ләкин әллә атыш-аҡырыштарҙан ҡурҡҡан Яҡуп донъяға телһеҙ тыуа. Уны бик оҙаҡ йылдар, беҙҙең һөйләшсә әйткәндә, «бүтек» (йәғни телһеҙ) тип йөрөтәләр. Был хаҡта үҙенең көндәлектәрендә шағир: «Әсәйемдең аҫтына түшәп мине тапҡан иҫке балаҫы минең түшәгем була. Мин ҡараңғыла донъяға килгәнмен», – тип яҙа. Ләкин, шуға ҡарамаҫтан, керешле тел менән тыуған Яҡуп бәләкәйҙән теремек һәм баҙыҡ булып үҫә. Өс кенә йәшендә аслыҡ йылды әсәһе яҡты донъя менән хушлаша. Үлдер алдынан: «Бәләкәсемде, Яҡубымды, етем итмәгеҙ. Күҙ ҡараһылай һаҡлағыҙ, балтырған ашатып булһа ла үҫтерегеҙ», – тип әйтеп ҡалдыра.

Ололарҙың хәтерләүенсә, Я. Ҡолмой уҡырға дәртле булған. Атаһы һунарсы итергә бик теләһә лә, мәктәпте үҙ итә. Башланғыс мәктәпте Ҡанаҡайҙа тамамлай, артабан ул ун һигеҙ саҡрымда ятҡан Урман-Бишҡаҙаҡ ауылына йәйәүләп йөрөп уҡый. Уны тамамлағас, 14 йәшлек үҫмер, үҙенең матбуғатта баҫылған

шиғырҙарын һәм шиғырҙар яҙылған дәфтәрен тотоп, ике пар сабата алып, йәйәүләп Өфөгә юллана. Унда «Ҡыҙыл Башҡортостан» гәзитендә эшләүсе ағаһы Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтовта туҡтала, уның ярҙамында яҙыусы Афзал Таһиров менән күрешеп, уға шиғырҙарын күрһәтеү бәхетенә ирешә. Билдәле яҙыусы менән осрашыу йәш шағирҙы ҡанатландыра. Артабан Стәрлетамаҡ ҡалаһында педтехникумда уҡый. Унда уға бәхет үҙе йылмая: Я. Ҡолмой студенттарҙың Ҡадир Даян етәкләгән әҙәби түңәрәгендә актив ҡатнаша, бер генә лә әҙәби кисә уның ҡатнашлығынан башҡа үтмәй. «Йәш төҙөүсе» гәзите биттәрендә лә шиғырҙары йыш баҫыла.

1937 йылда илдә репрессиялар башлана. Ул Я. Ҡолмойҙо ла урап үтмәй. Өфөлә «Ленинсы» йәштәр гәзитендә эшләп йөрөүсе йәш шағирҙың әҫәрҙәре әленәнәле донъя күреп тора, улар «Тәүге йыр» тип исемләнгән альманахта ла баҫыла. Ләкин шағирҙың ижади ҡыйыулығы көнсөлдәр һәм ошаҡсыларға оҡшамай, улар уға төрлө ғәйепләүҙәр таға. Яҙыусылар йыйылышында шағирҙы кәмһетеүҙәр, шиғырҙарын юҡҡа сығарырға тырышыуҙар йышая. Бына-бына ҡулға алырҙар кеүек. Был һәләкәтте һиҙеп, шағир Камил Рәшит Я. Ҡолмойҙо Ҡазанға китергә күндерә. Хатта хушлашып, эш хаҡы ла алып тормайынса, шағир Ҡазанға сығып китә. Бәхеткә ҡаршы, күрше республикала уны йылы ҡаршылайҙар, эшкә урынлаштыралар. Ошонан ул 1939 йылда Ҡыҙыл Армия сафына алына.

Баһадир кәүҙәле Я. Ҡолмой данлыҡлы генерал Доватор етәкселек иткән Кавказ кавалерия полкына эләгә. Һалдат хеҙмәте йылдарында ла ул ижад итеүҙән туҡтамай. Донъялар тыныс түгел, бына-бына һуғыш сығыр төҫлө. Ул кешелекте уяулыҡҡа саҡырып, ил тыныслығын хәстәрләп әҫәрҙәр ижад итә.

Болот аға Урал яғына,
Аҡ болоттай аға уйҙарым.
Тыуған ерҙе күңел һағына,
Хәтерләтеп ҡурай моңдарын.
Йырлай-йырлай башҡорт йырҙарын,
Илде һаҡлай, Урал, улдарың.

(«Пограничник йыры»)

Әйткәндәй, был йыр ҙа оҙаҡ йылдар эфирҙа аталы-уллы Марат һәм Мәғәфүр Хисмәтуллиндар башҡарыуында яңғыраны.

Йәш шағир 1940 йылда армияла хеҙмәт иткәндә яҙған шиғырҙарын туплап, «Аҙым» исемле тәүге йыйынтығын баҫтыра. Уны редакторлап нәшриәткә тапшырыуҙа шағир Камил Рәшит ярҙам ҡулы һуҙа. Тап ошо йылды Я. Ҡолмойҙо Коммунистар партияһы сафына алалар.

Һуғышҡа Я. Ҡолмой туп-тура Кавказдан китә. Немец фашистары Мәскәүгә яҡынлашҡас, ул хеҙмәт иткән дивизияны 1942 йылда Мәскәү эргәһенә күсерәләр. Я. Ҡолмой фронт шиғырҙарын ишетеп түгел, ә күреп, йөрәге аша кисереп яҙа. Шуға күрә уларҙың төбөндә тәрән реаль тормош факты ята. Һуғыш тынған арала яҙған әҫәрҙәрен туплап, 1944 йылда тағы ла бер йыйынтыҡ баҫтыра. Был юлы иһә уға икенсе Рәшит – Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәти ярҙам итә. Я. Ҡолмойҙоң фронт шиғырҙары 1944 йылда «Фронтовик уйҙары» исемле йыйынтыҡ булып донъя күрә. Ошо уҡ йылда Я. Ҡолмойҙо яу яланында СССР Яҙыусылар союзына ағза итеп алалар.

Я. Ҡолмой ижадында, әйтергә кәрәк, фронт шиғырҙары айырым урынды биләй. Уның айырыуса илебеҙ йөрәге Мәскәү өсөн барған һуғыштарҙы һүрәтләгән шиғырҙары һәм поэмалары тулҡынландыра. Уларҙы тыныс күңел менән уҡып булмай. Миҫал өсөн «Беҙ Мәскәүҙе һаҡланыҡ» исемле шиғырҙан өҙөк килтерәйек.

Уға үҙе лә Мәскәүҙе һаҡлауҙа ҡатнашҡан яугир композитор Р. Мортазин көй яҙған:

Ауһаҡ, алъа ауҙыҡ,
Көсөн күрҙек күктәй йәшнәүҙең,
Ергә уя баҫтыҡ,
Бар ҡәҙерен белеп йәшәүҙең.
Яндыҡ, торҙоҡ, еңдек.
Беҙ – һалдаты шанлы Мәскәүҙең.

Шағирҙың «Сталин үҙе ҡушты» тигән шиғри йыйынтығы ла тик патриотик әҫәрҙәрҙән тора. Фронттың барлыҡ линияларында ла Сталиндың «Бер аҙым да артҡа сикмәҫкә!» тигән ҡаты приказы аҫтында Тыуған ил өсөн ҡаты һуғыштар барған саҡ... Дошман менән булған ҡаты бәрелештәрҙә шағир немец фашистарының совет һалдаттарын нисек язалауҙарын, мыҫҡыллауҙарын күреп түҙә алмай әсенә, күңеле үс алыу тойғоһо менән елкенә. Уның был уй-хистәре «Беҙ Мәскәүҙе һаҡланыҡ», «Үс», «Ҡайын да мин», «Доватор янында», «Урал егете», «Толпар елә», «Йондоҙ ҡашҡа», «Ҡултыҡ таяҡлы ағай», «Йәшә, тине миңә», «Һаҡсы», «Еңеү көнөндә», «Мин атакала», «Ҡәләмдәш батырҙар», «Кеше торҙо», «Юлда», «Башҡорт гвардеецтары» исемле шиғырҙарында һәм балладаларында, «Беҙҙең ҡала егете», «Хаттар һөйләй», «Яҡты эҙ» кеүек поэмаларында сағыла. Мәскәү өсөн барған һуғыштарҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн Я. Ҡолмой II дәрәжә Ватан һуғышы ордены, миҙалдар менән наградлана. Һуғыш тамамланғас та шағир тыныслыҡ хаҡында арымай-талмай ижад итә, йәғни шиғыр теле менән әйткәндә:

Әле һаман утлы һуъыш таңы
Ҡара төтөн аша күренә.
Ул саҡ таңдың көмөш ысыҡтары
Ҡуръаш булып төштө еремә.

(«Утлы йылдар, утлы юлдар»)

Я. Ҡолмойҙоң һуғыш лирикаһында ҡайын һәм толпар образдары айырым урын алып тора. Мәскәү өсөн барған ҡаты алыштар мәлендә снаряд ярсығы шағирҙы ғына түгел, ә эргәһендәге аҡ ҡайынды ла яралай. Ҡайын һәләк була, шағир иҫән ҡала. Үҙенә ғүмер бүләк иткән ҡайынды әҙип һуғыштан һуң эҙләп табып, уға баш эйәсәк. Ошонан һуң ҡайын Я. Ҡолмой өсөн изге ағасҡа әүерелә лә инде... Руза йылғаһы ярындағы үҙен ҡотҡарған ҡайын янында үткән ауыр һуғыш ваҡиғаларын хәтерләп, уйланып баҫып торғанда уның күңелендә «Ҡайын да мин» исемле тулҡынландырғыс шиғыр тыуа.

Ерҙе уйып туптар шартлаъанда
Ҡара янып ауҙы ҡайын да.
Шул ҡайындай, утлы атакала
Дуҫым аттан ауъас янымда,
Күкрәгемде ҡыҫты ҡайын да.
Әле уйъа талъан шул ҡайындар
Йәшергәндәй ҡуръаш яраһын,
Зәңгәр күккә ҡарап буйһонъандар,
Онотҡандай һуъыш ъазабын.

(«Ҡайын да мин»)

Ғүмеренең һуңғы йылдарында Я. Ҡолмой «Хәтер хазинаһы» исемле проза йыйынтығы яҙҙы. «Ғүмер һуҡмағы» исемле бүлектә һуғыш ваҡиғаларын да тәфсирләп яҙа, ә көндәлектәрендә иһә яу юлдары, һуғыш йылдары хаҡында бәйән итә. Күҙҙәренә биш-алты ҡатмарлы операция яһатҡан шағир ярым һуҡыр тиерлек ижад итте, «Хәтер хазинаһы»н, өр-яңы шиғырҙар, сонеттарҙан торған

«Күңел ҡояшы» исемле йыйынтығын ҡалдырҙы. Мәскәү өсөн барған ҡаты алыштарҙы тасуирлаған «Хәтер хазинаһы»нда, әйткәндәй, тоғро ҡанаты – толпары тураһында ошолай тасуирлай: «...Ҡоторонған немец йыртҡыстары иң башта йондоҙло комиссарҙарҙы һәм политруктарҙы юҡ итеүҙе үҙҙәренең батырлығы итеп һанай. Мине лә был ағыу ситләп үтмәне: Волоколамск шоссеһынан алыҫ түгел Семенкино ауылына яһалған атакала минең дә һул беләктәге йондоҙ уларға мишень булған. Сусҡасылыҡ фермаһы тәҙрәһенән сыҡҡан пуля йүгән тотҡан беләгемде яралап үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалдым. Толпарымдың үргә ырғыуы булды, мин артҡа шыуып төшкәнмен. Эскадрон аттары минең кәүҙәм аша һикереп үткән. Ат дағаларының зыңлатҡан тауыштарын ишетеп һуштан яҙғанмын. Бер саҡ атымдың шинель яғаһынан тешләп торғоҙорға тырышҡанын тойоп аңыма килдем.

Толпарым серҙәшем дә, пар ҡанатым да ине минең. Күп тә үтмәй, мин, яраланған ҡулымдың һыҙлауын еңеп, кескәй генә шиғыр яҙҙым:

Күңел күтәрелә ҡайсаҡта,
Шиғыр яҙһам ултырып күк атҡа.
Шиғыр һәм ат – яҡын иптәшем,
Ул Уралдан минең серҙәшем.
Йыр йәш йөрәк утын күтәрә,
Атым уттан, һыуҙан үткәрә.

(«Хәтер хазинаһы»)

Йәшәү һәм үлем араһында үҙ-үҙен аямай дошманына ябырылған кавалерист яу юлдарында әллә күпме вәхшилектәргә осрай, ил азатлығын яулау теләге менән янған һалдат менән типә-тиң утҡа ташланыусы тоғро арғымағы хаҡында яңынан-яңы шиғри юлдар ижад итә:

Үргә ырғый ерән саптар,
Талпына осор ҡоштай.
Егет башын әйгәс, толпар
Боролоп саба уҡтай.
Ялынан ҡан ағып килә
Күкрәгенә егеттең.
Толпар беҙгә алып килә
Егеттең партбилетын.

(«Толпар елә», 1941)

Йәки:

Утлы дауыл ҡупты күҙ алдымда...
Мин һиҫкәнеп киттем саҡ ҡына.
Әйтерһең дә, еләм толпарымда,
Эскадрондың алғы сафында.
Еләм... еләм... Көмөш ҡылыс ялтлай...
Өҫкә яуа дошман туптары.
Елгән ерҙән, яраланған ҡоштай,
Ҡанлы ергә ауҙы толпарым.
Юҡ, үлмәгән. Мине һағынған,
Елеп килә һуғыш яғынан.

(«Толпар елә»)

Урал егет итте, күркәм Кавказ
Атландырҙы толпар атына.
Ҡылысымды үргә күтәрәм мин
Үлем белмәҫ йәшлек хаҡына.

(«Мин атакала», 1941)

Һуғыштан һуң Я. Ҡолмой «Башҡортостан», «Ҡыҙыл таң» гәзиттәре редакцияларында, Башҡортостан радиоһында әҙәби бүлек мөхәррире булып эшләне. Ләкин һуғыштан һуң да репрессия елдәре уға ҡағыла торҙо. Икенсе китабы сыҡҡандан һуң шағир ун алты йыл буйына ҡара һағыш эсендә йәшәне: был йылдарҙа йыйынтыҡтары баҫылманы, тәнҡитселәр иһә ижадына иғтибар итмәне, дәреслектәрҙә лә аҫыл шиғырҙарына урын табылманы. Шуға ҡарамаҫтан,– ҡайҙан көс тапҡандыр, әллә Хоҙай ярҙамы менәнме, яҡындары, яҡташтары, шиғриәтен үҙ итеүселәрҙән көс алғандырмы – ул ижадтан айырылманы. Илле йылдан ашыу ижад итеү осоронда ул мәҫәлдәр, бер һәм ике шаршаулыҡ пьесалар, сонеттар, йырҙар, йөҙәрләгән очерктар, портреттар, һүрәтләмәләр, мемуарҙар, иҫтәлектәр, поэмалар яҙҙы.

Яҡуп Ҡолмой сонеттары иһә – үҙе бер донъя. Шиғриәттә сонет жанры бөйөк таланттарҙың ижад емеше булыуы һәр кемгә билдәле. Шекспир һәм Байрон, Пушкин һәм Блок, Есенин һәм Брюсов ҡалдырған сонеттар һәр уҡыусыла аңлатып бирә алмаҫлыҡ матур тойғолар уята, рухты күтәрә, күңелде байыта. Был жанрҙа эшләү һәр шағирҙың да ҡулынан килмәй, шиғыр структураһы ҡатмарлы: унда шиғыр төҙөлөшө лә, ижектәрҙең яңғырашы ла, әҫәрҙең теүәл сюжетҡа ҡоролоуы ла гармонияла булырға тейеш. Бындай шиғыр тексы үҙе үк йыр тексын хәтерләтә.

Хаҡлы ялға сыҡҡас, Я. Ҡолмой Ишембай районы Ҡанаҡай ауылының тәүге ауыл Советы рәйесе, аҙаҡ элекке «Ҡыҙыл Башҡортостан» («Башҡортостан») гәзитенең ауыл хужалығы бүлеге мөдире булып эшләгән ағаһы Хисмәтулла Ҡолмөхәмәтов яҙған «Ҡолмөхәмәтовтар шәжәрәһе»н дауам итеүсе булды. Әйткәндәй, әле Совет власы осоронда уҡ уларҙың алдан күрә белеүе арҡаһында барлыҡҡа килгән был ҡәҙерле ҡомартҡы нигеҙендә Әхмәр, Ҡанаҡай, Сәлих ауылы кешеләре үҙҙәренең туған-ырыуын барлап, тамыр ептәрен табып, 2007 йылда гөрләтеп шәжәрә байрамдары үткәрҙе.

Илле йыллыҡ ижад ғүмере осоронда Я. Ҡолмой ниндәй генә жанрға тотонмаһын, барыһында ла үҙен оҫта ижадсы итеп танытты. Сатира һәм юмор өлкәһендә, мәҫәлән, мәҫәлсе итеп күрһәтте, тормош күренештәрен сағылдырған скетчтары, бер һәм ике шаршаулыҡ пьесалары һаҡланған. Шулай уҡ һуғыш, мөхәббәт һәм граждандлыҡ лирикаһына ҡараған шиғырҙары, бер нисә йөҙ йыры, очерктары, һүрәтләмәләре, ижади портреттары, иҫтәлектәре – барыһы ла яратып уҡыла. Ләкин, үкенесә ҡаршы, үҙ ваҡытында уларға тәнҡитселәр тарафынан баһа бирелмәгән. Киләсәктә шағирҙың бай әҙәби мираҫы үҙенең тикшереүселәрен табыр, тигән ыңғай ҡарашта ҡалайыҡ.

Я. Ҡолмой Ватан һәм халҡы алдында күрһәткән тырыш хеҙмәте өсөн 1979 йылда «Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре», 1988 йылда «Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре» тигән маҡтаулы исемдәргә, Башҡортостан Республикаһының Маҡтау грамотаһына лайыҡ булды. Ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем уның ҡулынан ҡәләме төшмәне, шағир һаулығының, йыл миҙгеленең, ваҡыттың, тормоштоң күңелле-күңелһеҙ, һаулыҡҡа туймаған саҡтарында ла ижад итеүҙән туҡтаманы. Уның иң һуңғы ижади мираҫы – көндәлектәре – үҙе бер донъя, шағирҙың был үҙенсәлекле жанр өлкәһендәге табышын киләсәктә айырым йыйынтыҡ итеп баҫтырып сығарыуҙы хәстәрләйем. Ул Я. Ҡолмой ғүмеренең һуңғы йылдарын, йәғни 1988 – 1993 йылдарҙы үҙ эсенә ала.

Миләүшә ҠОЛМӨХӘМӘТОВА.

Дуҫлыҡ күперҙәре

Ҡаҙаҡ әҙәбиәте тарихында үҙенең шәхси һәм ижади яҙмышы менән Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповҡа ике тамсы һыу һымаҡ оҡшаған бер әҙип бар. Ул – мәшһүр шағир һәм тәржемәсе Мұҡағәле Мәҡатаев. Был хикмәтле оҡшашлыҡты күрһәтер өсөн, уларҙың биографияларына ҡыҫҡаса күҙ һалайыҡ. М. Мәҡатаев 1931 йылда Ҡаҙағстандағы Алматы өлкәһенең Нарынкүл районына ҡараған Ҡараһаҙ ауылында тыуа (Рәми Ғарипов – 1932 йылда). Тәүгеһенең тыуған көнө 9 февраль, икенсеһенеке – 12 февраль. Мұҡағәле Мәҡатаев 1954 – 1962 йылдарҙа Ҡаҙағстан радиоһында диктор, уҡытыусы булып эшләй, 1962 – 1972 йылдарҙа “Социалистик Ҡаҙағстан”, “Ҡаҙаҡ әҙәбиәте” гәзиттәрендә, “Мәҙәниәт һәм тормош”, “Йондоҙ” журналдарында хеҙмәт итә. Рәми ағайҙың тормошо ла асылда матбуғат баҫмалары менән бәйле булды. М. Мәҡатаев та, Рәми Ғарипов һымаҡ, Мәскәүҙәге Әҙәбиәт институтында белем ала, ул да урыҫ һәм сит ил классикаһын туған теленә тәржемә итеү менән шөғөлләнә. Үҙе тере саҡта уның да өс-дүрт китабы донъя күрә. 1976 йылда 45 йәшендә Алматы ҡалаһында донъянан үтә (Рәми ағай ҙа 45 йәшендә 1977 йылда вафат булды).

Мұҡағәле Мәҡатаевҡа ысын дан, Рәми Ғариповтыҡы кеүек, үҙе үлгәндән һуң килә – 2000 йылда уға һайланма әҫәрҙәре өсөн Ҡаҙағстандың дәүләт премияһы бирелә. Хәҙерге көндә ул шиғырҙары иң ныҡ уҡылған әҙиптәрҙән һанала. Ике шағирҙың яҙмыштары үҙҙәре был донъянан киткәс кенә айырымлана: Алматы ҡалаһында Мұҡағәлегә бронза һәйкәл ҡуйылған, үҙенә айырым мөһабәт музей төҙөлгән. Тик уныһы инде беҙгә түгел, ә туғандаш республиканың үҙ аллы дәүләт статусын алыуына бәйле. Журнал уҡыусыларға Мұҡағәле Мәҡатаевтың үҙем тәржемәләгән бер шәлкем шиғырҙарын тәҡдим итмәксемен.

Мәүлит ЯМАЛЕТДИН.

Муҡағәле МАҠАТАЕВ

* * *

Ай-һай, ғүмер!
Үтәһең бит бер көнө,
Тыяһың бит ҡыуанослы көлкөнө.
Ғүмер тигән – балҡыған бер нәжәгәй,
Ғүмер тигән – күк асмандың бер өнө.
Ай-һай, ғүмер, үтәһең бит бер көнө!

Булмағандай, йөрөмәгәндәй һиндә беҙ,
Китәбеҙ бит, әй, китәбеҙ… бәндәбеҙ.
Йәш быуынға бирәбеҙ ҙә сиратты,
Беҙ китәбеҙ. Китер өсөн килгәнбеҙ.

Ғүмер тигән – әйбер түгел ҡулдағы,
Ғүмер тигән – оло һынау юлдағы.
Йән ҡарайып, сарсағанда, һыуһынды
Бер ҡандырам тигән хыял, алдағы.

Бынау көнмө, күк асманмы, даламы –
Барыһы беҙҙән, барыһы беҙҙән ҡаламы?!.
Ғүмер тигән – аяуһыҙ бер хәрәкәт,
Ғүмер тигән – үлемде һис һанламау.

Бәхет

Бәхет тигән – һинең бала көндәрең,
Бер гәм күрмәй, аҡ бәхеттә йөҙгәнең,
Бәхетен дә, башҡаһын да белмәйсә,
Уй-хәсрәтһеҙ уйнағаның, көлгәнең.
Бәхет шәйле минең шуны белгәнем:
Бәхет тигән – берсә шатлыҡ, берсә моң.
Бәхетле шул – керпек ҡаҡмай төндәрен,
Бәхет эҙләп газаплана кем дә кем.
Бәхет тигән – күңелдәге хыялың,
Шул хыялды ҡыуа төшкән ҡомарың.

Һинең өсөн бәхет – тыуған һәр көнөң,
Бәхет хатта яҙылмаған шиғырың.
Бәхет эҙләп, таш ҡутар, йә мал ҡара,
Тик ошоно иҫеңдә тот, күҙ ҡарам:
Бәхетлеһең, бәхет эҙләп зар булһаң,
Бәхетең булып, зарлап йөрөү – мәсхәрә!
Бәхетең – мин, бәхетем тип бел мине,
Мине белһәң, бәхетеңде белгәнең.
Минең өсөн иң бәхетле көндәрем –
Һиңә, балам, бәхет эҙләп йөрөгәнем.
Тәҡдир менән йөҙгә-йөҙ
Хәбәр бирмәй һиңә киткән һис бер илсе.
Әй, Тәҡдир! Һөйләшәйек, яҡын килсе.
Ниндәй генә һуҡмаҡтарҙан йөрөтһәң дә,
Үҙемдең уйымдағын әйтәйемсе.

Беләһеңме, мин һиңә буйһонмаймын!
Бармы тағы бирә торған зарың, ҡайғың?!
Һин тау булып юлымды быуһаң әгәр,
Мин уның түбәһендә һағымдаймын!
Шуға күрә, юл бир, тип ялынмаймын.

Ниңә йәнең әсемәй бәндәләргә? –
Төшөрәһең һәр ваҡыт бәләләргә.
Үҙ тәҡдирем үҙемә әсә түгелме ни? –
Ауыр саҡта уйың юҡ иркәләргә.

Яҡшылыҡтың ҡылмаһаң да тамсыһын да,
Мул бирәһең ҡарғышын, язаһын да.
Мин тигәндә, йыландай бөгәрләнеп,
Киреһенсә эшләнең барыһын да…

* * *

Күрер инең,
Аңрамынмы, утмынмы,
Белер инең,
Шағирмынмы, юҡмынмы?..
Үс уятҡан Жәңгир хан да
Юҡ бында,
Кенә ҡыуған Махамбет та
Юҡ бында.
Аңлар инең,
Ебекменме, ирменме;
Байҡар инең,
Артыҡмынмы, кәмменме?..

Мин Спартак булалманым, ни сара.
Ә һин үҙең Цезарь була белдеңме?
Серем дә шул,
Йырым да шул –
Алдыңда.
Әйтсе шуны:
Быҫҡыныммы, яндыммы?
Маҡандар юҡ,
Маҡандарҙың һарҡыты –
Муҡағәле Маҡатаев бар бында.

* * *

Ҡарындаш, ниңә киҫтең оҙон сәсте?
Бөртөкләп ниңә йолҡтоң ҡыйғас ҡашты?
Битеңә беренсе сорт он һипһәң дә,
Ҡуңыр йөҙөң ағармаҫ бит, уйлап баҡсы.
Иренең дә, ҡан эскәндәй, ҡыҙыл төҫтә,
Сәсең төҫөн айырырлыҡ түгел һис тә.
Күҙҙәреңдең тирә-яғы ҡаралай күк,
Әллә шөғөлләнәһеңме һин бокста?

* * *

Әй, тәбиғәт,
Йәнемде алһаң,
Алсы минең.
Ерғә тамған бер бөртөк тамсың инем.
Муҡағәле юғалғандан бер ни булмаҫ,
Минән аҙаҡ ҡалһа ерем, ҡалһа илем.
Мин дә бер күтәрелгән һағымдаймын,
Ҡалдырсы, тип, һиңә һис тә ялынмаймын.
Мәңгелек төйәгемә етеү өсөн,
Көнөнә нисә тапҡыр аҙымлаймын.
Кем белә:
Күрерменме иртәгәмде,
Ни ерендә
Өҙөрһөң иртәгемде?
Муҡағәле юғалғандан бер ни булмаҫ,
Һаҡлаһаң минән аҙаҡ орпағымды.

Ҡары[1] үләң

Лермонтов та, Пушкин да мин түгелмен,
Есенинмын тимәнем һис кемгә мин.
Бар ҡөҙрәтем – ҡаҙаҡтың ҡары үләңе,
Унда бер дәһшәтле сер ишетәмен.

[1]Ҡары — боронғо; ҡәҙимге.

Сит ерҙә һағынғанда илен, халкын,
Ҡан менән яҙған уны, бәлки, аҡын.
Ҡаҙаҡтың фигелендәй, үҙе ябай,
Үҙе шундай ҡәҙерле, йәнгә яҡын –
Әйтерһең, пара-пара телгән таҫма,
Уларҙан ҡамсы үрәм, мин бер оҫта.
Һайламаһаң әгәр ҙә шул ҡамсымды,
Өйөмдөң тупһаһына аяҡ баҫма!
Риүәйәт ул, йыртылған пара-пара,
Уларҙы, хәлең етһә, ялғап ҡара!
Ҡары үләңе ҡаҙаҡтың ҡаза тиһәң,
Күҙеңдән ҡаның аҡмай – йәшең тама.
Өйрәндем мин халкымдың бар һөнәрен,
Иген игеү серен дә мин беләмен.
Ҡаҙан-мейем ҡайната барыһын да,
Тат итеп ҡаҙағымдың ҡары үләңен.
Аҡынмын тип нисек мин әйтә аламын –
Халкымдың үҙ әйткәнен ҡабатлаймын;
Ҡаҙаҡтың көпө кейгән ҡары үләңен,
Сәкмән ябып, үҙенә ҡайтарамын.

Әй, ҡатын-ҡыҙ

Әй, ҡатын-ҡыҙ!
Әй, ҡатын-ҡыҙ!
Ҡандайһың?
Һылыу булып үҫәһең бит һәр ҡайһың.
Берәү этә, ә һин унан ҡалмайһың,
Берәү һөйә, ә һин уға бармайһың.
Әй, ҡатын-ҡыҙ!
Әй, ҡатын-ҡыҙ, ҡандайһың?
Әй, ҡатын-ҡыҙ!
Асмандағы тулған ай,
Күҙебеҙҙең яуын алып торғандай!
Белә күрә янбашыңды уйнатып,
Китәһең бит, кил тигәнде тыңламай.
Әй, ҡатын-ҡыҙ!
Асмандағы тулған ай!
... Ҡатын-ҡыҙҙар ир-аттарҙан күп тиме?
Бәрәкалла!
Булһын, әйҙә, хуп, мәйеле!
Ҡатын-ҡыҙҙар ҡайҙа – шунда матурлыҡ,
Ә матурлыҡ артыҡ булған юҡ әле.

Толпарҙар менән бергәмен

Эҙләһә мине кем дә кем,
Ҡаланан эҙләп йөрөмәһен!
Өйгә лә эҙләп килмәһен!
Аяҙлы буран, аҡ тауҙың
Буйында ғүмер һөргәнмен.
Шулар менән бергәмен.
Эйәртте мине элгәре
Көндәрем менән төндәрем;
Иҫемдә, ҡарҙы түшәнеп,
Көрткә ҡороҡ элгәнем.
Эҙләһә мине кем дә кем,
Шул ерҙе килеп бер күрһен!
Үтәләй асыҡ асманда,
Аҡ сайҙа йылҡы баҡҡанда,
Ҡороҡто сәнсеп аҡ ҡарға,
Асманға ҡарап торамын.
Ҡош юлы күктән аҡҡанда,
Тибенеп йылҡым ятҡанда,
Шунан да рәхәт мәл бармы?
Мине лә һаҡлар йән бар тип,
Бар донъя йоҡлап ятҡанда…
Ҡырауҙан һелкеп ҡойроғон,
Кешнәп ҡуйһа ҡолоном,
Һулҡылдап ҡуя йөләнөм,
Йылынып китә күңелем.
Әйтәмен, әйтәм ҡабатлап:
Толпарлы ерҙең улымын!
Ракетанан кәм түгел
Ҡарға сәнселгән ҡороғом.
Шунлыҡтан ҡырыҫ ҡылығым,
Осорор ҡотон уғрының!
…Эҙләһә мине кем дә кем,
Был ерҙән эҙләп йөрөмәһен.
Аяҙлы аҡ ҡар төндәмен,
Аҡ буранлы көндәмен,
Толпарҙар менән бергәмен.
Эҙләһә мине кем дә кем,
Шул ерҙе килеп бер күрһен!

Мәүлит ЯМАЛЕТДИН тәржемәләре.

ҺАҠСЫЛЛЫҠ ТЫЙЫУҘАН БАШЛАНА

Геология һәм агрономия фәне тупраҡ эрозияһын ерҙең өҫкө ҡатламының һыу һәм елдән ашалыуы менән аңлата. Башҡортостанда уны тупраҡтың да иң өҫкө ундырышлы ҡатламының (гумус) һыуҙарҙан ашалыуы тип ҡабул итәләр, сөнки беҙҙең яҡтарҙа ҙур хәүеф тыуҙырыусы елдәр, ҡом бурандары күҙәтелмәй. Әммә тупраҡҡа һыуҙың йоғонтоһо һәр ерҙә күҙәтелә, сөнки республикабыҙ таулы зонаға ҡарай. Яҙғы һыуҙар ғына түгел, ә һәр ҡойма ямғыр ҙа ҡалҡыу урындарҙан уйһыуҙарға ашҡынған бурьяҡ шарламалар барлыҡҡа килтерә. Яңы ғына һөрөлгән йомшаҡ тупраҡты йырғанаҡтар саҡ ҡына ауышыраҡ булған баҫыуҙарҙан еңел генә йыуып алып китә, йәм-йәшел баҫыу өҫтөндә ҡара бураҙналар ятып ҡала. Күпләп йыйылған һыу яр ситтәрендә мәтеле битләүҙәрҙе лә йыуып, тәрән һәм оҙон йырындар яһап, улар йылдан-йыл ҙурая һәм тармаҡлана ғына бара. Эйе, төйәк иткән еребеҙ шундай: тауҙарҙың матурлығы ғына түгел, битләүендә һыу тотмай торған сифаты ла бар. Миңә, мәҫәлән, Мәскәү эргәһендәге өлкәләрҙә офоҡтан офоҡҡаса йәйелеп ятҡан тип-тигеҙ баҫыуҙарҙы һәм туғайҙарҙы күрергә тура килде. Унда ямғыр тамсылары ла тигеҙ генә булып ергә һеңә, йылғаларҙың ҡайһы яҡҡа аҡҡаны ла тойолмай.

Киңерәк алып ҡарайыҡ. Беҙ ниңәлер, мәктәптәге география дәрестәренәнме, донъяла иң ҙур хәүеф булып Сахара (сәхрә – «иркенлек») сүллеге иҫәпләнә, тип уйлайбыҙ. Әммә белгестәр, хәҙерге Йыһан бейеклектәренән ҡарап, ҡомлоҡтарҙың артабан киңәймәүен, киреһенсә, унда йәшеллек арта барыуын билдәләй. Тимәк, Сахара сүллегенең киләсәктә үҫемлектәр менән ҡапланып, саваннаға әйләнеү ихтималлығы бар. Ә бына АҠШ-та иһә эрозия һаман киңерәк ҡолас ала бара. Был заманында илдә ауыл хужалығы етештереүе үтә йылдам үҫтерелеп, тупраҡтың интенсив файҙаланылыуы менән бәйле. Статистика мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы 40 йыл эсендә Ҡушма Штаттарҙа һөрөнтө ерҙәрҙең өстән бер өлөшө әйләнештән сығарылған, сөнки эрозия арҡаһында ул баҫыуҙарҙа иген үҫтереү табыш килтермәй башлаған (Америкала ауыл хужалығы ла мөмкин тиклем күберәк табыш алыу өсөн эшләй). Хәйер, АҠШ өҫтөндә уйнап торған ҡойон, ҡом һәм тупраҡ бурандарын беҙҙә лә телевизорҙан күрһәтеп торалар. Оло киҫәтеү һымаҡ яңғырай был: ҡарағыҙ, күрегеҙ – кешенең ҡырағайҙарса эш-мәкәрлеге нимәгә килтерә! Ә бит заманында илгиҙәр Колумб тәбиғәт сәскә атҡан ергә барып юлыҡҡан булған!

СССР-ҙың планлы иҡтисады заманында тупраҡ һәм ер эрозияһы менән көрәш тә планлы рәүештә алып барылды. Әлбиттә, ҡуйылған пландарҙың файҙаһымы, зыянымы күберәк булғанлығын беҙ йылдар үткәс тә әйтә алмайбыҙ. Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереү, киң ҡоласлы мелиорация

эштәренең әһәмиәте йә һөҙөмтәләре тураһында бәхәстәр әле лә дауам итә. Кире яғы тураһында уйлағанда, шуны ғына билдәләргә мөмкин: был мәсьәләлә ата-бабаларыбыҙ «таяҡты артығыраҡ бөгөп» ташлаған шикелле. Урман-таулы ҡайһы бер райондарҙа һөрөнтө майҙандар нисбәтен 70 процентҡа тиклем еткереүҙең, әлбиттә, кире эҙемтәләрен аңлаусылар булғандыр. Заманында киң ҡоласлы мелиорация эштәренә, һаҙлыҡтарҙы, күлдәрҙе киптереүгә, ҡыуаҡлыҡтарҙы төпләп, баҫыуҙарға әйләндереүгә, ташлы убаларҙы ла һөрөнтө баҫыу итеүгә ҡаршылар ҙа күп ине, әйтәгүр. Был турала яҙыусыларҙың да әҫәрҙәре, сығыштары байтаҡ булды. Мәҫәлән, Ибраһим Ғиззәтуллиндың «Ғашиҡтар баҡсаһы» повесында матур туғайҙы киптерергә, шул юл менән бик күп аҡса һуғырға килгән мелиораторҙар менән ер яҙмышы өсөн борсолған урындағы халыҡ араһында тыуған ҡатмарлы мөнәсәбәттәр һүрәтләнә. Киң йәмәғәтселектең тауышына ҡолаҡ һалыптыр, бәлки, тупраҡ эрозияһына ҡаршы ла бик күп эштәр башҡарыла ине. Тап шул осорҙа хәҙер далабыҙҙы йәмләп ултырған баҫыу һаҡлағыс урман һаҙаттары барлыҡҡа килде, ауылдар янында быуалар хасил булды, йырындар менән көрәш алып барылды. Ерҙе эшкәртеүҙә лә тупраҡтың өҫкө ҡатламын әйләндермәй һөрөү кеүек уңдырышлылыҡты һаҡлаусы технологиялар индерелде.

Бөгөнгө хәлебеҙ нисек һуң? Мәғлүмәттәргә күҙ һалыр алдынан, дөйөм күренеште барлап ҡарайыҡ. Урыҫтарҙың «Бәхет юҡ ине, бәхетһеҙлек ярҙам итте» тигән фәһемле әйтеме бар. Илебеҙҙә социаль ҡоролош системаһының ҡыйралып, иҡтисадтың һәм ауыл хужалығының тарҡалыуы арҡаһында ерҙәргә баҫым шаҡтай кәмене. 90-сы йылдарҙа, Инйәр, Белорет, Әүжән, Мулдаҡай урман-сәнәғәт хужалыҡтарының ябылыуы арҡаһында ғына Белорет урмандары иҫән ҡалды, тип ҡыуанғаныбыҙ хәтеремдә. Юғиһә икһеҙ-сикһеҙ тау битләүҙәре ҡола яланға әйләнеп бөткәйне инде. Колхоз-совхоз системаһының юҡҡа сығыуы арҡаһында, 1,2 млн. гектар һөрөнтө ерҙәр әйләнештән сығарылып, һөҙөмтәлә һөрөнтө ерҙәрҙең өлөшө 65,9 проценттан 50,1 процентҡа кәмегән. Отчеттарға ҡарағанда, ул һөрөнтө ерҙәр «сабынлыҡ һәм көтөүлеккә әйләндерелгән» булһа ла, халыҡ хәлдең улай түгеллеген белә: ул майҙандар һөрөргә һәм сәсергә хәл етмәү арҡаһында ташландыҡҡа әүерелде. Күпселеген ағас баҫты, ҡайһы бер майҙандар әле лә ҡарағураға күмелеп ята, бесәнлек тә, көтөүлек тә итерлек түгел. Ул ерҙәргә “ҡалдау” мөһөрө һуғып, киләсәктә ҡабат үҙләштерә башларға тура килер, ахыры.

Башҡортостанда ер майҙандары үҙгәреше

	1970	2004
Ауыл хужалығы ерҙәре, *млн. га*	7,4	7,7
Шул иҫәптән һөрөнтө ерҙәр	4,8	3,7

Ә бит 1997 йылда үткәрелгән бонитировкаға (ерҙәрҙе тикшереү) ҡарағанда, республикала ауыл хужалығы ерҙәренең 67 проценты эрозия йәһәтенән хәүефле тип табылған. Был баһа, унда уңдырышлы тупраҡтың йыуылыуы дауам итә, ярҙар ишелә, йырындар тәрәнәйә һәм киңәйә, тигәнде аңлата. Әлбиттә, бер кем дә баҫыуҙар буйлап уңдырышлы тупраҡтың кәмей барыуын үлсәп йөрөмәй, шулай ҙа күп йыллыҡ күҙәтеү һөҙөмтәләре бар.

Тупраҡтағы гумус ҡатламы һәм гумус күләме

(Ҡара тупраҡлы һөрөнтө ерҙәрҙә, республика буйынса уртаса күрһәткестәр)

	1965 – 1970	1995 – 2000
Ҡара тупраҡ (гумус) ҡатламы, *см*	80	72
Гумус күләме, 50 *см-ҙа(т/га)*	523	380

Күренеүенсә, 30 йылда ҡара тупраҡлы иң уңдырышлы ерҙәрҙә гумус ҡатламы 10 сантиметрға йоҡарған. Тәбиғи шарттарҙа (кеше ҡыҫылышынан тыш) ҡара тупраҡ ҡатламы ерҙә 100 йылға бер сантиметрға арта, тигән ғилми ҡараш бар. Бер гектар майҙандың 20 сантиметр ҡалынлығында ул тонналап иҫәпләнә һәм, 200 тоннанан ашҡанда, тупраҡ бик яҡшы уңдырышлы һанала. Үрҙәге таблицала, минеңсә, үлсәмдәр дөрөҫ алынмаған, сөнки урман ерҙәрендә, мәҫәлән, тупраҡ ҡатламы 40 сантиметрҙан артмай һәм унда ҡатламдың 50 см. булыуы мөмкин түгел. Әгәр мәғлүмәттәрҙе ҡабул ителгән стандартҡа яраҡлаштырып ҡараһаҡ (20 см.), беҙҙәге тупраҡты яҡшы уңдырышлы тип әйтеп булмай.

Тупраҡҡа кеше эшмәкәрлегенең йоғонтоһо бик көслө. Тәбиғәт эрозияһын беренсе урынға ҡуйһаҡ, ерҙе эшкәртеүҙең интенсив ысулдарын – күпләп һыу һибеүҙе һәм органик ашлама (тиреҫ) урынына күберәк минераль ашлама ҡулланыуҙы икенсе һәм өсөнсө урынға ҡуйырға мөмкин. Һөрөнтө ерҙәрҙә һуғарыу системаһын ҡулланыу тупраҡтың өҫкө ҡатламындағы тоҙҙарҙың, йыуылып, өҫкә ҡалҡыуына килтерә. Мәҫәлән, Африкалағы Нил йылғаһы үҙәнендә әле ерҙәрҙең 70 проценты, тоҙланған һәм тупраҡтың әселеге юғары булыуы сәбәпле, эшкәртергә яраҡһыҙ.Беҙгә ул хәүеф янамай һымаҡ, әлегә һуғарыу системаһы ҡулланылған баҫыуҙар күренмәй, уңыш алыуҙа ла беҙ күк ҡөҙрәтенә генә ышанырға күнеккәнбеҙ. Тотош донъяла 250 млн. гектар һыубаҫар баҫыуҙарҙың 25 проценты тоҙлоға әйләнгәнен иҫәпкә алһаҡ, был фажиғәнең дә ни тиклем ҙур икәнлеген самаларға мөмкин. Был – кешенең тәбиғәттән мөмкин булмағанын да һығып алырға тырышыу касафаты.

Ашлама, бигерәк тә органик ашлама, ҡулланмау бәләһе Башҡортостан ерҙәренә туранан-тура ҡағыла. Ҡағиҙә булараҡ, агрономдар белә: баҫыуҙан йыйып алынған уңыш күпме булһа, унда шул уҡ күләмдә минераль йә органик ашлама ҡайтанан индерелергә тейеш. Ошо ябай ғына ҡағиҙә-талап йылдың-йылы үтәлмәү арҡаһында, ерҙең уңдырышлығы кәмегәндән-кәмей. Баҡалы районында, мәҫәлән, күп йылдар изге йола йәшәп килә: йыл һайын тотош район күләмендә өмә үткәреп (ул «уңдырышлыҡ көнө» тип атала), бер хужалыҡ баҫыуҙарына күмәкләп тиреҫ сығарыу ойошторалар. Шулай итеп, күмәк техника, берҙәм эш менән фермалар янын да таҙартып ҡуялар, иген баҫыуҙарына бик кәрәкле серетмәне лә индерәләр. Был эште яңғыҙ хужалыҡ, заманса әйтһәк, фермер бер нисек тә ойоштора алмаҫ ине. Хәҙер баҫыуҙар органик ашламаны ғына түгел, ә минераль ашламаны ла йылдар дауамында күрмәй. Ер ял итһен өсөн, уны парға ҡалдырыу, ашлама урынына сидераттар ҡулланыу, күп баҫыулы сәсеү әйләнешен индереү тураһында әйтеп тораһы ла юҡ.

1900 йылда Францияның Париж ҡалаһында үткән Бөтә Донъя халыҡ ҡаҙаныштары күргәҙмәһенә (унда башҡорт балы алтын миҙалға лайыҡ була) урыҫ ғалимы В. Докучаев Воронеж өлкәһенән бер куб-сажин (2 кубик метр)

дүрткел ҡара тупраҡ өлгөһө алып бара. Күргәҙмәлә Рәсәйҙең тупраҡ өлгөләре – алтын миҙалға, ә Докучаев үҙе орденға лайыҡ була. Аҙаҡтан Сорбонна университетында һаҡлауға ҡуйылған тупраҡ шаҡмағы аҙаҡтан тарҡала. Хәҙер Воронеж өлкәһендә 2 метрлы ҡара тупраҡ ҡатламын табыу мөмкин түгел...

Тупраҡ даими тәрбиә талап итә – уны ерҙә эшләгән һәр кем белә. Тәбиғи шарттарҙа гумус ҡатламы 100 йылға бер сантиметрға арта, тип иҫәпләп сығарылған. Уны яһалма рәүештә арттырыу өсөн, йыл һайын сәсеп, уңыш йыйып торғанда, гектарына 100 тонна тиреҫте биш йыл дауамында сығарып торорға кәрәк. Әле һүҙ тупраҡтың ярлыланыуы тураһында ғына бара, ә бит йыйылған уңыш аша юғалтылған матдәләр – мәсьәләнең бер яғы ғына. Йыл да кәҫен әйләндереп һөрөү сәбәпле, тупраҡ составының үҙгәреш кисереүе, әсе ямғырҙар яуыу һәм гербицид кеүек препараттар ҡулланыу арҡаһында унда зарарлы матдәләр туплана барыу ҙа бар әле.

Ергә кеше эшмәкәрлеге тәьҫиренең тағы ла бер ҙур өлкәһе – техноген сараға, атап әйткәндә, файҙалы ҡаҙылмалар – нефть, газ, мәғдән сығарыуға ҡағыла. Унан һуң тимер һәм автомобиль юлдары һалыу килә, сөнки саҡрымдарға һуҙылған ҡаты юл ер аҫты һыуҙарының, йылғасыҡтарҙың йырҙаларын быуа. Өфө-Белорет тимер юлынан үткән кеше иғтибар итәлер: юлдың ике яҡ ситенән дә өҙлөкһөҙ һаҙлыҡтар, ҡороған ағастар һуҙыла. Асылда урыны менән юлдың ике яғы ла әллә нисә метр арала бер нигә лә яраҡһыҙ хәлгә килгән. Быны сәбәбе – һыу юлдарының быуылыуы. Яҡтылыҡтарҙы эшкәртеү бик күп ҡалдыҡтар барлыҡҡа килтерә, улар ҙа бик ҙур майҙанды биләй. Ә техноген һәләкәт тыуа ҡалһа, бик ҙур майҙандар оҙайлы ваҡытҡа бушлыҡҡа әйләнәсәк тигән һүҙ.

Сираттағы бәлә – йылдан-йыл йышая барған урман янғындары ҙурыраҡ фажиғәләргә килтерә башланы. Эҙемтәләре бик оҙаҡҡа һуҙылған был һәләкәтте ҡоролоҡҡа ғына бәйләп ҡалдырыу урынһыҙ, сөнки кешеләрҙең тәртибенә лә, уның тәрбиәһенә лә ҡағылышлы был күренеш. Урман янғыны булып үткән урындарҙа бик оҙаҡҡа ҡола ялан ятып ҡала, унда бер ни ҙә үҫә алмай. Әгәр ул тау битләүе булһа, унда ҡар ҙа ятмаясаҡ, булған ғына тупраҡты ҡойма ямғырҙар йыуып алып китәсәк. Шуға ла урман янғыны бик күптән булған (бигерәк тә ерҙән үтһә) ергә бөгөн барып сыҡһаң да, ул күңелдә ауыр тойғолар ҡалдыра. Бөгөн дәүләт кимәлендә янғындарҙың ағастарға ғына түгел (ҡыуарған ағасты ла ҡырҡып файҙаланырға мөмкин әле), ә ергә, тупраҡҡа зыяны күберәк икәнен аңларға, халыҡҡа ла шуны аңлатыу эше алып барырға кәрәк.

Тыуған еребеҙгә ябырылған афәттәрҙе күктән төшкәнгә һәм ситтән килгәнгә генә япһарып ултырһаҡ, беҙ ябай күҙәтеүсе хәлендә генә ҡаласаҡбыҙ. Кешелек үҙенә үҙе тыуҙырған сетерекле хәлдән сығыу юлдарын үҙе эҙләргә бурыслы, тибеҙ икән, ул һәр кемгә ҡағыла. Ә кескәй генә анығ эште лә үҙ ҡулдарың менән атҡарыу юғары төшөнсәләр тураһында абстракт фәлсәфәләр ҡороуға ҡарағанда күпкә ҡыйыныраҡ. Быны йыл һайын төрлө кимәлдә үткәрелеп торған экологик өмәләр миҫалында ла күҙәтергә мөмкин. Бер нисә сәғәт ваҡытыңды йәлләмәй, сығып, бәләкәй генә майҙанды сүп-сарҙан таҙартып алырға ғына кәрәк. Әммә эш шуға килеп терәлә: кешеләр һүҙ көрәштереүҙәргә төшөп китә, һылтауы бер генә: ҡатнашмаҫҡа. Үҙенең өйөн ҡурсаҡтай тотҡан әҙәм йортонан йыйып алған сүпте юл йә йылға буйына

ташлап китә, һәм уның күңелендә «Туҡта, үҙ еремә ташлайым түгелме?" тигән уй тыумай. Экологик тәрбиәһеҙлектең төп бәләһе – милекте үҙенекенә һәм башҡаларҙыҡына түгел, ә «минеке» һәм «минеке түгел»гә бүлеп ҡарау ул. Шулай булмаһа, кеше «башҡалар ҙа минең кеүек кеше бит әле» тигән уйға төшөр ине. Ҡала яны баҡсаларының эстән гөл-сәскәгә күмелеп ултырып, кәртә буйҙары аяҡ баҫҡыһыҙ ҡыйлыҡ булыуҙа ни мәғәнә! Минең баҡса юл ситендә булғас, был күренеш сей елкәгә үтеп бөткән инде.

Швейцарияла йәшәп ҡайтҡан бер танышым ғәжәп бер күренеште һөйләне. Был илдә кеше кибеттән әйбер алһа, уның ҡаптарын, һауыттарын шунда уҡ ҡалдырып китә икән. Сөнки өйгә алып ҡайтһа, уларҙы барыбер сығарып ташларға тура киләсәк, ә ҡалдыҡтарҙы утилләштереү Швейцарияла ҡиммәткә төшә. Тимәк, ябай һәм аныҡ һығымтаға киләбеҙ: кешелә тирәяҡ мөхиткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү өсөн, уны шундай шарттарға ҡуйырға кәрәк – талаптарҙы үтәмәү мөмкин булмаһын! Беҙҙең илдә бөтә тыйыуҙар, сикләүҙәрҙе кеше хоҡуҡтарына йоғоноу тип ҡабул итәләр, ә бына таҙа һәм тәртипле Европала һис тә улай түгел бит. Унда урамда эсеп килгән һыра шешәһен юл ситенә ташлап китеп ҡара әле?!

Ҡалдыҡтар менән бысратыуҙы, өҫтә телгә алынған өсәүҙән һуң, еребеҙгә йоғонто яһаусы дүртенсе фактор тип ҡарарға ла мөмкиндер. Быны артҡы планға ҡуйыу ҙа шуға ғыналыр: ул кешенең үҙенән генә тора һәм, тейешле ихтыяр булғанда, ярайһы уҡ еңел хәл ителер ине. Өҫтәүенә, ерҙе бысратыуҙың фәҡәт Рәсәй өсөн генә ғәҙәти күренеш икәнлеген оноторға ярамай, башҡа тарафтарҙа ул төрлө кимәлдәрҙә көйләнеп бөткән инде. Ә Рәсәйҙә әлегә был йәһәттән уның икһеҙ-сикһеҙлеге генә ҡотҡарып килә, йәғни беҙҙә әле күпме бысратһаң да ярай һымаҡ (1 квадрат километрға 8 кеше тура килә, тигеҙ урынлаштырғанда, кешеләр бер-береһен таба алмаҫ ине). Ләкин шундай шарттарҙа ла күпме ерҙе ҡарағыһыҙға әйләндергәнбеҙ икән, тәртипһеҙлек масштабын күҙ алдына килтерергә мөмкин.

Барҙың бөтөрө бар, тип өйрәтә торғайны әсәйем. Ә, бәлки, беҙгә иң тәүҙә, күберәк етештереү, сығарыуҙы маҡсат итеп ҡуймай, булғанды һаҡсыл ҡулланырға өйрәнергә кәрәктер?

Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.

ИМАН ИЛЕ – МӘККӘ БИШЕГЕНӘ АСЫП ИНДЕМ ДОНЪЯ ИШЕГЕН...

Бисмилләһир-рәхмәниир-рәхиим! Рәсәйҙең хажға барыуҙы үҫтереүгә ярҙам күрһәтеүсе хәйриә фонды аша беҙҙең төркөм, 2011 йылда тур операторҙарҙан алданып, хаж сәфәренә бара алмаған мосолмандар, 2012 йылдың 19 октябрендә Ислам диненең бишенсе әрҡанын үтәү өсөн сәфәргә юлландыҡ. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә шулай тигән: "*...Кешеләрҙең Аллаһ алдында булъан бурыстарына хаж ҡылыу кәрә, әгәр улар быны үтәй алырлыҡ булһалар*" ("Ғимран"сүрәһе, 97).

Хаж мөмкинлеге булған, бәлиғ һәм һау-сәләмәт кешеләргә фарыз. Ибраһим һәм Исмәғил пәйғәмбәрҙәр тарафынан тергеҙелеп, улар, башҡа пәйғәмбәрҙәр һәм сәхәбәләр ғибәҙәт ҡылған урын булғанға күрә, Ҡәғбәтулла мөбәрәк бер ғибәҙәтхана иҫәпләнә. Шуның өсөн дә Аллаһы Тәғәлә беҙгә шул ғибәҙәтхананы зыярат ҡылырға ҡушҡан. Быны атҡара алған кешеләргә ҙур әжер һәм сауаптар вәғәҙә иткән. Ғалимдарҙың һүҙҙәренә нигеҙләнеп, хаж Һижриҙең алтынсы йылында фарыз булған, шул нигеҙҙән Аллаһы Тәғәлә аят индергән: "*Аллаһ ризалығына өмөт менән хаж һәм үмрәне иң камил рәүештә үтәгеҙ*" (Баҡара сүрәһе, 196-сы аят).

Билдәле бер ғибәҙәттәрҙе ҡылыу ниәте менән Сауд Ғәрәбстанындағы Мәккә ҡалаһына сәфәр, "Тауаф" (Ҡәғбә тирәләй әйләнеү), "Сәғи" (Әс-Сафа һәм Әл-Мәрүә тауҙары араһында йүгереү), Арафат майҙанында булыу хажға барыу иҫәпләнә. Пәйғәмбәребеҙ, Аллаһының сәләме һәм салауаты булһын Уға, хаждың Ислам диненең бишенсе әрҡаны икәнен аңлатып, ошоларҙы әйткән: "Ислам дине биш әрҡанға нигеҙләнгән: Аллаһтан башҡа ғибәҙәт ҡылырлыҡ бер ниндәй илаһи зат юҡлығына, Мөхәммәт Уның илсеһе икәненә шәһәҙәт ҡылыу, намаҙ уҡыу, зәкәт биреү, хаж ҡылыу һәм Рамаҙан айында ураҙа тотоу".

Беҙ – Рәсәйҙә динһеҙлек хөкөм һөргән осорҙа донъяға килеп, ғүмеребеҙҙең ярайһы өлөшөн Советтар дәүерендә үткәргән быуын. Бигерәк тә "бәләкәй халыҡтар"ҙың зыялылары күпләп юҡ ителгән 1937 йылда ауылдарҙа мәсеттәр емертелеп, муллалар атылып, динде тар-мар итергә тырышыуҙарына ҡарамаҫтан, беҙҙең бәләкәй генә боронғо Усман (Ҡаҙморон) ауылында уҙған быуаттың 70-се йылдары урталарына тиклем, мәсет булмаһа ла, уҡымышлы мулла – Аҫылгәрәй бабай Әхмәтов иҫән ине. Уның Ураҙа, Ҡорбан байрамдары алдынан ауылдағы һәр йортҡа инеп, Ҡөрьән аяттарын уҡып йөрөүен ауылдаштар әле булһа хөрмәт менән иҫкә ала. Иҫемдә, 60-сы йылдарҙың ҡояшлы иртәһендә, ниндәйҙер дини байрам алдынан, Аҫылгәрәй олатай беҙгә килеп инде. Өлкәндәр өйҙә юҡ, иҙәндәр тап-таҙа итеп ҡырып йыуылған, урындыҡта йыуып киптерелгән, әле таҫлап төрөлмәгән кер өйөмө ята. Бабай уларҙы иплəп кенә этәреп, ҡиблаға ҡарай йәтешләп ултырҙы ла: "Балалар, һеҙ тик кенә ултырып тороғоҙ, мин Ҡөрьән уҡып алам", – тип бәләкәй генә дүрт баланы йөҙҙәребеҙҙе ҡиблаға ҡаратып

теҙеп ултыртып ҡуйҙы. Ул доғаларын тамамлап, бергәләп "әппәр" итеп ҡуйғас, мин, балаларҙың иң ҙурыһы булараҡ, бабайға өсмө-бишме тин тимер аҡса бирәм хәйергә. Тағы ла бергәләп "әппәр" итәбеҙ. Шулай бәләкәй саҡтан күңелдә уйылып ҡалған изге Ҡөрьән доғалары, матур дини йолалар ғүмеребеҙ буйына күңел түрендә һаҡланып, изге аманат булып беҙҙе оҙата килә. Заманында сәйәси золомға дусар ителеп, Аҡ диңгеҙ каналын төҙөгән Асылгәрәй мулла бабайыбыҙҙың йәне йәннәтте биҙәйҙер, тип уйлайым.

Һәр кешенең тормош нигеҙендә ғаиләһенән, үҙен уратып алған мөхитенән алынған тәрбиә ята. Биш бала тәрбиәләп үҫтергән, һуғыш ветераны атайым Исламғәли һәм әсәйем Миңнисаның: "Балаҡайым, кейемең урыҫ булһа ла, күңелең дөрөҫ булһын," – тигән һүҙҙәре ҡолағыбыҙҙа бөгөн дә яңғырап тора. Беҙ был һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә йәшәй-йәшәй төшөнәбеҙ. Әйткәндәй, атайым берәй нәмә тураһында аңлатһа: "Төшөндөңмө?"– тип һорай торғайны. Ә үҙебеҙҙең нәҫелдә 1937 йылда атылған мулла бабайыбыҙ тураһында беҙ бәләкәй саҡта бик һөйләп барманылар. Ләкин уның тураһында миңә урта мәктәпте тамамлап, юғары уҡыу йортона ингән саҡта, Совет власы һағында "уяу" торған ҡайһы бер ауылдаштар тиҙ белгертте. Улар КПСС Өлкә комитетына: «...мулла нәҫеленән булған Рәмзиә Бикәнәсованы ни эшләп юғары уҡыу йортона алдығыҙ?" – тип ялыу яҙып ебәрҙеләр. Ул бабайҙарҙың йәндәре йәннәттә булһын, балаларының балаларына ла юғары белемдәр алып, мул, матур тормошта үҙ урындарын табып, әйләнә-тирәһендәгеләргә игелекле кешеләр булып ғүмер итеүҙәрен теләйем. Ошо ялыуҙан һуң мин мулла бабайым Муллағәли Ғәйнулла (1864 – 1937) улы Бикәнәсовтың яҙмышы менән ныҡыраҡ ҡыҙыҡһына башланым. Төрлө архивтарҙа ҡаҙыныуҙар, бабайыбыҙ яҙмышы тураһында ғына түгел, шул осорҙа Ауырғазы районынан ҡулға алып юҡ ителгән башҡа дин әһелдәре, муллалар яҙмышы тураһында ла ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе асыҡларға насип булды. Бына уларҙың исемдәре: Фәхретдин Миңлеғәзетдин улы Нәжметдинов, 1874 йылғы, Солтанморат ауылы муллаһы; Бәхтиәр Ғәбделнасир улы Әбдрәшитов, 1866 йылғы, Түбәнге Ҡарамалы ауылы муллаһы; Мөхәмәтғариф Мөхәмәтсафа улы Уразбахтин, 1863 йылғы, Батыр ауылы муллаһы; Ҡорбанғәли Сафа улы Насиров, 1884 йылғы, Мораҙым ауылынан; Исхаҡ Хафиз улы Шафиҡов, 1900 йылғы, Сәлих ауылынан; Хөсәйен Мөфтәхетдин улы Кәримов, 1870 йылғы, Талбазы ауылынан; Муллағәли Ғәйнулла улы Бикәнәсов, 1864 йылғы, Ҡаҙморон ауылынан. Мулла бабайыбыҙ 1937 йылдың 23 ноябрендә ҡулға алынып, 1937 йылдың 14 декабрендә Өфө төрмәһендә атыла. Уның менән бергә булған Исхаҡ Шафиҡов та атып үлтерелә. Әйткәндәй, ул күренекле яҙыусы Ғәзим Шафиҡовтың нәҫеленән. Палачтар үҙ эшенең оҫталары булған, ҡорбандарын ҡасан юҡ ителеүен сәғәт-минутына тиклем күрһәтеп яҙып барған. Был ҡот осҡос язаны атҡарыусының фамилияһы ла теркәп ҡуйылған.

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында, ниһайәт, Рәсәйҙә дин рөхсәт ителгәс, шәриғәт ҡанундарын төшөндөрөп, намаҙ уҡырға, тәжүид ҡағиҙәләрен аңлатып, Ҡөрьән уҡырға өйрәткән беренсе мөғәллимдәрем Рәкип, Ҡасим, Тулҡын, Ғәббәс хәҙрәттәргә, уҡытыусыларым Флүрә, Наилә абыстайҙарға сикһеҙ рәхмәтлемен. Бәхеткә күрә, Башҡорт дәүләт университетында беҙгә дүрт йыл, ғәрәп графикаһына нигеҙләнгән иҫке төрки теленән башҡа, ғәрәп телен дә уҡытҡайнылар, Аллаһының рәхмәте менән, миңә Ҡөрьән уҡырға өйрәнеү еңел булды.

Шулай итеп, 2012 йылдың 19 октябрендә көндөҙгө сәғәт 1-гә беҙҙе Өфө аэропортына йыйҙылар. Документтарҙы барлап, төрлө инструктаждар үтеп, төнгө сәғәт ун икеләр тулғас ҡына, "Төрөк һауа юлдары" самолетына ултыртыу

башланды. Иорданияның Акаба ҡалаһына илтәсәк самолет хеҙмәткәрҙәре баштарына яулыҡ ябынған мөләйем, тыйнаҡ стюардессалар булыуы хажға барыусыларҙы таң ҡалдырҙы. Биш сәғәттән һуң Акабаға килеп төшкәс, бөтә уңайлыҡтары булған "Мерседес-бенц" автобустарында, күп таможнялар үтеп, Мәккәгә йүнәлдек. Һәр туҡталышта йыуынып, тәһәрәт алырға, намаҙ уҡырға бөтөн уңайлыҡтар бар. "Юл ғазабы – гүр ғазабы" тигән әйтемдең дөрөҫлөгөн үҙ елкәбеҙҙә татып ҡарарға мәжбүр ителгән мәлдәр ҙә булғыланы. Ләкин беҙ уларҙы Аллаһының бөйөк һынауы икәнен һис кенә лә иҫебеҙҙән сығарманыҡ. Өфөнөң «Ғуфран» мәсетендә, әле 2011 йылда уҡ, беҙҙең төркөмдө уҡытып, хажға барырға әҙерләгән Тулҡын хәҙрәттең төплө белем биргәненә мең-мең рәхмәттәр уҡыным. Уға Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте яуһын. Хәҙрәтебеҙ иҫкәрткәйне: "Мәккәгә барыу еңел түгел. Аллаһының рәхмәтенә ирешеү ҡыйынлыҡтар аша килә. Ниәттәрегеҙҙе дөрөҫләгеҙ. Саф ниәттәр менән генә йөрөргә кәрәк. Ибн Мәсғүд әйткән: "Мәккәнән башҡа ҡалаларҙа Аллаһы Тәғәлә яман ниәт өсөн кешене тиҙ язаламай. Ул ниәтен ғәмәлгә ашырмайынса. Ләкин Мәккәлә кеше яман уйҙар өсөн дә яза ала, ниәтен ғәмәлгә ашырмаһа ла." Быға дәлил – Ҡөрьәндең "Хаж" сүрәһендәге 25-се аяты*: "Ысынлап та, иман килтермәй, Алла юлынан тайпылған, Беҙҙе унда йәшәүселәргә лә һәм күсеп йөрөүселәргә лә халыҡтар өсөн уртаҡ итеп һалынған "Харам мәсет"тән ситләшкән, золом менән мөртәтлек ҡылырға уйлаған кешеләргә ғазаплы язаны Беҙ күрһәтербеҙ" (22:25)*.

"Түҙемле булырға тырышығыҙ. Сәфәр – ул һынау. Сәфәр сыҡмай тороп, кешене белеп булмай," – тип өйрәтте хәҙрәт һәм һүҙҙәрен һәр саҡ хәҙистәр менән дәлилләй торғайны. "Бер ваҡыт Үмәр Ибн Әл-Хаттаб, Аллаһ унан разый булһын, хәҙрәт янына бер мосолман килеп, икенсе берәүҙе маҡтай башлағас: "Һин уның менән сәфәрҙә булдыңмы?" – тип һорай. "Юҡ", – тип яуаплай теге мосолман. "Кеше менән сәфәрҙә булмайынса, һин уны маҡтама,"– тигән уға хәҙрәти Үмәр.

Изге сәфәргә юлланғанда үҙеңә юлдаштар һайлау ҙа сөннәт ғәмәлдәргә инә. Беҙ бүлмәлә, бер ғаилә кеүек, алты кеше йәшәнек. Икенсе тапҡыр хаж ҡылыусы Әминә һәм Флүрә абыстайҙарҙың тәжрибәләре беҙгә генә түгел, күрше-тирәләге хажиәләр өсөн дә файҙалы булды. Һөнәре буйынса табибә Флүсә хажиәнең дә ярҙам-шәфҡәте бөтәбеҙгә лә етте. Нәсимә һәм Рәзидә абыстайҙарҙың тормош тәжрибәләре лә минең өсөн бик фәһемле ине. Уларҙың барыһына ла Аллаһының рәхмәте яуһын! Алға китеп шуны әйтәйем: беҙ, алты хажиә, хаждан һуң да туғандарса аралашып, дини байрамдарҙы Ҡөрьән табындарында бергәләшеп билдәләп йәшәйбеҙ.

Хаж ҡылыусы ниәтен һәр ваҡыт дөрөҫләй, ул уны ниндәйҙер донъя мәнфәғәте өсөн йәки маҡтау йәки хажи исемен йөрөтөү өсөн түгел, бәлки, Раббыһына яҡынайыр, Уның ризалығы өсөн генә ҡыла. Юлға сығыр алдынан васыятыңды, бурыстарыңды яҙып ҡалдырыу ҙа бик яҡшы эш һанала, ваҡытлыса алған кеше әйберҙәрен кире ҡайтарыу йәки ҡалдырып тороуға рөхсәт алыу, сөнки йәшәү һәм үлем Бөйөк Раббыбыҙ ҡулында бит. Шулай уҡ үткән гонаһтарыңа үкенеп тәүбә итеү һәм уларҙы бүтән ҡабатламауҙа ныҡлы ниәтләү, берәйһенең хаҡҡыҙға малмөлкәтен үҙләштергән булһаң, уны хужаһына ҡайтарыу. Ғөмүмән, кешеләрҙе бәхилләтеп, үҙеңде шулай киләсәк ҙур әжер-сауаплы юлға әҙерләйһең.

Хаж йәки үмрә ҡылғанда иң беренсе мөһим эш ихрамдан башлана. Ихрам – ул хаж ғәмәлдәренә кергәндәге ниәт, үмрә ҡылырға теләгән кеше йылдың теләһә ниндәй айында ниәтләй ала, әммә хаж ҡылыусы фәҡәт ҡайһы бер көндәрҙә генә ниәтләй ала. Ул көндәр: Шәүәл айы, Зөлҡәғиҙә айы һәм Зөлхизә айының беренсе ун көнө. Хажға йәки үмрәгә ниәтләнеп кереү өсөн махсус урындары

бар. Ул миҡат тип атала. Пәйғәмбәребеҙ, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, ихрам хәленә керә торған биш урынды билдәләп ҡуйҙы, хажи шул “миҡат” урындарынан ғына ихрам хәленә керә ала. Бына ул биш “миҡат”: Зөлхүләйфә, Әл-джүхфә, Карн Әл-мәнәзил, Йәләмләм, Зәтү ғирҡ. Пәйғәмбәребеҙ, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, әйткән: *“Был миҡаттар ошо ерҙәрҙә йәшәгән кешеләр һәм шулай уҡ миҡат тирәһенән хаж йәки үмрә үтәйем тип үтеп барыусылар өсөн урын”* (Бохари һәм Мөслим хәҙис йыйынтыҡтарында). Хажиҙарға миҡатты ихрам хәленә кермәйенсә үтеп китеү тыйыла. Белә тороп үтеп китә икән, уға кире барып ихрамға керергә кәрәк буласаҡ. Шулай эшләмәһә, Мәккәлә булған ваҡытта бер һарыҡ салып, уны фәҡирҙәргә таратыу мәжбүри буласаҡ.

Беҙ Мәккәнән 410 саҡрымда, Мәҙинә ҡалаһынан йыраҡ түгел, Зөлхүләйфә тигән ерҙә туҡтап, йыуынып, ихрам кейемдәрен кейгәс, ошо минуттарҙа ҙур ихласлыҡ менән үлемде лә иҫкә алып, ике рәҡәғәт нәфел намаҙҙарын уҡығас: *“Аллаһүммә инни үридүл-хәжжә фәйәссирһү ли үә тәҡаббәлһү минни”,*– тип Хажға ниәт ҡылдыҡ. Мәғәнәһе: Йә Рабби, мин хаж ҡылырға ниәт иттем; инде Һин уны миңә еңел ҡыл һәм уны минән ҡабул ит”. Ниәт ҡылғандан һуң ошо тәлбиәне уҡыныҡ: *“Ләббәйкәл-лааһүммә ләббәйк, ләббәйкә ләә шәрикә ләкә ләббәйк, иннәл-хәмдә үән-ниғмәтә ләкә үәл-мүлкә, ләә шәрикә ләк!”* Мәғәнәһе: ”Бына мин Һинең ҡаршыңда, Йә Аллаһ! Бына мин Һинең ҡаршыңда! Бына мин Һинең ҡаршыңда, юҡ Һиңә тиңдәшлек, бына мин Һинең ҡаршыңда! Бөтөн маҡтау Һиңә бөтөн ниғмәт һәм хужалыҡ Һиндә, юҡ Һиңә бер ниндәй тиңдәшлек!” Был тәлбиәне артабан ысын күңелдән, йөрәгең, йәнең-тәнең менән йыш ҡына, һәр саҡ өсәр тапҡыр әйтергә кәрәк. Ирҙәр ҡысҡырып, ә ҡатын-ҡыҙҙар тауышын күтәрмәй генә әйтә.

Ниәт ҡылып, ошо тәлбиәне уҡығандан һуң, беҙ, хажиҙар, “ихрам”лы тип атала башланыҡ. Ихрам хәлендәге хажиға ҡайһы бер ярамаған ғәмәлдәр бар: сәс, тырнаҡ киҫеү. Әгәр хажи, ихрам хәлендә була тороп, онотоп, белмәйенсә киҫһә йәки яңылыш тырнағы һынып төшһә, уға гонаһ юҡ. Хажиға барлыҡ хушбуй-еҫле майҙарҙы кейемендә, тәнендә ҡулланыуҙан тыйылырға кәрәк. Һәр бер мосолманға – ирме, ҡатынмы, ихрам хәлендәме, юҡмы – берәүгә лә Мәккәлә һунар менән шөғөлләнергә һәм был эштә ярҙамлашырға ярамай. Шулай уҡ һәр бер мосолманға – ирме, ҡатынмы, ихрам хәлендәме, юҡмы – берәүгә лә Мәккәлә ағас йәки йәшеллекте өҙөргә, һындырырға ярамай, әммә кешеләрҙең үҙҙәре ултыртҡандары был хөкөмгә инмәй. Шулай уҡ, һәр бер мосолманға – ирме, ҡатынмы, ихрам хәлендәме – юҡмы, берәүгә лә Мәккәлә берәйһенең юғалтҡан йәки төшөрөп ҡалдырған байлығын алырға ярамай, ләкин юғалған әйберҙе хужаһына ҡайтарыр өсөн алыу зыян итмәҫ. Ихрам хәлендә булған хажиға өйләнеү, танышыу, өйләндереү, таныштырыу, бигерәк тә ир менән ҡатын араһындағы яҡынлыҡ мөнәсәбәттәре тыйыла. Ихрам хәлендә булған ир кешегә башына кейеү тыйыла, әммә онотолоп йәки белмәйенсә кейеп ҡуйһа, иҫкә төшөрөү менән һалһа, уға гонаһ булмаҫ. Ихрам хәлендә булған ир кешегә кеше ҡиәфәтендә тегелгән кейемдәр (күлдәк, салбар һ.б.) һәм ябыҡ, арты ябыҡ аяҡ кейемдәрен кейеү тыйыла. Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн махсус ихрам кейеме юҡ.

Ә ихрам хәлендә хажиға ниҙәр рөхсәт ителә? Сәғәт, наушник кейеү, сандали кейеү, күҙлек кейеү, ҡайыш быуыу, зонтик ҡулланыу, ҡояштан ҡасып машина йәки башҡа берәй әйбер аҫтына инеү, яра өҫтөндәге бинтты һүтеү, яңынан урау рөхсәт ителә. Ихрам кейемен һалып йыуыу, башты, тәнде йыуыу һәм ошо ваҡытта сәс ҡойолһа, уға гонаһ булмаҫ.

Беҙҙең төркөм автобустарға ултырырға сыҡҡанда, Зөлхүләйфәлә ҡойоп ямғыр яуып үткәйне. Был ямғыр беҙҙең Мәккәгә килеү менән һис кенә лә бәйләнмәгән. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте менән, беҙҙә ҡышын ҡар яуған кеүек, йылдың ошо миҙгелендә бында ямғырҙар яуа икән. Артабан төндә, ихрам хәлендә, юлыбыҙҙы Мәккәгә ҡарай дауам иттек. Юлдарҙа беҙҙәге кеүек тығындар юҡ, асфальт көҙгө һымыҡ ялтырап ята, хатта стаканға һалынған һыу ҙа сайпылмай. Туҡталыштарҙа хажиҙар автобустары янында бушлай күстәнәстәр, һуттар, зәм-зәм һыуҙары тарата. Улар бөтөн кешегә лә етә, хатта артып ҡала, ләкин тәүҙә ошо минуттарҙа беҙҙең ҡайһы берәүҙәребеҙҙә элекке Совет заманында сираттарҙа этешеп-төртөшөп әйбер өсөн тартҡылашҡандан ҡалған яман ғәҙәттәр уянған саҡтар ҙа була. Ояла белгәндәргә ғәрәптәр алдында уңайһыҙ, әлбиттә, ләкин әлеге теге “ҡара һаҡал”, ҡайҙа ғына барһаҡ та, һаман үҙебеҙ менән бергә…

Ниһайәт, алдыбыҙҙа – донъяның иң гүзәл ҡалаһы Мәккә! Ул тауҙар-таштар араһында урынлашҡан, шуға күрә ҡалаға килеп ингәнсе күренмәй. Мәккәгә барып инеүҙең дә әҙәбе һәм доғаһы бар. Бына ул: *“Эй Раббым! Был Һинең изге һәм бәрәкәтле ҡалаң! Минең итемде, ҡанымды, тәнемде тамуҡ утына харам ҡыл һәм дә Ҡыямәт көнөндә үҙеңдең әүлиәләрең сафтарында ҡыл.”* Тағы ла күп мәртәбә “ләббәйкә” уҡыла. Мәккәлә һөйөклө пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, тыуған (571 йәки 570 йылдың 30 августы), йәшәгән. Бында уға вәхи килгән һәм Ҡөрьән иңә башлаған. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә был ҡаланы ахрызаманға тиклем имен-аман һаҡлаясағын хәбәр итә.

Барлыҡ уңайлыҡтары булған ҡунаҡханаға урынлашҡас, йыуынып, тәһәрәтләнеп, ике рәҡәғәт нәфел намаҙы уҡып, Ҡәғбәтуллаға, Әль-Харам Мәсетенә юлландыҡ. Меңәрләгән халыҡ диңгеҙе шул тарафҡа ағыла. Хәҙрәттәребеҙ беҙҙең төркөмдө сафтарға теҙеп, миллионлаған халыҡ араһында юғалып-нитеп ҡалһаң ни эшләргә икәнен тағы ла бер тапҡыр аңлатҡас, доғалар уҡый-уҡый, йәйәүләп беҙ ҙә ҡуҙғалабыҙ. Хаж көндәрендә Мәккәлә йәйәү йөрөйҙәр, сөнки халыҡ бик күп, юҡҡа ғына, буласаҡ мәхшәр көнөн күрһәтә бында Аллаһы Тәғәлә, тимәйҙәрҙер.

“Әйҙә, үтегеҙ, Рәсәйҙән килгәндәр”, – тип бер кем дә һиңә юл күрһәтеп, юл биреп тормай унда. Аллаһы Тәғәлә ярҙамы менән, таҫыллығыңды ла ҡушып, әйләнә-тирәләге күршеләреңдең йөҙ-киәфәтен, килеш-килбәтен иҫеңдә ҡалдырырға тырышып, ҡулыңдан килһә, өлкәнерәктәргә ярҙам ҡулы ла һуҙып, алға юрғалайһың. Етәксе хәҙрәттәрҙең кәңәш-күрһәтмәләренә үтә лә иғтибарлы булырға һәм мотлаҡ ҡолаҡ һалырға кәрәк, сөнки улар хажда тәү тапҡыр түгел, уларҙың күбеһе ғәрәп телен яҡшы белә һәм ғәрәптәр менән иркен аралаша. Арафатта йәки Мөздәлифәлә аҙашып ҡалып, хәҙрәттәр көс-хәл менән эҙләп алып ҡайтҡан кешеләр ҙә осрай, сөнки һәр кемдең үҙ холҡо, үҙ топографик хәтере.

Уң аяҡ менән, доғалар уҡый-уҡый, донъялағы иң ҙур мәсет – Әл-Харамға инәбеҙ…Нурға күмелеп ултырған Ҡәғбәтулланы тәүге күреү менән, уға күҙең төшкәс тә, доға уҡыйһың. Был мәсеттең гүзәллеген тасуирларға, Аллаһының бөйөк ниғмәтен үҙ күҙҙәрең менән күреүҙән йөрәктәрҙәге кисерештәрҙе уҡыусыға еткерергә һүҙҙәр етмәй, бәлки, Аллаһы Тәғәлә һәм уның ҡоло араһында ошо минуттарҙа тыуған нескә бәйләнештәрҙе матур һүҙҙәргә төрөп, ҡағыҙға төшөрөүҙең кәрәге лә юҡтыр, был юлдарҙы уҡырға насип булғандарға: Аллаһы Тәғәлә Һеҙҙәргә лә Мәккәгә барып, хаж ҡылырға юлдар асһын, тип теләктәр теләйһем генә килә.

Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә 15 урында Мәккәнең был Мәсетен Изге Мәсет тип

иҫкә ала. *Иннә әүүәлә бәйтиү-уудыиъә линнәәси ләлләҙии бибәккәтә мүбәәрәкәү-үә һүдәл-лилъәәләмиин". Мәъәнәһе: "Ысынлап та, кеше өсөн Мәккәлә һалынъан беренсе йорт –мөбәрәк, ул ъаләмгә юл күрһәтә"* (Баҡара сүрәһе, 96-сы аят).

"Әйт: "Миңә Ул изге иткән ошо ҡаланың (Мәккәнең) Раббыһына ъибәҙәт ҡылыръа ҡушылды. Бөтә нәмә – Уның ҡулында. Миңә мосолман булып, Ҡөрьән уҡыръа ҡушылды,"– тиең. Хаҡ юлдан баръан кеше үҙе өсөн бара, ә аҙашҡан кешегә әйт: "Мин өгөтләүсе-киҫәтеүсе генә бит,"– тиең. "(Ән-Нәмл сүрәһе, 91-92-се аяттар). Ошо факттар – мосолмандарға Аллаһының был изге йортон хөрмәтләргә тейешлеген иҫбатлаусы дәлил. Ибраһим пәйғәмбәргә һәм уның улы Исмәғилгә Аллаһы Тәғәлә Әҙәм ғәләйһиссәләм төҙөгән был йортто тергеҙергә бойора. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм) һәм беренсе хәлиф Әбү Бәкер Әс-Сиддиҡ, Аллаһ унан разый булһын, заманында был йорт үҙгәреш кисермәгән. Бары тик икенсе хәлиф Үмәр Ибн Әл-Хаттаб, Аллаһ унан разый булһын, ваҡытында, башҡа халыҡтар ҙа Ислам юлына баҫа башлағас, изге Мәсетте киңәйтеү талап ителә. Хәлиф мәсет тирәһендәге йорттарҙы һатып алып емертә лә, мәсет алдындағы майҙанды киңәйтеп, яңы стеналар төҙөтөп, унда шәмдәр ҡуйырға бойора, ҡапҡалар эшләтә. Унан һуң килгән хәлифтәр, батшалар һәм әмирҙәр ҙә Аллаһ Йортона ҙур иғтибар бирә.

Әл-Харам мәсетен быуаттар дауамында үҙгәртеп ҡороуҙар ошо тәртиптә атҡарыла:

1. Үмәр Ибн Әл-Хаттаб, Аллаһ унан разый булһын, ваҡытында киңәйтеү (17 Һижри), (639 й.).

2. Усман Ибн Аффан, Аллаһ унан разый булһын, ваҡытында беренсе тапҡыр Мәсеттең түбәһен ябалар (26 Һижри), (648 й.).

3. 66 Һижриҙә Абдаллаһ Бин Әл-Зөбәйер тарафынан үҙгәрештәр индерелә. Ул 65 Һижриҙа Ҡәғбәтулланың конструкцияһын яңырта (685 й.).

4. 91 Һижриҙә (709 й.), Әл-Вәлид Бин Әбдел Малик хакимлыҡ иткән осорҙа, Изге Мәсет бинаһын киңәйтеп, яңынан төҙөйҙәр. Мысырҙан һәм Сириянан мәрмәр колонналар килтерелә. Әл-Вәлид Мәсеттә колонналар ҡуйыусы беренсе хәлиф була.

5. 139 Һижриҙә (755 й.), Әбү Йәғәфәр Әл-Мансур тарафынан Мәсет тағы ла ҙурайтыла, яңы ябыҡ галереялар төҙөлә, Мәсеттең стеналары орнаменттар менән биҙәлә.

6. 160 Һижриҙә (777 й.) хаж ҡылғанда Хәлиф Әл-Мәһди ғибәҙәт ҡылыусылар өсөн Мәсеттең бәләкәй икәненә иғтибар итә һәм уны төньяҡ һәм көньяҡ тарафтарынан киңәйтергә фарман бирә. Төҙөлөш эштәре тамамланғас, Ҡәғбәтулла Мәсеттең көньяғына күскәнлеге беленә. 164 Һижриҙә хаж ҡылған ваҡытта Әл-Мәһди быға иғтибар итеп, Ҡәғбәтулла уртала булһын өсөн Мәсеттең майҙанын көньяҡтан да киңәйтергә бойора. Атаһы башлаған эште улы Муса Әл-Һаҙый 167 Һижриҙә тамамлап ҡуя.

7. 284 Һижриҙә (797 й.), Аббасидтар хәлифе Әл-Мөтадид Изге Мәсеттә тулыһынса реставрация яһата. Мәсеткә инеү өсөн яңы "Кунаҡ ҡапҡалары" эшләнә.

8. 306 Һижриҙә (918 й.) Аббасидтар хәлифе Әл-Мөҡтәдир Мәсетте ҙурайтыу эштәрен яңынан башлай. Инеү өсөн тағы ла бер ҡапҡа – "Ибраһим ҡапҡаһы"н төҙөтә. Ошонан һуң Мәсеттең дөйөм планы оҙаҡ йылдар үҙгәрешһеҙ һаҡлана. Хәлифтар һәм Солтандар уны биҙәү һәм реставрациялау менән генә шөғөлләнә. Ләкин 604 Һижри йылында Мәсеттең бер өлөшө янғындан зыян күрә. Уттың таралыуына сил ташҡыны ҡамасаулау ғына тулыһынса юҡ ителеүҙән ҡотҡара.

Мысыр Башлығы Ибн Барғуҡ Солтан янғындан зыян күргән Мәсетте тергеҙергә бойора, һәм ул тиҙ тормошҡа ашырыла.

9. 979 Һижри йылында (1571 й.) Осман солтаны Сәлим Мәсеттең стеналарында ярыҡтар барлыҡҡа килеүен ишетеп, уларҙы яңынан һалырға бойороҡ бирә. Был эште бик сифатлы итеп башҡарып сығалар. Осман архитектураһы стиленә яраҡлаштырап, көмбәҙ формаһында яңы түшәмдәр эшләнә.

Солтан Сәлим вафат булғандан һуң, уның улы Солтан Морат етәкселегендә 984 Һижри йылында эш тамамлана. Аббасидтар Хәлифе Әл-Мөтадид Мәсетте киңәйткәндән һуң, 1069 йыл буйына уның майҙаны үҙгәрешһеҙ ҡала.

1368 Һижри йылында Сауд Ғәрәбстаны Батшаһы Әбдел Азиз Ибн Абдрахман Ас-Сауд Ике Изге Мәсетте киңәйтеү, яңыртыу тураһында мосолмандарға хәбәр итә. Беренсе сиратта Мәҙинәләге Пәйғәмбәребеҙ Мәсетен яңыртыу тамамланғас, 1375 Һижри йылының Рабиғел-әүәл айының 4-се-көнөндә (1955) Мәккәләге Изге Мәсеттә эштәр башлана. Ваҡытты һаҡлау маҡсатынан, проектты эшләү һәм төҙөлөш бер ҡатарҙан алып барыла. Төҙөүселәр яңы галереяны хаж башланғансы төҙөп тапшырырға тырыша. Шул маҡсаттан сығып, төҙөлөштө ике яҡтан – көнсығыш һәм көньяҡтан алып барыу тураһында ҡарар ҡабул ителә. 1375 Һижриҙың 23 шәғбанында әҙерлек эштәре тамамланғас, яңы проекттың ташы һалына. Йыл аҙағына юл хәрәкәте төҙөлөш майҙанынан ситкә алынғас, яңы галереяны төҙөү башлана. Ниһайәт, хаж ҡылыусылар, мең йыл эсендә беренсе тапҡыр, Сафа һәм Мәрүә тауҙары араһында йәйәү йөрөүселәр һәм сауҙагәрҙәр менән бәрелешмәйенсә, ғибәҙәттәрен үтәргә мөмкинлек ала.

Йылдан-йыл хаж ҡылыусыларҙың артыуын иҫәпкә алып, беренсе Сауд проектына ярашлы, галерея ике ҡатлы итеп төҙөлә. Уның оҙонлоғо – 394,5 метр, киңлеге – 20 метр. Беренсе ҡаттың бейеклеге – 12 метр икенсеһенеке 9 метр. Ул махсус барьер менән ике йәнәш коридорға бүленгән. Береһе – Сафа тауы яғына, икенсеһе – Мәрүәгә. Уртала ауырыуҙар һәм өлкән йәштәгеләр өсөн махсус үтеү юлы ла бар.

Хаҡ Тәғәләбеҙгә сикһеҙ рәхмәтебеҙҙе – шөкрәнәләребеҙҙе белдереп, Ҡәғбәтулланың Хажар-әл-асуад (ҡара таш) мөйөшөнән тауаф ҡыла башланыҡ. Ирҙәр тәүге өс әйләнеште еңелсә йүгереп, ҡатын-ҡыҙҙар атлап үтә. Ҡәғбә тирәләй тауаф ҡылыу намаҙ ҡылыу кеүек, ләкин тауаф ҡылғанда һөйләшергә рөхсәт ителә. Әммә әйтелгән һүҙҙәрҙең яҡшылыҡ, изгелек хаҡында ғына булыуы шарт. Йәмән мөйөшөнә еткәс, ошо доғаны уҡыйбыҙ: *“Раббәнә ʻәәтинә фиддунйәә хәсәнәтәү-үә фил-әәхыирати хәсәнәтәү-үәҡинәә ъәҙәәбәннаар”*. Мәғәнәһе: “Йә Раббыбыҙ! Был донъя тормошонда һәм әхирәт тормошонда беҙгә изгелек (рәхәтлек) бир һәм беҙҙе ут ғазабынан һаҡла” (Баҡара сүрәһе, 201-се аят).

Ҡәғбәтулланы ете мәртәбә әйләнгәс, Ибраһим маҡамы (урыны) аръяғында ике рәкәғәт намаҙ уҡыла. Беренсе рәкәғәттә Фатиха сүрәһенән һуң Ихласты, икенсе рәкәғәттә Фатиханан һуң Кәәфируун сүрәһен уҡыйҙар. Шунан һуң бәрәкәтле зәм-зәм һыуҙары эселә. Уны Ҡәғбәтуллаға ҡарап, баҫҡан килеш, өс йотом итеп эсеү тейеш. Һыу тултырылған мискәләр эргәлә генә. Һыуыҡ тейҙереүҙән ҡурҡһаң, йәшел тамғалар ҡуйылған мискәләрҙән эсәһең, сөнки уларға йылы һыу һалынған. Зәм-зәм һыуын эскәндә, ошо доғаны уҡыйһың: *“Аллаһуммә инни әс-әлүкә ризҡан үәсиъан үә ъильмән нәфиъән үә шифа’ән мин кулли да’ин”*. Мәғәнәһе: “Йә Рабби, мин Һинән киң ризыҡты һәм файҙалы ғилемлелекте һәм һәр бер ауырыуҙан шифаны һорайым”.

Аллаһы Тәғәлә был ерҙә Исмәғилгә Зәм-зәмде асҡанға тиклем бында һыу ҙа,

бер ниндәй торлаҡ-фәлән дә булмаған. Исмәғил әсәһе Хәжәр менән һыуһыҙ интеккән саҡта, Ябраил фәрештә ҡанаттары менән ерҙе соҡоп (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа үксәһе менән тибеп), һыу табып, Аллаһының хозуры менән, уларҙы сарсауҙан ҡотҡара. Хәжәр шатланып, ҡуш услап һыу ала башлай (ғәрәпсә "тазамма" –" ҡуш услап"). Һуңғараҡ Джаргам дәүерендә был ҡойо юҡҡа сыға һәм буласаҡ Пәйғәмбәр, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, донъяға килгәнсе, уның олатаһы Әбдел Моталлиб Зәм-зәм ҡойоһоноң урыны ҡайҙа икәнлеген төшөндә күрә. Ул ҡойоно яңынан ҡаҙып сығара. Изге зәм-зәм фонтаны ахрызаманға тиклем мосолмандарҙы үҙенең шифаһы менән һуғарасаҡ. "Ер йөҙөндәге иң шифалы һыу – ул зәм-зәм һыуы,"– тигән Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм (Ибн Маджа). Сауд Ғәрәбстаны Батшалығы 1399 Һижри йылында (1979) Зәм-зәм һыу сығанағының теүәл урынын асыҡлап, шишмәләренең картаһын төҙөй. Хаж ҡылыусыларҙы таҙа эсәр һыу менән тәьмин итеүсе завод 1404 һижри йылдың Рамаҙан айында (1984) сафҡа инә, һәм уның эшмәкәрлеген Һыу ресурстары министрлығы күҙәтә. Һәр хажиға тыуған иленә ҡайтыр алдынан унар литр зәм-зәм һыуы ил батшаһы исеменән бүләк итеп бирелә.

"Ислам донъяһына сәйәхәт" китабының авторы, билдәле дин ғалимы Шәйех Ғәбдрәшит Ибраһим (1850 – 1944): "Зәм-зәм һыуын 12 йыл шешәлә үҙем менән йөрөттөм, унын төҫө лә, сифаты ла үҙгәрмәне", – тип яҙып ҡалдырған. Ул уны, Аллаһы Тәғәләнең ризалығы менән, бәүел ҡыуығын һәм күҙҙәрен дауалау өсөн ҡулланған һәм дауаһын тапҡан. Шунан һуң Сафа һәм Мәрүә тауҙары араһында 7 тапҡыр сәғи ҡылаһың. Был йола, нигеҙҙә, Исмәғилдең әсәһе Хәжәрҙең Сафа һәм Мәрүә тауҙары араһын һыу эҙләп ете тапҡыр урап сығыуы менән бәйле. Сафа тауына яҡынайғанда ошо доғаларҙы уҡыйбыҙ: *"Иннә-ссафәә үәл-марүәтә миң шәғәә'ири-лләәһи"* (Баҡара сүрәһе, 158-се аят). "Сафа һәм Мәрүә – Аллаһының Шәриғәтенән" "*әбдәьү бимә бәдәьәЛ-лааһу биһи*" "Аллаһ башлаған урындан, мин дә шунан башлайым."

Тау башына менеп еткәс, өс тапҡыр тәкбир әйтелә. Сафа тауынан төшөп, Мәрүә тауына йүнәләбеҙ һәм унда ла шул уҡ доғаларҙы уҡыйбыҙ. Ике тау араһы 400 метр, улар күптән инде гранит-мәрмәр һарай эсендә ҡалған. Бер тауҙан икенсеһенә йүгергән хажиҙар, әйткәнемсә, бер-береһенә ҡамасауламай. Теләйһең икән, сәғиҙе баҫҡыстан аҫҡа төшөп, түбәнге баҫҡыстан үтһәң дә була. Унда быяла менән көпләнгән тауҙарҙың итәген күреү мөмкинлеге лә бар, бөтөн ерҙә кондиционерҙар эшләй. Хажиҙарға шундай уңайлыҡтар булдырғандарға Аллаһының рәхмәт-бәрәкәте яуһын!

Әгәр ҙә берәй хажи хәлһеҙләнһә йәки ауырып китһә, уға махсус коляскалар алып, сәғиҙе тамамлап ҡуйырға мөмкинлек бар. Сәғи барған ваҡытта ирҙәр ике йәшел бағананы йүгереп үтергә тейеш. "Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙар, хаталанып, ошо араны йүгереп үтә, был улар өсөн ярай торған эш түгел", – тип иҫкәртә хәҙрәттәр.

Зөлхизә айының һигеҙенсе көнө иртә менән ҡунаҡханалар эргәһенә бер-бер артлы автобустар килә. Барлыҡ хажиҙар Изге Мәккә менән Мөздәлифә араһында урынлашҡан Минаға күсә, унда бер-ике төн ҡунып сығыу өсөн өр-яңы түшәк (ҡаралты) кәрәк-яраҡтары менән йыһазландырылған, бөтөн уңайлыҡтары булған палаткаларға урынлаштыралар. Эргәлә генә сәйҙәр ҡайнап ултыра, бер туҡтауһыҙ аҙыҡ-түлек тараталар. Беҙ, Башҡортостандан килгән хажиҙар, Америка, Бөйөк Британиянан килгән хажиҙар менән күрше генә йәшәнек. Ошо урында бындай уңайлыҡтарҙы булдырған, беҙҙе шул ерҙәрҙә урынлаштырыуҙы хәстәрләп,

ойоштороп йөрөгән үҙебеҙҙең етәксе- хәҙрәттәребеҙ Рәсәйҙең хажға барыуҙы үҫтереүгә ярҙам күрһәтеүсе хәйриә фондынан Илдар Нечаевҡа, Шамил хәҙрәткә (Якимчук Александр), Руслан Хәлиловҡа, Таһир Исмәғилевҡа, Илфат Сафинға, Рәфҡәт Вилдановҡа, Өфө хәҙрәттәре Рөстәм Ғатауллин, Илһам Шәрипов, Тулҡын Кәримбердиев, Вәсил Тимерғәлиев, Шәмсетдин Сиражевтарға һәм хаж ҡылырға рөхсәт биргән илебеҙ Рәсәй, Башҡортостан етәкселәренә рәхмәттәребеҙҙе еткерәһем килә. Уларҙың тырышлығы арҡаһында беҙ, Башҡортостан мосолмандары, 20653 Рәсәй мосолмандары составында, 2012 йылда хаж ҡылдыҡ.

Иртәнге намаҙҙан һуң автобустарҙа Изге Мәккә ҡалаһынан 25 саҡрымдағы Арафат тауына йүнәләбеҙ. Бында билдәле Әр-Рахма тауы һәм “Нимра” мәсете урынлашҡан. Хажиҙар өсөн Арафатта ла барлыҡ уңайлыҡтар булдырылған: палаткалар янында сәй эсергә мөмкин, ҡояштан ышыҡланыу һәм климатты яҡшыртыу маҡсатында, Арафа үҙәнендә 100 мең төп ағас ултыртылған. Бында өйлә, икенде намаҙҙары уҡыла. Арафатта баҫып тороу хаждың бер рөкене булып тора. Унан башҡа хаж дөрөҫ булмай. Пәйғәмбәребеҙ, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, әйткән: “Хаж – ул Арафатта баҫып тороу” (Әбү Дауд, Тирмизи). Арафат тауында баҫып тороу – ҡояш сыҡҡан көндәрҙең иң хәйерле көнө. Зөлхизә айының 9-сы көнө ҡояш сыҡҡандан алып – ҡояш байығансы, хажиҙар бөтөнөһө лә Арафатта бер урында йыйылыша. Доғалар Ҡәғбәтулла яғына ҡарап ҡылына.

Ғәрәфә көндө күп тапҡыр ошо доғаны уҡыныҡ: *“Ләә иләәһә илләл-лааһү уәһдәһү ләә шәриикә ләһ! Ләһүл-мулкү үә ләһүл-хәмдү, үә һүә ‘аләә күлли шәйьин ҡадиир!”* Мәғәнәһе: “Аллаһтан башҡа ғибәҙәт ҡылырҙай лайыҡлы зат юҡ, Ул бер үҙе генә лайыҡлы, Уға бер ниндәй ҙә тиңдәштәр юҡ, бөтөн солтанлыҡ, бөтөн байлыҡ Уның ҡулында, һәм Ул һәр бер эшкә көсө етеүсе!”

Зөлхизә айының туғыҙынсы көнөндә, ҡояш байыу менән, хажиҙар тәлбиә әйтеп, Аллаһыны маҡтап, ошо көндө Арафат тауында баҫып торорға мөмкинлек биргән Раббыбыҙға шөкөр итә-итә, әкренләп автобустарға тейәлеп, Мөздәлифәгә юл тота. Мөздәлифәгә етеү менән ахшам менән йәстүҙе бергә ҡушып, йәстүҙе ике рәкәғәткә ҡыҫҡартып уҡыйбыҙ. Сөннәт буйынса хажиҙар Мөздәлифәлә ҡунып, иртәнге намаҙҙы унда уҡып китә. Беҙ ҙә шулай эшләнек. Әммә ҡатын-ҡыҙҙарға, бала-сағаларға, өлкән йәштәгеләргә, шулай уҡ уларҙы оҙатып йөрөүселәргә Мөздәлифәнән ярты төндән һуң да китергә рөхсәт бар. Мөздәлифәнән яңынан Минаға ҡайтабыҙ. Шайтанға таш атыу йолаһын үтәү өсөн ҙур өс таш бағаналар төҙөлгән. Иң беренсе Ҙур джамаратҡа ырғытыу өсөн борсаҡтан саҡ ҡына ҙурыраҡ ете ваҡ ташты Мөздәлифәлә үк йыяһың. Киләһе көндәрҙә башҡа джамараттарға атыу өсөн таштарҙы Минаның үҙендә лә йыйырға була. Минаға барғанда ла Аллаһыны иҫкә төшөрөп тәлбиә әйтеп барыла. Минаға етеү менән, таш атыу өсөн, Мәккәгә яҡыныраҡ урынлашҡан Ҙур джамаратҡа табан йүнәләбеҙ. Ошо ғәмәлдәрҙе үтәгәс, ҡорбан салына. Сәс, тырнаҡтарҙы киҫеп, Мәккәгә ҡайтабыҙ. Унда Ҡәғбәтуллаға килеп тауаф ҡылыу башлана. Хаж шуның менән тамамлана.

Беҙҙең төркөм хажда теүәл бер ай булды. Мәрхүм атай-әсәйҙәребеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ, туғандарыбыҙ өсөн – үмрә хаждар үтәргә лә мөмкинлектәр биргән Аллаһы Тәғәләгә шөкрәнәләр ҡылдыҡ. Төнгө сәғәт өс тулғансы тороп, иртәнге намаҙға Әл-Харам мәсетенә йөрөнөк. Унда уҡыған бер намаҙ башҡа мәсеттәрҙә уҡыған 100 мең намаҙға тиң, тиелә. Төнгө сәғәттәрҙә меңәрләгән халыҡтың Әл-Харам мәсетенә ағылыуынан, ҡала өҫтөндә яңғыраған аҙан тауыштарынан йөрәктәр елкенә, күҙҙәрҙән йәштәр аға... Шул минуттарҙа Аллаһы

Тәғәләнең китабы Ҡөрьәндән тап ошо аяттар күңелгә килә: *“Үә ләә тәмши фил-ардыи мәрахән иннәкә ләң тәхриҡаль-арда үә ләң тәблүғаль-джибәәлә тууләә.”* Мәғәнәһе: “Әллә кем булып маһайып йөрөмә: барыбер Ерҙе үтә тишә алмаҫһың, тау бейеклек була алмаҫһың.” (“Әл-Исра” сүрәһе, *37).* Унһың артынса уҡ:*“Әл-хәмдүлилләһ”, “Лә Илаһу ил Аллаһ”* доғаларын ҡабатлайһың.

Үҙеңде ожмахҡа килеп ингәндәй хис итәһең. Һиңә Аллаһы Тәғәлә ошо хозурлыҡты күрергә насип иткәненә, Уға булған һөйөү хистәренән, үҙеңдә сикһеҙ ҡанатланыу тойғолары кисерәһең. Эй Раббым, хаждарыбыҙҙы ҡабулдарҙан ҡыл. Аллаһының ҡоло, бәндә, хаж ҡылдым тип ғорурланып, маҡтанып (әстәғәфирулла тәүбә!) йөрөргә тейеш түгел, сөнки хаждың төп сауабы – әхирәт өсөн бит.

Етәксе-хәҙрәттәребеҙ беҙгә көндөҙҙәрен бер нисә тапҡыр гүзәл ҡала Мәккә менән танышыу экскурсияһы ойошторҙо. Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, тыуған Мәккә ҡалаһының иҫтәлекле урындарында булыуҙы Ул йәшәгән замандарҙан ҡалған мәсет менән танышыуҙан башланыҡ. Мәсет урынлашҡан районда ҙур төҙөлөш эштәре барыу сәбәпле, уның эсенә инеү тыйылғайны. Был ҡомартҡы хазинаны беҙ, күҙҙәребеҙ талғансы, тыштан ғына күҙәттек.

Мәккәлә яңы мәсеттәр 200-300 метр һайын күҙҙәрҙең яуын алып ултыра. Уларҙың архитектураһы төрлөсә, бер мәсет тә икенсеһен ҡабатламай. Аҙан ваҡыттарында яңғыраған аҙан тауыштары, Аллаһы Тәғәләнең бөйөк симфонияһы булып, һауала тирбәлә. Был ваҡыттарҙа ҡунаҡханала булһаҡ, йүгереп етенсе ҡатҡа – йорттоң түбәһенә ашыға торғайным. Ҡала өҫтөнә таралған изге аҙан моңо әле лә ҡолаҡтарҙа ғына түгел, йөрәктәрҙә яңғырап тора.

Хажға барыусыларға Мәҙинә-Мөнәүәрә ҡалаһында булыу сөннәт ғәмәлдәрҙән һанала. Уны хажға тиклем йәки унан һуң да үтәргә мөмкин. Беҙ Мәҙинә-Мөнәүәрә ҡалаһына хаждан һуң, илебеҙгә ҡайтып барғанда, туҡталдыҡ. Оҙаҡ булырға тура килмәһә лә, Пәйғәмбәребеҙ Мәсетендә мәсет намаҙын, иртәнге һәм өйлә намаҙҙарын уҡырға, “Коба,” Ҡыблатайни” мәсеттәрендә лә намаҙҙар уҡырға, мосолмандар Мәккә мөшриктәре менән һуғышҡан Ухуд тауҙарын күрергә насип булды.

Пәйғәмбәребеҙ, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, әйткән: “Мосолмандар өс Мәсеткә: Мәккәләге Әл-Харамға, Минең Мәсетемә (Мәҙинәлә) һәм Әл-Аҡсаға (Иерусалимда) барырға ашҡынырға тейеш”. Мәҙинәгә беҙ төндә килеп, ҡунаҡханаға урынлашҡас та, ғөсөл ҡойоноп, Пәйғәмбәребеҙ Мәсетенә ашыҡтыҡ. “Бында уҡыған бер намаҙ башҡа урындарҙа уҡыған мең намаҙҙан артығыраҡ”, – тип әйтеп ҡалдырған Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм. Пәйғәмбәребеҙ Мәсете Ул Мәккәнән Мәҙинәгә күсеп килгәс тә төҙөлгән. Мәсетте төҙөүҙә Үҙе лә әүҙем ҡатнашҡан. Пәйғәмбәребеҙ, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, вафат булғандан һуң ошо мәсеттә, 632 йылдың 8 июнендә, ерләнгән (11 Һижриҙең рабиғәль-әүәл айының 12-һендә).

Ислам тарихында һалынған беренсе мәсет – Ҡоба мәсете – Мәҙинә ҡалаһының ошо уҡ исемдәге бик матур районында урынлашҡан. Бында һалҡын һыулы шишмәләр күп икән. Шуға күрә мәсеттең тирә-яғында хөрмә пальмалары, йәшелсә-емеш баҡсалары йәйрәп ята. Уҙған быуаттың 80-се йылдарында үткәрелгән иң ҙур реконструкциянан һуң Ҡоба мәсете өс тапҡырға ҙурайған. Хәҙер унда 12 – 15 мең кеше һыя. Пәйғәмбәребеҙ, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, әйткән: “Кем йортонда тәһәрәтләнеп, Ҡоба мәсетенә килеп, ике рәҡәғәт намаҙ уҡый, уға әжере – үмрә ҡылғандағы кеүек сауап.” Аллаһы Тәғәлә Ҡоба мәсете

тураһында Ҡөрьәндә былай тигән: *“Ул (алдаҡсылар) мәсетендә бер ваҡытта ла торма, тәүге көндән үк тәҡүәлек менән һалынған мәсет (Ҡоба мәсете) һинә торор өсөн яҡшыраҡ. Унда – сафланырға ятатҡан кешеләр. Алла сафланғандарҙы ярата”* (Тәүбә сүрәһе, 108-се аят). Ибн Үмәр, Аллаһ унан разый булһын, әйтеп ҡалдырған: “Пәйғәмбәребеҙ, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, был мәсеткә йыш килә торғайны һәм икешәр рәкәғәт намаҙ уҡый ине”.

Мәҙинәнең төньяғында, Бани Сальма ҡалҡыулығында, әл-Аҡыҡ үҙәне янында урынлашҡан Әл-Ҡыблатайни мәсете лә Пәйғәмбәребеҙ, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, йәшәгән саҡта уҡ һалынған. Бер ваҡыт Пәйғәмбәребеҙгә, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, сәхәбәләре менән Ҡәғбәгә ҡарап намаҙ уҡыған ваҡытта, Иерусалимда урынлашҡан “Әл-Аҡса” мәсетенә боролоп намаҙ уҡырға вәхи килгән. Бөтәһе лә Уның артынан эйәргән. Тик 17 айҙан һуң ғына мосолмандар яңынан Ҡәғбә яғына ҡарап намаҙ уҡый башлағандар. Шуның өсөн был мәсет ике Ҡыблалы, “Ҡыблатайни” тип атала. Аллаһы Тәғәләнең рәхмәт-шөкрәнәләре менән беҙҙәргә лә был мәсеттә намаҙ уҡырға насип булды.

“Мосолмандар һәм Мәккә кафырҙары араһындағы Ухуд һуғышы Мәҙинәнең төньяғындағы шул исемдәге тау янында була. Был тауҙың оҙонлоғон ҡайһы бер ғалимдар ете, ҡайһылары ун ике километр тиҙәр, – тип һөйләне беҙгә Тулҡын хәҙрәт. – Заман ахыры еткәс, Аллаһы Тәғәлә был тауҙы ожмахҡа аласаҡ икән”. Һуғыш өсөнсө Һижри йылының шәүәл айында була (23 март, 625 йыл). Көрәйшиттәр Мәҙинәгә өс мең кеше, өс мең дөйә һәм ике йөҙ аттан торған ғәскәр менән килә. Мөхәммәт Пәйғәмбәр, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, уларҙың яҡынлашыуын бер аҙна элек белеп, көтмәгәндә һөжүм итеүҙәренән һаҡланып, ҡалаға яҡын ерҙәргә төнгө һаҡсылар ҡуйырға әмер бирә. Дошман ғәскәре Айнайн һәм Ухуд тауҙары эргәһенә килеп туҡтағас, Пәйғәмбәр, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, мосолмандарҙы Мәҙинәне обороналау тураһындағы кәңәшмәгә йыя. Ирҙәргә Ул ҡаланы ҡалдырып китмәҫкә, дошманды тар урамдарҙа ҡаршылап, һуғышырға бойора, ә ҡатын-ҡыҙҙарға өй баштарында урынлашырға ҡуша. Ләкин Уның менән башҡаларға ҡушылып һуғышҡа барырға бик теләмәгән, өйөндә ҡалыуҙы хуп күргән ике йөҙлө, эскерле Абдулла ибн Убайй ғына килешә. Йәш сәхәбәләр дошман менән асыҡ урында, киң майҙанда һуғышырға теләй, һәм ахыр силтә уларҙың тәкдиме ҡабул ителә. Ҡарт сәхәбәләр, йәштәрҙе шелтәләп, былай ти: “Һеҙ Пәйғәмбәрҙе, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, тыңларға тейешһегеҙ, сөнки Уға күрһәтмәләр Аллаһы Тәғәләнән килә бит”. Йәштәр шул минутта Пәйғәмбәр, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, янына йүгереп килеп: “О Аллаһының Пәйғәмбәре, беҙ хаталандыҡ. Нисек теләйһегеҙ, шулай хәл итегеҙ. Беҙ ҡаршылашмаясаҡбыҙ», – тиҙәр. Ләкин был ваҡытта Мөхәммәт, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, һуғыш кейемдәрен кейеп, сатырынан сыҡҡан була. Йәштәргә Уның яуабы ҡәтғи яңғырай: “Һуғыш кейеме кейгән пәйғәмбәр, һуғышмайынса, уны һала алмай! Һеҙ мин ҡушҡанды үтәгеҙ! Аллаһ исеме менән һуғышығыҙ! Әгәр ҙә Һеҙ ғәскәри бурысығыҙҙы үтәгәндә түҙемле булһағыҙ, Аллаһы Тәғәлә Һеҙгә үҙенең мәрхәмәтен күрһәтер.” Мосолмандарҙың отряды өс төркөмгә бүленә. Төшкө намаҙҙан һуң, Мөхәммәт Пәйғәмбәр, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, ғәскәр башында Ухуд тауына ҡарай ҡуҙғала. Шайхан тигән ергә еткәс, ғәскәрен ҡарап сыға, һәм иң йәш һуғышсыларға һуғыш яланынан китергә бойора. Шайхан һарайҙары янында Пәйғәмбәр, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, ахшам һәм киске намаҙҙарҙы уҡый һәм лагерҙы һаҡларға илле һуғышсыны тәғәйенләп, төндө шунда уҙғара. Таң алдынан бынан китеп, аш-Шаут тигән ерҙә

иртәнге намаҙҙы уҡый. Бында үрҙә телгә алынған Абдулла ибн Убайй, Уға буйһонмайынса, үҙенең өс йөҙ кешеһен алып, Мәҙинәгә ҡайтып китә. Шулай итеп, бер меңлек мосолман ғәскәрендә барлығы ете йөҙ генә кеше тороп ҡала. Ошо ваҡиға айҡанлы Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьән аяттары ебәргән: *“Үә мәә әсаабәкум йәүмә-лтәҡаль-джәмъәәни фәби’иҙни-лләһи үә лийәъләмәл-муъмиңиин. Үә лийәъләмә-лләҙиинә нәәфәҡуу үә ҡиилә ләһүм тәъәәләү ҡаатилүү фии сәбиили-лләәһи әүидфәъүү ҡаалүү ләү нәъләму ҡитәәләл-ләттәбәънәәкум һүм лилкүфри йәүмә’иҙин әҡрабү минһүм лил’иимәәни йәҡуулүүнә би’әфүәәһиһим мәә ләйсә фии ҡулүүбиһим үә-ллааһу әъләму бимәә йәктүмүүн.”* Мәғәнәһе: “Ике төркөм осрашҡанда күргән бәләгеҙ Алла рөхсәте менән булды, мөьминдәрҙе Ул белһен өсөн, ике йөҙлөләрҙе белһен өсөн булды. Уларға әйтелде: “Килегеҙ, Алла юлында һуғышығыҙ йәки ҡыуып ебәрегеҙ! – тиелде. Улар: “Һуғышты белгән булһаҡ, Һеҙгә эйәргән булыр инек,”– тине. Улар ул көндө иманға ҡарағанда кафырлыҡҡа яҡыныраҡ булды. Улар күңелендә булмағанды теле менән әйтә. Ә Алла уларҙың нимә йәшергәнен яҡшыраҡ белә”. (Ғимран сүрәһе, 166-167-се аяттар).

“Бына һин иртәнсәк, ғаиләңде ҡалдырып, мөьминдәрҙе һуғыш сафына теҙер өсөн сыҡтың, ә Алла ишетеп, белеп тора! Бына һеҙҙең ике төркөмөгөҙ ҡаушап ҡалды, ә Алла уларға – ярҙамсы: мөьминдәр Аллаға таянһын!” (Ғимран сүрәһе, (121-122-се аяттар).

Монафиҡтарҙың мосолман ғәскәренән айырылыуы Аллаһының мәрхәмәте һөҙөмтәһендә була. Был ваҡиға мосолмандарҙың сафтарын хәлһеҙләндермәй, киреһенсә, ике йөҙлө, ҡурҡаҡ йәндәрҙән ҡотолғас, улар рухи яҡтан тағы ла көслөрәк һәм ғәйрәтлерәк һуғышсыларға әйләнә. Мәкерле һәм хыянатсылар менән һуғыш яланында бергә булыу хәүефлерәк, һәм ул мосолмандарҙың әхлаҡи көстәренә ҡурҡыныс янар ине. Ухуд һуғышы мосолмандарҙың еңелеүе менән тамамлана. Һуғышта Пәйғәмбәребеҙҙең, салаллаһу ғәләйһи үәссәлләм, ағаһы Хәмзә ибн Әбд-әл-Моталлиб һәләк була. Яу яланында ятып ҡалған мосолмандарҙы шунда уҡ, һуғыш майҙанында, ерләгәндәр. Беҙгә уларҙың ҡәберлектәре урынын күрергә насип булды.

Ислам тарихында һәм бөтөн кешелек цивилизацияһында Изге Мәккә ҡалаһы айырыуса мөһим урын алып тора. Миллиардтан артыҡ мосолмандың ҡарашы көн һайын Мәккә тарафтарына төбәлгән. Йыл һайын миллионлаған мосолман һауа, диңгеҙ һәм ҡоро ерҙән үҙҙәренең Аллаһы ҡаршындағы бурыстарын үтәү өсөн Изге Мәккә ҡалаһына ашыға.

Сауд Ғәрәбстаны хөкүмәтенең статистика хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 2012 йылда изге урындарға 3,5 миллион мосолман хаж ҡылған, был 2011 йыл менән сағыштырғанда 8 процентҡа күберәк һәм хаж, әлхәмдулилләһ, хәүеф-хәтәрһеҙ үткән. Мәккәлә хажиҙар Аллаһының ҡунаҡтары һанала, улар тураһында хәстәрлек күреү Сауд Ғәрәбстаны Батшалығының вазифаһы һәм изге бурысы булып иҫәпләнә. Улар уны ҙур яуаплылыҡ һәм намыҫ менән атҡарғанын үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек. Уларға Аллаһының рәхмәте һәм бәрәкәте яуһын, тип изге теләктәр теләнек һәм имен-аман Башҡортостаныбыҙға әйләнеп ҡайттыҡ.

Рәмзиә БИКӘНӘСОВА.

ҠЫРМЫҪҠАЛЫ РАЙОНЫНЫҢ ҠАЙҺЫ БЕР АУЫЛДАРЫ ТАРИХЫНАН

Хөрмәтулла Лотфулла улы Абдрафиҡов – башҡорт халҡының тарихы буйынса бик күп сығанаҡтар өйрәнеп, йәмәғәтселеккә милли тамырҙарҙы аңғартыу буйынса арымай-талмай эшләгән шәхестәрҙең береһе. Ул 1938 йылда Ҡырмыҫҡалы районының Һарт-Науруз ауылында һарт башҡорттары ғаиләһендә донъяға килгән. Тыуған ауылында алған ете класс белем менән генә сикләнмәйенсә, хәрби хеҙмәткә саҡырылғас, киске урта мәктәпкә йөрөй һәм ҡулына өлгөргәнлек аттестаты ала. Армияла биш йыл (1957 – 1962) хеҙмәт итеп ҡайтҡандан һуң, егет Башҡортостан ауыл хужалығы институтында уҡып, юғары белемле зоотехник булып сыға. Благовещен, Ҡырмыҫҡалы райондарында эшләй, артабан Өфө ҡалаһына күсеп килә һәм 1998 йылда пенсияға сыға.

«1985 йылдарҙан алып тарих һәм башҡорт шәжәрәләре менән ҡыҙыҡһына башланым, – тип яҙа әҙәрмән биографияһында. – Һарт-Шишмә ауылында ололарҙан ҡалған шәжәрә барлығын ишетеп белә инем. Ул ҡан ҡәрҙәшем Рәхмәтулла ағай Ғафаровта һаҡланған». Ғәрәп алфавитында төҙөлгән документты Х. Абдрафиҡов 1977 йылда кириллицаға күсереп яҙа. Артабан ул Өфөләге Үҙәк дәүләт архивы идаралығында XIX быуат рәүиз мәғлүмәттәрен өйрәнә, ғаилә шәжәрәләрен төҙөп, туғандарына һәм ауылдаштарына тарата. Һәүәҫкәр тарихсы легендар генерал Миңлеғәли Шайморатовтың нәҫел ебен асыҡлауға ла күп көсөн һала.

Ғалимдар раҫлауынса, борон заман Һарт башҡорттары Себер ханлығы биләмәләрендә – Чусовая һәм Тинес йылғалары буйында йәшәгән. XIV быуатта Мөхәммәт Шәйбәни хан һарттарҙы Урта Азияға – Бохара яғына алып китә. Бер быуаттан ашыу шунда көн итеп, һарттарҙың бер төркөмө Уралға – Яйыҡ буйына әйләнеп ҡайта һәм, халҡы ишәйеп, ерҙәре тарая башлағас, икегә бүленеп күсенеп китә. Һарттарҙың бер өлөшө үҙәк Башҡортостанға – Ағиҙел буйына килеп төпләнә, Һарт-Шишмә, Һарт-Науруз ауылдарына нигеҙ һалып, Һарт олоҫон ойоштора.

Икенсе төркөм төньяҡ-көнбайышҡа күсенеп, Һарт-Меңле олоҫон нигеҙләй. 1860 йылда Һарт-Шишмә һәм Һарт-Науруз ауылдарына Минзәлә өйәҙенән кермешәк башҡорт һәм типтәрҙәр килеп ултыра. Артабан был ауылдарҙа татар мәктәптәре асылып, балаларҙы татарса уҡытыу башлана. Үткән быуаттың 50-се йылдарынан бында урыҫ телендә белем биреүсе урта мәктәп эшләй.

Һалйығот *(Салйығот)*

Ошо ауылдың бер ҡарты былайыраҡ һөйләп торҙо: «Ағиҙел үренән сал булән бер егет төшкән булған һәм ул ошонда туҡталған. Ауыл исеме «салғы егет» һүҙләренән башланған һәм азаҡ Салйығот булып киткән». Был фараз мине ышандырманы, һәм мин рәсми сығанаҡтарҙа эҙләнә башланым. 1764 йылда Мусалар (Өршәк-Меңле олоҫо) 10 йән типтәрҙе үҙ еренә индергән. Ауыл исеме Һалйығот (Салйығыт) тип аталып киткән. Сөнки улар Һалйығот ҡәбиләһенә ҡараған Һабанаҡ (Сабанаҡ) тигән башҡорт ауылынан күсенеп килгән була. Үҙ ерҙәрен ташлап китеп, аҫабалыҡтан мәхрүм ителгәс, улар типтәргә әүерелгән. Ләкин XVIII быуаттан алып XX быуаттың 20-се йылдарына тиклем Һалйығот башҡорт ауылы яҙылып килгән. Һабанаҡ тигән ауыл Мәсетле районында хәҙерге көндә лә бар. Сығышы менән шул ауылдан булған Радик Ниғәмәтов менән 50-се йылдарҙа Прибельский урта мәктәбендә бергә уҡыныҡ, ул башҡорт егете ине.

Типтәрҙәрҙең икенсе бер төркөмө күрше Ҡыйышҡы ауылынан килеп ҡушылған. Уларҙың да боронғо сығышы башҡорт булыуы бик ихтимал. «…1895 йылда Һалйығот ауылы Ҡыйышҡы тип атала, ошоноң менән был ауыл халҡының тамырҙары ҡайҙан икәнлеген күрһәтергә теләгәндәрҙер, – тиелә тарих фәндәре кандидаты Әнүәр Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Башкортостана» тигән китабында. – Ул йылда был ауылдағы 48 йортта 242 йән теркәлгән. 1920 йылда 55 өйҙә 274 кеше йәшәгәне күренә, күпселеге – башҡорттар». Ошо йәһәттән 1816 йылғы рәүиз мәғлүмәттәре лә бик ҡыҙыҡлы. Ырымбур губернаһының 8-се башҡорт кантонында йорт старшинаһы Әбделхәйер Әбделмәнов ҡулы аҫтындағы Һалйығот ауылы башҡорттары теркәлгән исемлектә старшина ярҙамсыһы Ибниәмин Бөртөков (35 йәш), Бөртөк Абдулваһапов (1815 йылда донъя ҡуя), уның 28 йәшлек улы Йәһүҙә; Морсабай Бөртөков (41), Ҡаһарман Ғабдулваһапов (47), йорт яһауылы Йосоп Албудин (40), уның улы Зәйнетдин (11) һәм Йосоптоң ҡырғыҙҙарҙан әсир итеп алған 25 йәшлек Тыҡый Буранов күренә. Шулай уҡ 1812 йылда Һабанаҡҡа күсеп киткән Әнүкәй Исмаҡов (69) менән Ғәбдин Ҡармышев (34) та теркәлгән.

Илсекәй

1795 йылда бында 17 йортта 122 башҡорт теркәлгән. 1859 йылғы X рәүиздә 45 ғаиләлә 243 аҫаба башҡорт көн иткәне билдәле. Ауыл исеме Табын олоҫоноң билдәле аҫаба башҡорто Илсеғол Илсебаев исеменән алынған. Рәсәй батшаһы Петр I-нән ошо хаҡта Грамота алыуы тураһында белешмә лә бар. Илсекәй 1959 йылға тиклем үҙ аллы башҡорт ауылы булараҡ теркәлеп, үткән быуаттың 60-сы йылдарында Ҡабаҡ ауылы менән ҡушыла. Әйткәндәй, Ҡабаҡта ла XIX быуатта өс-дүрт ғаилә башҡорттар йәшәгәне билдәле. «Улар Илсекәй менән туған булған», – тип яҙа профессор Әнүәр Әсфәндиәров.

Хәҙер был ауылды (ҡасабаны) урындағы халыҡ икегә бүлеп, «Ҡабаҡ яғы», «Илсекәй яғы» тип йөрөтә. Илсекәй ауылы район картаһынан юғалған. 1859 йылғы 22 ғинуар рәүизендә теркәлгәнсә, Ырымбур губернаһы Өфө өйәҙенең

25-се башҡорт кантонының 1-се йортона ҡараған Илсекәй ауылында 118 ир һәм 125 ҡатын-ҡыҙ күренә. Беренсе булып теркәлгән Ҡотлоҡәләм Ҡулбаевтың (50 йәш) Мырҙагилде (26), Абыҙгилде (20), Мөхәмәтасҡар (15), Ҡотлогилде (1) исемле улдары булған. Урядник Күҙебай Ҡулбаевҡа – 47 йәш, уның улдары Шәйхелислам (12), Мырҙаҡай (10), Баҡый улы Байбулат Ҡулбаев (63) – отставкалағы зауряд-яһауыл. Уның 1855 йылда 28 йәшендә вафат булған улы Бикбулаттың Динислам (12), Солтанморат (29), Ибраһим (36), Әбдрәхим (30) исемле улдары теркәлгән. 17 йәшлек Абдрафиҡ – 1854, 14 йәшлек Абдулнафиҡ 1855 йылда үлеп ҡалған. Баҡый улы Исламморат Ҡотлобулатов урядник дәрәжәһендә булып, 29 йәшендә 1858 йылда донъя ҡуйған. Уның Мөхәмәтлафа (13), Мөхәмәтсафа (8) һәм Әхмәҙи (4) исемле улдары бар. 5-се булып теркәлгән Шәрәфетдин Ҡотлобулатовтың (36) Вәлиулла исемле ярты йәшлек улы һәм 23 йәшлек ҡустыһы Хөснөтдин күренә.

Һәүәләй

1764 йылда аҫаба башҡорттар менән килешеү нигеҙендә барлыҡҡа килгән ауыл, 2-се типтәр командаһы старшинаһы Һәүәләй Солтангилдин исемен йөрөтә. Һәүәләй Солтангилдин 1726 – 1796 йылдарҙа йәшәгән. Оҙаҡ йылдар 2-се типтәр командаһы старшинаһы булып эшләгән. Ике ҡатыны булып, береһе – Благовещен районы Эҙәк (Изәк) исемле мари ауылынан, икенсеһе – Тауыштан.

Һәүәләй ауылы кешеләре XVIII быуатта Туҡтар исемле мари ауылынан килеп сыҡҡандар шикелле. 1782 йылғы IV рәүиз мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ауылда 55 типтәр көн күрә, һәм 1795 йылда улар иҫәбе 73-кә етә. 1795 йылғы рәүиз мәғлүмәттәре буйынса, Өфө наместниклығына ҡараған Һәүәләй ауылында түбәндәге кешеләр теркәлгән: Байгилде Иманаев (47), Фәйзулла Байгилдин, Сәйфелмөлөк Байгилдин. Йөҙәй Байғужинға – 75 йәш, уның улы Рамазанға – 6. 36 йәшлек Балғазы Балаевтың Баҡый (9), Биткән (6) һәм Бикбай (3) исемле улдары күренә. Икенсе булып теркәлгән Туймулла Ишманаевтың (43) 18 йәшлек Әмәкәс һәм 11 йәшлек Хәбибулла исемле улдары бар. Баймулла Ишманаев (исемлектә – 4-се) яңғыҙы теркәлгән. Старшина Һәүәләй Солтангилдин (69) 5-се булып, ике ҡатыны – 57 йәшлек Үлмәҫ Байгилдина (уның Бөрө округы Эҙәк ауылынан сыҡҡаны ла теркәлгән) һәм 52 йәшлек Урыҫбикә Апаҡаева (Тауыш ауылы типтәре) ла телгә алына. Исемлек Бүре Һөйөндөков (17), Ураҙаҡ Һөйөндөков (15), Аҡьегет Егетәев (35), Бикьегет Егетәев (25), Атырбай Күсәрбаев (27), Йөҙөк Күсәрбаев (20), Василий Балтуғанов һәм Бикташ Васильевтар менән тамамлана.

Туҡтар ауылы әле лә бар. Эҙәк ауылының яртыһы мариҙар, ә Тауыш урыҫ ауылы һаналып, унда алты ғына өй ҡалған.

Аҡташ

Сама менән XVIII быуат урталарында Бишауыл-Уңғарҙан бүленеп, бер урам булып ултырған башҡорт ауылы. 1748 йылда Аҡташта ир затынан яһаҡ түләүсе ете татар ҙа күренә. Өфө өйәҙе буйынса II рәүиз мәғлүмәттәренә ярашлы, ауылда 43 йәшлек Хөсәйен Килкин, уның улдары Бәшир (10), Рафиҡ (7) һәм бер йәшлек Шафиҡ теркәлгән. Артабан Бәгәнәй Друшев (30), Сатан Абдрахманов (14), Шәбдәр Рәжәпов (20) килә. Барыһы ла «яһаҡ түләүсе татар» тип теркәлгән. Һуңынан улар «иҫкеләр» тип аталып киткән. Был кешеләрҙең бүләләре, тыуалары Аҡташта хәҙерге көндә бармы, юҡмы – уныһы, әлбиттә, билдәһеҙ.

1795 йылда 22 өйҙә – 103 аҫаба, икеһендә 14 кермешәк башҡорт һәм дүрт йортта 32 типтәр көн күргән. Типтәрҙәр ерҙе Бишауыл-Табын олоҫо аҫабаларынан 1708, 1784 йылдарҙа алған. 1809 йылда Уразбахты ауылынан алты типтәр ғаиләһе лә ошонда күсенеп килә. Хәҙерге ваҡытта уларҙың вариҫтары Уразаҡов, Уразгилдин, Рамазанов, Кинйәбаев фамилияларын йөрөтә. Боронғо олаталары Авезей, Урезей исемле кешеләргә барып сыға. Ҡараламала ғына булһа ла шәжәрәләрен төҙөп ҡараным, сығыштары татар ҙа, башҡорт та түгел.

1834 йылдың 18 мартында үткәрелгән рәүиз буйынса, Ырымбур губернаһы Өфө өйәҙенең 8-се Башҡорт кантонына ҡараған Аҡташ ауылында түбәндәге башҡорттар теркәлгән. Йорт яһауылы Хәлил Бәширов. Ул 1818 йылда донъя ҡуйыуға ҡарамаҫтан, шул замандағы тәртипкә ярашлы, иҫәпкә индерелгән. Уның улы 36 йәшлек Ғөзәйер, уның улы дүрт йәшлек Әбделғәзиз дә күренә. Хәлилдең икенсе улы – 1819 йылда вафат булған Абдулнасир ҙа рәүиздән ситтә ҡалмаған. Өсөнсө улы Сәйетйәғәфәр (Сәйфетдин) – 20, Хәлил Бәшировтың дүртенсе улы Әбделғәли 19 йәштә булған.

Яңғыҙы ғына теркәлгән Ҡотлозаман Әбүзәровка 27 йәш. Артабан поход йөҙ башы Ишкилде Мерәҫев (1821 йылда донъя ҡуйған) күренә. Уның беренсе ҡатынынан улдары Юлай (23), Муллай (19) һәм икенсе ҡатынынан Мозафар (12) теркәлгән. Исмәғил Хәмзинға 1834 йылда 36 йәш булып, уның өс улы: Динислам (12), Шәмсетдин (7) һәм Сәйфетдин (5) теркәлгән. 32 йәшлек Исламғол Хәмзин улы Күҙәбай (9) менән исемлектә 5-се булып яҙылған. Артабан 4 йәшлек улы Мозафар менән Ишембай Вәлишин (32) килә. Отставкалағы йөҙ башы Аҫылғужа Сапаев (79), икенсе ҡатынынан тыуған Ҡотлогилде (1822 йылда йәшләй донъя ҡуя), Муллагилде (23), Ҡунаҡкилде (1818 йылда вафат) һәм 9 йәшлек Ҡотлобулат менән 7-се булып теркәлгән. Минзәлә өйәҙенең Ҡаташ-Ҡаран ауылынан (7-се кантон) Аҡташҡа 1865 йылда күсеп ултырған 20 башҡорттоң да исемлеге һаҡлана. Бына улар: 55 йәшлек Солтанбәк Солтанаев һәм уның улдары Сәғитдин (19), Ғәйнетдин (16), Ишмөхәмәт Бикмәмәтов (48) һәм уның улдары Илмөхәмәт (25), Ҡотломөхәмәт (15), Мәмәтйән (15) һәм Мөхәмәтйән (6). Исемлектә 59 йәшлек Фәйзулла Әбдрәшитовтың ете улы күренә: Сәғиҙулла (29), Шәрифулла (14), Миңлебай (13), Шәрәфетдин (7), Хәйрулла (6), Вәлиулла (5) һәм Ғәйнулла (6), Сафиулла Фәйзуллин (35) менән улы Миңнулла (3). Йәштәре күрһәтелмәгән Ғәлиулла Хәйбуллин һәм Сиражетдин Бикташев иң һуңғылар булып теркәлгән. 1850 йылда Аҡташ ауылында башҡорттар иҫәбе 34 өйҙә 175 кешегә еткән, 1834 йылда типтәрҙәрҙән ирҙәр затының 116 кеше иҫәпләнеүе билдәле. 1865 йылда ауылға Минзәлә өйәҙенең Ҡаташ-Ҡаран ауылынан 20 башҡорт ире килеп ултыра. 1858 йылда Аҡташ ауылында 459 башҡорт һәм типтәр көн итһә, 1920 йылда ауыл халҡы 1369 йәнгә етә. 2002 йылда ни бары 337 кеше, шул иҫәптән 48 башҡорт йәшәгән.

Шуныһы ҡыҙғаныс: 1865 йылда ошонда күсенеп килгән башҡорттарҙың ейәндәре һәм бүләләре урамда осрашҡанда: «Без Минзәлә татарлары!» – тип ҡысҡырып, артымдан һыҙғырып ҡалды. Был ауыл халҡында милли аң, милли рух – юҡ кимәлендә,сөнки улар олатай, өләсәләренең кем булғанлығын онотҡан. Мин Аҡташ йәмәғәтселеген йыйып, милли сығыштары тураһында һүҙ ҡуҙғатырға тырышып ҡараным, әммә халыҡ йыйылманы. Хәйер, йыйылыр урын да юҡ ине, сөнки клубтары төҙөлөп бөтмәгәйне. Шул хәл күңелемдә һаман төйөр булып йөрөй.

Шәрәй

Был ауыл тураһында тәүге мәғлүмәтте мин 1990 йылда Мәскәү ҡалаһы архивынан эҙләп таптым. Өфө өйәҙе буйынса тәүге рәүиз (1722 – 1723) материалдарында яҙылыуынса, Ағиҙел йылғаһы буйында урынлашҡан Шәрәй (Ширяй) ауылында яһаҡ татарҙары көн итә. Исемлеккә түбәндәге кешеләр теркәлгән: Ширәй Бабарисов (73), уның улы Ҡанлар (19), уның улы Самай (2). 42 йәшлек Мидлиба Ширяеватың Чекла (22), Май (13), Темир (11), Урмасчи (10) һәм Касмаиз (6) исемле улдары. Артабан Шабулат Бекбертов (30), Уразал Ертышев (65) һәм уның улдары Уразгирда (25), Уразбай (18), Бартей (15) һәм Макей (9); 70 йәшлек Еныш Елышевтың 30 йәшлек улы Чурубай, уның улы Илебай (1); Аҡбатыр Бекбатировтың (30) Акиз (2), һәм Аҡьегет исемле улдары. Исемлек Баймырҙа Гаврилов (30), уның ҡустыһы Бигужа (15) һәм Танат Салбаев менән тамамлана.

Ошо уҡ документта Шәрәй ауылы кешеләренең күпме яһаҡ түләүе хаҡында ла әйтеп кителгән – 6 һум. Исемдәре татарса ла, башҡортса ла түгел. Кемдәр улар? Был турала оҙаҡ ҡына уйландым мин. Ниһайәт, бер ҡарарға килеп, мариҙар күпләп йәшәгән – Мишкә районының Елышево ауылына барҙым. Мәктәпкә инеп, уҡытыусылар менән һөйләштем. Бер йәш кенә мари ҡатыны: «Ширей Бабарисов үҙе һәм балалары – сыуаш, ҡалғандары – мариҙар», – тигән яуап ҡайтарҙы. Ширей Бабарисовтың шәжәрәһен төҙөгәс, уның бүләләре, тыуалары әле лә Шәрәйҙә йәшәгәне асыҡланды: Сәғитовтар, Сабитовтар, Моталлаповтар, Зөбәйеровтар һәм бер ғаилә Тажетдиновтар. XIX быуат урталарына Шәрәй ауылы кешеләре үҙҙәрен ер хужаһы – аҫаба башҡорттар тип тоя башлай.

1861 йылдың 20 июнендә Шәрәй ауылына Минзәлә өйәҙенең төрлө ауылдарынан 88 йән типтәрҙәр килеп инә. Рәсми рәүештә кантон идараһынан рөхсәт ҡағыҙы булмай. 25-се кантон башлығы Ишмөхәммәт Өмөтбаев телдән генә бойороҡ бирә. Шәрәйҙең электән йәшәгән аҫабалары быға ризаһыҙлыҡ белдерә, һәм Баһауетдин Сәйфелмөләков, кермешәктәрҙе керетмәҫкә тип, һигеҙ йыл буйы дәғүәләшеп йөрөй. Архивта уның крәҫтиән эштәре буйынса губерна идаралығына биргән ғарызнамәһе лә һаҡлана. Өфө губерна присутствиеһында был ялыу 1870 йылда ғына ҡарала, әммә Шәрәй аҫабаларының дәғүәһе кире ҡағыла.

Шулай итеп, Минзәлә яғынан килгән «кермешәк типтәрҙәр» мәңгелеккә Шәрәйҙә тороп ҡала. 88 йән типтәр араһында 10-ы башҡорт йөрөгән. 1868 йылда бында Стәрлетамаҡ өйәҙе Солтанморат ауылынан (хәҙерге Ауырғазы районы) дүрт йән килеп, нигеҙ һала. Минзәлә өйәҙенән килгән кермешәктәр документтарҙа «мензелинские башкиры» тип теркәлгән. Хәҙер уларҙың вариҫтары түбәндәге фамилияларҙа йөрөй: Нәзировтар, Бәшировтар, Айбашевтар, Иҡсановтар, Сәйфелмөләковтар, Борһановтар, Әбйәлилевтар, Сиражетдиновтар.

1874 йылда Шәрәй ауылына Сысҡан (Тауыш) ауылынан кешеләр килеп ултыра. Исемлектә 53 ир, 41 ҡатын-ҡыҙ – йәмғеһе 94 йән күренә. Шул замандағы «Сысҡан« – Тауыш»тарҙың бүләләре, тыуалары бөгөн Сурағолов, Сөйәрғолов, Ишемсурин, Мортазин, Сәйфуллин фамилияларында йөрөй. Уларҙың боронғо олаталары Тауыш (хәҙерге Иглин районы) ауылынан Сысҡанға XVIII быуаттың 80-се йылдарында күсенгән. «Тауыш» һуңынан «Сысҡан»ға үҙгәртелгән. Хәҙер Шәрәйҙә көн иткән был кешеләр үҙҙәрен башҡорт тип таный. Әйткәндәй, шағир Рәмил Сурағол – ошо нәҫелдән. Мин был турала 1997 йылда «Ватандаш» журналында яҙып та сыҡҡайным.

Тарихи сығанаҡтарҙан бер нисә өҙөк килтереп үтәйек. 1874 йылдың 26 июнендә төҙөлгән «Посемейный список»та Ҡырмыҫҡалы олоҫоноң Кенәздәр-Сысҡан ауылының Шәрәй ауылына күсенергә теләк белдергән типтәрҙәренең исемлеге бирелгән. Унда 50 йәшлек Йәрмөхәмәт Мәндиев, уның улдары Мөхәмәтвәли (20), Мөхәмәтйән (18), Мөхәмәтлатип (12), Мөхәмәтхәби (6) һәм 1859 йылда вафат булған улы Мөхәмәтзариф күренә. Артабан 1857 йылда 28 йәшендә донъя ҡуйған Ғиззәтулла Сөйәрбаев, уның улы Әбделхәбир (14) һәм ҡыҙы Мәғрифә; 56 йәшлек Әбделфәйез Сөйәрғолов, уның ҡатыны Мәрғүбә Хәмитова (44), ҡыҙҙары Хөбәйбә (24), һәм 51 йәшлек Әбделкәрим Сөйәрғолов күренә.

XVIII, XIX быуаттарҙа Шәрәй ауылы халҡы бик ауыр тормошта йәшәгәнгә оҡшай. Ошоға бәйле ауыл ҡарттары йыр ҙа сығарған:

Әрәмәнең ҡарамаһын
Үтер көндәр булырмы;
Бәлки, рәхәт көндәр етер,
Күрер көндәр булырмы?

XIX быуатта христиан диненә өндәп, көсләп суҡындырыуҙар ҙа булған. Мәҫәлән, «...Ахмедулла Зюлгаиров 29 лет, по святому крещению и Петра Никифарова. Принял святое крещение в 1852 году. Петра Никифарова жена Агафья Осипова 30 лет».

Ҡорманай

Бында төрлө ауылдарҙан йыйылған кешеләр йәшәй булып сыҡты. Мәҫәлән, Әхмәровтар – Еҙем буйындағы Юлыҡ (Ғафури районы) ауылынан, Ҡорманаевтар, Динисламовтар – Төбәк Таҙларынан, Шәмиғоловтар, Юламановтар – Малай, Сөлөкбаевтар – Стәрлетамаҡ яғындағы Яуымбәт ауылдарынан сыҡҡан. Был кешеләр башлап Яңы Ҡыйышҡыға (Ҡаран) ауылына килгәндәр шикелле. Был ҡуҙғалыш 1905 йылғы инҡилап шауҡымында башланып, Ҡаран менән Үтәгән араһында Бәҫтән һыуы буйында күскенселәр Ҡорманай исемендә ауыл нигеҙләгән. Ҡорманай башҡорттары менән Ҡаран типтәрҙәре араһында ер мәсьәләһе буйынса низағ сыҡҡас, уны Кинйәбулат Ҡорманаев башлап йөрөгән. Был бәхәстең 1917 йылғы Октябрь инҡилабына тиклем дауам итеүе билдәле. Типтәрҙәр ошо хаҡта «Ҡорманай бәйете» сығарған:

Кинйәбулаттың аты йөрөшлө,
Йөрөшлө һәм килешле.
Хәжекәй һыртын алырҙар ине.
Мүкле ҡыуаҡ тейешле.

Хәжекәй һырты бик бейек,
Үҙә йүкә лә ерек.
Хәжекәй һыртын алырҙар ине.
Типтәрҙә булды ерек.

Хәжекәйҙең һыртында
Имән ҡайыры таш булъан.
Мүкле ҡыуаҡ һаҙына
Кинйәбулат баш булъан.

Башҡорттарға биргән ер
Ҡайҙа ҡыуаҡ, ҡайҙа һаҙ.
Башҡорттарҙы ҡыуҙыҡ беҙ
Ун өсөнсө йылда яҙ.

Кинйәбулат юллайҙыр,
Ҡалдаш буйын алам, тип,
Әмин бабай илайҙыр,
Мин ауылда ҡалам, тип.

Бәйеттән күренеүенсә, Кинйәбулаттың аҫаба ерҙәрен ҡайтарып алыу өсөн тырышып йөрөүе уңышҡа килтермәгән. Ерҙәренә күршеләре хужа булып, ауыл халҡы йотолоуға дусар ителгән. Был ауыл сама менән 1905 – 1941 йылдарҙа йәшәгән. «...Бәләкәй, бер колхоз бригадаһы ла ойошторорлоҡ булмағас, һуғыш башланыр алдынан (1936?) Ҡаранға ҡушылдыҡ та ҡуйҙыҡ», – тип һөйләй ҡарттар. Шулай итеп, Ҡаранда Ҡорманай, йәғни Башҡорт урамы барлыҡҡа килә. Артабан улар ҙа үҙ асылын ташлап, күрше милләт исеменә яҙыла башлаған.

Яңы Ҡыйышҡы ауылында элек Әхмәт Ҡорманаев тигән колхозсы йәшәне. «Урал» колхозында алдынғы тракторсы булды ул. Шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүҙә, иген игеүҙә юғары күрһәткестәргә иреште. Уның хеҙмәт ҡаҙаныштары Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреүгә лайыҡ ине. Шул турала документтар тултырып, Өфөгә, КПСС Өлкә комитетына, ебәргәндәр. Ундағы иптәштәр ҡағыҙҙарҙан уҡып, Әхмәт Ҡорманаевтың татар булыуы арҡаһында, имеш, Герой исеме биреүҙән баш тартҡан.

Тарихи сығанаҡтарҙа оҙаҡ ҡына ҡаҙынып, мин Ҡорманай ауылының 1920, 1926 йылдарҙағы иҫәп алыу мәғлүмәттәренә тап булдым. 1920 йылғы ауыл хужалығы иҫәбен алыу мәғлүмәттәрендә Стәрлетамаҡ өйәҙенең Табын кантоны Дыуан-Табын олоҫона ҡараған Ҡорманай ауылы халҡы ла күренә: 32 йортта йәмғеһе 141 кеше. Исемлеккә күпселеге башҡорттар, типтәрҙәрҙән – ике, татарҙарҙан бер кеше генә теркәлгән. Ҡайһы бер фамилияларҙы атап үтәйек: Һөләкбаев, Әхмәтшин, Әхмәров, Юламанов, Ҡорманаев, Шәмғолов, Ғаянов, Садиҡов һ.б. Исемлек ир-заттарын ғына атай, ҡатын-ҡыҙҙарҙың уларға туғанлығы һәм нисә йәштә булыуы ғына күрһәтелгән. Ғаиләләрҙең аҙ һанлы, шулай уҡ малды ла бик аҙ тотоуы, ерҙәренең наҡыҫлығы күҙгә ташлана. Йылҡы малы тотоусылар ике-өс кенә ғаилә, ерҙәре лә 8 дисәтинәнән артмай. Үрҙә телгә алынған Кинйәбулат Ҡорманаевтың ҡатыны, бер улы менән килене һәм ҡыҙы барлығы күренә. Уларҙың биш баш малы, ике ярым дисәтенә сәсеүлеге, йәмғеһе 4 дисәтинә ере булған.

Яңы Ҡыйышҡы *(Ҡаран)*

Күрше-тирәләге башҡорттар Ҡаран менән Һаҡайҙы «сыуаш ауылдары» тип йөрөтә. Ҡарттар һүҙенә ҡарағанда, Ҡаранға Ҡәйси исемле суҡынмаған сыуаш килеп ултыра. 1990 йылда Мәскәү Үҙәк дәүләт тарих архивынан (ЦГАДА) алынған мәғлүмәттә түбәндәге юлдар бар:

Өфө өйәҙе буйынса 1722-1723 йылғы I рәүиз материалдарына ярашлы, Ҡаран йылғаһы буйында урынлашҡан Ҡарансы ауылында яһаҡ түләүсе татарҙар: Сөләймән Тоҡалмышев (50), Ҡадир Тоҡалмышев (60), уның улы Бас (4), Ҡармыш Әлекәев (30), уның улы Маный (1), Ҡорос Тоҡатмышчиев (7), уның улы Ҡормот (25), Тоаз Тоҡатмышчиев (6), уның улы Телей (30). Әзмәт Тоҡтамышев

(60), уның ҡустыһы Акбодов (40), Уразмәт Тохтамышев (40), уның улы Урасай (10). Йәмғеһе туғыҙ йортта 14 ир заты күренә. Барлығы 2 һум яһаҡ түләүҙәре хаҡында ла әйтелгән. Ошо мәғлүмәтте Ҡаран ауылы ҡарттарына уҡып ишеттерҙем. Улар: «Беҙ был кешеләрҙе танымайбыҙ, улар беҙҙең олатайҙар түгел», – тине. Тимәк, исемлектәге кешеләр йә үлеп бөткән, йә күсенеп киткән. Ә улар урынына мосолман сыуаштар килгәндер, тип фараз итергә генә ҡала. Ҡазан ғалимдары иһә Ҡаранды болғар ауылы тип тырыша. Башҡортостан тарихсылары фекеренсә, Яңы Ҡыйышҡы ауылына ерҙе Дыуан-Табын башҡорттары (Үтәгәндәр) биргән. Артабан, рәүиз мәғлүмәттәрендә Теней Аканов, Аван Айдаров, уның улы Артуған Аванов күренә һәм Аванов артабан Иванов булып китә. 1811 йылда Биктуған Ивановтың улына Ниғәмәтулла исемен биреп, мосолман булып китеүе билдәле. Хәҙерге Ханнановтарҙың боронғо олаталары ла Хәнди исемле булған.

XVIII быуатта Ҡаранда ҡаҙаҡ ғаиләһе – Турғаевтар ҙа йәшәгән, хәҙер улар Арыҫланбәков фамилияһында йөрөй. Икенселәре – Туймуллин һәм Ғүмәров. 1791 йылда Ҡаранға Ҡыйышҡы ауылынан алты (?) ғаилә типтәрҙәр килеп ҡушыла ла, артабан ауылдың исеме Яңы Ҡыйышҡы булып китә. XX быуаттың 60 – 80-се йылдарында колхоздар эреләтелгәс, Яңы Ҡыйышҡыға бик күп башҡорт ғаиләләре килеп төпләнде. Элгәрерәк ҡушылған Ҡорманайҙы ла иҫәпләһәк, был ауылда 150-ләп башҡорт кешеһе булырға тейеш. Яңы Ҡыйышҡы (Ҡаранда) урта мәктәп эшләй.

1782 йылда Ҡаран ауылына Өфө өйәҙе Муса ауылынан бер-ике ғаилә типтәрҙәр күсенеп килә. Ихтимал, улар хәҙерге Шишмә районы Муса ауылынан булғандыр. IV ревизиянан һуң (1782) улар Һарт-Шишмәгә Ағиҙел аша ятҡан төбәктә Хоҙайбирҙе ауылын нигеҙләй. Сама менән 1834 йылдарға тиклем шунда көн күрә, аҙаҡ Ҡаранға килеп төпләнә. Хәҙерге көндә улар Яңы Ҡыйышҡыла Йөҙләкбаев, Ғәлимов фамилияларында йөрөй.

XVIII быуатта Ҡаран кешеләре Иҫән, Еҙем-Ҡаран, Юрмаш, Һаҡай һәм башҡа типтәр ауылдары менән нәҫел алмашҡан. Ә ул ауылдарҙың бер өлөшө сыуаш, мари була. Шул рәүешле йәшәй торғас, Иҫән ауылы Ҡаранға ҡушылып уҡ китә.

Һаҡай *(Сахай)*

Был боронғо ауыл тураһында 1966 йылда «Ағиҙел» журналында профессор Ирек Аҡманов та яҙып сыҡҡайны. Һаҡай олатай һәм уның туғандары башҡорттарҙан була, йәғни Һаҡай башҡорт ауылы булараҡ нигеҙләнә. XVII быуатта уҡ Һаҡайҙың кинйә улы Йосопбай 96 йәшкә етеп, 1797 йылда вафат булған.

Һаҡай олатай күпләп умарта аҫраған. Бер мәл уның умарталығын һәм бөтә хужалығын ҡараҡтар килеп, туҙҙырып, талап китә. Шунан һуң уның хужалығы миктәп ҡала. Аҙаҡ был башҡорт ауылына типтәрҙәр күсеп килә, шулар араһында суҡынмаған сыуаштар ҙа булған, күрәһең. Мәҫәлән, 1796 йылғы яҙмаларҙа Емыкай Сергеев, Анна Паведышева, Айнасултан Евгилдина, Енаберде Сенкин, Миняс Семенкина һәм башҡа шундай исемдәрҙе осратабыҙ. Тирә-йүндәге башҡорттар был ауылды «Һаҡай сыуаштары» тип нарыҡлайҙар.

Һаҡайҙа һәм Яңы Ҡыйышҡыла сыуашҡа оҡшаған кешеләр әле лә бар, бигерәк тә – ҡатын-ҡыҙҙар араһында.

Хөрмәтулла АБДРАФИҠОВ.

Рәйлә
НӘҘЕРҒОЛОВА

Юморескалар

Яңы бизнес

Спонсорҙар кәрәк, приют асам... Ирҙәргә... Ниңә көләһегеҙ? Йәлләйем, мин уларҙы. Хәҙер бит арыу ирҙәрҙе бармаҡ менән генә һанарлыҡ, улары ла әллә нисә ғаиләне обеспечивать итә – көс төшә, көс. Заманалар үҙгәрҙе шул, үҙгәрҙе. Бейектә йәшәйем мин. Шунда балкондан ҡараһаң, әллә нисә мусор йәшниге күренә, ирҙәр килә лә шунда соҡсона. Бисәләр ҙә килә, ә ирҙәр – күберәк, араларында типһә тимер өҙөрҙәйҙәре бар. Шундай ирҙәрҙе лә сүплеккә ташларҙар икән, эй Хоҙайым.

Ирҙәр слабый халыҡ шул, улар бит бала шикелле, күңелдәре гел йәш, ә үҙҙәре... Уларға защита кәрәк, защита, һаҡларға кәрәк, тим, ирҙәрҙе. Беҙ, бисәләр, һаҡламаһаҡ, улар не выживут. Тиҙҙән "Ҡыҙыл китап"ҡа индерерлек кенә ҡала бит улар.

Бер уйлаһаң, ирҙәр үҙҙәре ғәйепле. Башта һәйбәт кенә булалар – балалар тыуып, арлы-бирле үҫкәнсе, унан алан-йолан ҡарана башлайҙар, ғүмер үтеп бара тип, русса әйткәндә, начинают наверстывать упущенное. Когда начинают наверстывать упущенное, йә аҙалар, йә үләләр. Эйе, үләләр, берәүҙәр үҙҙәре теләп, икенселәре теләмәйенсә. Аҙғандары кеше бисәһенә, йәш ҡыҙҙарға күҙ һала башлай, ғаиләләрен ташлап китә хатта. Был ирҙәр ҡабат ҡайталар, конечно. Бер ҡайталар, бер китәләр. Ә ҡайһы берҙәре ҡайтмай ҙа ҡуя, берәүҙәрен, ҡайтһа ла,

---

Рәйлә Нәҙерғолова (1958) Ғафури районы Бәйембәт ауылында тыуа. Һөнәре буйынса бухгалтер. Тормош юлын тыуған колхозында кадрҙар бүлеге мөдире булып башлай. Стәрлетамаҡҡа күскәс, граждандарҙы теркәү бүлегендә, Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһында эшләй. Ул Бәләбәй ҡалаһында үткән “Илһам шишмәләре" шиғриәт фестивалендә ҡатнашып лауреат булды һәм үҙенең “Аҡҡош һағышы" исемле шиғырҙар китабын ҡулына алды. 2012 йылда уның үҙнәшер менән “Яҙмыш бүләге" исемле шиғырҙар йыйынтығы сыҡты. Әҫәрҙәре “Йәйғор" һәм “Артылыш" исемле дөйөм йыйынтыҡтарҙа, республика һәм урындағы матбуғатта даими баҫылып тора.

ҡатындары ҡабат индермәй, гордость мешает. Ни эшләтәһең инде уларҙы, природа бит, природа, тәбиғәт законы. Ана бит, әтәстең әллә нисә тауығы булһа ла, һаман да күршеләргә йүгерә, улар бит бер заттан.

Боҙолдо донъялар, боҙолдо. Хәҙер элекке кеүек ЗАГС-ҡа барып, туй яһап донъя көткән йәштәр һирәгәйҙе. Никах уҡытҡаны уҡыта, уҡытмағаны юҡ – йәшәп ҡарайҙар. Йәшәйҙәр ҙә ҡарайҙар, йәшәйҙәр ҙә ҡарайҙар. Демократия. Унан пенсия йәшенә еткәндәрен дә һиҙмәй ҡалалар.

Спонсорҙар кәрәк, спонсорҙар... Ирҙәр приюты асам да шуларҙы йыйып, айныҡтырып, ашатып-эсертеп, дауалап, һауыҡтырып... һатам. Эйе, һатам, яңылыш ишетмәнегеҙ. Улар өсөн ҡайғырып, күпме аҡса сығарып көс һалғас, уның килемен дә алырға кәрәк, хәҙер бушҡа бер кем дә бер ни ҙә эшләмәй, үҙегеҙ беләһегеҙ. Әйҙәгеҙ, бисәләр, сиратҡа яҙылығыҙ. Алданыраҡ килгәндәре һайлап ала, ҡалғандар кем ҡала – шуны ала. Әйҙәгеҙ, ҡайһығыҙ беренсе...

Бәҙрәф бәләһе

Ҡайтып киләм әле бына, атай-әсәйемдәрҙе поезға оҙатып. Ҡайтарғым килмәгәйне лә, шулай килеп сыҡты. Ғүмер эсендә бер киләләр, рәхәтләнеп ҡунаҡ булып ҡайтырҙар, тигән инем. Ҡайҙа әле, баштан һөйләйем.

Фатир алдыҡ бит, Өфөнөң ҡап уртаһында, бейек йорттарҙың береһендә, өс бүлмәле. Уның артынан күпме йөрөүҙәр, яҙһаң, үҙе бер китап булыр. Ошо фатирҙы алайым тип, бер заводҡа өс тапҡыр "вредность" тултырҙым, пенсияға сыҡһам да эшләп йөрөнөм. Эшләп-эшләп тә бер ни ҡыла алмағас, яйлап ҡына кемделер майларға, кемделер яйларға тотондом, "төртөргә" лә өйрәндем. Башта бик ҡурҡа инем, һуңынан күнегелде, береһе лә ҡулыма һуҡманы. Шулай итеп фатирлы булдыҡ. Ғүмер буйы көтөп алған ошондай оло шатлыҡты дуҫ-иштәрһеҙ, туғандарһыҙ үткәреп булмай бит инде. Беҙ ҙә өй туйы үткәрергә булдыҡ. Бурысҡа ла индек, моғайын, ошо тиклем байрамға буш ҡул менән килмәҫтәр әле, өләшләтә булһа ла ҡапланыр, тип уйланыҡ. Ғүмер буйы дөйөм ятаҡта йәшәп, ҡунаҡ йыйыу түгел, ауылдан килгән ата-әсәйҙе лә, комендантҡа ғариза яҙып рөхсәт алмайынса, бүлмәбеҙгә үткәрмәйҙәр ине.

Шаулатып өй туйы яһап ятҡанда, иң ҡыҙыҡ мәле еткәндә, минең атай... Иламай ҙа булдыра алмайым шул, атайым оятҡа ҡалдырҙы. Эйе, бөтә туғандар, дуҫиштәр алдында. Нисек итеп, тиһегеҙме? Минең атай-әсәй ҡарттар инде, ғүмер буйы ауылдан бер ергә лә сыҡмай донъя көткәндәр. Атайым һуғышта булған, әлбиттә, тик ҡалаға килеп ҡунаҡ булыуҙары – беренсе тапҡыр. Килһәләр ҙә, иртәнге поезд менән киләләр ҙә кисен ҡайтып китәләр ине. Бына шулай, мәжлес ҡыҙыу ғына барғанда, төшөрөп тә алғас, атайым бәҙрәф таптыра башланы.

– Атай, бына бит эргәлә генә, өшөп тышҡа сығып йөрөйһө лә юҡ, тап-таҙа, кер шунда, – тип бер сәғәт кенә өгөтләгәнбеҙҙер, юҡ, һис ризалатып булмай быны.

– Өй эсендә, ашап-эсеп ултырған урында, мин нисек итеп хәжәтемде үтәйем. Юҡ! Булмай! Кермәйем дә! Ултырмайым ла! Бөттө, китте, – тине лә, арлы-бирле генә кейенеп, тышҡа сыҡты. Артынан иремде лә сығарған инем дә, ҡыуып индергән.

Эргәлә генә ҡала паркы, ағастар, ҡыуаҡтар үҫеп ултыра. Атайым тирә-яғына арлы-бирле генә ҡаранған да, түҙерлек хәле ҡалмағандыр инде, бахырым, ҡыуаҡ араһына инеп, хәжәтен үтәгән. Салбарын да күтәреп өлгөрә алмаған, ике яҡтан ике милиционер килеп ҡултыҡлап алған да елтерәтеп машиналарына индереп тә ултыртҡан. Аңлатып та ҡараған, юҡ, тыңларға ла теләмәгәндәр.

– Ах, араҡы есе лә килә бит, айныҡҡыста йоҡлап сығырһың, – тип илтеп япҡандар бахырымды.

Эй, Аллам, үҙен дә, беҙҙе лә оятҡа ҡалдырҙы. Ғүмер эсендә бер килеп, рәхәтләнеп ҡунаҡ та була алманылар шул. Барып алдым атайымды, штраф түләп. Килде лә беҙгә, йыйына ла башланы: "Бер көн дә тораһым юҡ һеҙҙең ҡалағыҙҙа, – ти, – рәхәтләнеп үҙ хәжәтеңде лә атҡарып булмай!"

Әтәс урлаған Ябалаҡ

Мин – Ябалаҡ Миҙхәт булам. Үҙем ябалаҡ түгел инде, ҡушаматым шулай.

Эйе, беҙҙең ауылда ҡушаматһыҙ кеше юҡ. Мәҫәлән: Бүре Әнүәр, Төлкө Хәмит, Ҡуян Әхәт. Ҡушамат фамилиянан да, хатта исемдән дә алдан йөрөй.Ҡырҡ йәш тигәндә, мин өйләнеп ҡуйҙым бит әле. Әтәс Рәхимдең ҡыҙын урлап алдым. Элек иғтибар итмәй эре генә йөрөй инем дә бит, яҙмыш ҡауыштырҙы. Йәш саҡта бик шәп егет инем, ҡыҙҙар үҙҙәре минең арттан әҙ йүгермәне. Шулай һайланып йөрөй торғас, ҡырҡҡа килеп еттем дә инде. Ҡыҫҡаһы, өйләндем. Шул мәл бер ҡыҙыҡ хәлгә тарыным. Бер көн магазинға керһәм, Роза миңә әйтә:

– Миҙхәт ағай, шуға көнөң ҡалдымы ни, әтәс урлап йөрөмәһәң? – ти. «Өйләнгәс өйләнгән инде, хәҙер һайланып йөрөргә ваҡыт ҡалманы, яңғыҙ күпме йөрөргә була», – тип уйланым да бер һүҙ ҙә әйтмәй сығып киттем. Шунан икенсе магазинға керҙем, һатыусы Факиһа апай:

– Миҙхәт, – ти,– шуға көнөң ҡалдымы инде, әтәс урлап йөрөмәһәң? – Мин тағы бер һүҙ әйтмәйенсә сығып киттем. Асыуҙан бер-бер артлы ике-өс тәмәке тартып бөтөрҙөм. Минең Әтәс ҡыҙын алыуымды хупламайҙар, ахырыһы, уларға түгел, миңә йәшәргә, тип уйлап, әсәйҙәргә киттем. Атай телевизор ҡарап ята, миңә ҡырын ғына төбәлеп ҡуйҙы. Әсәйем ашарға ултыртып йөрөй, үҙенең кәйефе юҡ. «Нимә булды икән быларға?» – тип уйлап та бөтмәнем, әсәй әйтә:

– Кит, оятһыҙ! Ҡартайған көнөбөҙҙә йөҙөбөҙҙө ҡыҙарттың. Көнөң шуға ҡалдымы ни? – ти.

– Һаман да шул балыҡ башы. Кемгә булһа ла тиҙерәк өйлән, тип көн дә ҡолаҡ итемде ашай инегеҙ, хәҙер килеп нимәһе оҡшамай?

– Әтәс урлап йөрөмәһәң, ашарыңа юҡтыр шул? Хурлыҡ! Ниндәй хурлыҡ! Шуның өсөн үҫтерҙекме? Сәлимә әбейеңдең әтәсен ниңә урланың? – тип әрләй һаман әсәйем.

– Юҡ! – мин әйтәм. – Урламанымсы уның әтәсен.

– Сәлимә ҡарсыҡ: "Ябалаҡ әтәсте урлап алып китеп барғанда, таяҡ тотоп ҡыуа башлағас, кәртәгә бәрелеп, төшөрөп ҡалдырҙы", – ти бит.

– Ни эшләп уны миңә әйтәһең, атайым да ябалаҡ бит, бәлки, ул урлағандыр? – тинем аптырағас, шаярыуға бормаҡ булып.

– Әтәс урлап йөрөргә атайың ҡартайған инде, – ти әсәйем, һис тә асыуы баҫылмай.

Мин хәҙер аптыраште ҡалдым, миңә "бур" исеме лә тағырҙармы икән? "Бур ябалаҡ" тип әйтергә лә күп һорамаҫ ул ауыл... Тәмәкегә тип тағы ла шул магазинға керһәм, һатыусы Роза:

– Миҙхәт ағай, мине ғәфү ит инде, йәме. Сәлимә әбейҙең ул әтәсен ысын ябалаҡ урлаған булған, – ти. Өҫтөмдән тау төшкәндәй булды.

«Ябалаҡ әтәсте урланы» тип әбей һөйләгәс, халыҡ мин тип уйлаған. Ә миңә «Шул әтәскә көнөң ҡалдымы ни, әтәс урлап йөрөмәһәң?» – тигәс, Әтәс ҡыҙын алғанға әйтәләр, тип уйланым.

Ололарҙың бала-саға уйыны

2012 йыл мәғариф тарихына уҡыусыһы аҙ булған ауыл мәктәптәрен ябыу, туған телдәрҙе артабан ҡыҫырыҡлау, күп һанлы уҡытыусыларҙың эшһеҙ ҡалыу, башланғыс класс уҡыусыларының сит ауылдарға автобустарҙа интегеп йөрөү йылы булараҡ инеп ҡалды. Властар был күңелһеҙ хәлдәргә атамаһын да тапты: «оптималләштереү». Хатта ауыр һуғыш йылдарында, унан һуңғы ҡатмарлы осорҙарҙа ла белем биргән ауыл мәктәптәре эшләүҙән туҡтаны. Ә мәктәпһеҙ ауыл инде ул «юғалыуға дусар ителгән» тигәнде аңлата.

Эйе, мәктәп, ғөмүмән, мәғариф – табыш ала торған тармаҡ түгел. Әммә ул – әлегә күренмәгән, ә киләсәктә табыш килтерәсәк кешеләрҙе тормошҡа әҙерләү урыны. Ул ғүмер баҡый шулай булған, әле лә шулай булып ҡала. Тик беҙҙең илдә ошо ябай хәҡиҡәтте аңларға теләмәйҙәр: ҡаҙнала йылдың-йылында мәғарифҡа сығымдар кәметелә, хәлбүки, оборона маҡсаттарында аҡса торған һайын күберәк бүленһә лә. Уйлап ҡарағыҙ: яҡын йылдарҙа ҡоралланыуға, «армияны модернизациялау»ға ил ҡаҙнаһынан, тимәк, һалым түләүсе кеҫәһенән, 20 триллион һум бүлеү күҙ уңында тотола. Был – иҫ киткес ҙур һан. Шуның бер аҙ ғына өлөшө булһа ла мәғарифҡа бүленһә ине лә бит...

Әлеге көндәрҙә оборона өлкәһендә ил халҡында ғына түгел, башҡа күп кенә тарафтарҙа ла аптырау ҡатыш ғәжәпләнеү тыуҙырған коррупция тирәләй шаушыу туҡтамай. Юғары дәрәжәле «менеджер»ҙарҙың үҙләштергән аҡсалары миллиард һумдар менән иҫәпләнә. Шул аҡсаларҙың бер өлөшө генә лә ауыл мәктәптәрен һаҡлап ҡалыуға мөмкинлек бирер ине.

Ололарҙың аҡса менән «уйнауы» быны менән генә бөтмәй әле. Миҫалға һәр төрлө юбилейҙар, хәрби парадтар уҙғарыу мәсьәләләрен генә алайыҡ. Был – Рәсәй империяһында элек-электән килгән традиция, үҙенсәлекле «сир». Әйтәйек, урыҫ батшалары ла һәр төрлө парадтар үткәрергә яратҡан. Империя халҡының күпселеге хәйерселектә йәшәгән, крепостной крәҫтиән балаларынан торған армияла һалдаттарҙы мылтыҡ тоттороп, айҙар буйына «айт-два» баҫтырып интектергәндәр. Ғөмүмән, армия нигеҙендә һуҡтырып яҙалау тәртибе ятҡан.

Советтар осоронда ла хәрби парадтар үткәреү ил етәкселәренең төп шөғөлдәренең береһенә әүерелгәйне. Иҫкә төшөрәйек: Иосиф Сталин, Леонид Брежневтар, Владимир Ленин мавзолейы трибунаһында тороп, ниндәй ҡәнәғәтләнеү менән хәрби парад ҡарарға ярата ине. Ә ул парадтар Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанында йылына ике-өс тапҡыр үткәрелер булып китте. Хәрби парадтарҙың ил ҡаҙнаһына күпмегә төшкәне, унда ҡатнашҡан хәрбиҙәрҙең был муштранан ниндәй ауырлыҡтар кисергәне хаҡында парад ҡарап ҡыуаныусылар, моғайын, уйлап та ҡарамағандыр. Хәҙер инде бындай ҙур хәрби парад йылына бер тапҡыр – 9 майҙа ғына үткәрелә, әммә ул һалым түләүсегә күпмегә төшә – быны тар даирәләрҙә генә белә торғандарҙыр. Уға әҙерлек ике-өс ай алдан башлана, унда

күпме ғәскәр, күпме хәрби техника йәлеп ителә! Уларҙы бит төп вазифаларынан – хәрби әҙерлектән айырып, муштра менән шөғөлләнергә мәжбүр итәләр.

Әйтәйек, Икенсе донъя һуғышында фашизмды еңеүгә үҙ өлөштәрен индергән АҠШ, Бөйөк Британия һәм Францияла бындай тантаналы хәрби парадтар үткәрелмәй, сөнки был илдәрҙә аҡса иҫәпләй беләләр. Ярай, һуғышта еңеү совет халҡына бик ҡиммәткә төштө, миллиондарса ҡорбандар иҫәбенә булды. Шулай ҙа бындай хәрби парадтар уҙғарыу менән мауыҡмау урынлы булыр ине.

Ҡаҙна аҡсаһын иҫәпләмәй тәләфләүҙең тағы бер миҫалы – юбилейҙар үткәреү. 2012 йылда 1812 йылғы Ватан һуғышында француз баҫҡынсыларын еңеүҙең 200 йыллығы байрам ителде. Ошо уңайҙан телевидение аша Бородино ауылы янында, тағы ла бер нисә ерҙә һуғыштың картиналарын «тере итеп» күрһәттеләр: йәғни урыҫ һәм француз ғәскәрҙәре һуғышты. Быны «Ололарҙың һуғыш уйыны» тип атауҙан башҡа һүҙ табып булмай, минеңсә. Уйлап ҡарағыҙ әле, нисәмә мең хеҙмәт йәшендәге кешене төп эштәренән айырып, айҙар буйына өйрәтеп, балаларса «һуғыш уйыны» уйнатһындар әле! Беҙ ҙә бәләкәй саҡта (Ватан һуғышы яңы тамамланған осор) һуғыш уйыны менән мауыға инек: совет һәм немец һалдаттары булабыҙ ҙа ағас мылтыҡтарҙан «атабыҙ»: «пуф» та «пуф». Тик беребеҙҙең дә «немец» булғыһы килмәй, шуға был ролгә сират менән, шыбаға тотоп инәбеҙ. Мин телевизорҙа урыҫ-француз «һуғышсылары»н ҡарағанда ошо бала саҡ уйындарын хәтергә килтереп ултырҙым. Бындай уйындарҙың матди яғы ла бар бит әле. Нисәмә меңләгән кешегә урыҫ һәм француз мундирҙарын тегеүгә, шул заман ҡоралдарын – мылтыҡ һәм пушкаларҙы яһауға күпме аҡса киткәндер бит? Алда урыҫ армияһының, сигенеүсе французлдарҙы эҙәрлекләп, Европа илдәренә походтарын күрһәтәһе бар...

Тағы ла бер ҙур юбилей яҡынлаша – Бөйөк Ватан һуғышында еңеү. Сталинград ҡалаһы янындағы алышҡа арналған совет һәм гитлерсыларҙың һуғыштарын уйнап күрһәтә башланылар ҙа инде. Артабан еңеүҙәр күп булды, шул иҫәптән – атаҡлы Берлин операцияһы ла. Был ауыр һәм данлы һуғыштарҙы документаль фильмдар аша ғына күрһәтеү маҡсатҡа ярашлы булмаҫ ине микән? Унан һуң Бөйөк Ватан һуғышын кәүҙәләндергән нәфис фильмдар ҙа аҙ түгел.

Хәрби парадтарҙы, «юбилей һуғыштары»н ойоштороусылар быны, ил халҡында, йәштәрҙә патриотик тойғолар тәрбиәләүгә йүнәлтелә, тип аңлатмаҡсы. Ләкин был саралар күпселектә яһалма килеп сыға, сатирик ҡараш тыуҙыра һәм, әлбиттә, бик ҡиммәткә төшә.

Ошо хәҡиҡәтте онотмаһаҡ ине: патриотизм тәрбиәләүҙең иң мөһиме – халыҡтың тормош-көнкүреш кимәле. Әгәр халыҡ тормошо тейешле кимәлдә түгел икән, уҙғарылған саралар ғына патриоттар ишәйеүгә килтермәйәсәк. Норвегия, Швеция, Финляндия, Голландия кеүек ҙур булмаған илдәрҙең халыҡтары нилектән Ватандары менән ғорурлана? Сөнки унда тормош дәрәжәһе юғары. Шуға ла беҙгә «һуғыш уйындары»на киткән сығымдарҙы халыҡтың тормошон яҡшыртыуға йүнәлтәһе ине. Шул саҡта патриоттар үҙҙәренән-үҙҙәре тыуасаҡ.

Хажи ӘХМӘТЙӘНОВ.
Бәләбәй ҡалаһы.

Мөһөр һалышмайыҡ!

Мәхмүт Хужиндың «Ағиҙел» журналының 2013 йылғы ғинуар һанында баҫылып сыҡҡан «Яттар мөһөрө» исемле хикәйәһен уҡығас, ҡайһы бер шәхси фекерҙәрем менән уртаҡлашырға булдым. Был әҫәр миңә ныҡ тәьҫир итте.

Әҫәрҙең, жанр талап иткәнсә, күләме бәләкәйерәк. Шуға ҡарамаҫтан, автор әйтер һүҙен оҫта еткергән. Аҙ һүҙ менән күп нәмәне асып бирә белеү – үҙе ҙур маһирлыҡ. Минеңсә, автор уҡыусы иғтибарын хәҙерге башҡорт һәм Рәсәй йәмғиәтен ҡорт һымаҡ кимергән дүрт социаль-ижтимағи һәм психологик мәсьәләгә йәлеп итергә тырыша.

Беренсенән, хикәйәнең төп геройы Кәбир исемле ир, оҙаҡ йылдар ситтә йөрөгәндән һуң, бала сағында берҙән-бер таянысы булған, үҙен күҙ ҡараһылай тәрбиә ҡылған өләсәһе донъя ҡуйғас ҡына ауылына ҡайта. Өләсәһе иҫән-һау саҡта Кәбирҙең, исмаһам, бер тапҡыр ҙа ауылына ҡайтып, өләсәһененең хәлен белгәне булмай. Был, бер яҡтан, йәмғиәттә ғаилә ҡиммәттәренең баһаһы төшөүенә ишаралай. Әммә тормош – бик ҡатмарлы, һәр миҙалдың ике яғы бар. Шундай һорау тыуа: ни өсөн Кәбир оҙаҡ йылдар ситтә йөрөп, отпускыға ғына булһа ла ауылына ҡайтып, өләсәһененең хәлен белмәгән? Һорауға ул үҙенсә яуап таба, араның алыҫлығына, юлда күп ваҡыт уҙыуына һылтана. Әммә, аңлауыбыҙса, был – өҫтән-мөҫтән генә булған, күҙгә күренгән сәбәп. Төп, тәрән сәбәп иһә ир уртаһын уҙған Кәбирҙең бала сағында кисергән психологик яраһында, күңел рәнйешендә. Бәләкәй сағында тиҫтерҙәре, ауылдаштары Кәбирҙе «кулак балаһы» тип үсекләгәндәр, кәмһеткәндәр, хатта туҡмағандар. Бала саҡ кисерештәре ғүмер буйы кешенең хәтерендә ҡала, һис онотолмай. Шуға Кәбирҙең ауылға ҡайтып, иҫке яраһын яңыртҡыһы килмәгән. Әгәр ҙә ауылдаштары, тиҫтерҙәре, сәйәси шауҡымға бирелеп, Кәбирҙе кәмһетмәһә, йәберләмәһә, ул, әлбиттә, тыуған ауылына ҡайтыр, өләсәһененең хәлен белеп торор ине, тип уйлайым.

Бында икенсе мәсьәлә – кешеләрҙең ҡаты бәғерлелеге, кешелекһеҙ мөнәсәбәте сағыла. Әммә, нисек кенә булмаһын, Кәбир хатаһын таный, үкенә. Ауылға ҡайтҡас, уның ниндәй аяныс хәлдә ҡалғанын күрә: колхоз тарҡалған, тракторҙарҙың һөлдәләре генә ҡалған, унда, нигеҙҙә, пенсионерҙар, эскеселәр, көмөшкә һатып кеҫә ҡалынайтыусылар ғына йәшәй. Әгәр был күренеште йәшәү тип атап булһа, әлбиттә. Кәбир, ошондай төшөнкөлөктө күреп, тиҙерәк унан ҡасырға, алыҫлашырға теләй.

Иғтибар тағы ике мәсьәләгә – халыҡтың эскелеккә бирелеүенә һәм ауылдарҙың бөлөүенә йәлеп ителә. Эскелек – дөйөм халыҡ, дөйөм дәүләт, дөйөм ил мәсьәләләре, уларҙан ҡасып, күрмәмешкә һалышып ҡына арынып булмай. Минеңсә, автор хикәйәлә уҡыусыһына, халҡына ошоно ла әйтергә теләгән.

Проблемаларҙы хәл итеү – дәүләттең эше, ябай халыҡ бында бер ни ҙә эшләй алмай, тиеүселәр ҙә табылыр, ләкин, минеңсә, был – хата фекер. Әлбиттә, күп нәмә дәүләткә бәйле, әммә ябай халыҡ битарафлыҡтан арынып, үҙ аллы фекер йөрөтә башламаһа, донъяға айыҡ күҙ менән ҡарамаһа, хөкүмәттең тырышлыҡтары ғына тейешле һөҙөмтә бирмәйәсәк – дәүләт кешеләрҙән тора, уларһыҙ йәшәй алмай.

Минеңсә, был хикәйәнең төп идеяһы шунан ғибәрәт: бер төптән булайыҡ, бер-беребеҙҙе кәмһетмәйек, йәберләмәйек, рәнйетмәйек! Бер милләт, бер халыҡ, бер ил кешеләре булыуыбыҙҙы онотмайыҡ! Битарафлыҡтан, эскелектән арынайыҡ! Үҙ еребеҙҙең ҡәҙерен беләйек! Шулай итһәк кенә, балаларыбыҙҙың, ейәндәребеҙҙең киләсәге яҡты һәм яҡшы булыр!

Халҡыбыҙҙың шундай мөһим мәсьәләләрен әҙәби маһирлыҡ менән күтәреүсе яҙыусылар булыуы һөйөндөрә. Рәхмәт һеҙгә, Мәхмүт ағай! Ижади уңыштар теләйем!

Радим ОМОРҘАҠОВ,
«Мәҡсүҙә» мәсете имам-хатибы.
Ҡариҙел районы, Магинск ауылы.

Дала йырсыһы

Шиғыр килә миңә бейеклектән,
Юғарынан төшкән нур һымаҡ,
Буранбайҙың ҡайнар күкрәгенән
Ҡайнап-күкрәп сыҡҡан йыр һымаҡ.

Рәшит Шәкүр.

Күренекле шағир, ғалим, публицист, филология фәндәре докторы, М. Аҡмулла, Р. Ғарипов, З. Биишева исемендәге әҙәби премиялар лауреаты Рәшит Шәкүровтың шиғриәтебеҙ донъяһында тотҡан урыны баһалап бөткөһөҙ. Шиғриәт – ул кешенең эске тәбиғәтенең сағылышы. Шиғри һүҙҙең, тау-таш ярып, урғылып аҡҡан шишмә кеүек, йөрәк түренән сығып, башҡаларҙың күңел ҡылдарын сиртерлек булыуы мөһим. Был оҫталыҡ Рәшит Шәкүр һымаҡ ысын шағирҙарға ғына хас:

Шиғри һүҙ – ул илһам ҡошо
Тыуған ер күктәрендә,
Тыуа ул йәшен йәшнәтеп
Йырсының күкрәгендә.
Баҙлап, дөрләп янып тора
Күкрәктә минең ялҡын.
Донъяның яҙмышын уйлап,
Уйҙарҙан усаҡ яҡтым.

Күкрәгенә ғәзиз далаһының утлы ҡояшын, даръя һағышын, күкрәүҙәрен, йәйғор төҫтәрен, күңеленә яҡын әрем еҫтәрен – тыуған яғының барлыҡ матурлығын һыйҙырып, шиғриәткә тәүге аҙымдарын яһай шағир:

Мин даланан килдем ҡалаға,
Ә йөрәгем йәшәй далала,
Сәңгелдәгем, моңом – сал дала,
Далаларҙа йәнем һаҡлана, –

тип яҙған.

Тура һәм хаҡ юлдан ҡайырылмаһаң ғына, Кеше тигән бөйөк исемгә лайыҡлы булырға хаҡлыһың. Рәшит Шәкүр тап ана шундайҙарҙан.

Баш осомда – ҡояш яҡтыһы,
Уйҙарымда – ҡояш саткыһы,
Йөрәгемдә ҡояш йылмая,
Күҙҙәремдә ҡояш нурлана.

Эйе, был һүҙҙәр шағирҙың барлыҡ булмышына, тәбиғәтенә, рухиәтенә тап килеп тора. 1970 йылда баҫылып сыҡҡан тәүге шиғырҙар йыйынтығын юҡҡа ғына «Йөрәгемдә – ҡояш» тип атамаған ул. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев әйткәнсә, Рәшит Закир улы – ярһыу тәбиғәтле, тормошта үҙ ҡарашын, үҙ һүҙен тайпылмайынса яҡлаусы шәхес. Унық ижадына, ғөмүмән барлыҡ тормошона ниндәйҙер тынғыһыҙлыҡ, эҙләнеү хас. Ил тарихы, кешелек тормошо, бар донъяны мөмкин тиклем тәрәнерәк, киңерәк белергә тырышыу унық артабан донъя күргән «Тауҙарым, далаларым», «Заманалар юлында», «Сәңгелдәгем – сал дала», «Ыласындар бейек оса», «Ынйы бөртөктәре» тигән шиғри китаптарында асыҡ сағыла.

Таң ҡалдыра телебеҙҙең бөйөклөгө,
Телмәрҙәге һөйләмдәрҙең төҙөклөгө,

Ынйы-мәрйен, гәрәбәләй һүҙҙәребеҙ,
Һәр береһе саф алтындай өндәребеҙ.
Телгә һөйөү – йәнебеҙҙә, тәнебеҙҙә,
Телебеҙ бит – бүләк беҙгә Тәңребеҙҙән.

Үҙ халҡын, үҙ телен сикһеҙ һөйгән кешенең генә йөрәгенән урғылып сыға алалыр бындай йылы һүҙҙәр. Ғүмер буйы бар булмышы менән туған теленең киләсәге хаҡында уйланып, ғәзиз халҡы өсөн янып йәшәй Рәшит Закир улы.

Ниндәй генә шағир, яҙыусыны алма, улар барыһы ла, тәү сиратта, – тыуған яҡ йырсыһы. Был – тәбиғи. Сөнки һәр кемдең ижад шишмәһе тыуған ерҙән башланғыс ала. Улай ғына ла түгел, шағирҙарыбыҙҙың ижады һәр саҡ илһөйәрлек тойғолары менән бергә үрелеп бара. Рәшит Шәкүрҙең шиғриәте лә ошо рух менән һуғарылған. Уның да тыуған төйәгенә, ауылдаштарына бағышланған шиғырҙары бик күп:

Һинең менән, ерем, тын алышым,
Уйҙарымдың талғын ағышы;
Таң һарыһы һымаҡ тын һағышым,
Һәр тауышың – ҡанат ҡағышым.
Һин нур яҡтың минең күҙҙәремә,
Йыр уяттың минең эҙҙәремдә;
Шатлыҡтарҙың шиңмәҫ шишмәләре
Йән ереккән тыуған ерҙә генә.

Рәшит Шәкүрҙең кешеләрҙең шатлыҡ һәм һағыштарын бөтә нескәлегендә тасуирлаған, замандың, милләттең ынтылыштарын яҡтыртҡан шиғырҙарын, һис икеләнмәйенсә, башҡорт поэзияһының үрнәктәре тип атарға хаҡлыбыҙ. Ә шағир – ғәләмдең алһыҙ-ялһыҙ яңы бейеклектәр, яңы киңлектәр эҙләп осҡан утлы бер ҡуҙы, атылырға торған йондоҙо. Рәшит Шәкүр яулаған бейеклектәр, ынтылған киңлектәр быны менән генә сикләнмәҫ.

Һүҙемде шағирҙың ошондай шиғыр юлдары менән тамамлағым килә:

Аҡ көндәрҙә, ҡара төндәрҙә лә
Янып торһон өмөт йондоҙо.
Ҡанатланып ос һин, толпар атым,
Ара алыҫ, алда юл оҙон.

Юлиә ӘХМӘТЙӘНОВА.

Боронғо минитипография

Мысырҙа, йәғни Египетта, пирамидалар күп икәнлеген беләһегеҙ. Уларҙы, үҙ-ара ярышып, илгә хакимлыҡ итеүсе фирғәүендәр төҙөткән. Эстән биҙәү буйынса улар яллаған оҫталар ҙа сәмләнеп ярышҡан. Семәрләү, биҙәкләү күҙҙең яуын алырға, төшөрөлгән серле һүрәттәр сихри һыҙаты ярҙамында хистәрҙе, зауыҡты, аңды биләргә тейеш булған. Сәнғәт өлгөләре шулай тыуа, йәшәй килгән.

Пирамидаларҙы үҙ дәүере өлгәшкән кимәлдәге типографик баҫмалар – ташҡа баҫылған әҫәрҙәр менән дә биҙәгәндәр. Фил һөйәгенән ырып яһалған минитипография хаҡында бер тапшырыу ҡарағайным. Уға тейешле буяҡ, май һөртөп, стандарт күләмле бер бит аҡ ҡағыҙҙы ҡаплайҙар ҙа, тигеҙ генә итеп һыйпағас, ипле генә ҡалҡытып, станоктан алалар. Шулай баҫма бит әҙер була. Күп-



күп биттәрҙең ҡалыбын эшләп, барыһын да баҫып алғас, тотош китап барлыҡҡа килә. Уны матур тышлыҡ менән көпләйҙәр. Ташҡа баҫылған әҙәбиәт шулайыраҡ тыуған.

Яңыраҡ, 2009 йылда, беҙҙә, Иҫәнғолда, Яңы мәсет тирәһендәге торлаҡ төҙөлөштәре барған ерҙә, фил һөйәгенән эшләнгән боронғо минитипографик ҡулайлама табылды. Ул Мысыр баҫма станогын хәтерләтә.(Һүрәттә күрһәтелә.)

Өй һалғанда, ҡаҙыу эштәре барғанда малайы менән атаһы табып ала ошо бик әүәлге ят әйберҙе. Кешеләрҙең кәңәше буйынса, табышты улар Башҡортостандағы боронғо ташъяҙмаларҙы өйрәнеүсе һәүәҫкәр тарихсы Иршат Зианбирҙинға күрһәтә. Ул, әйберҙе ентекләп өйрәнгәндән һуң, фил һөйәгенән эшләнгән бик әүәлге минитипография был, тигән һығымтаға килә. Ундағы имен ҡалған яҙмаларҙың серенә төшөнөргә теләп баш вата һәм түбәндәгеләрҙе асыҡлай:

(Руник яҙма. Хәҙерге хәрефтәр менән бирелә.) Ғшмт тмам абдс ама күнгл (1-се юл).

(Руник яҙма. Хәҙерге хәрефтәр менән бирелә.) Бн үкүнг тғт табма /2-се юл/.

Артабан хәрефтәр ҡупҡан. Өсөнсө юлдың хәрефтәре тулыһынса ҡупҡан.

(Быныһы ЮНАНСА яҙма.) Рвнг тржд табм кофр Пуса вә фи вукм л твусако (4-се юл/. Унан һынған, ҡупҡан хәрефтәр урыны китә. 5-се юл тулыһынса ҡупҡан.

(Руник яҙма.) Алтбр... Был алтынсы юлдың бер һүҙе генә. Ҡалғаны юйылған, ҡупҡан.

– Был текст хәҙерге телдә ошолай булыр ине, – ти Иршат Зианбирҙин: «Насар эштәрҙән һаҡланыу тамам иптәш әммә күңел... (1-се юл). «Мин ысынлап та тәҡәт /2-се юл/ көфөр бысраҡ һәм ғүмеренең ахыры ҡурҡыныслыҡтан /3-сө юл. Шунан юйылған, ҡупҡан өлөштәр китә.) Туранан-тура шәм хәлендә ҡалыусы /4-се юл. Бишенсе юл ҡупҡан.) Илтабар...» /6-сы юл. Артабан ул ҡупҡан.

Һәүәҫкәр тарихсы Иршат Зианбирҙин был табышты ҡулынан килгәнсә өйрәнеп, был минитипография, яҙмаларына ҡарағанда, беҙҙең эраға тиклемге дүрт йөҙөнсө йылдар әйберелер, тип фаразлай.

Хәҙер һаҡланған текстағы «Илтабар» тигән иң һуңғы һүҙгә иғтибар итәйек тә: «Ил бит ул бөтә донъя менән аралашып, хеҙмәттәшлек итеп йәшәй», – тигән фекеребеҙҙе өҫтәйек. Мысыр иле менән боронғо Башҡортостан, ата-бабаларыбыҙ әүәл-әүәлдән аралашып йәшәгән. Бының тарихи миҫалдары етерлек. Хәтерләгеҙ боронғо мәмлүктәрҙе – Египеттағы ил һағы башҡорттарын. Улар араһынан ил хакимдары, батшалар, йәнә мысыр әҙәбиәте классиктары сыҡҡан. Мәмлүктәр хәрәкәте йоғонтоһо боронғо ул илде яңы баҫҡыстарға күтәргән. Был табылған китап баҫыу станогы – минитипография ла әүәлге атай-олатайҙарыбыҙҙың Мысыр иле менән әҙәби, мәҙәни аралашыуының бер күренешелер, эҙемтәһелер, моғайын. Беҙгә табылған әйберҙең ҡиммәтле икәнлеген аңлап, уны юғары кимәлдә өйрәнеүҙе ойошторорға, имен-аман һаҡлау сараһын күрергә кәрәк.

Өлкәндәр, әйбер табылған урында борон зыяратлыҡ булған, тип раҫлай. Юҡҡа ғына был фил һөйәгенән эшләнгән ҡомартҡы әүәлге башҡорт кешеһенең ҡәберенән табылмағандыр.

Мәхмүт ҺИБӘТ.

Ялған тарих ғәҙел һабаҡ бирмәй

Башҡорттар – ҡатмарлы замандарҙың тарих тирмәнендә быуаттар буйы әүәләнгән халыҡ. Нисек ошоғаса һаҡланып ҡалғанбыҙ – Аллаһы Тәғәлә үҙе генә белә. Һәр хәлдә Юғары көстөң, Хоҙайҙың ярҙамы ғына ҡон алыусыларҙың күңелдәренә аҙмы-күпме мәрхәмәт һалғандыр, шул сәбәпле генә иҫән ҡалған, етмәһә Рәсәй алып барған бөтә һуғыштарҙа ла, уны яҡлап, тиңһеҙ батырлыктар күрһәткән ата-бабаларыбыҙҙың үткәндәре менән ғорурланып бөткөһөҙ халыҡ вариҫтары беҙ. Һәр һуғыш, уларҙа ҡатнашҡан башҡорт яугирҙарының яҙмыштары күп томлы тарихи романдарға торошло ваҡиғалар сылбырын үҙ эсенә алыр ине. Әммә мәғлүмәттәрҙең аҙлығы, тарихи факттарҙың архивтарҙа туҙан баҫып ятыуы, үҙ ваҡытында теркәлмәүе, бәлки, юҡ ителеүе ошо турала яҙырға теләүселәрҙең бәкәленә һуға. Әммә теләге барҙар өҙөк-өҙөк кенә табылған шәжәрә һәм рәүиз яҙмаларынан ата-бабаларыбыҙ ҡан менән яҙған тарих биттәрен күҙ алдына килтерә ала. Аллаға шөкөр, нәҫелдәренең изге эштәрен онотмайынса, шәжәрәләрен тергеҙергә теләүсе рухлы кешеләр күбәйә.

Хеҙмәт ветераны Салауат Ҡарамышев – шундайҙарҙың береһе. «Ашҡаҙар» гәзитенең 2012 йылғы 10 октябрь һанында баҫылған «Ҡармыш бейҙең уландары» тарихи-публицистик мәҡәләһе менән, минеңсә, ата-бабаларының яҡты рухын ҙурланы, күп сауаптарға өлгәште, етмәһә Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы үткәргән конкурста еңеүсе булды. Тарихи факттарға ауаздаш, мәғлүмәттәргә бай, даталар һәм һүрәттәр менән байытылған мәҡәләне уҡығас, авторҙың мәғлүмәтлелегенә ғәжәп иттем. Ул Юрматы ырыуы ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғы алған дәрәжәле нәҫелдән һәм Башҡортостан дәүләтселегенә нигеҙ һалыуҙа алғы сафтарҙа тороп көрәшкән шәхестәрҙең лайыҡлы вариҫы булыуы менән һоҡландырҙы. Мәҡәлә уй-хистәремде ҡуҙғытты, шуға күрә ҡайһы бер фекерҙәрем менән уртаҡлашмайынса булдыра алмайым.

Беренсенән, Ҡарамышевтар рухы, вариҫтарыбыҙ беҙҙе онотто, тип иңрәмәһен ине. Бының өсөн Юрматы ырыуы ерендә урынлашҡан Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат ҡалаларының берәй урамын Ҡарамышевтар урамы тип атарға кәрәк. Ҡатмарлы замандар илебеҙ тарихына ла йоғонто яһай. Баш ҡалабыҙ Өфөлә Кадомцевтар урамы совет осороноң ҡалдығы рәүешендә әлегә тиклем бар. Был исем шул фамилияны йөрөткән туғандарҙың большевиктар фирҡәһенә тоғро хеҙмәте өсөн бирелгән. Кадомцевтар шикелле, башҡорт халҡына «оло хеҙмәттәр» күрһәткән «шәхестәр», ҡыҙғаныста ҡаршы, республикабыҙҙың Темәстән һуңғы баш ҡалаһы Стәрлетамаҡта ла етерлек. Улар ҙа ҡылған яуызлыҡтары өсөн үҙ заманының геройы булып танылған һәм, ауылдарҙа йөрөп, Совет власы исеменән йөҙәрләгән башҡорттоң йәнен ҡыйған. Шул хәрби командирҙарҙың исемдәре ҡалаларыбыҙ урамдарын «биҙәй», ә башҡорт шәхестәренең исемдәрен ҡушырға урамдар «табылмай». Аптырағас, уларҙы унлаған йорттан торған тыҡрыҡтарға бирәләр. Ниңә Сталин заманындағы ҡурҡаҡлыҡ сире һаман да үтеп бөтмәй? Әллә, Рәсәйҙең һәр ҡалаһында урамдарға, проспекттарға ҡушылған исем хужаларының ҡарғышы төшөр, тигән хөрәфәт йәмғиәтебеҙҙә һаман да көслөмө? Дошманды – дошман тип атап, хәҡиҡәтте тергеҙеүҙе, урам исемдәрен тәртипкә килтереүҙе һәм һәйкәлдәр ҡуйыуҙы ҡасан булһа ла башларға кәрәктер бит? Тағы ун йылдан да бөтәсәге булмаған көрсөккә, аҡса юҡлыҡҡа һылтаныу – урынһыҙ! Илдә аҡса юҡлыҡҡа һис ышанырлыҡ түгел, ҡайһы бер телевидение каналдарында әйтелеүенсә, ул етерлек. Миллиард һумдарҙың Кипр утрауына оҙатылыуы һәм тағы ебәреләсәге хаҡында белгән кешеләр ауыҙынан сыҡҡан хәбәр был!

Күптән түгел Стәрлетамаҡ ҡалаһының «Сода» акционерҙар йәмғиәтенең күп табышы ла ошо утрауға оҙатылыуы асыҡланды. Билдәле йырсы Алһыу Сафина ла бай ире менән юҡҡа ғына Кипрҙа йәшәмәйҙер. Мәскәүҙең административ үҙәген – уның ситенә, мәхкәмәләрҙе Санкт-Петербургҡа күсерергә, Һарытау ҡалаһында – Петр Столыпинға, Екатеринбургта Борис Ельцинға һәйкәлдәр һалырға аҡса табыла бит. Американың «аҡса тоҡсайҙары» – йәһүдтәр уйлап сығарған көрсөк бер ҡасан да бөтөргә оҡшамаған. Уларға илебеҙҙең сәйәсәттә лә, иҡтисадта ла көсһөҙ, халҡыбыҙҙың, киләсәк быуыныбыҙҙың ауырыу булыуы отошлораҡ. Заманыбыҙҙың ҡатмарлылығы йылдан-йыл ҡырҡыулаша, тимәк, тормоштағы ғибрәттәр тиҙ генә бөтмәйәсәк!

Урамдарға исемдәр биреүҙә ғәҙеллекте тергеҙеүҙе XXII быуат граждандарына ҡалдырайыҡмы ни? Башҡорт ауылдары буйлап иген талап, икмәген йәшергән башҡорттарҙы штык менән сәнсеп йөрөүсе 17 йәшлек продотряд командиры Аркадий Голиков-Гайдар, тағы шуның кеүек башҡа отрядтарҙы Стәрлетамаҡта ойоштороп, ҡоралландырып, төрлө райондарға ебәреп ятыусы Артем (Сергеев), үҙе менән рейдта ҡатнашырға теләмәгән башҡорттарҙы себен урынына күргән Блюхер һәм башҡа шундай исемдәрҙе «мәңгеләштереү»ҙән ҡасандыр ҡотолорға кәрәктер бит! Стәрлетамаҡтың тарихи өлөшөндәге Халтурин, Карл Маркс, Сакко һәм Ванцетти исемдәрен йөрөткән урамдар күптән ғәҙел яңғырашлы түгел. Шул шәхестәр хөрмәтенә аталған урамдарға ваҡытында яңы исемдәр биреүҙе яҡын йылдарҙа атҡарып сығырға ине, сөнки егерме йылдан йәмәғәтселектең аңында кемдең кем икәне юйылыуы ихтимал. Советтар тәжрибәһенә таянған тарихсыларыбыҙ йылъяҙманы матурлап, «осло» яҡтарын шымартып яҙырға өйрәнгән дә әле лә шуны ҡыуа. Карл Маркс урамына Ҡарамышевтар исемен биргәндә, ҡалабыҙҙың Социаль хеҙмәт күрһәтеү үҙәге бинаһына таҡтаташ та ҡуйғанда, тарихи ғәҙеллек бер аҙ тергеҙелер төҫлө. Тарихтар уҡмашып ятҡан Стәрлетамаҡта Дауыт Юлтый, Шәйехзада Бабич, Мөхәмәтша Буранғолов һәм башҡа шәхестәрҙең исемдәрен мәңгеләштереүҙе лә яҡын йылдарҙа ғәмәлгә ашырырға кәрәктер.

Һүҙ менән ғәмәл араһындағы айырма илде тәрән көрсөккә илтеп терәгән заманда башҡа төрлө проблемалар күп икәнен дә беләбеҙ. Уларҙың иң мөһиме – иҡтисади ысынбарлыҡ һәм уның логик дауамы булған эшһеҙлек, мохтажлыҡ. Бер уйлаһаң, күңел төшөнкөлөгө артҡан заманда урамдарҙың исемдәрен алмаштырыу, шәхестәргә һәйкәлдәр ҡуйыу мәсьәләһен күтәреү урынһыҙ кеүек. Тик «продотряд командиры» Аркадий Голиков Совет заманында популяр балалар яҙыусыһы Аркадий Гайдар булып киткән дә, шуның өсөн генә уны ғәфү итергәме?

Киләсәк быуындарыбыҙҙың бөтә бәләһе генетик кимәлдән, Советтар заманында айырыуса киң таралған тәмәке тартыу, эскелек кеүек яман ғәҙәттәрҙән, насар экологиянан, хәҙер инде компьютер менән самаһыҙ мауығыуҙан килә. Эйе, һәр балаға ҡарауылсы ҡуйып булмай. Өйҙә, телевизорҙа, Интернетта нимә күреп үҫә, улар шуны ҡабатлай һәм яман ғәҙәттәргә мәктәп юлында ла өйрәнә. Йәш быуын өсөн ғорурланғы килә, әммә «Ағиҙел» журналының былтырғы 6-сы һанында донъя күргән «Бала күңеле – аҡ ҡағыҙ» тигән (авторы Мәхмүт Хужин) Социаль-иҡтисади тикшеренеүҙәр институты мәғлүмәттәрен файҙаланып яҙылған мәҡәләне уҡығас, бөтөн яҡты хистәрем юҡҡа сыҡты. Күптән түгел генә БР Президенты Рөстәм Хәмитов: «Халыҡ етеш йәшәргә, тыуған яғы өсөн ғорурлыҡ тойғоһо кисерергә тейеш, кешеләрҙең иртәгәһе көнгә ышанысы булыуы зарур», – тигәйне. Был теләк СССР заманында трибуналарҙан

йыш яңғыраған лозунгылар кеүек юғалып ҡалмаһын өсөн, ай-һай, аҙмы кәртәләрҙе емерергә, халыҡты, ул вәғәҙәләгәндәй, эшле-ашлы итергә кәрәк. Шул осраҡта ғына ата-бабаларыбыҙҙың файҙалы традицияларын дауам итеүебеҙҙе аңлап, иртәгәһе көнгә, ғәҙеллеккә ышанысыбыҙ үҫер.

Кәрим БУЛАТ.
Стәрлетамаҡ ҡалаһы.

Хоҙайбирҙе, Аҡкөсөк, Сермән

Тарихсы Әнүәр Әсфәндиәровтың «Башҡортостан ауылдары тарихы» (Өфө, «Китап», 1998) китабында Хоҙайбирҙе ауылы хаҡында ошондай мәғлүмәттәр бар: «Кейәү аты үлгән» йылғаһы буйында урынлашҡан. 1795 йылғы рәүиз осоронда 22 йортта 80 йән көн иткән. 55 йылдан һуң 39 йортта 250 кеше, ә 1920 йылда 56 йортта 277 кеше йәшәгән». Ҡураларҙа 150 баш йылҡы малы, 100 һыйыр, 58 һарыҡ аҫыралған. Һигеҙ солоҡ һәм 40 умарта тотҡандар.

Ошо уҡ китаптың 81-82-се биттәренә күҙ һалһаҡ, бер хәбәр иғтибарҙы йәлеп итә: «1702 йылда Сермәндә Стәрлетамаҡ сауҙәгәре Ғиләж ерләнгән» тигән ҡәбер ташы бар икән. Ләкин был ысынбарлыҡҡа тап килмәй, сөнки Стәрлетамаҡҡа нигеҙ һуңыраҡ һалынған. Сермән ауылы иһә рәүиз ваҡытында Аҡкөсөк атамаһын йөрөткән, шуға күрә лә, уны «Сермән» тип яҙғандан һуң, йәйә эсенә «Аҡкөсөк» тип өҫтәп ҡуйғандар.

Пугачев ихтилалы осоронда Кинйә Арыҫлановҡа есаул Әбүзәр Абдулғаиров яҙған рапортта һүҙ тап Аҡкөсөк ауылы хаҡында бара. Шунда йәшәгән Батыр Бәпәев менән Ураҙгилде Иманғоловтарҙың язалаусылар тарафынан әсир алыныуы хәбәр ителә. Легенда буйынса ҡыялатһаҡ, Сермән ҡарттың Ағиҙел йылғаһы буйындағы үҙәндәргә күҙе төшә. Ә уның улы Аҡкөсөк ауылға нигеҙ һала. Тик, был ысынбарлыҡҡа тап килмәй, тип фаразлана, сөнки Ҡатай олоҫо старшинаһы, пугачевсы Аҡкөсөк Таһиров Сермән ҡарттың улы булмаған. Шуға күрә, Сермән – антропоним атама, тип фаразлана.

Ә бына Хоҙайбирҙе Аҡкөсөковтың Аҡкөсөк Таһиров улы икәнлеге билдәле. Пугачев болаһы Башҡортостанда 1773 – 1775 йылдарҙа бара. Фекерләп ҡараһаң, Аҡкөсөк Таһировтың Хоҙайбирҙе исемле улы ихтилалға тиклем үк тыуыуы ла ихтимал. Һуңыраҡ донъяға килеүе лә бар. Ҡайһылай ғына булһа ла, Хоҙайбирҙе Таһиров егет ҡорона еткәс, Сермәндән (Сермәндең өсөнсө исеме лә булған бит әле – Ҡормашты) Еҙем йылғаһы башына күҙе төшөп, шунда төпләнмәнеме икән? Быны кире ҡағырлыҡ дәлил дә юҡ һымаҡ, сөнки Хоҙайбирҙе атамаһы Белорет районында башҡаса осрамай. Фараздың шулай булыуы бик тә ихтимал, минеңсә.

Рәүиз буйынса, Сермәндә 60 йортта 205 ир һәм 200 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Тап ошо мәлдәрҙә Хоҙайбирҙеләге 22 йортта барлығы 80 кеше күренә. Был мәғлүмәт тә, Хоҙайбирҙе ауылына нигеҙ Сермәнгә ҡарағанда һуңыраҡ һалынғандыр, тигән һығымта яһарға мөмкинлек бирә һымаҡ. Мәғлүм булыуынса, Хоҙайбирҙе ауылының ғына түгел, Егәҙе буйындағы башҡа ауылдарҙың да үҫешенә, халыҡты эш менән тәьмин итеүгә 1890 йылда Егәҙелә ике домна сафҡа индерелеүе булышлыҡ итә. Байтаҡ эшселәр заводта төрлө эштәр башҡара. Бынан тыш, тимер рудаһын иретеү өсөн күпләп ағас күмере талап ителгән. Шуға күрә Егәҙелә, Өс Кәзәлә, Ҡарағайҙа күмер әҙерләү мейестәре эшләй башлай. Күмер үртәү өсөн Егәҙегә яҡын ауылдарҙа леспромхоздар ойошторола. Мәҫәлән, шул уҡ Хоҙайбирҙе ҡырҡылған әрҙәнәне Еҙем йылғаһы буйына ташып, яҙғы ташҡында

Өс Кәзә аша Еҙем утары мейестәренә ҡыуа. Һуңынан әҙер күмер күрептәргә тултырылып, аттар менән Егәҙегә ташыла. Туҡан яғынан руда ла аттар менән килтерелә.

Атайым Искәндәр Ғимранов 1908 йылда Хоҙайбирҙе ауылында донъяға килгән. Олатайым вафат булғанда уға ни бары туғыҙынсы йәш булған. Ғаиләлә бөтәһе алты бала үҫкән – өс малай һәм өс ҡыҙ. Олатайым ауылда урта хәллеләр рәтендә донъя көткән. 24 йәш менән барғанда, 1932 йылда, атайым әсәйемә өйләнгән. Комсомолға кергән. Эштә гел алдынғылар сафында йөрөгән. Атайым да, әсәйем дә ликбезда уҡып, аҙмы-күпме белемгә өйрәнгән.

1933 йылдың 17 декабрендә мин донъяға килгәнмен. Йөклө әсәйемде атайым диләнкегә әрҙәнә ҡырҡырға алып барған. Тәшкә табан эсе ауырта башлауҙан әсәйем илап ебәргән, атайым санаға ҡоро ҡарағай ботаҡтары тейәп, әсәйемде шунда ултыртып оҙатҡан да үҙе эшен дауам итеп ҡалған. Ҡараңғылатып, иптәштәренең атына ултырып ҡайтып инеүенә, әсәйем мине, сей баланы, имеҙеп ултыра икән. Тимәк, ун етенсе йәшенә генә киткән әсәйемдең һуңғы сәғәттәргә хәтлем эшләп йөрөп баш балаһын табыуы һаулығының ныҡ булыуын иҫбатлайҙыр.

Әсәйемдең, бәпес сағымды иҫләп, ошолай һөйләгәне хәтеремдән юйылмай:

– Күп булһа ун көн үткәндер, һине күтәреп, атайымдарға киттем. Үҙем юлда осраған кешеләрҙән оялам. Бер-ике һүҙ әйтәм дә йәнә ашығам. Йәнәһе, «үҙе бала һымаҡ ҡына, үҙе бала күтәргән» тип әйтерҙәр һымаҡ.

Һыуыҡта сабый менән йөрөүемә ата-әсәм үҙемде тетте генә. Ултыра торғас, атайымдың мейес башында ятҡан иҫке быймаһы күҙемә салынды. Атайымдың мал ҡарарға сығыуы булды, һине төрә һалып, быйма эсенә тыҡтым да, өҫтөнән бәләкәй юрғанды йәтешләй һалып, һыпырттым. Хатта түрбашта йөрөгән әсәйем дә һиҙмәй ҡалды. Юлда, тауыш-тының сыҡмағас, юрғанды ҡурҡа-ҡурҡа асып ҡараһам, күҙең бәҙерәйеп, рәхәтләнеп ятаһың. Исмаһам, тауышың да сыҡмай. Йылыға ойоп киткәнһең, күрәһең. Әйткәндәй, һәләк тыныс булдың, ыҙалап үҫтергәнемде һис иҫләмәйем. Олатайымдың быймаһы өлкән ине. Егәҙе урыҫы баҫып биргәйне. Һыңар быйманы эҙләп хыялый булғандар үҙҙәре лә.

1936 йылда атайым Хоҙайбирҙе ауыл Советы рәйесе итеп тәғәйенләнә. Бер йыл эшләгәндән һуң, ауыл Советын Ботай ауылына күсерәләр. 1942 йылдың февралендә атайым һуғышҡа алынып, 1945 йылдың ноябрендә әйләнеп ҡайта. Һуғышта тәүҙә пулеметсы була, разведкаға ла йөрөп ала. Һуғыш аҙағына старшина дәрәжәһенә күтәрелә. Ул I-се һәм 2-се Украина фронттарында һуғышып, Берлинды һәм Праганы азат итеүҙә ҡатнаша. Күрһәткән ҡыйыулығы юғары баһалана: ике «Батырлыҡ өсөн» һәм башҡа миҙалдар. Фронт командующийы Советтар Союзы Маршалы И. С. Коневтың Почет грамотаһы, Юғары Башкомандующийы И. В. Сталиндың өс рәхмәт белдереү ҡағыҙы менән бүләкләнә.1946 йылдың яҙына йәнә ауыл Советы рәйесе итеп тәғәйенләнә. 60-сы йылдарҙа урмансы эшенә күсеп, пенсия йәшенә ҡәҙәре шул вазифаһын башҡара.

Урмансы эшендә лә атайым үҙен һынатманы, ауыл кешеләрен йәлеп итеп, ҡарағағай үҫентеләре, хатта Себер кедрҙары ултырттырҙы, урманда санитар таҙартыу эштәрен йәйелдерҙе. Бөгөнгө көндә беҙ ярҙамлашып ултыртҡан үҫентеләр урман-урман булып үҫеүҙәрен дауам итә.

Исмәғил Ғимранов.
Белорет районы.

Төпкөл ауылда...

Республикабыҙ Президенты Рөстәм Хәмитов Ишембай тарафтарында эш сәфәре менән йөрөшләй, тау-урман төпкөлөндәге 350 йортлоҡ боронғо Ҡолғонаға туҡталып, ауыл активистары һәм уҡытыусылар менән осрашты, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың ижад йортон ҡарағандан һуң, әҙип менән йәнле әңгәмә уҙғарҙы. Мәғлүм ки, төбәктә малсылыҡты, умартасылыҡты, фермер хужалыҡтарын үҫтереүгә, шулай уҡ туризм төрҙәрен ойоштороуға ҡулай шарттар етерлек. Киләсәктә заманса юл, элемтә, мәктәп транспорты һәм төбәккә хас башҡа мәсьәләләр ыңғай хәл ителәсәк.

Әҙиптәр, эйе, туристар

Башҡортостан әҙиптәре башҡорт илен яҡшы белергә тейеш... Ошо талапты күҙ уңында тотопмо, Яҙыусылар берлеге уның идараһы рәйесе Р. Тойғонов етәкселегендә Өфө – Мораҡ – Йылайыр – Сибай – Арҡайым – Темәс маршруты буйынса өс көнлөк туристик сәфәр ойошторҙо. Егерме биш ҡәләм оҫтаһынан торған делегация ҡайҙа ла урындағы йәмәғәтселек тарафынан яҡты йөҙ менән ҡаршыланды.

Тәүге туҡталыш – Күгәрсен районының Туйембәт ауылында. Зәйнәб Биишева исемендәге мәктәп-музей (директоры З. Кәримова) ихатаһында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, шәреҡ донъяһында ҡатын-ҡыҙҙарҙан иң тәүге трилогия авторы булып танылған әҙибә бюсына сәскәләр һалып, район хакимиәте башлығы урынбаҫары Н. Юнысова һәм уҡыусы балалар менән күмәк фотоға төшкәс, юлаусылар йылдан-йыл байый, зауыҡлыраҡ биҙәлә барған музей ҡомартҡылары менән ихлас танышты.

Йылайырҙа ергиҙәр төркөмдө Шәйехзада Бабичтың ғорур ҙа, уйсан да бюсы һәм... Шағир ролендәге егет (Ф. Алсынов) ҡаршы алды. Митингыла уҡыусы балалар театрлаштырылған тамаша күрһәтте, трагик яҙмышлы бөйөк шағирҙың патриотик шиғырҙарын ятлап ишеттерҙе, ә һәйкәлгә күркәм гөлләмәләр һалынды.

Оҙайлы юлда микроавтобустар данлы Юлдыбай урта мәктәбенә боролдо: бында оҙаҡ йылдар билдәле прозаик Мөслим Әбсәләмов башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән дәрестәр биргән, үҫмер сағында шағирә Фәүзиә Юлдашбаева, бихисап буласаҡ педагогтар, инженерҙар, сәнғәт әһелдәре, дәүләт эшмәкәрҙәре һабаҡ алған. Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Й. Аҙнағолов йылайырҙарҙың бөгөнгө тормошо, иртәгәгә ниәттәре хаҡында һөйләне, ҡунаҡтарҙың да сығыштары хисле булды.

Кистән Сибайҙың күркәм урындары менән танышып, ял иткәс, иртәгәһенә әҙиптәр данлы Арҡайымға юлланды. Ҡаласыҡтың тарихи-этнографик комплексын, шулай уҡ асыҡ һауалағы ҡомартҡыларҙы, үҙенсәлекле тәбиғәт мөйөштәрен ҡарау, драматург Ә. Яхина етәкселегендә төбәктең йәш яҙыусылары, Р. Үтәғолов, Р. Тажетдинов кеүек аҡһаҡал тарихсылар менән әңгәмәләшеү, йырға, ҡумыҙға маһир үҙешмәкәрҙәрҙе тыңлау – һәммәһе лә яҡты хәтирә булып һаҡланасаҡ. Яҙыусыларҙы атаҡлы Сибай баҡыр-көкөрт карьеры ла, тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейы (директоры Ю. Минишев) хайран итте.

Өс мендән ашыу экспонат ҡәҙерләп ҡуйылған Темәс тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейына (мөдире Н. Ҡулмырҙин) экскурсия, шанлы һәм ҡанлы сәхифәләр һаҡлаған ауыл урамдарынан атлау ҙа әҙәрмәндәрҙең рухиәтен елкендерҙе, зауығын күтәрҙе, ижадҡа илһамландырҙы.

Сәфәри осрашыуҙарҙа күренекле шағирҙар М. Кәримов, И. Кинйәбулатов,

Р. Мифтахов, Х. Назар, Ә. Таһирова, Ф. Ғөбәйҙуллина, Тойғон, М. Закиров, Ф. Ғәбиҙуллина, Т. Дәүләтбирҙина үҙ әҫәрҙәрен уҡып, иҫтәлектәре, файҙалы тәҡдимдәре менән уртаҡлашһа, профессорҙар Р. Әмиров, З. Шәрипова, Ф. Ҡүзбәков мәғлүмәтле фекерҙәрен еткерҙе. Д. Булгакова, К. Абдуллин, З. Әҡбәров, С. Шәрипов, М. Кусмәева, Р. Камал, М. Ҡунафин ҡунаҡсыл хужаларға яңы китаптарын автографлап бүләк итте. Ғөмүмән, әҙәби-туристик сәйәхәт онотолмаҫ сараларға бай булды.

Һәйкәл янында...

Башҡортостандың тәүге халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тыуған көнө йыл да Яҙыусылар союзы һәм Мәжит Ғафури фонды менән бергә М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия театры алдындағы шағирға ҡуйылған һәйкәл янында шиғыр байрамы рәүешендә уҙа.

Йыйылған халыҡ алдында С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты шағир Ирек Кинйәбулатов, атаҡлы балетмейстер Хашим Мостаев, композитор Рим Хәсәнов, шағирҙар Айҙар Хөсәйенов, Алексей Кривошеев, журналистар Хәлисә Мөхәмәҙиева, Светлана Ғафурова, Ирина Бикке һәм башҡалар сығыш яһаны. М. Ғафури фонды премияһы быйыл болгар шағиры Ангел Христовҡа тапшырылды.

Ҡыҙыҡлы сараны шағир Марсель Сәлимов алып барҙы.

Яҡташты тәбрикләү

Яҡташыбыҙ – Татарстандың халыҡ шағиры, Татарстан Республикаһының Ғ. Туҡай исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Роберт Миңнуллиндың тыуған ерендә – Илеш районында ижад кисәләре уҙҙы.

Унда Башҡортостандан Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары, шағир Рафаил Зиннуров, БР мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов, халыҡ шағирҙары Ҡәҙим Аралбай, Марат Кәримов, шағирҙар – Ирек Кинйәбулатов, Марсель Сәлимов, Фәниә Ғәбиҙуллина һәм күренекле сәхнә оҫталары килгәйне.

Татарстандан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Рәфис Ҡорбан, халыҡ шағиры Рәдиф Ғаташ, Ғ. Туҡай исемендәге премия лауреаты прозаик Фоат Саҙриев, ғалимдар Ким Миңнуллин, Хатип Миңнеғолов, Фоат Гәлиуллин, Тәлғәт Гәлиуллин, Нурмөхәммәт Хисамов, Ғүмерйән Дәүләтшин, Ренат Нәбиев, Флүрә Ғәниева һәм билдәле артистар ҡатнашты.

Шағирҙың ҙур күтәренкелек менән уҙған ижад байрамы Шәммәт ауылында «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» осрашыуы менән башланып китте, артабан Үрге Йәркәйҙәге балалар китапханаһында һәм район мәҙәниәт һарайында дауам итте.

Райүҙәктәге кисәне Илеш районы хакимиәте башлығы Илдар Мостафин асып, Роберт Миңнуллин исеме менән бөтә райондаштарының ғорурланыуы хаҡында һөйләне һәм уға башҡорт еләне кейҙерҙе. Мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев иһә БР Президенты исеменән шағирға Халыҡтар дуҫлығы ордены тапшырҙы.

Мәҙәниәт йортондағы кисәгә шулай уҡ Татарстан Республикаһы хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Энгель Фәттәхов килде һәм сығыш яһаны. Ә Роберт Миңнуллин Башҡортостанға һәм уның күренекле шәхестәренә арнап «Эй, ғәзиз яҡташтарым!» тип аталған китап сығарған – баҫма бүләк итеп таратылды.

«Ебәк юлы» йыйыны

Төркиәлә «Ебәк юлы» шағирҙары йыйыны үтте. Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Ғағауз, Ҡабарҙы-Балҡар, Ҡырым, Татарстан республикаларынан, Ираҡтан төркмән, Төркиә шағирҙары ҡатнашҡан сараларға Башҡортостандан шағирә, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире Тамара Искәндәриә саҡырылды.

Сапанжа, Болу, Анкара, Караман, Иҫке Шәһәр, Истамбул ҡалаларында барған шиғри осрашыуҙар ТӨРКСОЙ халыҡ-ара мәҙәни ойошмаһының 20 йыллығына арналды.